// Ағиҙел

Өфө,
сентябрь
2012

9 (1073)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева *(корректор)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августа теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 1.09. 2012. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
"Times" гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 371 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0141.12.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2012 (9,1073)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ


**Гөлнара Хәлфетдинова.** Бүлгеләнгем килмәй... Шиғырҙар. ......5
**Зөфәр Вәлит**. «Тәҙрәләрҙе йәнә көҙҙәр сиртә,
Күңелдәргә күсә балҡышы...» Шиғырҙар. ........11
**Фәрит Суфияров.** Уҙғанды юлламаным. Шиғырҙар. ................17


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР


**Рәсүл Сәғитов**. Ғәҙел кеше. Хикәйәләр. ..................................20


ӘҘӘБИ МИРАҪ


**Рамаҙан Өмөтбаев.** Ирәндектең күкһел томаны.
Роман. *Аҙағы.* ..........................................................................30


*“Ағиҙел”гә – 90 йыл*


Нәфис әҙәбиәт: хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы.
**Фәнил Күзбәков.** Юғары рухиәт яҡтылығында
*(Ноғман Мусин һәм Наил Ғәйетбай менән әңгәмә).* ....................124


ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ


**Миңниса Баһуманова.** Маһир хикәйәсе.
Ут алырға инәм күршемә. ...........................................................138


БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ


**Зиннур Нурғәлин.** Тел ғилемен нигеҙләүселәрҙең береһе
*(Ғәббәс Дәүләтшиндың тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы).* ....145
**Фәниҙә Исхаҡова.** Ҡурайға арналған ғүмер
*(Ғата Сөләймәновтың тыуыуына 100 йыл).* ...............................150


АУЫЛДАРЫБЫҘ ТАРИХЫ


**Мәхмүт Хужин.** Юрматының пайтәхете. ....................................152


ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАР ИЖАДЫ


**Флера Шәрипова.** Үкенерлек түгел. Шиғырҙар. ....................171
**Мөнирә Дәүләтбаева.** Йөрәгемдә. Шиғырҙар. ......................173


САТИРА ҺӘМ ЮМОР


**Мар. Сәлим.** Замана мәҫәлдәре. .................................................174
**Леонид Соколов.** Балыҡсылар... Юморескалар. .................182


ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Г. Хальфитдинова, Зуфар Валит, Ф. Суфияров.** *Стихи.*

ПРОЗА

**Р. Сагитов.** Правильный человек. *Рассказы.*

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Р. Уметбаев.** Синий туман Ирандека. *Роман. Окончание.*

*«Агидель» — 90*

*Художественная литература:*
*мечта, реальность, требование жизни.*
**Ф. Кузбеков.** В свете высокой духовности
*(Интервью с Нугманом Мусином и Наилем Гаитбаем).*

ЖИВАЯ ПАМЯТЬ

**М. Багуманова.** Мастер рассказа. К соседу за огнем
*(воспоминания о Р. Султангарееве и Д. Булякове).*
**Ф. Исхакова.** Жизнь, посвященная кураю *(100 лет со дня рождения Г. Сулеманова).*

ИСТОРИЯ НАШИХ ДЕРЕВЕНЬ

**М. Хужин.** Трон племени юрматы.

ТВОРЧЕСТВО НАШИХ ЧИТАТЕЛЕЙ

**Ф. Шарипова, М. Давлетбаева.** *Стихи.*

САТИРА И ЮМОР

**Мар. Салим.** Басни современности.
**Л. Соколов.** *Юморески.*

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Гөлнара**
**ХӘЛФЕТДИНОВА**

## БҮЛГЕЛӘНГЕМ КИЛМӘЙ...

### *Ошолай ғына килеш яратмаһаң...*

*Йөрәгемде һинән йәшерәм мин,*
*Һинең өсөн ул гел — бикле янсыҡ.*
*Үтә күрмәй, үтә ҡараһас һуң,*
*Асылдарым түгел һиңә танһыҡ.*

*Әйҙә, йөрөй бир, тип, күктәреңдә,*
*Яратаһың ғәйеп ташларға.*
*Ҡем ҡулына осоп төшәйем һуң,*
*Юҡ, бәрелгем килмәй таштарға.*

*Ерҙә бит ул яңғыҙ ғына булмай.*
*Ҡатын-ҡыҙға кәрәк терәктәр.*
*Бер өркөткәс, кире ҡайта алмай,*
*Йыраҡтарҙа йөрөй йөрәктәр.*

*Дөп-дөп, дөп-дөп, әллә нимә көтөп,*
*Гел һағайып, килмәй ышанғы...*
*Өҫтә түгел, уста булғы килә,*
*Ҡурҡыуҙарҙан килә бушанғы.*

*Йөрәгемде һаман йәшерәм мин,*
*Һин аяусы түгел, бары аусы.*

---

*Гөлнара Хәлфетдинова (1978) Әбйәлил районының Хәмит ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлағас, «Тамыр» радиокомпанияһында эшләне. Әлеге көндә — «Башҡортостан ҡыҙы» журналында бүлек мөхәррире.*

*Үҙ күңелең тынис булһын өсөн*
*Кеше күңелдәрен ҡыйғылаусы.*

*Минең һинән көслө булғым килмәй,*
*Көсһөҙөрәк була белмәйем.*
*Ошолай ғына килеш яратмаһаң,*
*Килмәйем мин һиңә, килмәйем.*

## Аптырап ҡына киләм

*Ярым айҙай ярылмайым,*
*Бүленмәйем бүтәнсә.*
*Ҡаты сәтләүектәй ҡалам*
*Ошо мәхшәр үткәнсә.*

*Һары майҙай иҙелмәйем,*
*Иремәйем әлегә.*
*Боҙҙай ғына булам әле,*
*Сығармайым шәре лә.*

*Мин бөгөн мамыҡ шәл түгел,*
*Ябындым йүкә септә.*
*Йәндәремдең әрнегәнен*
*Күрһәтмәҫкә нисек тә.*

*Йәшендәрҙән йәшенәмен,*
*Бөрөшәмен бөлмәҫкә.*
*Күҙ йомам — шунан артығын*
*Ишетмәҫкә, белмәҫкә.*

*Белмәгәндең йөрәктәре*
*Тынис икәнен беләм.*
*Белгәнен ҡайҙа итәм, тип*
*Аптырап ҡына киләм.*

## Аллаһыҙ

*Эйәрмә әле, шәүләм,*
*Тип һүҙ башланым,*
*Юҡ, — һин минең шәүләм,*
*Ҡыуып ебәрәм тип,*
*Баҫтырам бит*
*Шуға һине, мәүләм.*

*Кем кемдең ҡушымтаһы һуң,*
*Кем хаҡлы?*
*Ҡайһыбыҙҙың хәбәрҙәре*
*Нахаҡлы?*

*Йәнәһе лә ул — беренсел,*
*Ә мин — эйәрсен.*
*Қурмәмеш булайым әле,*
*Әйҙә, эйәрһен.*

*Шулай йөрөп ятыуына*
*Кемгә бурыслы?*
*Белә ул: телен тыя(а)лмай,*
*Теле — боросло.*

*Үҙ ыңғайына ҡуям да,*
*Ҡупырая шул.*
*Башына һуғып тормаһаң*
*Һуҡырая шул.*

## Бәйләнсек юлдашым

*Төшөп алып, ҡыуып барған юлым*
*Хаҡ юл микән, әллә юҡ микән?*
*Ошо микән минең көмөштәрем,*
*Бүтән өлөш миңә юҡ микән?*

*Атты сыбыртҡылап ҡыуайыммы,*
*Үҙ яйына әллә ҡуяйыммы?*
*Тәгәрмәскә шаҡарыуҙар һалып,*
*Йүгереүен әҙ(е)рәк тыяйыммы?*

*Арба күсәрҙәре шығырлайҙар*
*Сығырымдан мине сығарып.*
*Туҡтарғамы әллә туҡталҡаға,*
*Атҡайымды, үпсым, туғарып.*

*Эй, һелкетә соҡор-саҡырҙары,*
*Төшөп ҡуя инде мейеләр.*
*Саталана юлдар төрлө яҡҡа,*
*Ятып ҡала «юҡ»тар, «эйе»ләр.*

*Баштан ҡалмай гел эйәреп килә*
*Икеләнеү тигән аҡ көсөк.*
*Шомдар һала минең йөрәгемә,*
*Ҡыуып ебәрергә юҡ көсөм.*

## Һиллек

*Яраттырғы килмәй һис кемдән дә,*
*Яраһы ла килмәй бер кемгә.*
*Йөрәгемдең асылаһы килмәй,*
*Күңелем бөркәнсеккә бөркәнгән.*

*Күҙем төшмәй бер ҙә күркәмдәргә,*
*Ҡупшыланғым килмәй һис кемгә.*
*Мин үҙемә әле шундай таныһыҡ,*
*Наҙлы тыныслыҡта — эскенәм.*

*Миңә әле үҙем еткән кеүек,*
*Бүтәндәргә килмәй бүленгем.*
*Бүтәндәргә күренгем дә килмәй,*
*Белгем килмәй, килмәй беленгем.*

*Бүлгеләгем килмәй күңелемде,*
*Әлегә ул шундай түңәрәк.*
*Башҡаларҙан бер ни кәрәк түгел,*
*Бындай һиллек була бик һирәк.*

### ***Хәл***

*Тормош юлдарына түшәлмәгән*
*Өлпөй битле матур ҡорама.*
*Ҡайҙа баҫырыңды белмәгәндә,*
*Иртәгәһе көндө юрама.*

*Әйтә алмағанда әйтереңде,*
*Бүтәндәрҙең хәлен һорама.*
*Ярай белеү — хаҡҡа ярай бөгөн,*
*Уратып алған донъя юрамал.*

*Йөрәктәр ҙә бик йыш йөрәкһеҙҙәр,*
*Заманаһы шулай дыуамал.*
*Шыма холоҡ ҡулай был арауыҡ,*
*Иман ҡыумай кеше, ҡыуа мал.*

*Тиҫкәреһен кейеп асылының,*
*Ҡояштарын элеп түңҡанбаш,*
*Асыш яһай ғилем әһелдәре,*
*Аҡ һәм ҡара, имеш, туғандаш.*

*Тормош юлдарына түшәлмәгән*
*Өлпөй битле матур ҡорама.*
*Донъя батҡағына батмай ғына*
*Нисек үтергә, тип һорама.*

*Хыялдар һәм ғәмәл ике яҡлы*
*Миҙал булып ҡалһа мәңгегә,*
*Йәшәлмәгәндән бигерәк йәшәлгәне*
*Ҡала бит, әй, ҡайсаҡ йәлкегә.*

## Урман беҙҙең йорт ине

*Сәсе ҡойолған бабайға*
*Оҡшаған хәҙер урман.*
*Ҡасандыр ул йәш егеттең*
*Сәселәй ҡуйы булған.*
*«Ҡасандыр» тигәнемде лә*
*Яҙам мин былай ғына.*
*Баламдың балаһы шулай*
*Бер һөйләр балаһына.*
*Иҫләйем мин был тирәнең*
*Шаулап торған саҡтарын.*
*Юлһыҙ булһа ла юллыҡлы,*
*Ҡотло урман яҡтарын.*
*Билдән үлән, түбыктан мүк,*
*Сайыры — мискә-мискә.*
*Хәтерләргә ҡалды микән,*
*Ҡалдымы үкенескә?*
*Ямғыр тартмай хәҙер урман,*
*Төшмәй бит хатта томан.*
*Аҡ томан төшмәгән ергә*
*Саң төшә, төшә яман.*
*Бәрҙе лә юҡ, ҡоро селтей*
*Ҡороп барған йылғала.*
*«Йылғала» тимәйек әле,*
*Унан ҡалған йырҙала.*
*«...Ҡағыла беҙ ат йөҙҙөрөп...»*
*Тип һөйләй ҡалһа атай,*
*Беҙ ышанмай баш сайҡайбыҙ,*
*Ҡемебеҙ икән һантый?*
*Ул беҙҙең ҡырҡҡан урмандар,*
*Ул беҙҙән киткән ағас...*
*Балталы ҡул ҡоромаймы,*
*Ағастар ҡарғамағас.*
*Ҡоштар ҙа юҡ, ҡош тотмағас,*
*Баҫып алған ҡүбәләк.*
*Ҡем уйлаған, матурҡайҙар*
*Булыр, тип, башҡа бәлә.*
*Ҡарлуғасһыҙ, һандуғасһыҙ,*
*Сыйырсыҡһыҙ урманым...*
*Эй, аҫаба, һин ожмахты*
*Үҙ-үҙеңдән урланың.*
*Сәсе ҡойолған бабайға*
*Оҡшаған хәҙер Урал.*
*Уралды данлаған йырҙар*
*Ышандырмай, юрамал.*
*Ҡырҡылып бөткәс Ҡырҡтылар,*

*Ҡырҡылалыр ҙа бауыр...*
*Ҡырылғастын Ҡыраҡалар,*
*Ауыҙ асыуы ауыр.*
*Ауыл ере иҫәпләнә,*
*Ағасында тамға юҡ.*
*Ҡағыҙҙағы ҡара урман*
*Иҫәптә бар, һанда юҡ.*
*Урман беҙҙең йорт ине лә...*
*Үтәләйгә ел уйнай.*
*Әллә олой, әллә илай*
*Урман хужаһы ҫиңмай.*
*Беҙ инек урман хужаһы,*
*Беҙҙә ине ер ҡото.*
*Ултырған ботаҡҡа сапҡас...*
*Донъябыҙ ҡалай ҡойто!*

## *Кемдәр ҡыҙыҡмаған был ергә*

*Кемдәр маҡтамаған ошо ерҙе,*
*Кемдәр ҡыҙыҡмаған был ергә.*
*Тамырҙарым менән береккәнмен*
*Ошо ергә мин дә ғүмергә.*

*Күктәр бында шундай зәңгәр, бейек,*
*Осҡо килә, китке килә бейеп.*
*Йондоҙ-сулпыларым сыңлағанда*
*Ҡыуанамын түбәм күккә тейеп.*

*Тауҙар бында шундай текә, бейек,*
*Биттәрендә уйнай төрлө кейек.*
*Ҡоралай-ҡыҙ мин дә ҡая ташта,*
*Тыпырлайым ҡыҙыл ситек кейеп.*

*Күлдәр бында ялтыр — яҡты сырай,*
*Көҙгө итеп ҡыҙҙар шунда ҡарай. ‘*
*Тулҡын толомомдо ялбыратһам,*
*Һыу инәһе сығып сәсем тарай.*

*Шишмәкәйҙәр бында сылтыр-сылтыр,*
*Бала көлөүенә оҡшағандыр.*
*Тәңкә ырғытайым ырыҫ-ҡотҡа,*
*Тереһыуым, һыуһынымды ҡандыр!*

*Тәбиғәттең гүзәллеге бында*
*Кешеләрҙең үҙҙәренә күскән.*
*Улар ризыҡ ҡыуып йөрөмәгән,*
*Улар ошо ерҙең һыуын эскән.*



**Зөфәр**
**ВӘЛИТ**

# «ТӘҘРӘЛӘРҘЕ ЙӘНӘ КӨҘҘӘР СИРТӘ, КҮҢЕЛДӘРГӘ КҮСӘ БАЛҠЫШЫ...»

## *Зыяратта*

*Атай-Әсәйемдең һуңғы йорто.*
*Алдарында торам баш эйеп:*
*Һеҙ булғанға ғына мин йәшәйем,*
*Ашар аштарым да аш, тиеп.*
*Олатайым менән өләсәйем,*
*Туғандарым бында күмелгән.*
*Бер уйлаһаң, ошо ергә генә*
*Күпме ҡайғы, һағыш түгелгән!*
*Ана, күпмеләре бында ситтән*
*Баҡыйлыҡҡа ҡайтып ятҡандар.*
*Ҡайталмағандарын туғандары*
*Һуңғы юлға алып ҡайтҡандар.*
*Бер ҡайтырмын мин дә ошо ергә,*
*Бәлки, әле алып ҡайтырҙар.*
*Мин моң булһам, зыяраттың*
*Таштары ла сәскә атырҙар...*
*Зыяраттан сыҡҡас кинәт бер уй*
*Сәнсеп алды минең йөрәкте:*
*Үлгәс ошо ерҙә ятыр өсөн*
*Ситтә ғүмер итеү кәрәкме?!*

*Зөфәр Вәлит (1949) Стәрлетамаҡ ҡалаһында тыуған. Мораҡ ауыл хужалығы училищеһын, Өфө урман хужалығы техникумын тамамлап, ауыл хужалығының төрлө тармаҡтарында эшләй. Байтаҡ шиғри китаптар авторы. Рәсәй һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

## *Иҫерек ил*

*Ярҙарына ҡаға-һуға*
*Ҡайҙарғалыр тормош аға.*
*Яҙмышыбыҙ ҡулдарында,*
*Әйтерһең, беҙ бала-саға.*
*Хет һин ила, хет ятып көл, —*
*Баш осонда иҫерек ил*
*Олой-олой байраҡ тегә,*
*Ҡайғы-һағыштарын сигә...*
*Ҡайҙарғалыр тормош аға*
*Ярҙарына ҡаға-һуға.*
*Ил бер ҡупһа, дауыл сыға,*
*Иҫертәләр уны шуға...*

## *Йөҙәбеҙ*

*Диңгеҙ тулҡындары шаулай,*
*Күктә китек ай йөҙә.*
*Рәсәй диңгеҙҙәре төпһөҙ,*
*Ярыҡ караптар түҙә...*
*Төпһөҙ диңгеҙҙәр төбөндә*
*Байлыҡ һушты алырлыҡ,*
*Күңелдәге уй-хыялдар*
*Мәрйен булып ҡалырлыҡ...*
*Йөҙөп барған карабыбыҙ*
*Батасағын һиҙәбеҙ.*
*Күселәр күптән ҡастылар,*
*Ә беҙ һаман йөҙәбеҙ...*

## *Атай-әсәй васыяты*

Зөлфиә, Рәфиә, Рәүеф туғандарыма

*Атай ҙа юҡ, әсәй ҙә юҡ,*
*Өйҙө һатманыҡ.*
*Унда, ҡустым, һин йәшәйһең,*
*Намыҫ һаҡланыҡ...*
*Атай-әсәй васыяты:*
*«Татыу йәшәгеҙ,*
*Ауыр саҡтар булғанда ла,*
*Асыу сәсмәгеҙ!»*
*Ят бауырҙар беҙҙең өсөн*
*Утта янмаҫтар.*
*Атай-әсәй кеүек, беҙҙе*
*Көтөп алмаҫтар.*

*Атай-әсәйҙе юҡһынып*
*Утта янайыҡ,*
*Бер-беребеҙҙе, улар кеүек,*
*Көтөп алайыҡ!*

***

(И.Переверзиндан)
*Күпме ҡалды икән беҙгә көндәр*
*Һуңғы йортҡа саҡлы осорға...*
*Тыныс ҡына килгән ҡартлығыма*
*Ҡуйынымды асам ҡосорға*
*Һәм мин уны ҡулдарыма алам,*
*Бала булһын әле ул башта:*
*«Йоҡла әле, бәпкәм, йоҡла әле...»*
*Уянырбыҙ, бәлки, ожмахта.*

## ***Билдәһеҙлек***

*Ғаилә ҡанундарын беләм дә ул,*
*Белмәйем бит һөйөү ҡанунын,*
*Нисек аңлатырға йөрәгемдең*
*Көйөүҙәрен, аҙаҡ яныуын?!*
*Һорауҙарға яуап таба алмау*
*Билдәһеҙлек зарын ыуҙыра,*
*Шул уйнаштан тыуған билдәһеҙлек*
*Йөрәктәрҙә ғазап тыуҙыра.*
*Күпте белмәйем тип йәшәһәм дә,*
*Белгәндәрем быуа быуырлыҡ.*
*Улар менән, өр-яңынан тыуып,*
*Белмәгәнде ҡыуып тоторлоҡ...*

***

*Ҡешеләрҙең этлектәре*
*Йөрәкте өйкәп үтә.*
*Шул йөрәктең тибештәре*
*Ҡабырғаларҙы тетә.*
*«Илем, Халҡым!» тип типһә лә,*
*Байҙар уны аңламай.*
*Ярай әле, заманымдың*
*Фәкирҙәре алдамай.*
*Барҙы бар ти, юҡты юҡ ти*
*Бомждары урамда...*
*Ә ҡалғандар нимә уйлай*
*Боҙға ҡатҡан борамда?!*

***

*Ышаныс һуңынан улә,*
*Тип һөйләйҙәр халыкта,*
*Тик уны бер кем кұрмәгән*
*Һәм кұрмәгән балыҡ та.*
*Бөйөк Ленин ышанысы*
*Әле булһа халыкта,*
*Йәшәй һәм ул йәшәр әле*
*Һис юғында балыкта...*

## Элек һәм хәҙер

*Ҙур ышаныс менән ҡара таңдан*
*Эшкә тора инек иренмәй.*
*Беҙҙе өмөт алға әйҙәй ине,*
*Эшләй инек янып, һүрелмәй...*
*Хәтеремдә кисен һуңлап ятыу,*
*Иртәгәгә план ҡороуҙар...*
*Аңлашыла хәҙер, иртә торғас:*
*Юҡҡа ғына иртә тороуҙар.*

## Көҙгө балҡыштар

*Тәҙрәләрҙе йәнә көҙҙәр сиртә,*
*Күңелдәргә кусә балҡышы.*
*Ғүмер үтә, тиеп уфтанмағыҙ,*
*Был — көҙҙәрҙең беҙгә алҡышы.*
*Эшебеҙгә көҙҙәр йомғаҡ яһай,*
*Уңыштарҙы кұрһә, һөйөнә...*
*Саҡырғанды көтөп тормай бит ул,*
*Үҙе килә кеше өйөнә.*
*Яҙҙар, йәйҙәр беҙҙе оҙатканда*
*Аҡҡоштарға, ахры, тиңләйҙер, —*
*Яңы йылдың яңы яҙҙарына,*
*Йәйҙәренә беҙҙе димләйҙер...*
*Аҡлыҡ-сафлыҡ өҫтәр ҡарһылыуҙар,*
*Яҙҙар беҙҙе йәнә алҡышлар...*
*Тик ниңә һуң күңел ҡылдарына*
*Сиртә икән көҙгө һағыштар?*

***

*Меңләгән һарыҡ көтөүен*
*Бер көтөүсе ҡыуалай.*
*Мин шул көтөү ситлегенә*

*Эләккән бер ҡоралай.*
*Көтөүсе бер һыҙғырҙымы,*
*Көтөү бергә туплана.*
*Һарыҡтары аңҡы-тиңке,*
*Ә көтөүсе һоҡлана...*
*Ысҡыналмай бәргеләнәм*
*Ситлегендә көтөүҙең.*
*Эх, емереп сыҡһаң ине*
*Ошо көтөү ситлеген!*

## Февраль бурандары

Ышанығыҙ февраль буранына,
Бер яуыз уй юҡтыр уйында...
Рәми ҒАРИПОВ

*Мин үҙ иттем ошо бурандарҙы,*
*Тыуғанғалыр февраль айында.*
*Ул бурандар — минең күңелемдә,*
*Ул бурандар — йөрәк майымда.*
*Заманымдың әсе юшҡындары*
*Ултырһа ла йөрәк майыма,*
*Миҙгелдәрҙең матурлығын йыйып*
*Йәнә киләм февраль айына.*
*Уның мине ебәргеһе килмәй,*
*Ебәргеһе килмәй үҙенән...*
*Һәм ул мине бер саҡ алып ҡалып,*
*Йәшерер кеүек донъя күҙенән.*

## Тормошта ла яу ҡырында кеүек...

*Тормошта ла яу ҡырында кеүек*
*Яу юлдарын үткән яугирҙар...*
*Тик шуны ла ҡай саҡ аңламайҙар*
*Түрәлектә булған дәү ирҙәр.*
*Кемдер уны ауырыуға тиңләй,*
*Кемгәлер ул — тамуҡ кисәүе...*
*Ә яугирҙың йөрәк түрҙәрендә*
*Мина ярсыҡтары кисәге.*
*Ул өйрәнгән яуҙа еңеү яулап,*
*Тормошта ла шулай уйлайҙыр.*
*Үндайҙарҙың яуҙан ҡайтмауҙары*
*Сәйәсәтсе өсөн ҡулайҙыр.*
*Ниңә кәрәк уға сит мәшәҡәт,*
*Яу ялҡыны уға һуҡмаһас,*

*Ниңә кәрәк кем өсөндөр яныу,*
*Үҙ өңөндә янғын сыҡмаһас?*
*Хужа булһас уға, әйтерһең дә,*
*Бәхетһеҙлек, ҡайғы янамай.*
*Әллә заман ғәрипләнде микән —*
*Кеше хәлен кеше аңламай...*

## *Мине бары...*

*Ғүмер буйы аҡыл өйрәттеләр,*
*Бөтәһе лә иҫтә ҡалмаған.*
*Кеше түгел, тормош биргән аҡыл*
*Йөрәгемде тотош ялмаған.*
*Мин тормоштоң туҙмаҫ сыбыртҡыһын*
*Ғүмер буйы татып йәшәнем.*
*Ҡайышланып ҡатып бөткәндә лә,*
*Серҙәремде ситкә сәсмәнем.*
*Шуғалыр ҙа тормош биргән аҡыл*
*Биш ғүмергә миңә етерлек,*
*Госдуманың иң түренә ҡунып,*
*Йәшнәп-күкрәп донъя көтөрлөк...*
*Ләкин мине унда индермәйҙәр,*
*Ҡурҡалар шул, әйе, ҡурҡалар.*
*Мине бары үҙем кеүек ҡыйыу,*
*Фәҡир йәндәр генә ҡурсалар.*

## *Хәтер*

*Хәтер менән йәнә дуҫ түгелмен,*
*Минме, әллә улмы диуана, —*
*Мине нисек шашып һөйөүеңде*
*Оноттороп бөгөн ҡылана.*
*Онотаһым килгән саҡта һине,*
*Йоҡо бирмәй миңә ҡылана.*
*Төн буйына һине уйлап сығам,—*
*Миндер, ахыры, миндер диуана...*



**Фәрит**
**СУФИЯРОВ**

## *Уҙғанды юлламаным*

*Күҙ йәштәремә төйөлөп,*
*Бушағансы иланым.*
*Йәшлегем менән хушлаштым,*
*Уға ҡушылып йырланым.*
*Аҡ ҡулъяулыҡтар сылана*
*Түгелгән йәштәремә.*
*Дуҫтарым, мине йыуатып,*
*Керәләр төштәремә.*
*Күргән төштәрҙе юраным*
*Яҡшыға, яманға ла.*
*Уйҙарым ғазаплай мине,*
*Күңелем яралана.*
*Япрағын ҡойған ағастай*
*Ник, йәнем, шомланаһың?*
*Үҙ ҡайғыһы, үҙ шатлығы —*
*Йөрәкте аңламаҫһың.*
*Әҙ түгел юғалтыуҙарым,*
*Хәтерҙән юйламаным.*
*Үткән яҙҙарым шикелле*
*Уҙғанды юлламаным.*

---

*Фәрит Суфияров (1939) Яңауыл районының Иҫәнбай ауылынан. Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы ағзаһы, Яңауыл яҙыусылар ойошмаһының яуаплы сәркәтибе.*

## Урал

*Урал тураһында йөрөй күпме*
*Легенда, йыр, хатта табышмаҡ.*
*Ҡайһы ғына быуын шағирҙары*
*Йыр яҙмаған уға бағышлап.*
*Ҡотоп елдәренә башын һалған,*
*Көньяғына һуҙған аяғын.*
*Бөркөттәре күктә ҡанат ҡаға –*
*Ғорурлығы зәңгәр ҡаяның.*
*Болан һыуҡмаҡтары бейек үрләй,*
*Күкһел төҫтәр тағы ҡуйыра.*
*Ике континентты бергә ҡуша,*
*Ике континентты айыра.*
*Алдарыма, сиккән селтәр төҫлө,*
*Тау һырттары килеп теҙелә.*
*Ер үҙәге әллә шундамы, тип*
*Ҡарап ҡуям баҫҡан эҙемә.*
*Яулыҡ болғай завод торбалары,*
*Ымһындырып бәхет саҡыра.*
*Бағаналар буйлап шатлыҡ баҫҡан*
*Яҙмыш сиккән юлдар сатына.*
*Таш пулаттар ҡатлап өйҙөммө һуң?*
*Уйға ҡалып торам әҙ генә.*
*Быуаттарҙан һаман ҡала килә*
*Кешеләргә һинең хазина.*

## Үҙ көнөмә ҡайтһам...

*Үткән менән арам өҙөлмәне,*
*Күргән-белгән керә төшөмә.*
*Яуызлыҡмы, әллә изгелекме –*
*Ҡайһы тейҙе икән кешегә?*
*Ғәзел булып ерҙә йәшәгәнгә*
*Ғорурланам ете ятҡа ла.*
*Ғәмһеҙлекте, көнсөллөктө белдем*
*Бинахаҡҡа уттар йотҡанда.*
*Бер вайымһыҙ малай төҫлө көлөп,*
*Юҡ-барға ла ихлас ышанам.*
*Бармаҡ һелкеп янаусылар ҙа күп,*
*Бер һин генәме һуң үс алған.*
*Сәстәремә һибелеп аҡтар төштө,*
*Күп ҡайғылар килде башыма.*
*Йылмайһам да, илаһам да, барыбер*
*Мин яуаплы ҡалам барыһына.*
*Үҙ көнөмә, үҙ хәлемә ҡайтам,*
*Онотманым, тотам иҫәптә.*
*Ел иҫһә лә, һыу аҡһа ла шаулап,*
*Уҙған көндәр мине иҫкәртә.*

## *Ҡоштар теле*

*Кеше менән ҡоштар араһында*
*Яҡынлыҡ бар, барҙыр оҡшашлыҡ:*
*Яҙын ҡайта тыуған яҡтарына,*
*Көҙҙәр еткәс тағы хушлаштыҡ.*
*Яҙмыштарға кеше һылтап ҡуя,*
*Айырылыша, ҡабат табыша.*
*Ҡоштарҙың да йәшәү мәғәнәһе бар,*
*Үҙҙәренсә ҡыла тамаша.*
*Мин битараф түгел береһенә лә,*
*Ҡанатланһын әйҙә, йырлаһын.*
*Илһамына йәнем тарығанда,*
*Күҙҙә тотам ҡоштар донъяһын.*
*Ҡоштар теле таныш һәр кемгә лә,*
*Аса белә йөрәк серҙәрен.*
*Һандуғастар моңло һайрағанда,*
*Күҙ йәштәрен күрәм ирҙәрҙең.*

## *Ил йәме*

*Илем йәмен тоям һәр минутта,*
*Ҡайындарым бөрө ярғанда.*
*Ҡыр ҡаҙҙары теҙелеп ҡайтҡан мәлдә,*
*Офоҡтарҙа шәфәҡ янғанда.*
*Йүкә сәскәһенән бал яуғанда,*
*Тулышҡанда арыш башағы.*
*Ярһып сапҡан түй аттарын күрһәм,*
*Сылтыраһа шишмә таштары.*
*Илем йәмен тоям һәр ваҡытта:*
*Яҙын-йәйен, көҙөн-ҡышын да.*
*Ләйсән ямғырҙары күкрәп уҙа,*
*Яуған ҡарҙар ирей усымда.*
*Ҡыр өҫтөндә турғай ҡанат ҡаға,*
*Игенселәр йырын ишетәм.*
*Хазинаң ҙур, байлығың күп, илем,—*
*Бер хужаһы кеүек хис итәм.*
*Ил биҙәге арта көнгә керһәң,*
*Башҡа төҫтәр, еҫтәр яңыра.*
*Миҙгелдәр ҙә ҡалмай үҙгәрмәйсә,*
*Тамсыларҙан ташҡын ярала.*
*ГЭС уттары кеүек балҡый йөҙҙәр,*
*Сәбәбе бар, сере билдәле.*
*Табын йырын, тормош наҙын алып*
*Һәр йортҡа ла инә ил йәме.*



Рәсүл
СӘҒИТОВ

ХИКӘЙӘЛӘР

## ҒӘҘЕЛ КЕШЕ

Ябай ғына вазифа биләй ул. Байтаҡтан инде. Юғары белемле булһа ла. Кем әйтмешләй: эсмәһә лә, тартмаһа ла. Ҡыҙыл тышлы дипломына яҙылып ҡуйылған төп һөнәре буйынса намыҫлы эшләһә лә. Хәйер, кешеләрҙе был ғына ябай ултырғыстан «ҡатмарлы» ҡәнәфигә күтәреп ултыртмағаны билдәле инде. Етмәһә, вазифауи юғарылыҡҡа ул үҙе ынтылмай. Мөмкин булған саҡтарҙа ла, бәғзеләр төн йоҡоларын йоҡламай уфылдағанда, әллә кемдәрҙән уларҙың әллә ниндәй ҡоҙаларына шылтыраттырып, бәләкәй генә булһа ла түрәлек урынын эләктереп ҡалырға йәнтәслимгә тырышҡанда, уның, хатта үҙенә тәҡдим итһәләр ҙә, баш тартыуы ихтимал. Ихтимал ғына түгел, ошолай булғаны ла бар. «Был донъяла һәр кем үҙенең Хоҙай биргән һәләтенә ярашлы эште башҡарырға тейеш» тигән ныҡлы фекерҙә тора. Сөнки ғәҙел кеше шул ул.

...Мәктәпте бөткәс тә институтҡа инде. Беренсе ынтылыуҙан керҙе, ситтән тамсы ла ярҙамһыҙ: балһыҙ ҙа, болһоҙ ҙа, малһыҙ ҙа. Ул ваҡытта – бөгөн ғәжәп тойола, әммә шулай ине бит – студенттар сафына баҫыу үҙ көсөң менән дә мөмкин булды.

Беренсе курсты бөтөүенә әрме хеҙмәтенә алынды. Бармаһа ла була ине, әлбиттә. Мәҫәлән: «Ауырыу әсәйем яңғыҙы ҡала, һеҙ нимә, иптәштәр!» – тип яу һалып. Күптәр шулай иттеләр ҙә: табиптар менән танышлыҡтарын киң файҙаландылар – хәрби хеҙмәттең бәҫе төшкән мәл ине бит. Һөҙөмтәлә һаулыҡтарын да һаҡлап алып ҡалдылар. Ул бит теге аҡыллы китап йә

*Рәсүл Сәғитов (1964) Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең Яҙыусылар, Журналистар союздары ағзаһы, республиканың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге хөкүмәт премияһы лауреаты. Белеме буйынса — филолог һәм юрист. «Юлдаш» радиоһының ижтимағи-сәйәси һәм нәфис программалар бүлеге етәксеһе булып эшләй. Дүрт проза китабы бар.*

киноларҙа ғына әрме хеҙмәтенең, һинән алыуҙан бигерәк, һиңә биреүе тураһында маҡтап яҙалар йә күрһәтәләр. Ғәмәлдә киреһенсә килеп сыға. Насар ашауҙан ун һигеҙ йәшлек кешенең – эс-бауыры бешегеп, урынына ултырып та өлгөрмәгән баланың – сәләмәтлеге ҡаҡшамай нишләһен? Тегеләрҙең, әрменән ҡасып ҡалғандарҙың, һаулыҡтарына зыян да теймәне, институтты ла ана күпмегә – теүәл ике йылға алдараҡ тамамланылар, тимәк, эшкә лә иртәрәк урынлаштылар, тейешенсә хаҡ ала, хеҙмәт стажы йыя башланылар. Йәғни, байығыу уҡ булмаһа ла, хәллерәк тормошҡа тиҙерәк ылыҡтылар. Улар, Ғәлим Рахманғоловтың фекеренсә, бынамын тигән егеттәр үҙҙәре былай. Бергә уҡынылар, бергә ҡыҙҙар артынан саптылар тигәндәй. Ләкин йылғырыраҡ, әҙме-күпме хәйләкәрерәк инеләр түгелме? Ысынлап ла шулайҙыр: ҡайһылары менән хәҙер ҙә осраштырғылай – түрә-ғара булып бөткәндәр. Уҡыған институттары, факультеттары улай ҙур хужа булырлыҡ түгел дә ине кеүек, ә тегеләр, бына шулай, барыбер ҙә үрләгәндәр. Уларҙы түрәлеккә билдәләүселәр быларҙың белемдәренең әлеге өлкәгә тура килеп етмәгәненә лә иғтибар итеп тормағандарҙыр инде.

Ә Ғәлим улай итмәне – әрмегә китте: хуш, ауылым, һау бул, институтым. Хеҙмәткә эләккән уҡыу ротаһы тап әлеге шул һаулыҡ ҡаҡшатыусы урын ине лә инде. Бик хөрт ашаттылар, алдарына ҡуйылған тәрилкә эсендә – шыр боламыҡ. Уныһы ла тоҙһоҙ. Уның ҡарауы, ашхананың артҡы ишеге яғына көн дә йөк машинаһы килеп, йәшник-йәшник ризыҡты тейәп алып китә ине. Суска-мускаға тип түгел, һәп-һәйбәт нәмәләрҙе. Ә малға тигәне – айырым тарих. Хәрби частың үҙ ярҙамсы хужалығы булды. Йыуынты-мыуынтыны шунан да килеп ала торғайнылар. Тик, дөрөҫ әйттек, тап шул йыуынты-мыуынтыны ғына. Яҡшыһын икенсе берәүҙәр – гражданскийҙар ташыны. Йәшеренмәйҙәр ҙә ине, исмаһам. Сөнки ашхана мөдире менән килешеп эшләйҙәр. Һалдаттың, өҫтәүенә хеҙмәтен яңы ғына башлаған кешенең, көнөнөң һәр минут-секунды алдан билдәләнеп, ғүмерен шуға ярашлы ғына һөрәгән егеттең быға иғтибары етмәҫкә лә тейеш кеүек. Һәм бүтәндәр, ана, быға төкөрөп тә бирмәй. «Ярай, беҙҙекен һыпырмай ҙа...» – тиҙәр.

– Нисек инде беҙҙекен түгел! – тип ҡабына Ғәлим. – Нимә ашағаныбыҙҙы күрәһегеҙ ҙә! Ә күпме, нисек булырға тейешлеген беләһегеҙме?

Әллә ни белеп бөтөрмәйҙәр. Яҙылған ул норма йә паек һандары, әммә иғтибар итеүсе юҡ.

– Ҡайғырма,– тип ҡул һелтәйҙәр. – Тиҙҙән барыбер бынан китәбеҙ. Ә боевой części яҡшыраҡ, тиҙәр.

Ҡайғыра Ғәлим. Ғәҙеллек тип үҫкән кеше шул. Бер көндө түҙмәне, ашхана мөдиренә, тышҡы ҡиәфәтенән үк бур икәне күренеп торған әҙәмгә, әйтте:

– Прапорщик иптәш, ә ниңә аш үтә шыйыҡ?

Тегенең иҫе китте! Быға са һис кемдең, өҫтәүенә бынауы яңы килгән «фил»дең (йәштәрҙе шулай йөрөтәләр) өндәшкәне юҡ ине лә. Ике айлыҡ ҡына учебка был – өлгөрмәйҙәр. Көнө буйы марштровать итеп, ныҡ арыйҙар, күҙҙәре күрмәй, мейеләре эшләмәй, робот кеүек йөрөйҙәр. Ә күҙҙәре күрә, баштары эшләй башлауға частарға таралышырға ла ваҡыт етә. Яңы «филдәр» килә. Оҙаҡ йылдар ошолай дауам итә.

Мөдиргә быңдай өндәшеүҙәрҙең фәтүәһе булдымы? Юҡ тип тә булмай. Ул һалдатҡа тешен оҙаҡ ҡайрап йөрөнө, һәр хәлдә Ғәлимгә шулай тойолдо. Боевой часта булһа, прапорщик был турала «бабай»ҙарға әйтер ҙә проблеманан еңел генә ҡотолор ҙа ҡуйыр ине, әлбиттә. «Бынауы фил туйына алмай икән, туйҙырығыҙ әле» – тиер, тегеләр ашханаға алып барып, бер сүлмәк ашты ашатып бөтөрөр ине. Ғәлимдең күргәне юҡ, шулай ҙа бындай ҡурҡыныс хәлдәр тураһында хәбәрҙәр. Ә бында, уҡыу ротаһында, улай итеп булмай, сөнки «бабай»ҙар юҡ. Берәү ҙә. Сержанттар бар былай, ләкин улар – айырым бер ҡатлам, аҡһөйәктәр... Ана шул башҡаларҙан айырылып торғандары өсөн дә уҡыу ротаһы курсанттары араһынан ҡалҡып сығып, «даими состав»ҡа ҡалғандар ҙа инде улар, погондарына арҡыры һарғылт таҫмалар таҡҡандар. Хәҙер, ашхана мөдиренең ниндәйҙер проблемаһын хәл итәм тип, тайғаҡ юлға баҫҡылары, эләгеп шул таҫмаларын кәметкеләре йәки уларҙан бөтөнләй ҡолаҡ ҡаҡҡылары килмәй. Погоны ярай инде, боевой часҡа оҙатыуҙары ла ихтимал. Ә уларҙың унда барғылары килмә-ә-й... Бында бит улар хандарса йәшәй: нарядтар юҡ, увольнениелар бар. Теләгән ваҡыттарында. Дембелгә яурын баштарына буй таҫмалар тағып, старшина булып ҡайтҡылары килә.

Курсант Рахманғоловтың аш-һыу сифаты буйынса мөдиргә белдергән дәғүәһенең файҙаһы тейҙе, тинек. Ысынлап та аштар ҡуйырҙы, бутҡалар майланды, сеүәтәләрҙә һеңерле-тарамышлы булһа ла ит киҫәктәре йөҙә башланы.

... Унан һуң күп һыуҙар аҡты, ләкин Ғәлимдең холҡо үҙгәрмәне. Шул үҙгәрмәү арҡаһындалыр ҙа – быны үҙе аңлай, әммә үҙгәрә алмай – башта әйтелеүенсә, әле һаман ябай ғына эштә, бәләкәй генә вазифа биләй. Аҡса кәрәкмәй түгел, әлбиттә, кәрәк. Эшкә лә үҙ автомобилендә түгел, ә эштекендә һәм руль артында түгел, шәхси шоферы янында, тағы ла һәйбәтерәге – артҡы эскәмйәлә йөрөгәһө киләләр. Ҙур түрәләр шулай итә. Ләкин әлеге ғәҙеллек көҫәү тойғоһо үҙен баҫтыра килә...

Әйткәндәре лә бар:

– Принциптарыңа төкөр. Үҙеңде уйла.

Бының аптыраулы ҡарауына:

– Ну ... үҙеңде булмаһа, ғаиләңде уйла. Һинең артыҡ ғәҙеллегеңдән улар ҙа зыян күрә лә баһа... – тип өҫтәйҙәр.

Үҙ һүҙендә ҡала Рахманғолов, быңа шулай ғәҙеллек даулауын дауам итә.

Ҡатыны ла:

– Юҡ менән булма, ғәҙелһеҙлекте еңеп бөтөп булмай ул, береһен еңһәң, урынына икенсеһе, тағы ла яманырағы килер, – тип ҡарай. – Көйөп, һаулығыңды ғына һаман бөтөрәһең.

...Бер көндө эштән туҙынып ҡайтып инде. Кейемен дә сисмәйенсә, ашнаҡта таба-маба менән шаж-шож килгән ҡатыны янына сығып, эскәмйәгә лап ултырҙы. Ҡатыны быныӊ кәйефһеҙ икәнен ишекте асыпябыуынан уҡ һиҙенгәйне: шаж-шождарын кәметте, ҡыҙып-ҡыҙып коррупцияға ҡаршы көрәш тураһында һөйләгән телевизорҙың тауышын ябып ҡуйҙы..

– Ни булды?

– Эй, мынауларға барғайным... – Ире ҡайһы ойошмаға барғанлығын

әйтте. Теләр-теләмәҫ кенә. Йәне көйөүе шул ҡәҙәремдер, хатта учреждение атамаһын теленә лә алғыһы килмәй.

– Шунан?

– Шул. Һәр ваҡыттағыса инде – ултыралар ҡуҡырайышып. Быяла артындағы ҡупшы ҡыҙға: «Һаумыһығыҙ!» – тинем. Һаулыҡты алманы. Ишетмәне лә шикелле. Компьютер мониторына ҡаҙалып алған – минең тарафҡа һыңар күҙен дә борманы. «Һаумыһығыҙ!» – тип ҡабатланым. Тағы шул уҡ хәл. Тауышымды күтәрә биреберәк: «Һылыу, әйткәнемде ишетәһегеҙме?» – тип һораным. Бына шунда ғына ҡараны. Шунда уҡ түгел былай, әҙ генә көттөрә биреберәк. Матур ҡыҙҙар ҙа яман итеп ҡарай белә икән: «Нимә?!» – тине. Ләкин был мәлдә эш үткәйне инде.

– Һин шул инде... – Йөҙөнә борсолоу сырайын уғата өҫтәп, эштең ысынлап та үтеп өлгөргәнен аңлағанын белдерҙе ҡатыны.

– Ә ни эшләргә тейеш инем?! Ниңә ул шунда уҡ яуап бирмәй һуң?!

– Ваҡыты булмағандыр.

– Аһа, ваҡыты... Улай булған хәлдә лә, кеше менән һаулыҡ һорашып, «Әҙ генә көтөгөҙ инде, мин хәҙер...» – тиһә, көтөр инем. Ә, вапше, һин дөрөҫ әйттең, артабан шулай тине лә ул миңә: «Эшем барлығын күрмәйһегеҙме ни?» – тине. Эш ней, кемдеке юҡ. Булырға тейеш тә инде ул, юғиһә кеше унда нишләп ултырырға тейеш? «Аңлайым, — тием, – тик минең һорауым бар». «Ну?» – ти был. – Нимә кәрәк?!» Төшөндөрәм. «Шуны ла белмәйһегеҙме?!» – ти. Шул урында шартланым да инде мин!!! «Һылыу, – тинем. – Үҙемдең эшемдә мин бөтә мәсьәләләрҙе лә яҡшы беләм. Ә һеҙ минең эшемдә ныҡ һай йөҙәһегеҙҙер, тип уйлайым. Быға иманым камил. Килһәгеҙ, һораһағыҙ, һәйбәтләп аңлатып бирер инем».

– Шунан, үҙеңә аңлаттымы һуң ул ҡупшы ҡыҙ? – Ҡатынының йөҙөндә һағайыу һаман ҡалҡа бара.

– Ана, фәлән тәҙрәсектәргә барығыҙ, – тине, ике һанды атаны. Киттем. Барһам, уларҙа кешеләре юҡ. Икеһендә лә. Оҙаҡ көттөм. Тыҡ-тыҡ баҫып бер хеҙмәткәр үтеп бара ине, һораным. «Көтөгөҙ, – ти был. – Тиҙҙән булырҙар». Тағы стена буйына барып һөйәлдем. Егерме минут самаһы уҙғайны, икенсе бер хеҙмәткәрҙе туҡтаттым. «Ә улар бөгөн булмай,» – ти был.

Тағы сәсрәнем!

Сәсрәүемә һәләк аптыраны был ҡатын: «Һеҙҙең балаларығыҙ бармы?» – тип һораны. «Өсәү», – тием. «Ауырыйҙармы?» «Булғылай, – тип яуаплайым. – Ә быныӊ ни ҡыҫылышы?» «Бына был ҡыҙҙарҙың да, – хеҙмәткәр теге ике тәҙрәсек яғына ымланы, – балалары сирләп киткән. Нисек уйлайһығыҙ: бәпестәрен дауалар өсөн бюллетень алырға хоҡуҡлымы улар, әллә юҡмы?» «Ә шул турала башта уҡ әйтә ала инегеҙме?» – тинем. Теге үҙенең мине әле бына тәүге тапҡыр күргәнен белдерә. Егерме минут элек уның кеүек үк ҡатындың көтөргә тәҡдим иткәнен әйтәм. Был башҡалар өсөн яуап бирмәгәнен ҡыҫҡыра. Ә мин үҙемде үҙ эшемдә бөтә ойошма өсөн яуаплы тойғанымды белдерәм:

«Исмаһам, бына ошонда яҙып ҡуйығыҙ» – тием. «Яҙырбыҙ, тынысланығыҙ!» – ти.

– Яҙҙымы?

– Аҙаҡ, сығып барғанда, күрҙем: сатай-ботай сыймаҡланған бер яҙыу тора ине.

– Шунан?

– Шылтыраттым. «Ана тора телефон, шылтыратып һорағыҙ!» – тигәйнеләр бит. Унда ла бик эре һөйләштеләр. Йәнә шартланым! «Төп хужағыҙ ҡайҙа һеҙҙең, директорығыҙмы-кемегеҙ унда?» – тинем үтеп барған берәүгә. Үтеп барыусы етәкселәренең бишенсе ҡатта ултырғанын әйтте. Коридор осона барып, баҫҡыс буйлап менәм тиһәм, уныһы бикле. Хеҙмәткәрҙәр үҙҙәре, күрәм, электрон асҡыстары менән асып йөрөй. Шулай бикләнешеп ултыралар. «Ас!» – тинем ҡарауылсыға. Бик ҡаты әйткәнмендер, уныһы: «Ниңә?» – тип тә һорап торманы, асты. Директорҙары, бына ғәжәп, урынында икән, етмәһә яңғыҙы ғына. Телефон аша ла һөйләшеп ултырмайсы... Индем. Аңлаттым. Етәксе хәлде тиҙ төшөндө һәм минең яҡҡа оҙаҡ ҡарамаған теге дорфа ҡыҙҙы саҡыртып алды. Тик уныһы ғәйебен һис танымай: «Улай итмәнем...» – тип тик тора.

– Шунан, эшеңде эш иттеңме һуң?

– Юҡ...

– Ә ниңә нервы бөтөрҙөң, улай булғас?

– Ҡабат улай итмәҫтәр, исмаһам.

– Һуң, унда йыш барып йөрөмәйһең дә баһа. Йылына бер күренәһеңмеюҡмы...

– Нисауа. Уның ҡарауы, башҡалар менән һәйбәт һөйләшерҙәр.

– Улар ни, алмашынып тора инде. Һин «тәрбиәләгән» ҡупшыҡай йөҙләгән кеше араһында нимә генә ул...

– Икенсе барғанда икенселәре эләгер. Уларын да урынына ултыртырмын...

Ҡатыны уға сираттағы мәртәбә бөтә нәмәне йөрәккә яҡын алырға кәрәкмәгәнлекте, тап ошо арҡала үҙенең ойошмаһында ла мәртәбәһеҙ вазифала ултырғанын әйтергә уйланы ла, тыйылды, бынан мәғәнә булмаҫын белә ул. Бының урынына:

– Бар, сисен, йыуын да ашарға ултыр, – тип һауыт-һабаһына тотондо. Бер ыңғайҙа телевизорҙың тауышын сығара бирҙе. Ул һаман да ришүәтселеккә ҡаршы көрәш кәрәклеге тураһында һөйләй ине.

Шундай ғәҙел кеше инде ул Ғәлим Рахманғолов.

Ошоғаса бынан зыяндан башҡа нәмә күргәне юҡ, әлбиттә, шулай ҙа, уның һымаҡтар күберәк булһа, тормошобоҙ ысынлап та әҙгә генә булһа ла еңеләйә төшмәҫ инеме икән?..

## АЛДАНЫУ

– Миңә врачтарҙың, ишетәһеңме, ҡара әле... Бынауы... кейемдәре ныҡ оҡшай. – Йөрәк тикшереү бүлмәһенә сиратта ултырған ҡырҡ йәштәр тирәһендәге ҡуйы бөҙрә сәсле ир, терһәге менән күршеһенең, сама менән үҙенең тиҫтеренең, ҡабырғаһына төртөп, шулай тине. Алан-йолан ҡаранып әйтте быны, шуға хәбәре өҙөк-өҙөк килеп сыҡты. Тегеләй-былай ашығып уҙа тороусы гүзәл зат табиптарға, шәфҡәт туташтарына, дауаханала эшләүсе бүтән хеҙмәткәрҙәргә баянан бирле тишеп ҡарап ултыра ул. – Шул кейемдәге ҡатын-ҡыҙҙар бөтәһе лә ... иҫ китмес, ней, матур күренә.

Күршеһе был раҫлау менән тиҙ килеште:

– Шулай шул. – Быны белдергәнендә Һалпый ҡара мыйығы ирмәк итеп һелкенеп ҡуйҙы.

– Айырыуса бынауы йүгереп йөрөүсе... йәштәре. – Бөҙрә сәс йәнә, эш боҙған кешеләй, ян-яғына ҡаранып алды.

– Һы! Кәнишнә: егерме генә йәшлеккә хет куфайка кейҙер – барыбер һылыу буласаҡ. – Күршеһе фәлсәфәүи яуап бирҙе.

– Шулай инде – матурлыҡты боҙоуы ауыр... Тик олораҡтары ла, бальнис кейемен кейһә, иғтибар иткәнең бармы, теге, ней... ымһындырғыс була ла китә бит әле. Кис көнө, эштән ҡайтҡандарында, күргәнем бар: былдай, ғәҙәти тип әйтәйек инде, кейемдә өлкәнерәк берәй уҫал уҡытыусы һымаҡ күренәләр. Иртәнсәк килеп, яңынан халат-малат кейһәләр, әпәт хәтәр генә булып китәләр...

– Барыһы ла түгел инде. – Һалпый мыйыҡ ризалашып етмәне. – Үҙҙәрен ҡарап йөрөткәндәре, йәмен-тәмен белеп кейенгәндәре – улары инде ... ҡайһылай ҙа күркәм.

Һүҙ башлаған ир бының менән килеште, бөҙрә башын бер нисә мәртәбә аҫтан өҫкә сайҡап ҡуйҙы, шул арала сираттың бер кешегә кәмегәненә иғтибар итте:

– Әйҙә, дуҫ, быңдараҡ күсәйек, әтеү хәҙер берәйһе килеп буш урынға ултырһа, буталсыҡ китәсәк, артта тороп ҡалырбыҙ.

Шылдылар.

Бөҙрә баш коридорҙың шыма ҡаты иҙәне буйлап тыҡ-тыҡ баҫып, кәүҙәһен төҙ тотоп үтеп киткән нәүбәттәге ҡыҙҙы моңһоу ҡараштары менән оҙатты ла өҙөлгән әңгәмәне яңынан ялғаны:

– Улары, ололары, ярай әле, бынауы йәш туташтар ише ҡыҫыҡ кейем киймәйҙәр, юғиһә беҙҙең кеүек братҡа бында дауаланыу ҡайғыһы төштән һуң булыр ине.

Артабан Бөҙрә баш менән Һалпый мыйыҡ, үҙҙәре әйтмешләй, «йәш туташтар» мәсьәләһенә башкөллөй күстеләр.

– Кейемдәре йоҡа ғына тауарҙан бит, үтә күренеп тора, шуға ылыҡтырғыс ул. – Һалпый мыйыҡ.

– Аҫтынан артыҡ нәмә лә киймәйҙәр. – Бөҙрә баш.

– Ә ниңә кейергә? Бальниста, ғинуар айы булһа ла, килеп тороп йылы, хатта эҫе.

– Ҡайһы берәүҙәренең кейеменең төҫө шәп була. Ғәҙәттә аҡ бит. Ә быныҡы – асыҡ йәшел, мәҫәлән. Күңел шундай һылыуҡайҙарға ныҡ тартыла.

– Аңлашыла-а-а. Ярай, әҙерәк түҙә бир, оҙаҡламай сығаһың бит, кәләшең янына ҡайтырһың да... – Һалпый мыйыҡ тегенең кәләше янына ҡайтҡас нишләрен әйтеп бөтөрмәне, мыйығын бороп ҡына ишараланы.

Бөҙрә баш быға әллә ни диҡҡәт ҡылманы, күршеһенең төрттөрөүен ишетмәне лә шикелле, – үҙе әйтмешләй, «күңелен тартҡан» һылыуҡайҙар тураһындағы уйы ныҡ тәрәнгә төшкәйне, ахырыһы.

Шул арала сират, ҡарышлауыҡ аҙым яһағандай, тулҡынланып ҡуйҙы, әңгәмәселәр маҡсаттарына йәнә бер кешегә яҡынлай төштөләр.

Бер килке ултыра биргәс, «күңеле тартылыусы» ир йәнә күршеһенең терһәгенә ҡағылды:

– Бер көндө шулай... Тыңлайһыңмы мине?

– Эйе-эйе. – Һалпый мыйыҡ уның яғына әйләнде.

– Бер көндө, УЗИ үтергә тип сират көткәндә, ошонда ана тегенән эй сибәр бер ҡыҙ килеп инде, әй. Тәү ҡарашҡа тәне тулыраҡ та кеүек, ә ипләберәк ҡараһаң, һимеҙ түгел, ә тығыҙ икәне күренеп тора. Өҫ яғы нәҙек, аҫ яғы тулыраҡ: шәп!

– Ә-ә-ә, бынауы икенсе номерлы кабинетта эшләгән ҡыҙҙы әйтәһеңме ни? – Тыңлаусы йәнләнеп китте.

– Икенселә шул. Әллә һин дә күрҙеңме? – Тыңлаусының йәнләнеүе һөйләүсене уғата рухландырып ебәрҙе.

– Ниңә, мине һуҡыр тип уйлайһыңмы? – Тыңлаусының мыйығы хәҙер әллә ни һалпый ҙа тойолмай, әллә күтәрелә төшкән дә инде?.. – Тәү ҡарашҡа ла тулы түгел ул. Һутлы – бына нимдәй.

– Һутлы шул. – Бөҙрә башҡа был һүҙ оҡшап ҡалды. – Юғиһә, зифа буйлылар күпселектә ябығыраҡ, ҡорораҡ булалар улар. Ә инде «еүешерәктәре»нең, йә, ғәфү үтенәм ... – Тауышын баҫа төштө. – Эсе сыҡҡан йә билендә ике яҡлап ҡанаттары үҫә башлаған була. Ә был – шәп! Әйтерһең дә, уны ике өлөштән йыйғандар: өҫтөн зифа буйлы ҡыҙҙан, аҫтын тулыраҡтан алғандар.

– Була ундайҙар, һирәкләп булһа ла. – Тыңлаусы шулай тип һығымта яһаны, тарих ошо урында тамам, тип уйланы шикелле – күргән дә бөткән. Сөнки шундай ҙа «һутлы ҡыҙ» тураһындағы һүҙҙең бынауы ҡырҡ йәшлек, етмәһә дауаханала ятҡан, ә, тимәк, һаулығы хөрт иргә шунан да артыҡ бәйле булыуы мөмкин түгел! Был һығымтаны һөйләүсе лә һиҙмәй ҡалманы, әлбиттә. Ул да – донъя күргән әҙәм. Һәм, хәҙер инде эскәмйә буйлап алға, йөрәкте тикшереү бүлмәһенә табан түгел, ә, киреһенсә, артҡа, күршеһенә, яҡыныраҡ шылды.

Шылды ла, тағы алан-йолан ҡаранып:

– Һин артабан тыңла, – тине. Йөҙө тулы серлелек.

Һалпый мыйыҡ баяғынан да бигерәк йәнләнде, хатта күҙҙәре ялтырап китте – әллә был... кем белә... Тыштан шулай ғына булһа ла... Бигерәк ныҡыш бәндә бит, ә ҡатын-ҡыҙ ныҡыштарҙы үҙ итә ул... Һүҙ менән икенсене белдерҙе:

– Йә-йә!

– Теге һылыу шул икенсе номерлы кабинетҡа инеп китте лә, тиҙҙән ишеген асып: – «Кемгә УЗИ-ға, үтегеҙ!» – тине. – Бөҙрә баш быны әртисләнеп күрһәтте, үҙенең ҡылыҡһырлау һәләте лә бар икән – килештерҙе, тауышын да килешле генә итеп нәҙегәйтте. – Тауышы ла яғымлы ғына икән. Минән алда сиратта күҙе йүгереп торған бер өтөк әҙәм, быны ишеткәс, тиҙ генә ҡалҡынды ла инеп тә китте. «Вәт шәп булды быға! – тип уйлап ултырам. – Ә миңә унда керергә яҙмаҫ инде, хәҙер ана теге, дүртенсе, кабинет ишеге асылыр, һәм мине шунда саҡырырҙар». Ә ундағы белгес был ҡыҙ ише шәп түгел. Үҙенсә һәйбәттер инде, һүҙем юҡ, ләкин илленән ныҡ ҡына өҫтәге ҡатын. Ә тап шул дүртенсе кабинеттың алдараҡ бушарына шигем юҡ, сөнки унда бая уҡ инеп киттеләр. Берәйһен дүртенсегә үткәреп ебәреп булһа ла, матурҡайға эләгер инем, минән һуң, ҡәһәрең, берәү ҙә юҡ.

– Шунан? – Һалпый мыйыҡҡа тарихтың аҙағы мөһим.

– Яҙмыш йылмайҙы бит, әй: дүртенселә оҙаҡ мыҙылдылар ҙа – теге ҡыҙға эләктем!

–Ну-у-у?!

–Эйе. «Мөмкинме?» – тип рөхсәт һораным, тауышымды мөләйемерәк сығарырға тырыштым. «Рәхим итегеҙ!» – ти был. Компьютерына текәлеп, миңә арҡаһы менән ултырһа ла, ағымлы йылмайғанын һиҙәм. Арҡаһын кейеме нығ һығып тора – бер артыҡ та, кәм дә ере юҡ.

– Ундай матур кәүҙә үҙенән-үҙе генә килеп сыҡмай ул. Мин уны, ҡайҙалыр фитнес-митнесҡа йөрөйҙөр, тип уйлайым, – тип фараз яһаны ошо урында тыңлаусы.

Һөйләүсе быны иғтибарһыҙ ҡалдырҙы – уның ниндәйҙер уйға төшһә, бүтән нәмәгә әллә ни диҡҡәт ҡылмағаны тураһында әйтелә бирелгәйне бит инде.

Бының урынына һорау бирҙе:

– Кейәүҙә микән, белмәйһеңме?

– Нимә, әллә өйләнергә булдыңмы?– Һалпый мыйыҡ һорауға һорау менән яуапланы. Мыйығын баяғыса, Бөҙрә баш өйөнә ҡайтҡас кәләшен нишләтәсәге тураһында әйткәнендәгесә, бороп ҡуйҙы.

– Юҡ та, нығ тәрбиәле йөрөгәнгә әйтәм. – Һөйләүсе үпкәләмәне.

– Юҡтыр, тип уйлайым, сөнки матурлыҡ туйҙың икенсе көнөнә үк кәмергә тотона ул – артабан инде мөхәббәт бөтә, көнкүреш башлана. – Тыңлаусы тағы фәлсәфәүи һығымта яһауҙы хуп күрҙе.

– Ҡартайғансы ҡараулы йөрөгәндәр ҙә була ул. – Хәҙер инде һығымтаны һөйләүсе яһаны.

– Була, бәхәсләшмәйем. Бәлки, ире барҙыр, берәй байҙыр, кәләшенең матурлығы өсөн аҡсаһын йәлләмәйҙер. – Тыңлаусы әле генә әйткән фекеренән баш тартты.

– Йо-о-ҡ, ундайҙар бит ҡатындарын эшләтмәй, өйҙә генә ултырта. Йорт эштәренә кеше яллай.

– Уныһы ла бар инде былай.

Шым ултыра бирҙеләр. Икеһенең әле әйткәненән һәм әйтеп еткермәгәненән ҡыҙҙың әлегә кейәүгә сыҡмағаны, ләкин тәҡдимдәрҙең бик күп булғаны тураһында йомғаҡ килеп сыҡты шикелле.

Ошо ваҡытта «карышлауыҡ» йәнә бер аҙым эшләне, кәүҙәһе хәҙер инде кәкерәйеп китте – сират көтөүселәр өсөн эшләнгән эскәмйә мөйөштә шулай ҡырҡа борола.

– У-оһ! – Һалпый мыйыҡ кабинет ишегенә яҡынлашыуынан  ҡәнәғәтлек тойғоһон ошо ауаз менән белдерҙе лә  күршеһенә өндәште:

– Шунан, теге һылыу ҡыҙға эс-бауырыңды күрһәттеңме һуң?

– Күрһәттем, әй. – Бөҙрә баш ирекһеҙҙән өҙөлөп торған тарихты ихлас дауам итте. – Наҙлы ғына итеп: «Сисенегеҙ, ятығыҙ», – тигәйне, бойороғон йәһәт кенә үтәнем. Ҡарай башланы. Ҡабырғаға ятҡанымда өҫтәл аҫтынан ҡыҙҙың тулы, тығыҙ боттары күренә. Ана улар, яҡында ғыналар... Тик, йәл, оҙаҡ ҡарап ята алманым.

– Ниңә?

– «Булды, – тине, – тороғоҙ, кейенегеҙ». Рәхмәт әйттем дә сығып киттем.

– Һи-и, шул ғынамы? – Тыңлаусының мыйығы күңелһеҙ һалпайып китте.

– Шул ғына булмай – нимә эшләй ала инем һуң? – Һөйләүсе етди итеп ҡараны.

– Ну, шунда... сәбәбен табып, телефонын һорар инең...

– Һорамаными шул. – Бөҙрә баш хатта уфтанып ҡуйғандай итте. Әммә был хәлдә оҙаҡ ҡалманы:– Үҙем сығып барам, үҙем барыбер ҙә уның менән тағы осрашырға өмөт итәм, – тине.

– Өмөтһөҙ шайтан ғына... – Һалпый мыйыҡ әллә мысҡыллаңы, әллә, ғәҙәтенсә, фәлсәфәүи яҡты ҡайырҙы.

– Һин улай тимә әле – икенсе көнгә үк күрешергә яңынан яй сыға яҙҙы. – Бөҙрә баш инде тамам булған, ҡыҙғаныска ҡаршы, бәхетһеҙ тамам булған тарихты яңынан тергеҙҙе.

– Ниндәй мәғәнәлә? – Мыйыҡлы күршеһе уны аңламаны.

– Тура. Минең табип тегенең тикшергәнен ҡараған да риза ҡалмаған: «Тикшереү беҙҙе ҡыҙыҡһындырған эске органдарыңдың бөтә урындарын да күрһәтмәгән, ҡабатларға кәрәк», – тине.

– Һин теге икенсе кабинетҡа кире саптың инде? – Һалпый мыйыҡтың мыйығы йәнә мысҡыллы ҡыйшайҙы.

Ләкин һөҙөмтә көтөлгәнсә килеп сыҡманы – Бөҙрә баш быны раҫламаны:

– Сапманым.

– Ниңә? – Һалпый мыйыҡ ысынлап аптыраны: ысынлап та, нисек инде ул, яҙмыш шундай һутлы һылыу менән яңы осрашыуҙы үҙе тәҡдим итеп торғанда, бынан баш тартырға мөмкин, ә?!

Бөҙрә баш быны сәбәбе ябай ғына икәнен төшөндөрҙө:

– Табип икенсе белгескә, баяғы дүртенсе кабинеттағы апайға, күренергә ҡушты. Ул тәжрибәле лә икән, эшенә лә намыҫлы ҡарай. Кейгән кейеме әллә ни тар булмаһа ла...

– М-дә-ә...

Тиҙҙән ирҙәр бер-бер артлы кабинетҡа инеп, йөрәктәрен тикшертеп сыҡтылар. Кардиограммалары нығ тулҡынлы булғандыр, моғайын: тулҡынланыуҙарынан.

Донъяла шулай алданып та ҡуйыла шул.

## ДОНЪЯ ДӨРӨҪЛӨГӨ

Интернатта ятып мәктәптә, дүртенсе синыфта, уҡып йөрөгәнемдә бирсәткәләремде урланылар. Юҡ, кеҫәмдән төшөп тә ҡалманы улар, берәй сисеп һалып торған еремдә үҙем, беҙҙең ауыл кешеләре әйтмешләй, һиңмайланып, ҡалдырып та китмәнем, тартып та алманылар, ә тап шулай – урланылар. Үҙем күреүен-күрмәнем, шулай ҙа сәлдергәндәренә тамсы ла шигем юҡ, күңелем шулай һиҙә. Ап-аҡ ҡына, йомшаҡ ҡына һарыҡ йөнөнән әсәйем бәйләп биргәйне, аҙна ла кейеп өлгөрмәнем.

Йәл, нығ йәл... Эш бында, мине дөрөҫ аңлағыҙ, ҡул туңыуҙа ғына ла түгел. Ҡыш буйы ялан ҡул йөрөргә лә мөмкинмен: ҡайһы бер наҙлы ҡыҙҙар ише өшөмһәк затмынмы ни? Әсәйемдең күҙенә күренеүе оят – бына нимә! Оят, сөнки әсәйем ошолай урланып, юғалтынып, төшөп ҡалып йөрөүҙе нығ яратмай, былай ярамағанлыҡты туҡып ҡына тора. Эшкинмәү тип атай ул быны. Ә инде үҙаллылыҡ күрһәтһәм, өйҙәге ниндәйҙер эште унан әйттермәйенсә, үҙем белеп, тәүәккәллек ҡылып башҡарып ҡуйһам, эй, ҡыуана!

Иртәгә – шәмбе, ауылға ялға ҡайта торған көн, бирсәткәһеҙ ҡайтып инһәм, ҡыуанмаҫ инде, колхоз эшенән бушамайынса, төн йоҡоларын йоҡламайынса бәйләп ултырған булғайны бит. Үткән шәмбе менән йәкшәмбе төнөндә, миңә икенсе көндө кейҙереп ебәрергә өлгөртәм тип, бөтөнләй керпек тә ҡаҡманы, таң менән эшкә шул килеш сығып китте. Әллә ниңә

аҡтан бәйләнә шул, алыҫтан уҡ ағарып, иғтибарҙы йәлеп итеп торҙо. Бүтән малайҙарҙыҡы, ана, ҡара йөндән, бирсәткә лә түгел инде уларҙыҡы, ябай бейәләй генә. Ҡара төҫтө әсәйем оҡшатмай торғайны, асыҡ төҫтәрҙе хуп күрҙе. Ҡара йөн аҡҡа ҡарағанда хөртөрәк, тиҙ туҙа, ти ҙә торғайны. Әсәйем алдында оят ҡына түгел, уның түгелгән күҙ нурҙарын да йәлләйем. Бәләкәс булһам да, быны аңлайым.

Нишләргә? Табырға кәрәк, башҡа юл юҡ. Кем генә алды икән?..

Әҙәм балаһында шик тигән нәмә бар бит инде, һәм ул, беләһегеҙ, буш ерҙә яралмай. Шиктең күҙгә күренмәгән берәй ебе була, һәм ул урланған бирсәткәләрем мәсьәләһендә лә, минеңсә, бар ине. Шул еп ошо интернат урынлашҡан ауыл менән беҙҙең ауыл араһында ултырған бәләкәй генә урмансылар ҡасабаһында йәшәүсе, шаршамбынан бирле интернатта күренмәүсе бер үҫмер малайға барып тоташты. Тоташты, сөнки шундайыраҡ холоҡло ул, йүнләп уҡымай ҙа, тәртипһеҙлеге менән уҡытыусыларҙы ла, тәрбиәселәрҙе лә зар илата.

Бирсәткәһеҙ ҡайтып булмаҫы көн кеүек асыҡ. Теге малай минән өс-дүрт йәшкә өлкән булһа ла, барып таптырырға тура килә инде. Йәшен тәғәйен генә белмәйем, сөнки ул бер синыфта икешәр йыл ултырып ҡына күтәрелә килә шикелле. Ғаиләһе лә, ишетеүемсә, шәптән түгел: ата-әсәһе, ағайҙары эскелек менән ныҡ мауыға, тинеләр.

Икенсе көнөнә, дәрестәр бөткәс, йәйәүләп ауылға ҡайтып киттек. Теге ҡасабаға еткәс, иптәштәремдән тороп ҡалдым. Ниңә ҡалыуымды төпсөнөп торманылар, мин дә ярҙам һораманым, яңғыҙым барырға хәл иттем – шик ебе бар ҙа, тик шик кенә бит әле ул, өҫтәүенә, нәҙек кенә еп, йыуан арҡан түгел, һиҙемләүем ысынға сыҡмаһа, кешене йөрөткән өсөн уңайһыҙ булыр ҙа.

Киттем бының өйөн һорашып, һуғышырға тура килһә тип, үҙемде эстән әҙерләй барам, хәүеф-мәүефте ситкәрәк ҡыуырға тырышам. Һыуыҡтан пальто еңдәре эсенә инеберәк торған яланғас ҡулдарымдың ирекһеҙҙән йоҙроҡҡа йомарланғанына иғтибар итәм.

Ана тора теге малай ихатаһында, утын ярып маташа. Аһ... әллә аҡ бирсәткә кейгән инде!? Шуларҙы, минекеләрҙе. Тик аҡ түгел инде улар хәҙер, һай, түгел: кеше әйбере йәлме ни! Күңелемдә бер яҡлап – шигемдең дөрөҫкә сығыуы өсөн шатлыҡ, икенсе яҡлап – ҡәҙерлегә генә кейә торған бирсәткәләремдең был көнгә ҡалыуы өсөн үкенес.

Туп-тура, ныҡ баҫып малайға табан атланым. Ҡиәфәтем шул хәтлем ышаныслы, ҡаһармандарса булғандыр инде – бурға ярты ауыҙ һүҙ ҙә әйтеп тороу кәрәкмәне: яҡынлауым менән, бирсәткәләремде сисә лә башланы. Уларҙы һонған ҡулынан ҡаты ғына итеп тартып алдым да, боролоп, килгән юлым буйлап атланым. Әйләнеп ҡараманым. Ҡараһам, ҡаһарманлығым кәмерҙәй тойолдо. Ә ул, минеңсә, миңә ҡарап тора, сөнки балта туҡылдағаны ишетелмәй. Был туҡылдамау уның яланғас ҡул ҡалыуынан түгел, ә минең менән асыҡ яуҙа еңелеүенән һымаҡ, һәр хәлдә мин шулай уйлайым.

Тормошта, кәрәк саҡта, ғәҙеллек даулағанда шулай үҙеңдекен ҡаты талап итеү ҙә фарыздыр. Шул саҡта, ниндәй генә ғәйрәтле булмаһын, ҡаршы яҡ сигенә. Донъяның дөрөҫлөгө шул.

Рамаҙан
ӨМӨТБАЕВ

# ИРӘНДЕКТЕҢ КҮКҺЕЛ ТОМАНЫ*

## Икенсе бүлек

1

Алмабикә әбей, ҡарыуы ҡайтып, аҡ түшәп күҙҙәре томанлана башлағас, ҡалала йәшәгән ҡыҙына күсеп китергә уйланы. Эй, уның да өс иргә торорлоҡ, янып торған саҡтары бар ине!

...Ул бынан утыҙ-ҡырҡ саҡрым алыҫлыҡта, Ирәндек ашаһында ятҡан Билән ауылында колхоз мәктәбенең бишенсе синыфын ғына тамамлағайны. Алмабикәнең атаһы, йәне-тәне, бар булмышы менән дингә бирелгән Уйылдан ҡарт:

«Биш синыф бөтөп, күҙе ҡағыҙ танырлыҡ булғас, ҡыҙ балаға шул еткән! Башын аҙҙырып, ниңә ауыл ҡыҙына артыҡ ғилем? Уның урыны – түрбашта, ҡашығаяҡ араһында, – тине лә ҡыш өҫтөнән уны мәктәптән ауылға алып ҡайтты. – Ана, ҡустыһы уҡыр – үҙе ир бала, Алмабикәгә ҡарағанда отҡорораҡ та, етеһигеҙ йәшендә дүрт ғәмәл әрәхмәтикәңде яттан сығарып ултыра. Үҙемә оҡшаған, мин дә мәҙрәсәлә шәп шәкерт инем»...

Ләкин ситтә бер аҙ белем алыу ғына түгел, пионерға ла инеп ҡайтҡан үткер ҡыҙҙы электән йәшәп килгән ғаилә мөнәсәбәттәре лә, атаһының дин ҡоршауы ла тотоп тора алманы. Дәрте уны ауыл клубына, йәштәр араһына тартып торҙо. Бер-ике тапҡыр атаһы ҡайыш сыбыртҡы менән «тәрбиәләргә» маташып ҡараһа ла, артыҡ эш ҡыйрата алманы. Ауылдағы комсомол, пионер ойошмаларының үҫә барған тәьҫире ҡыҙға көслөрәк тә, йоғонтолораҡ та булып сыҡты. «Алмабикәнең атаһы боронғоно ҡыуа, ҡыҙын дин рухында тәрбиәләй, клубҡа йөрөүҙән тыя, урамға ла сығармай хатта» тигән хәбәр башта комсомол ойошмаһына, ә унан ауыл Советына ла барып етте. Шура рәйесе Ишбирҙин Уйылдан ҡартты кәнсәгә саҡырып, һабаҡ уҡытып, ныҡ ҡына киҫәтеп сығарҙы.

Баштараҡ иптәш ҡыҙҙары уларға кереп: «Сәғилә еңгә, Алмабикәне беҙгә йоҡлатырға ебәрегеҙ әле», – тип һорап алып сығырҙар ине.

Ләкин Алмабикәнең ата-әсәһе аҙаҡтан был ҡыҙҙарҙың алдан һөйләшеп ҡуйған хәйлә икәнен төшөнөп алды. Ғәҙәттә, Алмабикә артынан уның беренсе синыфта уҡып йөрөгән ҡустыһы Рәжәпте эйәрттеләр. Өйҙән сығыу менән башта улар клубҡа йүнәлә, киске уйында уйнап туйғас ҡына күрше ҡыҙҙарға йоҡларға

*Аҙағы. Башы 8-се һанда.

керәләр. Малай был турала ата-әсәләренә ләм-мим, бер нәмә лә һөйләмәй. Рәжәптең үҙенә лә оҡшай апайҙарҙың шуҡлыҡтары. Беренсенән, ул апаларына эйәреп клубҡа бара, «Наза», «Күрше», «Хаттар» һәм башҡа ҡыҙыҡлы уйындар күреп ҡайта, икенсенән, клубҡа Рәжәп ише малайҙарҙы индермәйҙәр бит. Мәктәптә тәнәфес ваҡытында ул тиҫтерҙәре араһында ғорурлыҡ менән маҡтанып та ала. Шунан һуң Рәжәп ата-әсәһенә нишләп ләпелдәп, ғәйбәт һатып йөрөһөн? Атаһы, бигерәк тә әсәһе күпме генә төпсөнөп ҡарамаһындар, ул һәр саҡ:

– Юҡ, улар бер ҡайҙа ла барманы, тик Хәтирә апайҙарҙа ғына ултырҙылар. Кис әкиәт һөйләнеләр, «Һәпәләк» уйнанылар, – тип яуап ҡайтара.

Аталары тәфтиш алған саҡта Алмабикә, күҙен дә йоммай, ҡустыһына ҡарап тора. Рәжәп тотлоҡмай яуап бирһә, йылмайып эсенән рәхмәт уҡый. Ләкин, тоҡ эсендә беҙ оҙаҡ ята алмаған кеүек, йәштәрҙең мутлыҡтары тора-бара барыбер асыла. Быға үҙҙәре ғәйепле булып сыға.

Ауыл уҡытыусыһы Утарбаев Әхмәҙулла колхоз йәштәре менән ауыл клубында ҡуйыу өсөн Дауыт Юлтыйҙың «Карағол» пьесаһын әҙерләй. Уны ҡуйыр көндәре яҡынлашҡас, уҡытыусы ат егә лә, йәштәрҙе ултыртып, ауыл буйлап спектакль өсөн кәрәкле йыһаздар йыйырға сыға.

Арба Уйылдан ҡарт өйөнә килеп туҡтаны. Әхмәҙулла һәм унының артынан эйәргән ауыл егеттәре өйҙөң ишеген ҡаҡты. Уйылдан менән Сәғилә аптырашҡа ҡалды, сөнки уларға кеше бик һирәк һуғыла ине. Юл башлап алдан килгән Әхмәҙулла ишектән башын тығып:

– Инергә рөхсәтме? – тип һораны.

Ғүмерҙә былар өйөнә аяҡ баҫмаған ауыл уҡытыусыһының кеше эйәртеп, арбаларына төрлө йорт йыһаздары тейәп килеп инеүҙәре хужаны шөрләтте. «Әллә былар яңынан раскулачить итеп йөрөйҙәрме?»,– тип уйланы ҡарт, һәм онотолоп та өлгөрмәгән 30-сы йылдарҙағы күренештәр күҙ алдына килеп баҫты. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, уҡытыусы үҙ йомошон һөйләп бирҙе. Ҡурҡышынан бер ни аңламаған Уйылдан:

– Ул нәмәләрҙе баш-тояғы менән алып китәһегеҙме, әллә һатыуға сығараһығыҙмы? Әҙерәк әйберҙәрҙең әжерен бирмәҫһегеҙме һуң? – тип ҡалтыранған тауыш менән һаҡ ҡына һорап ҡуйҙы.

Ҡарттың хәлен аңлап алған Әхмәҙулла:

– Эй, ағай, ағай! Быларҙы клубта ҡуйыла торған спектакль өсөн ваҡытлыса ғына һорайбыҙ бит. Бер нисә көндән ул нәмәләрегеҙҙе «рәхмәт» әйтеп кире таратырбыҙ, – тине. Быны ишеткәс, ҡарттың күңеле бөтөнләй асылып китте.

– Сәғилә, ишеттеңме? Әхмәҙулла ҡусты был нәмәләрҙе үтескә генә һорай икән. Ә мин аңғармаҫтан әллә ниҙәр уйлап ҡуйҙым. Артыҡ нимәләрең бар? Барын да бирәйек. Клубта кәмит күрһәтәбеҙ, ти бит. Беҙҙә ни, донъя булғас, кәрәк-яраҡ байтаҡ ул. Ана, тула һуға торған көрөҫ, сүре, тоҙ төйә торған төйгөс менән киле, ҡул тирмәне. Әйҙә, ҡусты, йәнең теләгәнде ал, – тине йомартланып киткән ҡарт.

– Юҡ, беҙгә артығы кәрәкмәй! Бер сымылдырыҡ, иҙеү, селтәр булһа, шул еткән.

Сәғилә еңгәй кәрәкле әйберҙәрҙе сымылдырыҡҡа төрөп биргәс, Әхмәҙулла, рәхмәт әйтеп, сығырға йыйынды.

– Әхмәҙулла ҡустым, сабыр ит әле, һорай торған һөәлдәрем бар, – тип Уйылдан уҡытыусыны туҡтатты. – Бына һин бит, мөғәллим ҡустым, спитакль уйнайбыҙ, тип әйттең дә, нисек була һуң әле ул нәмәгеҙ? Уны, «Һәпәләк» уйнаған шикелле, күҙ бәйләп уйнайҙармы? – тип һораны ғүмерендә спектакль күрмәгән ҡарт.

– Улмы? Ул, ағай, театр ҡуйыу, тип атала. Спектаклде клубтың сәхнә өҫтөндә уйнайҙар, йәғни кешеләрҙең тормошон, тарихи ваҡиғаларҙы күрһәтәләр. Уны беҙ яҙыусы Дауыт Юлтый яҙған «Ҡарағол» тигән әҫәре буйынса уйнайбыҙ.

– Ә, шулай икән. Унда атыш буламы?

– Була. Мылтыҡтарҙы шуның өсөн йыйҙыҡ та.

– Уйынығыҙҙа кемдәр уйнай һуң?

– Үҙебеҙҙең ауыл йәштәре, комсомолдар. Һеҙҙең... Алмабикә лә ҡатнаша.

– Нисек инде ҡатнаша? Уны кем ҡатнаштыра унда?

– Бына ҡыҙыҡ! Беҙ ҡатнаштырабыҙ. Театрҙа ул урыҫ ҡыҙы Наташа булып уйнай. Тамашала унан башҡа ла ҡыҙҙар күп.

– Былай ҙа саҡ ҡына торған ҡыҙҙарҙың башын аҙҙыра икәнһегеҙ. Алмабикә ҡайһылай итеп урыҫ ҡыҙын уйнай ала, ти. Уны ҡайһы ике арала суҡындырып өлгөрҙөгөҙ?

– Ағай, һеҙҙең менән әрепләшеп торорға ваҡытыбыҙ юҡ. Хушығыҙ! Әгәр Алмабикәнең уйнағанын күрергә теләйһегеҙ икән, иртәнән һуңға, еңгәне ҡултыҡлап, клубҡа килегеҙ. Ана, сығып ҡарағыҙ – ҡоймағыҙға иғлан элгәнбеҙ, унда бөтәһе лә яҙылған.

Шулай итеп, ауыл уҡытыусыһы Уйылданға ҙур ҡайғы һалып сығып китте. Ҡарт тиреһенә һыйыша алмай асыуланды. Хәҙер үк Алмабикәне эҙләп табып, сәсенән һөйрәп, өйгә алып ҡайтҡыһы килде. Ләкин Уйылдандың ҡулы байтаҡ ҡыҫҡарғайны шул. Шура рәйесенең: «Уйылдан ағай, элекке ғөрөф-ғәҙәттәрҙе ҡыуа торған ваҡыттар үткән. Әгәр ҡыҙыңды өйөңә бикләп ҡуйып, берәй хәл була ҡалһа, ҡара уны, яуапҡа ла тарттырылыуың бар. Алмабикә хәҙер комсомол булырға тора, уларҙың заманаһы хәҙер, ә һинең йырың йырланған, ҡулыңды тыйып, ситтән генә ҡарап тор. Һиңә оят түгелме ни, үҙең беренсе комсомол инең бит!» – тип әйткәне ҡолаҡ төбөндә яңғыраған төҫлө булды.

Ауыл Советындағы күңелһеҙ һөйләшеүҙе иҫенә төшөрөп, ике ҡулы менән сикәләрен ҡыҫып, ҡарт байтаҡ ҡына уйланып ултырҙы, ләкин бер ниндәй ҙә фекергә килә алманы.

Билдәле, Алмабикәнең ата-әсәһе клубҡа барманы, ләкин ҡыҙҙарының сәхнәлә оҫта уйнауын күршеләре түкмәй-сәсмәй еткерҙе. Башын баҫып бер кем менән дә һөйләшмәй уфтанып йөрөгән ҡартын йәлләп, Сәғилә:

– Ярай, бабай, бушҡа ҡайғырып, кәйефеңде ҡырма, заманаһы шулай, Алмабикә үҙ-үҙен белмәй, аҙып йөрөргә башһыҙ бала түгел әле. Әйҙә, кеше араһында булһын, уйнап-көлөп үҙ ыңғайына йәшәргә күп ҡалмаған, ҡыҙ бала ата йортонда ҡунаҡ ҡына ул. Элек тә шулай ине, хәҙер ҙә бер ни үҙгәрмәне. Тик Хоҙай тәүфиҡен биреп, насар юлға төшөрмәһен. Аллаһы Тәғәләнән һораған бөтөн теләгем шул, – тип йыуатты.

Шулай итеп, яңылыҡ, яҙғы ташҡын кеүек, юл ярып ағыуын дауам итте, иҫке ғөрөф-ғәҙәттәр сигенде, барыбер яңылыҡҡа юл бирергә мәжбүр булды. Яңы буй еткергән Алмабикәгә әсәһе янында иркәләнеп, төшкә тиклем йоҡлап ятырға тура килмәне. Колхоз бригадиры уға көн һайын эш табып ҡына торҙо. Һуңғы арала Алмабикәне бесән күбәләргә ебәрә башланылар.

Алмабикәгә үҙенән ике тапҡыр оҙонораҡ өс саталы ағас һәнәк менән йәйге эҫелә көн буйы күбә күбәләүе, әлбиттә, еңел булманы. Ышыртҡы менән ышырып, тегендә-бында ташлап киткән бесән өйөмдәрен тағатып, күбә рәүешенә өйөү бик анһат түгел. Өҫтәүенә, күбәгә менеп, бер нисә тапҡыр тапап та төшөргә кәрәк, шунһыҙ яуған ямғыр үтеп серетеүе мөмкин. Ҡылған бесәндең күбәһен өйөп ҡуйыу күпкә еңел, сөнки үлән, кейеҙ баҫҡандағы кеүек, бер-береһенә йәбешә, ә ҡарағурай күбәләү ҙур оҫталыҡ талап итә. Уның бесәне шылғыр,

һәнәк асаларынан шыуып төшөп бара. Унан һуң, һәр көбәне аттың көсө етмәле итеп кенә эшләргә кәрәк, күбә артыҡ еңел дә булырға тейеш түгел. Быларҙың барыһын да Алмабикә ҡулдарын ҡабартып, ус тирәләре бер нисә тапҡыр һуйылып төшкәс кенә белде. Сибек кенә, ҡыйыуһыҙ Алмабикә бесән эшендә күҙгә күренеп нығына төштө. Элекке оялсанлығы ла ҡайҙалыр юғалды кеүек. Ололар менән ололарса, үҙ тиҫтерҙәре йәштәр менән йәштәрсә һөйләшергә өйрәнде. Ҡайһы бер егет ҡорона тулып килгән йәштәрҙең тура, сихри ҡараштарын да аңлай башланы.

Яҫтығы аҫтында йәшереп тотҡан көҙгө киҫәгенә лә йышыраҡ ҡарар булып китте Алмабикә. Муйыл кеүек дөм-ҡара күҙҙәрендә моңһоулыҡ беленде. Һут йыйып, бешеп килгән сейә кеүек ирендәре тулышты, тағы ла ҡыҙарҙы. Былай ҙа ҡара ҡашы ҡыйғасланып, тағы ла ҡуйыра төштө, биттәре лә алһыуланды.

Аҙымдарында ныҡлылыҡ, тәүәккәллек һиҙелә башланы. Кеше менән һөйләшкәндә лә Алмабикә элгәрге кеүек яулыҡ осон ауыҙына ҡабып, аяҡ баштарына ҡарап түгел, тура ҡарарға өйрәнде. Йөрәген элек таныш булмаған тынысһыҙлыҡ, ниндәйҙер оло ваҡиғаны түҙемһеҙлек менән көтөү тойғоһо солғап алды. Башы ҡайҙа тейһә, шунда вайымһыҙ йоҡлауҙар һирәгәйҙе, күҙенән йоҡо ҡасты, йоҡоһоҙ төндәрҙә тәмле хистәр, ҡанатлы хыялдар уны әллә ҡайҙарға алып китте.

...Бөгөн айлыҡ ашау исемлегенә ҡул ҡуйған саҡта бригада хисапсыһы Ибраһим менән ҡыуышта яңғыҙ тороп ҡалғас, йәш егеттең ҡуңыр күҙҙәрен тултырып, серле итеп ҡарауы Алмабикәнең йән тыныслығын осорҙо.

Буй-һыны менән башҡаларҙан берҙәй айырылып, өҫтөнә кейгән йәшел гимнастеркаһын яҫы ҡайыш менән һыға быуған, бөгөн үк ҡыҙылармеец булып бөтөп торған, киң яурынлы, ҡара ҡашлы, ҡара һөрөңкө йөҙлө Ибраһимдың мөләйем ҡарашы әле лә уны йылыта төҫлө тойолдо. Төндә Алмабикә таңға тиклем серем итмәй ҙә уйланып ятты. Һыҙылып таң атҡанда талғын ғына иҫкән ел ҡыуыш өҫтөнә ябылған кипкән бесәнде ҡыпшырҙатты, гүйә, аяҡ тауыштары ҡолағына салынды. Ибраһим да йоҡлай алмай йөрәкһенеп, ҡыуыш артында йөрөй төҫлө тойолдо. Әлдән-әле өргән ел унып моңһоуланып, уфтанып көрһөнөүен хәтерләтте. Алмабикәнең камзулын кейеп, йәһәт кенә Ибраһимдың янына йүгереп сыҡҡыһы, уның көнгә янған сикәһен йомшаҡ ҡына һыйпап, туйғанса һөйләшкеһе килде. Ләкин ундай баш етмәҫлек тыйнаҡһыҙлыҡты ул бер ҡасан да булдыра алмаҫ кеүек...

Ибраһим да төн йоҡоларынан яҙҙы. Олоғая, баҫыңҡыланған төҫлө тоя үҙен, өндәшмәүсән булып китте, етдилеге артты. Элек тә һүҙгә һаран, баҙнатһыҙ йәш егет бөтөнләй ҡаушап, юғалып ҡалды. Күҙен аса ла, йома ла, уның алдында тик Алмабикә күләгәһе генә күренде. Ҡулына эш барманы, бармаҡтары йүнләп ҡәләм тоталманы, ҡалтыраны. Башы һиңмайға әйләнде, кеше хәбәрен бөтөнләй ишетмәҫ булды. Аҡбәкәл исемле туры атына атланып, ер үлсәй торған таяғын яурынына элеп, оҙон көн буйы юғалып йөрөй башланы, кешеләрҙән ситләште.

Бригада ашнаҡсыһы, төртмә телле Камал еңгәһе: «Беҙҙең Ибраһимдың зиһенен Әүлиә зыяратында алып ҡалғандар, күрәһең», – тип хәбәр ҙә таратты. Кешеләр күпме генә баш ватмаһын, ике йәш йөрәктең бөрөләнә башлаған мөхәббәтен бер кем дә һиҙмәне, ҡыҙ менән егет тойғолары күптәр өсөн сер булып ҡалды, ләкин...

Иртәнге сәй ваҡытында Уйылдан ҡарттың өйөнә ялан аяҡ, ыштан-күлдәктән генә үрге остоң бер малайы килеп инде.

– Йә, егет, һин кем улы булаһың? Исемең кем? Нишләп сәләм бирмәйһең? – тип Уйылдан ҡыҙыҡһынып һорашырға тотондо.

Малай бер һүҙ ҙә әйтмәне, күрәһең, шулай ҡушылған булғандыр, бер-ике аҙым алға атланы ла ыштан бөрмәһенән ҡара еп менән тегелгән конверт сығарҙы.

– Ошо хатты Ибраһим ағайым һиңә бирергә ҡушты, – тип Алмабикәгә хат тоттороп, йүгереп сығып та китте.

Хатын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, былай ҙа алһыу йөҙөнә ҡапыл ҡан бәргән Алмабикә һул ҡулына йомарлап тотҡан хатты алъяпҡыс кеҫәһенә тыҡты. Оҙон керпектәрен сырт-сырт йомоп, нишләргә белмәй, һике ситенә боролоп ҡуйҙы. Ата менән әсә бер-береһенә ҡарашып алдылар. Өйҙө серле тынлыҡ баҫты. Бәләкәй Рәжәп кенә, бер нәмә лә булмаған кеүек, шәкәрен кетерҙәтә тешләп, һүрпелдәп сәй эсеүен дауам итте. Асыуы ҡабарып, камил талағы ташып ултырған Уйылдан ҡарт:

– Һүрпелдәтмә шул сәйеңде, тим! – тип аҡырҙы. Бер нәмә лә аңламаған Рәжәп сынаяғын батмусҡа ҡуйҙы ла атаһының уҫал күҙҙәренә ҡараны.

– Был хат биреп киткән малай кем балаһы булды әле? – тип Алмабикәнән һораны. Ҡыҙы яуап бирмәгәс, Рәжәпкә ҡараны.

– Был малайҙы мин беләм, ул икенсе класта уҡый, уның атаһы юҡ. Апайым бесән эшләгәндә шуларға труддин яҙған ағайҙар ҡашында торалар, – тип хаттың эйәһе тураһындағы тулы мәғлүмәтте Рәжәп атаһына һөйләп бирҙе.

– Шулай икән! Улай булғас, колхоз учетчигы Ибраһим була инде... Бар, Рәжәп, сығып тор әле. Урамда уйнап кил. – Шуны ғына көтөп торған Рәжәп һыпырылып сығып та тайҙы.

Уйылдан, аяғын салып ултырған килеш, уң ҡулын бөйөрөнә таянды. Һулаҡай ҡулы менән кәзә һаҡалының осон услап тотто ла һүҙгә кереште.

– Сәғилә, һин ни әйтерһең? «Ҡыҙыбыҙ бик отҡор күренә, шуны уҡытайыҡ, уҡытайыҡ!», – тип кем минең мейене ҡайнатты, һарыуға тейҙе? Йә, күрҙеңме инде уҡытыуыңдың касафатын? Был аҙғын биткә серкеү килтереп, ауылда кеше араһында әҙәм мәсхәрәһенә ҡалдыра бит беҙҙе! Клубта иһаһайлап, тубыҡ тиңенән сомтор күлдәк кейеп мәрйә һымаҡ йөрөүе етмәгән, хәҙер егеттәр менән хат алыша башлаған икән. Һәйбәт, бик һәйбәт! Ҡайһылай уңай, хатты ҡулына ғына килтереп тотторалар! Хөрриәт, ата-әсәнән дә оялыу юҡ, битһеҙ! – Уйылдан ҡарт ҡыҙғандан-ҡыҙҙы. – Бынан кире клубҡа ике аяғыңдың берен атлайһы булма! Ишеттеңме? Һин камсамулға яҙылған, тип ҡурҡып тормам. Һыу эскеһеҙ итеп һыҙырырмын!

Сәғилә ҡыҙын яҡларға тип бер-ике ауыҙ һүҙ ҡыҫтырғайны, бабай бөтөнләй шашты.

– Һин дә камсамулға яҙылдыңмы әллә? Сабып йөрөгән ҡыҙыңды яҡлап ултыраһың! Ҡыҙы әпсәһенә оҡшамай, уға арҡаланмай нишләһен!

– Һуң, бабай, үҙеңдең башың менән уйлап ҡара, Алмабикәнең ни ғәйебе бар? Ошондай һыу һөлөгө ише ҡыҙыңа ғашиҡ булмаҫ, хат яҙмаҫ булырмы? Бороңғоса атаң кемдең ҡолағын тешләтһә, шуны алып биреү заманы үткән бит хәҙер.

Әсәһенең йәлләү һүҙҙәренән күңеле тулған Алмабикә һулҡылдап иларға кереште. Уйылдан иҙәнгә төкөрҙө лә ишекте шарт ябып сығып китте. Сәғилә ире менән һөйләшеүҙе киске түшәккә ҡалдырҙы.

Бер нисә көндән ҡарттың асыуы һүрелә төштө. Хәҙер инде егет менән ҡыҙ араһында хат алышыу йышайҙы. Алмабикәнең хаттарын Рәжәп, ә Ибраһим яҙған хаттарҙы күрше Рәшит исемле малай ташыны. Уйылдан эстән һиҙеп йөрөһә лә, күрмәмешкә, белмәмешкә һалынды, сөнки хат яҙған егеттең тәрбиәле, эшсән, ата-әсәһе лә, үҙе лә донъя көтөүгә бик дәртле икәнлеген ситләтеп кенә булһа ла һорашып белде. Асылда был Уйылдандың иҫкелек өсөн булған көрәшендә сираттағы еңелеүе ине.

Бына иген йыйыу ваҡыты ла килеп етте. Түбән остоң бригадиры Ғәбделкәйүм Алмабикәне, лобогрейка артынан ригә егеп, иген ташыуға тәғәйенләне. Ул лобогрейщиктар этеп төшөрөп ҡалдырып киткән, ҡояшта кибеп өлгөргән яҫмаларҙы ригә менән ташып торҙо, ауылдың ғәйрәтле ир-аты уны ҡыш миҙгелендә һуғыу өсөн эҫкерткә һалды, сөнки колхоздың берҙән-бер ат молотилкаһы игенде һуғып өлгөртә алманы.

Иген йыйыу осоронда ла Ибраһим колхозда хисапсы булып эшләне. Ибраһим менән Алмабикәнең үҙ-ара мөхәббәте тураһында ауыл йәштәре бер ғауым тел сарлап, ғәйбәт һатып алды ла аҙаҡ тымды.

Көҙ байында хеҙмәт көнөнә бер аҙ иген алғас, колхозсыларҙың күңелдәре күтәрелде, дәрте артты. Ҡараңғы төшөп, клубта шәм алынғас, ауыл йәштәре шунда ағылды. Бөтә уйындарҙа ла Алмабикә Ибраһимынан бер ҡарыш та айырылманы. «Күрше» уйнағанда, Ибраһимдың усы ҡайыштан һуғылып күпме генә янһа ла, ул Алмабикәһен бер кемгә лә бирмәй ҡырталашты. Ҡайыш менән алдыра алмағас, сәйәси һорауҙар биреп, Ибраһимдың һенәһен ҡороттолар.

– Нимә була ВЛКСМ? Шуны оҙонайтып әйт! Нимә була НЭП? ВКП(б)-ның генераль секретары кем? Нимә ул ОСОВИАХИМ һәм МОПР? – Һорауҙар бер туҡтауһыҙ яуа ғына.

Шулай итеп, Алмабикә эргәһендә йәнәш ултырыуы Ибраһим өсөн бик еңел түгел. Уйнап туйғас, йәштәр түңәрәккә төшөп китә, Ибраһим таҡмаҡ башлап ебәрә:

*Наганыңдың ыстывулы*
*Ялтырап торъан саъы ла ялтырап торъан саъы.*
*СССР-ҙа капиталдың*
*Ҡалтырап торъан саъы ла ҡалтырап торъан саъы.*

Бер аҙ бейеп алғас:

– Дауай, мөхәббәт тураһында башла! – тип ҡысҡыра башлайҙар.

*Аяъындаъы ботинка*
*Шыъырҙып бирә тауыш.*
*Минән һиңә шул фатиха –*
*Һөйгәнең менән ҡауыш!*

1940 йылдың көҙөндә армиялағы срогын бөтөрөп, бер төркөм егеттәр ауылға ҡайтты. Уларҙың ҡайтыуы ауылға ниндәйҙер йәм өҫтәне, уның урамынан һалҡынса таҙа ел өргән кеүек булды. Клубта үҙен хужа тойоп, танау сөйөп, эрерәк сирттергән ҡайһы бер ауыл егеттәре ҡойроғон ҡыҫты. Клуб алдында, ситтән килгән зимагорҙарға эйәреп, аҡсаға кәрт һуғыу кеүек нәмәләр туҡтаны. Кисәге ҡыҙылармеецтар ауыл егеттәрен тиҙ генә домино, шашка уйнарға өйрәтте. Көҙгө көндөң һалҡын ғына булыуына ҡарамаҫтан, гимнастеркаларын һалып, ҡояшта янған тәнле, арҡан кеүек ишелгән мускуллы егеттәр клуб алдына турник эшләп ҡуйҙы. Уларҙың кемеһелер колхоз складынан ике ботло гер килтерҙе. Клубҡа инер алдынан һәр армеец үҙ һөнәрен, таһыллығын, көсөн күрһәтте. Мәсеткә инер алдынан мосолман өсөн тәһәрәт алыу фарыз булған кеүек, клубҡа инер алдынан йәштәргә көс күрһәтеү ҙа көндәлек тәртипкә әйләнде.

Ибраһим да йыш ҡына иртәрәк килеп, клубҡа инер алдынан спорт күнекмәләрен башҡара башланы. Ындай тамашаны ауыл малайҙары яҡын килмәй, ситтән генә күҙәтеп торҙо. Ҡайһы бер батырыраҡтары турникка аҫылынып, ике ботло гирҙе ике ҡул менән самалап та ҡараны. Кеше юҡта бәғзеләр клуб тирәһенә килеп, ҡайһы бер күнекмәләргә өйрәнә башланылар.

Ауыл ҡыҙҙары ла бер аҙ аҡыллана төштө. Ҡайһы бер ҡоро ҡыуыҡ, маҡтансыҡ егеттәрҙең баҙары бермә-бер осһоҙланды. Ҡыҙҙарҙың күбеһе «йөрөгән»дәрен ҡыҙылармеецтарға алмаштырырға ашыҡты. Алмабикә иһә Ибраһимына хыянат итмәне, улар тағы ла нығыраҡ дуҫлашты.

Ул йылы ҡар бик иртә, ноябрь башында уҡ, төштө. Малсылыҡтағы кешеләрҙән башҡа, бөтә йәштәр, ҡатын-ҡыҙ ашлыҡ һуғыу эшенә тотондо. Алтышар пар үгеҙ егеп, бер эҫкерттән икенсеһенә һөйрәтеп йөрөтөлгән «Коммунар» комбайны бер туҡтауһыҙ иген һуҡты. Бында ла Ибраһим менән Алмабикә бергә булды, уларға көндөң һыуыҡлығы ла, эштең ауырлығы ла һиҙелмәне.

Донъяның төрлө тарафтарында барған һуғыштың дары еҫен ҡышҡы ел-буран Ирәндек итәгенә һырынып ултырған башҡорт ауылдарына ла еткерҙе. МТС контораһының тәҙрәһе алдына эленгән «Правда» гәзите эргәһенән халыҡ өҙөлмәне. Бар үткән-ниткәне туҡтап, халыҡ-ара хәл менән танышты.

Гитлер илбаҫарҙары Көнбайыш Европалағы илдәрҙе баҫа башлағас, Ялан ауылында береһенән-береһе шомлораҡ хәбәрҙәр таралды. Тәүге Герман һуғышында булып ҡайтҡан кешеләр: «Немес яуыз инде ул. Улар ҡуҙғалһа, тигенгә булмаҫ», – тиеште. Ә ҡайһы берҙәре тағы ла тәрәнерәк фекер йөрөттө.

– Дүрт-биш көндә анауындай Әстриә ише хөкүмәтте баҫып алғас, ике аҙнала Аршау хәтле Аршауҙы юҡ иткәс, был герман бик көсәйгән, ахырыһы, – тип икеләнеп ҡуйыусылар ҙа юҡ түгел ине.

– Өйрәнгән яу һуғышмаға яҡшы, тигәндәй, был германына ғына ҡаршы тороп булыр ине ул, тик төрөк ҡуҙғалмаһын. Ул ҡуҙғалһа – эш харап. Заман ахыры етһә, төрөк яуға сығыр, тиелгән боронғо китапта. Беҙгә ҡаршы сығыр алдынан Гитлер башта әмеректәр, инглиздарҙы боғаҙынан алыр, шәт, – тине ҡайһылары, донъяны белгәндәре.

Тал сыбығылай етеп килгән улдарына ҡарап, ҡайһы бер әсәләр утлыҡҡа инеп, йәшерен генә яулыҡ остары менән күҙ йәштәрен һөрткөләп алды. Тик ауыл йәштәре генә һис бер ҡайғы-хәсрәт белмәй, вайымһыҙ уйнаҡлап йөрөгән тай-тулаҡ кеүек, уйнап-көлөп ғүмер итте. Кис булһа – клубҡа, киске уйындарға ашыҡты.

Элекке көн генә ауыл клубында «Әгәр иртәгә һуғыш булһа» тигән тауышлы фильм күрһәттеләр. Унда күрһәтелгән беҙҙең ғәскәр, танкылар, самолеттарға ҡаршы ниндәй дәүләтеңдең СССР-ға һөжүм итергә батырсылығы етһен! Беҙҙең ил сиге нығ, ул дошман өсөн мәңгегә бикле, һуғышырға тура килһә – беҙ мотлаҡ дошман ерендә һуғышасаҡбыҙ! Шундай ҡанатлы хыялдар менән янды ҡырҡма мыйыҡ ауыл йәштәре генә түгел, байтаҡ донъя күргән ағайҙар ҙа. Кисә армиянан ҡайтҡан егеттәр тураһында һөйләйһе лә юҡ. Ә ҡайһы бер ҡайнар маңлайлы сабырһыҙыраҡтары:

– Әгәр немес беҙгә ҡаршы һуғыш башлаһа, бер-ике аҙнала уның көлө күккә осасаҡ! Беҙ фронтҡа барып еткәнсә һуғыш бөтөп ҡуйһа, түшкә бер-ике орденмиҙал тағып та булмаҫ инде, – тип ҡайғырҙы.

Отпускыһын ауылда үткәргән офицер, батальон комиссары булып хеҙмәт иткән Йәноҙаҡов:

– Фин һуғышында ла ҡатнашып булмай, ошонда отпускыла йөрөп ҡалынды, һуғыш бөтөп тә ҡуйҙы. Юҡ инде! Был юлайы мине алдай алмаҫһығыҙ, – тип әйберҙәрен йәһәт кенә йыйып, Магнит яғына олаҡты.

Шулай ҙа ил өҫтөнә ниндәйҙер шом ятты. Бөтә тере ғәләмде көслө дауыл алдынан була торған серле һил ҡапланы. Ибраһимды һәм уның тиҫтер егеттәрен хәрби әҙерлек үтеү өсөн ике айлыҡ сборға саҡырҙылар.

– Алмабикә, бәғрем, ҡурҡма! Ниндәй генә ғәрәсәттә лә миңә бер ни ҙә булмаҫ. Мин барыбер иҫән ҡайтырмын. Тик һин беҙҙең мөхәббәткә тап төшөрмә! –

тине, Ибраһим, Алмабикәнең мөлдөрәгән күҙҙәренә ҡарап. Уны мөкиббән яратҡан, инде ун һигеҙен тултырған Алмабикә үҙенең антын Ибраһимды ҡыҫып ҡосаҡлап, ҡайнар ирендәре менән бихисап үбеп, мисәт баҫҡан кеүек, раҫлап ҡуйҙы.

Көҙөн генә һалдат хеҙмәтен тултырып ауылға ҡайтҡан егеттәр ҙә, ҡулдарына ус аяһындай военкомат повесткаларын тотоп, берәм-берәм ауылынан, туғандарынан айырылырға мәжбүр булды. 1941 йылдың май баштарына, ниндәйҙер үпкә сире табылған Әбүбәкирҙән башҡалары, оҙон, билдәһеҙ юл-сәфәргә сыҡты. Шуларҙың күбеһе төрлө тарафтарҙа ятып ҡалып, тыуған яҡтарға әйләнеп ҡайта алманы.

2

Кешеләрҙең генә түгел, ат башына ла төштө был ҡара ҡайғы. Ауылға районДан бер төркөм ветеринар ебәрелде. «Ҡыҙыл Ялан» колхозының өйөр-өйөр йылҡыһын ҡырҙан ҡыуып килтереп, МТФ-ның ялан кәртәһенә индерҙеләр. Бер яҡ ситтәрәк ултыртылған өҫтәлгә бәләкәй генә бүлексәләп эшләнгән йәшник менән колхоз аттарының паспорттарын ҡуйҙылар. Колхоз идараһының вәкиле һәр паспортты ҡулына алып, ат исемен ҡысҡырып әйтеп торҙо, ә йылҡы көтөүселәре, йүгән кейҙереү генә түгел, муйынына ғүмерҙә ҡороҡ һалынмаған аҫау ҡонан-дүнәндәрҙе тотоп, үҥәстәрен ҡылдан үрелгән сылбыр менән быуып, ҡуршылдап үрәпсегән, бөтә көсөнән ҡарышҡан аттарҙы комиссия алдына килтерә торҙо. Меҫкен аттар артҡы аяҡтарына үрә тороп, бер яҡ ҡабырғаларына ауҙы. Аҫҡы ирендәрен дерелдәтеп, хәлһеҙ генә кешнәнеләр, ярҙам һорап, аларған күҙҙәре менән кемгәлер мөрәжәғәт иткәндәй, эй, эҙләнделәр. Ләкин рәхимһеҙ кешеләр ҡулынан аттарҙың береһе лә ысҡына алманы. Ҡайһы бер баш бирмәгән аттарҙы шул уҡ ҡыл сылбыр менән кешәнләп, артҡы аяҡтарын тарттырып, муйындарына бәйләп килтерҙеләр. Комиссия ағзалары һәр бер аттың ерҙән алып муҥдаһына тиклем бейеклеген, күкрәгенән ҡойроҡ төбөнә тиклем буйын, шаушаҡ һөйәктәренең әйләнәһен, таҫмалы үлсәү менән күкрәк киҥлектәрен, аҙаҡтан йөрәк һулышын, үпкәһен, ашҡаҙанын тыҥлап ҡараны. Сорттарға бүлеп, баштарына нуҡта кейҙереп, үҙҙәренә тәғәйенләнгән кәртәләргә керетеп торҙолар. Аттарға ла хөрриәт бөттө: иркен далала уйнаҡлап йөрөү урынына тар кәртәлә. Ҡыҙыл Армияға алып китеүҙәрен көтә башланылар.

Ҡолмөхәмәт МТС-ының тракторҙарына ла сират етте. Бөтә ҡыр эштәрен туҡтатып, ун ике колхоздан килгән тракторҙарҙы контора алдына теҙеп ҡуйҙылар ҙа комиссия аша үткәрҙеләр. Былтыр ғына МТС-ҡа килгән ун ике НАТИ һәм ЧТЗ тракторсылары менән бергә армияға мобилизацияланды.

Ике ай ваҡыт үтеп тә китте, ләкин сборға саҡырылған егеттәрҙең береһе лә ауылға әйләнеп ҡайтманы – улар армия сафына баҫты. Еле артынан һуғыш үҙе лә оҙаҡ көттөрмәне... Хәҙер инде йәштәр генә түгел, донъяның байтаҡ әсеһенсөсөһөн татыған, бер нисә бала атаһы булған ир уртаһы ирҙәргә лә тирҙәре һеҥешкән түшәктәрен, һөйөклө ҡатындарын, бала-сағаларын, йәнтөйәген ҡалдырып китергә тура килде.

Баштараҡ «Бөгөн ауылдан фәләнсә кеше алынды» тигән хәбәр өй һайын һөйләнһә лә, тора-бара уға, һис тә күнегерлек түгел ҡайғыға ла, кеше әкренләп күнекте. «Ил өҫтөнә килгән афәтте бар ил менән күтәрмәй әмәл юҡ»,– тип ауыл халҡы үҙен тынысландырҙы. Элек йорт тирәһендә генә уралған ҡарттарға, күберәк кәртә-ҡурала, түрбашта мыштырҙаусы олораҡ йәштәге ҡатындарға колхоз йөгөн уртаға һалып, егелеп тартырға тура килде.

Алмабикә, унық ише ҡыҙҙар тураһында һөйләп тораһы ла юҡ. Улар ауыл

ҡарттары менән колхоздың төп таянысына әйләнде. Хәҙер Алмабикә үҙе өсөн генә яуап бирмәй, бөтә бригада өсөн яуаплы, сөнки уны армияға алынған Ғәбделкәйүм урынына бригадир итеп тәғәйенләнеләр. Намаҙын үҙ ваҡытында атҡарып, Алмабикәнең һәр аҙымын күҙәтеп, мөйөштә ултырған Уйылдан ҡартҡа ла кәсеп табылды. Ҡулына балта тоттороп, колхоз идараһы уға Ҡыҙыл Армия өсөн пар ат екмәле бричкалар эшләргә ҡушты. Һәр бер ҡул оҫтаһына арбаларҙы буяр өсөн берәр биҙрә йәшел бояу таратып бирҙеләр.

1941 йылдың сентябрь айында аҡ бинт менән уралған һулаҡай ҡулын муйынына аҫып, ауылға беренсе яралы һалдат ҡайтып төштө. Ул һуғыштан алда комсомол путевкаһы менән Днепродзержинск ҡалаһында төҙөлөп ятҡан металлургия комбинатына эшкә киткән Өмөтҡужин Мәхмүт ине. Үҙе тураһында бер кемгә лә асылып барманы. Аҙаҡ ҡына кешеләр уның, Ҡыҙыл Армия менән сигенеп, немецтар тылында ҡалыуын һәм нисектер фронт һыҙығы аша, төрлө михнәттәр күреп, беҙҙең яҡҡа үтә алғанын белде.

Ҡайтҡандың икенсе көнөндә уны «Ҡыҙыл Ялан» колхозына парторг итеп ҡуйҙылар. Украинала йәшәп арыу ғына шымарған, ике һүҙҙең береһендә украин-рус һүҙҙәрен ҡатыштырып һөйләгән Өмөтҡужиндың Алмабикәгә беренсе күреүҙә үк күҙе төштө. Колхоз рәйесе менән стеналаш ҡына бер бүлмәне яңы парторгҡа кабинет итеп бирҙеләр. Ике стенаға ике оҙон эскәмйә, өҫтәл, бер нисә ултырғыс, мөйөшкә тәпәш кенә һандыҡ ултырттылар, һәм уның эш урыны әҙер ҙә булды. Колхозда көндәлек эш муйындан булыуға ҡарамаҫтан, яңы парторг кисен, эш бөткәс, Алмабикәне көн һайын тигәндәй кабинетына саҡырыр булып китте. Уны ултырғысҡа ултырта ла, шинелен яурынына һалып, иҙән буйлап арҡырыға-буйға йөрөргә керешә. Шул арала серле итеп Алмабикәгә ҡараш ташлап ҡуя. Шунан парторг үҙенең һуғышта күрһәткән батырлыҡтары тураһында һөйләй башлай. Алмабикә, әҙәп һаҡлап, өндәшмәй тыңлап ултырған була. Шулай ҙа бер көн уның да түҙемлеге бөтөп ҡуйҙы.

– Иптәш парторг, һеҙ мине ни өсөн саҡырҙығыҙ? Йомошоғоҙҙо әйтегеҙ ҙә – тиҙерәк ҡайтайым, өйҙә лә эш күп,– тине Алмабикә.

– Саҡырыуым һиңә һаман да аңлайышлы түгелме ни? Миңә, әлбиттә, бер егет менән йөрөүең тураһында әйттеләр-әйтеүен. Тик ул ҡасан ҡайтыр әле, ҡайтһа әгәр... Үҙең аңлайһыңдыр, һуғыш ҡорбанһыҙ булмай... Һине онотоуы ла бик ихтимал.

– Минең Ибраһим барыбер ҡайтасаҡ. Мин уны көтөргә вәғәҙә бирҙем, һеҙ шуны аңлайһығыҙмы? Колхоз парторгына туҙға яҙмаған нәмәләр һөйләп ултырыуы бер ҙә килешмәй! – тине Алмабикә һәм урынынан тора башланы.

Мәхмүт өҫтәлдә янып ултырған ҡыуыҡһыҙ шәмде өрөп һүндерҙе лә, Алмабикәне биленән уң ҡулы менән ҡосаҡлап, битенән үбергә маташты. Һаҫыҡ тәмәке еҫе аңҡып торған парторгты Алмабикә бар көсөнә ике ҡулы менән артҡа этәрҙе. Мәхмүт дөбөр-шатыр стена буйындағы эскәмйәгә барып төштө...

Парторг Алмабикәне башҡа үҙенә кис саҡырманы. Ошо ваҡиғанан һуң уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәре тик рәсмигә, эш тураһында ғына һөйләшеүгә күсте. Парторг һәр мәсьәлә буйынса Алмабикә менән кәңәшләшергә ашыҡты, тегенеһе лә Мәхмүт Өмөтҡужин әйткәнен урынына еткереп үтәргә тырышты.

Парторг һөйләшкәндә һәр һүҙ аша тиерлек урыҫ-украин һүҙе ҡатыштырғанын сәйер күргән ауыл ҡыҙҙары уға таҡмаҡ сығарырға ла өлгөрҙө.

*Ауылында Мәхмүт эшен*
*Урыҫсанан башланы.*
*Әвсюк ашай башлаъайны,*
*Урыҫсаһын ташланы.*

Быны ишетеп ҡалған Алмабикә, бригадалағы ҡыҙҙарҙы йыйып, был таҡмаҡты әйтергә ҡәтғи тыйҙы.

– Башҡа ошо таҡмаҡты әйтәбеҙ тип ауыҙығыҙҙы асаһы булмағыҙ. Былай ҙа беҙ нимә ашаһаҡ, ул да шуны ашап кеше өҫтөндә тора. Бөтә белгәне – көнө-төнө эш. Нисәмә ҡарама – гел кеше араһында, үҙе килеп тороп әҙәмгә алсаҡ, башҡа уға тел тейҙерәһе булмағыҙ, – тип киҫәтеп ҡуйҙы бригадир. Ҡыҙҙар уны тыңланы.

1941 йылдың ҡәһәрле көҙө... Дошман ғәскәрҙәре туҡмала-туҡмала, ҡырыла-ҡырыла Мәскәү эргәһенә килеп етте. Ауылда төрлө хәбәрҙәр таралды. Күпселек халыҡ аптырашҡа ҡалды. Нисек инде ул, Ҡыҙыл Армия көсө тураһында күпме һөйләп, Гитлерҙы Мәскәүгә тиклем еткерҙек? Ҡайҙа һуң беҙҙең ғәскәр, танкылар, туптар, самолеттар? Ошо хәлде иптәш Сталин белмәйме ни? «Беҙҙең еңелеүебеҙ ҡотолғоһоҙ. Былай булғас, Гитлер барыбер Мәскәүҙе ала инде»,– тип һөйләп йөрөгәндәр ҙә булды.

Һәр ауылда хәрби эшкә уҡытыу пункттары асылды. Ун алты йәштән алып илле йәшкә тиклемге һуғышҡа алынмай ҡалған ир-зат иртәнге алтынан һигеҙгә тиклем тәүге хәрби әҙерлек үтте.

Һис көтмәгәндә октябрь башында бик иртә ҡалын ҡар төштө. Әле ярты тәҡәбелеһе лә йыйналмаған игенде ҡул салғыһы менән сабырға тура килде. Был мөһим эшкә бөтә салғы күтәрерлек кеше ылыҡтырылды. Сабылған игенде ҡыш бағйында һуғыу өсөн күбәләп, эҫкерттәргә һалдылар. Шулай итеп, дәһшәтле һуғыштың тәүге ҡышы башланды.

Алмабикәне ҡапыл колхоз идараһына саҡырҙылар. Тәмәке төтөнө менән ыҫланған кәнсәлә колхоз рәйесе Игебаев, парторг Өмөтҡужин, шура рәйесе Ишбирҙин, ауылдың үрге ос бригадиры сулаҡ Латиф, өҫтәлгә баштарын эйеп, ниҙер яҙып маташалар.

– Әйҙә, Алмабикә ҡарындаш, түрҙән үҙ, тип әйтер инем – иң түренә үҙем ултырып алғанмын. Анау бүкәнгә ултыр. Районда ағас ҡырҡыу заданиеһы килеп төштө. Урман ҡырҡырлыҡ кешеләребеҙ фронтҡа китеп бөткәс, быйыл ағас ҡырҡыуға план бирмәҫтәр, тип ышаныңҡырап йөрөлгәйне, былтырғынан икеләтә күберәк биреп ҡуйҙылар: ике мең бер йөҙ кубометр! Уны нисек ҡырҡмаҡ та нисек ташып бөтмәк кәрәк? – тип зарланып алды колхоз рәйесе һәм бер бит ташҡа баҫылған ҡағыҙҙы Алмабикәгә табан һуҙҙы. Ысынлап та, был «Ҡыҙыл Ялан» колхозына төшкән задание ине.

– Алмабикә ҡарындаш, ниңә уйға баттың? Был Ибраһим ҡустының хаты түгел, исполком заданиеһы. Йә, нишләйбеҙ? – тип һораны Игебаев.

«Ибраһим» тигәнде ишетеү менән, Алмабикәнең битенә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, ул бер аҙ ҡаушап та китте.

– Йә, Алмабикә, һиңә ни булды? Телеңдән яҙҙыңмы әллә?

– Әлләсе... – тигән булды ул, йоҡоһонан уянғандай.

– Бына һиңә, алдан һөйләштегеҙме әллә! Һин дә – «әлләсе», Латиф та – «әлләсе», мин дә район алдында «әлләсе» тип яуап бирһәм, нисек инде ул? Белореттағы домна мейесендә фронтҡа кәрәкле ҡоросто һеҙҙең «әлләсе» менән иретеп булмай бит. Уның өсөн ағас күмере кәрәк. Һуғышҡа киткән туғандарыбыҙ нисек ниместе еңергә тейеш? Ултыр яҡыныраҡ, урманға барырлыҡ кешеләрҙең исемлеген төҙөйбөҙ! – тип Игебаев та туҙынып алды.

– Ярай инде, бушҡа тоҡанмай тор, Игебаев ағай! Ул урман эшенән баш тартмай ҙаһа, – тип парторг Өмөтҡужин аптырап ҡалған бригадирға булышмаға ашыҡты.

Һәр ғаиләне айырым тикшерә-тикшерә, түбәнге бригаданан ҡырып-һепереп егерме биш кешенән исемлек төҙөнөләр. Тик малсылыҡта эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙарға ғына теймәнеләр. Бесән ташыусы ир-аттың һанын ҡап уртаға ҡыҫҡартып, дүрт ат урынына икешәрҙе генә ҡалдырҙылар.

– Сабир ағай, Алмабикәгә продуктыға исемлек төҙөп, кладауайға сығар! – Игебаев эргәһендә күҙелдереген танау ҡырына төшөрөп, счет төймәләрен шаҡ та шоҡ итеп тартып ултырған хисапсыға әмер бирҙе. – Һәр бер китә торған йән башына егерме бишәр ҡаҙаҡ арыш оно, бишәр ҡаҙаҡ ит, берәр ҡаҙаҡ май бирегеҙ.

Игебаев ҡарашын бригадирҙарға төбәне:

– Латиф, Алмабикә, китеүселәргә киҫәтеп ҡуйығыҙ, бирелгән аҙыҡ-әүҡәттең йәмғеһен дә үҙҙәре менән алып китһендәр. Өйҙә ҡалған әҙәм астан үлмәҫ, һөтҡатыҡ эсеп булһа ла көн күрер. Минең рөхсәттән тыш кеше ҡотортоп ҡайтып йөрөүсе булмаһын! Заданиены үтәмәйенсә ҡайтыу юҡ. Йә – задание, йә – төрмә! Алыҫ йөрөйһө юҡ, Белореттың үҙ төрмәһе бар. Ул бик ныҡ эшләнгән, ингәндә уның ишеге шар асыҡ, сығырға теләһәң – тар, балыҡсының мурҙаһы һымаҡ. Аңлашылдымы? – тип бригадирҙарға ҡараны.

– Аңлашыла. – Ике бригадир ҙа берҙәй яуап ҡайтарҙы.

– Икегеҙ ҙә китәһе кешеләр менән китәһегеҙ. Юлға, фатирға түләү өсөн аҡса яҙҙырып алығыҙ. Уны бик ҡыҫып тотоноғоҙ, һуңғы аҡсаны һеҙгә бирәм, Сабир ағайығыҙҙың кассаһында ярты тин көмөш тә ҡалмай, – Игебаев мөйөштәге тимер һандыҡҡа ҡарап ҡуйҙы. – Бер аҙна үткәс, мин барып китермен, аҙаҡ Ишбирҙин, Өмөтҡужин иптәштәр эшегеҙҙе тикшереп торор.

– Һеҙҙең һорауҙарығыҙ, әйтәһе һүҙегеҙ юҡмы? – Рәйес ҡырында ултырған башҡа етәкселәргә ымланы.

– Китәһе кешеләрҙең күбеһендә хөкүмәт алдында бурыстары бар. Ит, һөт, йөн заданиеһын үтәмәгән, сельхозналог, страховой налогты түләмәгәндәр күп. Китер алдынан силсәүиткә инеп, хисаплашып сыҡһындар. Йыл бөтөргә тора, мин уларҙы урман араһында эҙләп йөрөй алмайым, – тине шура рәйесе Ишбирҙин.

Парторг та һыңар ҡулын өҫтәлгә сүкей-сүкей урман әҙерләүҙең сәйәси әһәмиәте тураһында һүҙ һөйләргә керешкәйне, ҡарамаҡҡа колхоз эшен елкәһендә күп татыған председатель уны ҡырт киҫте.

– Ярай, иптәш парторг, был эштең әһәмиәтен беҙҙең халыҡ былай ҙа яҡшы аңлап тора. Урманға барғас, халыҡты йыйып, туйғанса һөйләрһең. Әле үпкәләмә, оҙаҡ һөйләнеп ултыра торған ваҡыт түгел, – тигәйне Игебаев, бер аҙ ҡыҙара төшкән Өмөтҡужин, ризалыҡ белдереп, баш ҡаҡты.

– Әйтергә онотҡанмын икән. Һәр бер подводаға бесән тейәгеҙ, әҙерәк һоло яҙҙырып алығыҙ. Бараһы урын яҡын түгел – ауылдан кәм тигәндә 160 саҡрым ара. Ана ҡайҙа, ҡырым-ҡатай яғында, – Игебаев туңған тәҙрә аша төньяҡҡа ҡулын һуҙып күрһәтте. – Ат арытып, кешеләрҙе саналарға ултыртмағыҙ, ат артынан йәйәү атлаһындар.

* * *

Өс көндән һуң саҡрымға яҡын һуҙылған ылау «Ҡыҙыл Ялан» колхозынан Ирәндек битләп Инйәргә табан юлға сыҡты. Ҡырҡты тауына менгәндә, ҡалын урмандарға етәрәк, ҡар ҡалынайҙы, сана юлынан ситкә бер аҙым боролорға ла әмәл ҡалманы. Ҡаршы килгән йөклө саналарҙы үткәреп ебәреүе ҙур бәләгә әйләнде, бәхәсһеҙ генә, дәғүәләшмәй айырылышып китеү булманы тиерлек. Ҡайһы ваҡыт мыҡтыраҡ, билдәренә балта ҡыҫтырған ирҙәрҙе алға, юл бирмәүселәргә ҡаршы сығарырға ла тура килде.

Осраған ауылдарҙа кире юлға аттар өсөн бесән ҡалдыра-ҡалдыра, дүрт көн ҡунып, бишенсе көндөң кисендә Алмабикә менән Латиф ылауҙары менән Инйәргә килеп етте. Барғанса саналары еңеләйә төштө, аҙыҡ-түлек, бесән байтаҡка кәмене. Был яҡта Ялан яғындағы кеүек ажғырып торған бурандар булмаһа ла, Урал тауҙары юлаусыларҙы сасҡау һыуығы менән ҡаршыланы. Өҫтәренә тире тун кейгәндәр артыҡ бирешмәне, ә иҫке көпө, ямаулы итек кейгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың күпселеге һыуыҡҡа сыҙамай шоҡорайып ҡатты, эңер һыуығында бер нисәһе бармаҡтарын туңдырып та алды. Урман әҙерләй торған урындары Инйәрҙә түгел, йылға буйлап тағы егерме биш саҡрым өҫтәрәк, түбәһе күккә олғашҡан ике тау араһында, булып сыҡты.

Ҡараңғы төшөп, күҙ бәйләнгәс кенә урман пунктын көскә эҙләп таптылар. Алмабикә менән Латиф ҡыйығына тиклем көрт һылап һалған начальник йортон табып, унан йәнәш кенә урынлашҡан баракта ҡунып сығырға рөхсәт алды. Ишектәрҙе ҡарҙан көрәп, юлсылар һыуыҡ, шөкәтһеҙ баракка саҡ инә алдылар. Алмабикә шырпы ҡабыҙып, ситтәрәк ултырған ике тимер мейесте тапты. Бер ҡулын икенсеһенә һуғып, өшөгән аяҡтарын шаҡылдатып торған ҡыҙҙарға ҡысҡырҙы:

– Ҡарағыҙ әле, ҡыҙҙар, бар икән донъяла яҡшы кешеләр. Кемдер әҙер утынды өйөп киткән икән. Хәтирә, Ғилмивафа, йәһәт кенә ут тоҡандырығыҙ, мин аттарҙы ҡарап киләм.

Ул сығыуға, ирҙәр боҫорап пары сығып торған аттарҙы туғарып, яҡындағы иҫке һарайға урынлаштырып маташалар ине. Ирҙәр эргәһендә мыштырҙап йөрөгән Латиф:

– Алмабикә ҡарындаш, һин бөтә ҡатын-ҡыҙҙы үҙеңә генә ал инде, ә мин ирҙәр менән булырмын. Бында, ауылдағы ише, бригадаларға бүленеп эш сыҡмаҫ. Бынауһы ирҙәр барагы булыр, ә тегенеһен, – ул ҡулы менән төртөп күрһәтте, – ҡатындар барагы итербеҙ, – тине.

– Беҙҙең ҡыҙҙар һин күрһәткән баракка урынлаша башланылар ҙа инде.

– Ярай, улайһа, яҡшы булған. Алмабикә ҡарындаш, ат егеп килгән ҡатындар бөгөн төндә аттарын ҡарарға сығып, ыҙалап йөрөмәһендәр. Ирҙәр ҡарар, беҙ шулай хәл ҡылдыҡ.

– Рәхмәт, Латиф ағай! – тип Алмабикә баракка йүгерҙе. Ул инеүгә, ике мейес тә ҡыҙа башлағайны инде. Уларҙың ут яҡтыһында баракта артыҡ иҫ китерлек нәмә юғы беленде. Бер яҡта – йышылмаған таҡтанан түшәлгән һике, төпкө яҡта – бер нисә кәштә, ҙур сөйҙәр менән арлы-бирле ҡағып ҡуйылған өҫтәл йораты. Ике тәҙрәне тыштан өҫкө рамына тиклем көрт баҫҡан. Ҡыҙҙар тышҡа сығып, ике биҙрә менән ҡар алып инеп, сәй ҡайнатырға тотондо.

Урман пункты начальнигы бараҡтарға инеп, берәр етеле ҡыуыҡһыҙ шәм, яртышар литр кәрәсин, икешәр көрәк ҡалдырып китте.

– Иртәгә аттарығыҙҙы мәкегә төшөрөп һуғарырһығыҙ. Иртәнге сәғәт туғыҙҙа барығыҙ ҙа эш урынында булырға тейешһегеҙ. Ҡайһы делянканан ағас ҡырҡырға, ағасты ҡайҙа ташып ауҙарырға – һеҙҙе оҙата барыусы ярҙамсым күрһәтер, – тине ул.

Өҫтөнә һырылған салбар, фуфайка кейгән, ҡып-ҡыҙыл битле, йыуантыҡ начальник ерән һаҡалын һыйпап торҙо ла, сығып барған еренән ишек төбөндә туҡтап:

– Һеҙҙең кемегеҙ элгәре ағас ҡырҡыу эшендә эшләгәне бар? – тип һораны.

Һикегә сыйырсыҡ балалары һымаҡ теҙелешеп ултырған ҡыҙҙарҙың береһе:

– Урман эшендә эшләү генә түгел, ғүмеребеҙҙә урманды тәүге күреүебеҙ. Ауылыбыҙҙан бер ҡайҙа сыҡҡаныбыҙ ҙа юҡ, беҙ – ялан кешеләре, – тип яуап бирҙе.

– Һуң һеҙ өйҙәрегеҙҙе нимә яғып йылытаһығыҙ? – тип ҡыҙыҡһынды начальник.

– Арыш һаламы, унан тиҙәк яғабыҙ, – тине баяғы ҡыҙ.

– Алай икән! Ни генә юҡ был донъяла? Өҫтөңә ауып барған ағас барҙа мейескә һалам яҡ, имеш. Иҫ-аҡылың китерлек!

Ҡарайған сөгөндә емеш бешереп, ҡыҙҙар сәй эсергә ултырҙылар. Өшөгән тәндәргә бер аҙ йылы йүгерҙе. Ҡыҙҙарҙың берәм-берәм теле асыла башланы.

– Алмабикә, беҙҙе бында председатель ағай нисә көнгә ебәрҙе?

– Үҙе килеп рөхсәт бирмәйенсә ҡуҙғалмаҫҡа ҡушты. Күпме ағас әҙерләргә икәнен мин һеҙгә әйттем бит инде, шуны ташып бөтмәйенсә ҡайтмайбыҙ. Ә ҡасып ҡайтҡандарҙы хөкөм яуабына тарттырасаҡтар, быны белеп ҡуйығыҙ!

– Хөкүмәттең ҡатын-ҡыҙҙы бикләй торған төрмәләре лә бар микән ни?

– Урман эшен ташлап, ҡасып ҡайтыусы ҡатындар өсөн махсус эшләткәндәр, ти.

– Ыстағафирулла тәүбә! Элек төрмәгә тик ат урлаған кешеләрҙе генә ултырталар ине.

– Юҡ, тим бит! Хәҙер һуғыш бара, закон шулай ҡаты булырға тейештер.

– Алмабикә, бында кистәрен йыйылып уйнай торған клуб юҡмы икән?

– Ҡыҙҙар, етте! Иртән яҡтыла ҡарарбыҙ, хәҙергә урындарығыҙҙы йәйеп, йоҡларға ятығыҙ. Утты һүндерәм!

Бер нисә минуттан юлда арманһыҙ булып килгән ҡатын-ҡыҙҙар йоҡоға сумды. Тик Алмабикәне генә ниңәлер йоҡо алманы. Күҙен йомоуы була – алдына һалдат кейемендә Ибраһимы баҫҡандай...

3

...Ибраһимдарҙың часын Ташкентҡа ике айлыҡ сборға ебәргәйнеләр. Ул бынан ике хат та ебәрә алды, береһен – туғандарына, икенсеһен – өҙөлөп яратҡан Алмабикәгә. Башҡа яҙырға бер ниндәй әмәле булманы. Иртәнге алтынан алып ҡараңғы төшкәнсә бөткөһөҙ күнекмәләр, хәрби әҙерлек, ҡорал өйрәнеү. Ике айҙан һуң уларҙы эшелондарға тейәп, көнбайышҡа алып киттеләр һәм июндең 25-ендә Белоруссия ерендә, бер ҙур ғына станцияла, бушаттылар. Ике төн серем дә итмәгән ҡыҙылармеецтарҙы, бер минут ял итергә лә бирмәй, йәйәүле маршта станциянан көнбайышҡа табан әйҙәләнеләр. Төн буйы этенә-төртөнә килгән роталар, таң һыҙылып атыуға, ҡалҡыулыҡ битендәге урман янында туҡтатылды.

– Ошо ҡалҡыулыҡҡа беҙ дошманды ебәрмәҫкә тейешбеҙ. Бик тиҙ, тулы профилле окоп ҡаҙырға! – тигән фарман бирелде.

Ас, хәлдәре бөткән һалдаттар, яурынбашын ышҡып өйкәгән шинель скаткаларын һалып, үҙҙәренә тәрәнерәк оя ҡаҙый башланы. Ибраһим да сапер көрәге менән ер ҡаҙырға тотондо. «Ярай әле, бында ер беҙҙәге кеүек ҡаты түгел икән. Әллә ниндәй торфлы, баҫҡанда ла һелкенеп тора», – тип уйлап алды ул. Башҡалар окоптарын бил тиңенә ҡаҙығанса, Ибраһимдың окобынан тик каскалы башы ғына күренә ине.

– Бына молодец икәнһең! Бындай окопта дошманды ҡаршы алырға була, – тип взвод командиры лейтенат Быстров уны маҡтап, дәртләндереп китте.

Бер аҙ торғас, һуғыш ғәрәсәте ҡупты. Алда ла, артта ла төшкән снарядтарҙың гөрһөлдәп шартлаған, мылтыҡ, пулемет атҡан ҡолаҡ тонорлоҡ туҡтауһыҙ тауыштары бөтә донъяны геүләтә. Бөтә тирәне, йәйге ҡылған яланында сыҡҡан үрт һымаҡ, ут ялҡыны ялмап алды. Быуаһын йырып ҡотороп аҡҡан йылға кеүек, был ут юлда осраған бөтә нәмәне вата-емерә көнсығышҡа табан ынтылды. Төркөм-төркөм немец самолеттары ла һалдаттар өҫтөнән шул уҡ яҡҡа тулҡын булып осто. Ибраһим бруствер яһап, уны кәҫ менән рәтләп ҡуйҙы.

Сумкаһындағы патрондарын барланы, мылтығының затвор, патроннигын тикшерҙе. Урман ситендә урынлашҡан батальон дошман һөжүменә ныҡлап әҙерләнә. Уңдан да, һулдан да беҙҙекеләрҙең оборона тотоуҙары һиҙелеп тора.

Бер аҙ арттараҡ туптарҙы урынлаштыра башланылар. Уларҙы күргәс, ҡыҙылармеецтарҙың эстәре бер аҙ йылынып, күңелдәре күтәрелде. Күп тә үтмәй, йәһәннәм ҡупҡан шикелле, немецтарҙың артиллерияһы, минометтары көслө ут асты. Минаның тауышы бигерәк тә ҡурҡыныс икән, осҡанда һыҙғырыуы йөрәккә үтә, уларҙы Ибраһимдың тәү ишетеүе ине. Бер аҙҙан улар оборона тотҡан тау битенә бер-береһенән артыҡ ҡалышмай, бер һыҙыкта тиерлек биш тәреле танк, алдындағы өйкөм-өйкөм ҡыуаҡлыҡтарҙы иҙә-иҙә, туҡтап ата-ата, беҙҙең һалдаттарға табан яҡынайҙы. Окопта ултырған һәр ҡыҙылармеецҡа улар тап уның үҙенә табан ғына килгән кеүек тойолдо. Танк моторҙарының ҡурҡыныс геүләүе йөрәктәрҙе ҡалтыратты. Күп һалдаттарҙың  был ҡот отҡос машиналарҙы тәүге күреүҙәре  шул.

Күп тә үтмәй, танкылары артына йәшеренеп, еңдәрен терһәктәренә ҡәҙәр төрөп, немец һалдаттары Ибраһимдар ҡаршыһында һөжүмгә ташланды. Окоптар буйынса «Командаһыҙ атмаҫҡа!» тигән әмер бирҙеләр. Бына шул ҡыҙарып ҡалҡып килгән ҡояшлы июнь иртәһендә Ибраһим дошмандар менән беренсе тапҡыр йөҙгә-йөҙ осрашты. Немецтар, автоматтарын эстәренә терәп, артыҡ иҫтәре китмәгән шикелле, танкылар артынан бер аҙым да ҡалмай, һаман яҡыная. Тоҫҡап атырлыҡ ара ҡалғас, беҙҙең 45-миллиметрлы пушкалар окоптар аша танкыларға ҡаршы ут асты. Немец танкылары, йөрөшөн бер тиҙләтеп, бер яйлатып, уңға-һулға боролоп, окоптарға табан атыуын дауам итеп, һаман алға шыуышты. Бына алда килгән танкының аҫтына снаряд килеп тейҙе, һәм ул һыңар гусеницаһы менән бер урында әйләнергә тотондо. Уның эсенән берәм-берәм сығып ҡаса башлаған немецтарҙы  беҙҙекеләр шунда уҡ атып дөмөктөрҙө. Уң яҡта килгән тағы бер танк яна башланы. Иң уртала барған танк кире боролдо, ҡалған икеһе лә һырт күрһәтте. Совет һалдаттарының берҙәм ут аҫтына эләккән немец һалдаттары ла артҡа сигенде.

Көн буйына дошман һөжүме шулай бер нисә мәртәбә ҡабатланды, ләкин батальон урынында ныҡ торҙо. Икенсе тәүлектең таңында ҡайҙалыр алыҫта, һул яҡтараҡ, ҡаты бәрелеш тауышы ишетелде. «Немецтар күрше полктың оборонаһын өҙөп, беҙҙең тылға сыҡҡан...» тигән ҡурҡыныс  хәбәр ишетелеп ҡалды. Атыштар тауышы сәғәт һайын алыҫлашҡандан-алыҫлашты.

Икенсе көндөң төнөндә Ибраһимдарҙың батальоны ҡамауҙа ҡалыуы дөрөҫләнде. Улар өсөн ғазаплы мәл башланды. Таңға табан беҙҙең роталар көнсығышҡа, һөжүм итеүсе немец ғәскәрҙәре артынан ҡуҙғалды. Көн яҡтыһында урман, ҡыуаҡлыҡтар, әҙәм буйы үҫкән арыш араһында йәшенеп, күҙәтеп яттылар. Оло юлға еткәс, ҡараңғы төшкәнен көтөргә булдылар, сөнки юл буйлап бер туҡтауһыҙ дошман машиналары, танкылары ағыла ине. Һуғыштың икенсе айы башланыуға, сигенеү юлында һалдаттарын ҡалдыра-ҡалдыра, утыҙ ғына кешегә ҡалған батальон Смоленск янында төнөн беҙҙең ғәскәрҙәргә килеп ҡушылды.

Ҡамауҙан сыҡҡан көндө, көслө атыш ҡупҡан саҡта, кемдер Ибраһимдың һулаҡайына  күҫәк менән һуҡҡандай тойолдо – ҡулының терһәктән түбән яғы аҫылынып төштө. Хәйер, был инде беҙҙең яҡҡа сыҡҡас булды. Ҡаны сорлап ятҡан йәрәхәтен медсанбатта тиҙ генә бәйләнеләр һәм, ентекле допрос алырға онотмай, тылға оҙаттылар. Мәскәүҙән яралылар менән тулы эшелон Куйбышев яғына боролдо кеүек. «Өфөгә генә борһалар ине. Шундағы госпиталдән хәбәр итә алһам, Алмабикә лә бер-ике көнгә килеп китер ине, бәлки»,– тип хыялланды Ибраһим. Тик уның көткәне булманы. Эшелонды Куйбышевҡа етмәҫ борон

ниндәйҙер станцияла тотҡандан һуң, Кинелдән туп-тура Ташкент яғына оҙаттылар.

Инйәргә сығарҙан алда ғына Алмабикәгә Ибраһимдан хат килеп төштө. «Алмабикә, бәғрем! Ташкенттан сәләм! Оҙаҡ яҙа алманым, сөнки ҡамауҙан сыҡҡанда йәрәхәтләндем. Ҡурҡма, хәҙер инде йәнселгән һөйәк уңала башланы. Һулаҡай ҡулым бер-ике сантиметрға ҡыҫҡарып ҡалды, ләкин немецтарҙы дөмөктөрөрлөк көсөм бар әле. Хәҙер һауығып киләм. Киләһе ғинуар баштарында мине фронтҡа оҙатырҙар инде. Тамам дошманды еңмәйенсә тороп, өйгә ҡайтып һине күреү бәхетенә ирешеп булмаҫ, ахыры. Көт, йәнем, мин ҡайтырмын. Ибраһим»,– тиелә ине уның шул хатында.

Һыуыҡ баракта, ҡараңғы түшәмгә текләп, Алмабикә Ибраһимдың ошо һуңғы хатын нисәнсе тапҡыр инде яттан уҡый, уның иҫән-һау ҡайтыуын әллә кемдәрҙән һорай. Таңға табан талығып, йоҡоға киткән Алмабикәне ниндәйҙер тимер зыңлауы уятты. Ул тиҙ генә кейенеп тышҡа сыҡты. Кисә уларҙы ҡаршы алған лесопункт начальнигы, барак мөйөшөнә ҡуйған рельсҡа тимер менән һуғып, урмансыларҙы уята икән. Баракка инеп, Алмабикә, хәрби кешеләрҙән ишетмешләй: «Подъем!», – тип ҡысҡырҙы.

Тимер мейестә йылдам ғына сәй ҡайнатып эскәс, «Ҡыҙыл Ялан» колхозсылары, урмандың ниндәйҙер шомло шаулауынан ҡурҡып, ҡолаҡтарын ҡайсылап торған аттарын егеп, йөк өҫтөнә һалып килтергән подсанкаларҙы тағып, эшкә ҡуҙғалды. Иң алда, юл башлап, урман пунктының техноругы төштө, уның артынан, иртән сасҡау һыуыкта ҡатҡан ҡарҙа сана шығырҙаған, күмәк аттар бышҡырған тауыштар сығарып, атлы ылау ҡуҙғалды. Ҡара урман менән ҡапланған бейек тау битләүенә килеп еткәс, техноруk атын туҡтатты ла, үҙ тирәһенә халыҡты йыйып, аңлата башланы:

– Һеҙ ошо участкала эшләргә тейешһегеҙ, бында, нигеҙҙә, ҡарағай менән ҡайын ағастары үҫә. Ҡайын ағасын икешәр метр, ҡарағай ағасын алты метр ярымдан ҡырҡырға тейешһегеҙ. Бына һеҙгә ике үлсәү, – техноруk санаһынан ике төҙ таяҡты һөйрәп сығарҙы. – Ләкин, подсанкаларығыҙға тейәүгә уңай булһын өсөн, ҡайынды дүрт метр итеп ҡырҡһағыҙ ҙа ярай, сөнки леспромхозда күмер яға торған ике төрлө соҡор бар. Унда Белорет өсөн күмер яғалар, ул шунда китә. Ә ҡарағай урманы Инйәр йылғаһы буйлап Өфөгә тиклем ағыҙыла. Аңлашылдымы?

– Аңлашылды, – тип яуапланы колхозсылар.

– Урманда ағас йығыу ул һеҙгә лобогрейка менән арыш сабыу түгел. Бында ҙур таһыллыҡ кәрәк. Иң башта ағасты, төптән һикһән сантиметр ҡалдырып, ҡарҙан таҙартырға кәрәк. Арҡыры бысҡыларығыҙ һәм балталарығыҙ барҙыр бит? – тип һораны тыңҡыш техноруk, һул ҡулының буш еңен аҡ тунының ҡайышы аҫтына тығып.

– Бар, алып килгәнбеҙ.

– Һәр саҡ иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ағастың йығыла торған яғын балтағыҙ менән киртеп сығаһығыҙ ҙа шунан арҡыры ҡул бысҡыһы менән шул тәңгәлдән ҡапма-ҡаршы бысаһығыҙ. Ағасығыҙ кирткән яҡҡа ауырға тейеш, ләкин уның ҡолай торған яғында бер кеше лә торорға тейеш түгел, ағасты ҡамыш тип уйламағыҙ, әгәр ағас аҫтында ҡалһағыҙ, гроб әҙерләргә генә ҡала.

– Ә гроб тигәне нимә ул?

– Нисек аңлатһаң да, бирнә һандығы түгел инде. Ана, бригадирығыҙ һеҙгә яҡшыраҡ аңлатыр, әгәр белһә, – тине техноруk. Бөтәһе лә эскерһеҙ күҙҙәрен тултырып Алмабикәгә ҡараны. – Шунан һуң, әгәр ағас ҡолағанда уның ос яғы икенсе ағасҡа барып бәрелһә, уның йыуан яғы пружина кеүек кире һуға. Уны һәр саҡ абайлап тороғоҙ. Малдарҙы ла ҡарағыҙ, шундай ваҡытта ағас төбөнә эләккән ат

та аяғында баҫып тора алмай – йығыла, хатта үлә. Шуға күрә ағас төбө ҡаршыһында тормауығыҙ хәйерле. Аңлашылдымы?

– Аңлашылды, – тиеште ҡурҡҡан ҡыҙҙар.

– Ағай, ағас ҡырҡыуҙың көндәлек заданиеһы нисә кубометр?

– Һеҙҙең ялан яғы кешеләр икәнлегегеҙҙе иҫкә алһаҡ, хәҙергә һәр бер кешегә өсәр кубометр ҡырҡырға задание ҡуябыҙ.

– Ә күпме һуң ул кубометр тигәнегеҙ?

– Йыҡҡан бүрәнәгеҙҙең оҙонлоғо – алты метр ярым, ә верхний отрубы, йәғни ос яғының диаметры ҡырҡ сантиметр булһа, шул бер кубометр тәшкил итә. Төшөндөгөҙмө? Үҙебеҙҙең стахановсылар лучкауай бысҡы менән көнөнә ун биш кубометрға тиклем ағас йыға. Һеҙгә ҡалғанда, һәр кемегеҙ өс кубометр ҡырҡып, 600 граммлыҡ икмәк карточкаһы, ә аттарығыҙға өс килолыҡ һоло талоны алалһағыҙ, бик тә шәп булыр, – технорук колхозсыларҙы ҡарашы менән урап сыҡты. – Әйҙәгеҙ, эшкә тотоноғоҙ!

Беренсе көндә «Ҡыҙыл Ялан» халҡы кеше башына кубометр ярымдан ағас ҡырҡты һәм берәр кубометрҙы ат менән кәрәк еренә ташып ҡуйҙы. Шулай ҙа көн бәлә-ҡазаһыҙ үтте.

Урмансылар баракарына ҡайтып йыйылды, күптәрҙең сәй эсергә лә хәлдәре юҡ ине. Шул көн өсөн кешеләргә – өсәр йөҙ грамм, аттарға берәр килограмм һоло бирелде. Аттарҙы туғарып тәрбиәләгәнсә тағы байтаҡ ваҡыт үтеп китте. Хәйер, үҙҙәре тәғәйенләп, дежур итеп баракта ҡалдырып киткән Хәтирә халыҡ ҡайтып инеүгә яҡты мәлдә хан заманынан йыуылмаған иҙәнде ҡырып йыуып, ауылдан алып килгән ҡул тирмәнендә бойҙай ярмаһы тартып, тулыр-тулмаҫ ике биҙрә бутҡа бешереп, сәй ҡайнатып көтөп торған. Ике урында ҡыуыҡлы шәм яна, эрһеҙ утын менән барак йылынған. Эштән ҡайтҡан ҡыҙҙарҙың күңелдәре шундуҡ күтәрелеп китте.

– Вәт, исмаһам, дежур! – Тап-таҙа йыйыштырылған баракты күргәс, ҡыҙҙар Хәтирәне маҡтай башланы.

– Алмабикә, бынан кире Хәтирәне генә дежурға ҡалдырайыҡ, уның заданиеһын күмәкләп үтәрбеҙ әле, – тиеште ҡыҙҙар.

– Бында көн һайын мейес яғып, аш бешереп ултырырға мин һикһән йәшлек әбейме ни? Бында бер үҙеңә толҡа табып булмай, уйландыра, ҡурҡыныс. Әйҙәгеҙ, сират менән дежурҙа торайыҡ. Шулай ғәзелерәк тә, дөрөҫөрәк тә булыр.

Алмабикә фанер сумаҙанынан ҡағыҙ сығарып, тәүге егерме көнгә тиҙ генә исемлек төҙөп алды.

– Нимә уйландыра? Әллә фронттағы Әүхәҙи уйландырамы? – тип шаяртып алды ҡыҙҙарҙың береһе.

– Эйе, һеҙҙән, шыҡырыҡ һайыҫҡандарҙан, йәшереп тораһым юҡ, бигерәк тә Әүхәҙи ныҡ уйландыра, – тине Хәтирә. Ҡыҙҙар шырҡ-шырҡ итеп көлөп ҡуйҙы.

– Шулайҙыр инде. Уф Алла, ғәйеп түгел, барыбыҙҙың да ҡайғы бер, – тип көрһөндө бер олораҡ ҡатын.

Хәтирә лесопункт начальнигынан алып, стенаға ҡаҙаҡлап элгән йыуынғыстан сырҡылдаша-сырҡылдаша йыуынып алдылар.

– Ҡайҙа һеҙҙең күҙегеҙ, хәйерселәр? Умывальник өҫтөндә нимә торғанын күрмәйһегеҙме? – тип ҡысҡырҙы Хәтирә. Шунда ғына ҡыҙҙар стенаға беркетелгән ус аяһындай көҙгө киҫәге күрҙеләр.

– Ыста! Бында, клуб сәхнәһенең артындағы шикелле, Хәтирә көҙгө элеп ҡуйған бит! – Берәм-берәм килеп, сасҡау һыуыҡта ҡыҙарып шешенгән биттәрен ҡарарға керештеләр.

– Ҡыҙҙар, етте! Иртәгә «Ҡарға бутҡаһы» түгел бит – эш көнө. Ашағыҙ ҙа, урынығыҙҙы йәйеп, ятыу яғын ҡарағыҙ! – тип ҡысҡырҙы Алмабикә.

Ике түңәрәккә бүленеп, ҡыҙҙар ике ҙур табаҡҡа һалынған бутҡаны ашарға ултырҙы. Аш алдында артыҡ ҡыҫтаусы булманы, сөнки бындағы халыҡ йәй буйы бергә эшләп тиреһе һеңешеп, бер-берeһенә өйрәнгән кешеләр ине. Ситтән быларҙы күҙәтеп ултырған Хәтирә:

– Ҡалдырмайса ашап бөтөрөгөҙ! Һауыт-һабаны йыйыштырып, йыйып ҡуйырға кәрәк! – тине.

– Ашаныҡ, эс һыҙлағанса ашаныҡ. Бутҡаң шул ҡәҙәре тәмле булған, Хоҙай һиңә бәрәкәт бирһен! – тип олораҡ ҡатындар теләк теләне.

– Хәҙер инде бутҡаға боронғоса хуш итәйекме ни? Әллә бутҡанан һуң һурпаһы ла бармы? Бында ниндәй хуш була, ти, мәүлит ашына саҡырмағанһығыҙҙыр бит! – тиеште йәшерәктәр.

– Әйҙәгеҙ, һәр кем үҙ ихтыярында булһын, белгәндәрен эшләһен , – тип дөйөм фекергә килделәр.

Күберәк кеше, ауыҙ ҡыбырҙатып, ниҙер уҡыған булып доға ҡылды. Теләгәндәр берәр кружка сәй эстеләр ҙә берәм-һәрәм урын йәйә башланылар. Барыһы ла Алмабикә ҡырына һырынырға тырышты. Уның серҙәше Хәтирә генә бер кемдән дә һорап торманы һәм иптәше янына урын йәйҙе.

– Йә, шәмде кем һүндерә? Иртәнсәк сәй ҡайнатыуҙы бөгөнгө дежурға ҡушабыҙ. Артабан да ошондай тәртип буласаҡ, – тип иғлан итте Алмабикә һәм башын күтәреп Хәтирәгә ҡараны.

Ныҡ арыған булыуҙарына ҡарамаҫтан, халыҡ тиҙ генә йоҡлап китә алманы. Мыштыр-мыштыр килеп һәр кем үҙенең хыял диңгеҙендә йөҙҙө. Ята торғас, кемдер:

– Ғилмивафа, һин әкиәт һөйләргә бик шәпһең, әйҙә, берәй ҡыҙыҡ нәмә һөйлә әле, йоҡлап китергә яҡшыраҡ булыр, – тине.

– Бында ниндәй әкиәт булһын, ти! Аулаҡ өйҙә ятабыҙмы ни? – тип ҡаршылашты тегеһе.

– Әйҙә инде, сырылдатма шуларҙы, һөйлә әкиәтеңде, – тине тиҙ генә йоҡлап китергә йыйынмаған Алмабикә.

– Ярар, әләйһә... Борон-борон заманда, кәзә команда, һайыҫҡан һалдат булған саҡта, турғай түрә булған саҡта, булған, ти, бер батшаның һыу һөлөгө шикелле, бер бите ай, икенсе бите ҡояш һымаҡ матур ҡыҙы. Уның һылыулығы шул тиклем булған, хатта уны күргәндә йәйәү кеше ятып, һыбай кеше аттан төшөп ҡарар булған. Уның матурлығы һәм аҡыллығы тураһындағы хәбәрҙәр ете диңгеҙ аша, Каф тауы артында ятҡан әллә ниндәй батшалыҡтарға мәғлүм булған, ти...

Әкиәттең уртаһына етер-етмәҫтән ҡыҙҙарҙың яртыһы тигәндәй әүем баҙарына китеп тә өлгөргәйне инде. Ғилмивафа һөйләп бөткәс, йоҡламай ятыусыларҙың береһе:

– Алмабикә апай, ысын мөхәббәт нисек була ул? – тип һораны.

– Мин быны ҡайҙан беләйем? Мөхәббәттең ниндәй булғанын яҙыусылар ғына белә. Күберәк китап уҡы, – тип яуапланы Алмабикә һәм иҫке юрған аҫтында йылмайып ҡуйҙы.

– Алмабикә апай, мөхәббәтең тураһында бер нәмә йәшермәй һөйлә әле. Һин Ибраһим ағайҙы нисек яраттың? Үбешкәнегеҙ булдымы? Әгәр һөйләһәң, биллаһи, иртәгәһен заданиены арттырып үтәйем.

– Ай-һай, шәбәйгәнһең икән! Беҙҙең мөхәббәт һиңә ғәйрәт өҫтәр, тиһеңме?

– Ғәйрәтен белмәйем, ләкин дәртте мотлаҡ өҫтәр. Иртәгә бөтә дәртемде ағас ҡырҡыуға һаласаҡмын!

– Быныһы бик яҡшы, ләкин мөхәббәт  ысын булғанда, йөрәк менән йөрәк

кенә һөйләшә. Тел менән аңлатырлыҡ һөйөшөү ул ысын мөхәббәт түгел, ҡыҙылы тиҙ уңа торған сепрәк ише генә була ул, – тине Алмабикә.

Мөхәббәтте яңы ғына төҫмөрләп, моронсалаған ҡыҙҙың бер ҡатлы һорауҙары Алмабикәне әллә ҡайҙарға – һағынған Ибраһим яғына алып китте. «Исмаһам, һуғышҡа инер алдынан бер сәғәткә генә бергә булаһы, уның моңһоу күҙҙәренә туйғанса ҡарайһы ине. Әгәр осрашырға форсат булһа, уның йылы, ҡуңыр шырау биттәрен һыйпай-һыйпай, керпек тә ҡаҡмай, уға ғына ҡарап ултырыр инем. Элек, әллә оялып, әллә ашҡынып, ирендәремдән үпмәй, битемдән бер генә үбеп алыр ине лә битен ситкә борор ине. Хәҙер үбешергә өйрәндеме икән?.. – Үҙ уйҙарынан ҡурҡып, һиҫкәнеп китте Алмабикә: – Кит, кит! Нишләп ул үҙен өҙөлөп көткән Алмабикәһенән башҡа кемделер үбеп йөрөргә тейеш. Юҡ, юҡ! Был ғүмерҙә лә булмаҫ! Саф мөхәббәткә Ибраһим бер ҡасан да хыянат итмәҫ...» Шундай уйҙар менән һыуыҡ юрған аҫтында Алмабикә күкрәгенә һыймай типкән йөрәген тынысландырҙы.

Ҡара таңдан тороп, «Ҡыҙыл Ялан» халҡы септә менән ябыуға ҡарамаҫтан шоҡорайып ҡатҡан аттарын егеп, урманға ҡуҙғалдылар. Делянкаға еткәндә, ҡара болот кеүек бөтә донъяны ҡаплап ятҡан урман араһына ҡояш төшөп, төрлө ҡиәфәттә күренгәндәй ҡышҡы бәҫ баҫып аҫҡа эйелгән ботаҡтар күҙгә салына башлағайны инде.

Үткән көндәге кеүек, ирҙәр һәм ир ҡорона яңы ғына етә башлаған үҫмерҙәр ағас ҡырҡты, ҡатын-ҡыҙ ташыу эшенә тәғәйенләнде. Ҡырҡҡан ағасты саналарға тейәп ебәреп торҙолар, ә эстакадала арҡанды бушатып, бүрәнәләрҙе һайғау менән этеп төшөрҙөләр.

Көн уртаһы яҡынлашып килгән мәл. Аҫтараҡ ниндәйҙер әсе, йән өҙгөс ҡатын-ҡыҙ тауышы ишетелде. Бөтә әҙәм эшен ташлап, көрткә бата-бата шул яҡҡа йүгерҙе. Кисә генә мөхәббәт тураһында әкиәт һөйләүҙе үтенгән Һандуғас исемле ҡыҙҙың ауыр бүрәнә аҫтында ятҡанын күрҙеләр. Ҡобараһы осоп, бите аҡ ҡағыҙға әйләнгән Һандуғас, ауыртыуҙан хәле бөтөп, күҙен йомған да ыңғыраша. Меҫкен ат та, көрткә ауып, тын ала алмай хырылдай. Кемдер йүгереп килеп, ҡамыттың тамаҡ бауын балта менән ҡырҡып ебәрҙе. Сананы күмәкләп күтәреп, ҡыҙҙы бүрәнә аҫтынан сығарҙылар. Уның ике аяғы ла тубыҡтан түбән һынған булып сыҡты. Салбарҙы тишеп сыҡҡан, йәнселгән аяҡ һөйәгенең остары ап-аҡ булып күренә... Уф! Һандуғасты толопҡа урап, ат менән Инйәр больницаһына оҙаттылар. Был Ялан ауылынан килгәндәрҙең урман әҙерләү хаҡына фиҙа ҡылған тәүге ҡорбаны ине.

Ул көндө урмансылар араһында ҡысҡырып һөйләшеүсе лә, көлөүсе лә булманы. Барыһы ла баштарын баҫып, кискә тиклем өндәшмәй генә эшләнеләр. Тик күпме генә тырышып ҡараһалар ҙа, ағас ҡырҡыу һәм ташыу планын илле проценттан арттыра алманылар. Урман пункты икмәкте, һолоно тәүге көндәге һымаҡ йомартланып торманы, башҡарған эш тәҡәбеле генә бирҙе.

Эштең өсөнсө көнөндә колхозда күбә тарта торған көрән бейәгә ағас ҡолап, һыртын һындырҙы. Йәш ағыҙып, үҙен тиреләп алған халыҡҡа мөлдөрәтеп, эсен бер күтәреп, бер төшөрөп, тыһылдап ятҡан малды шунда уҡ салдылар.

Кис эштән ҡайтҡас, һәр кеше башына, эс-ҡарынынан башҡа, бишәр ҡаҙаҡ ит бүлеп бирҙеләр. Ҡыҙҙар барагы үҙ өлөшөн һәр кешегә бүлеп торманы, үҙҙәренә тейешле итте күмәртәләп алды. Иттәрен ирҙәрҙән ваҡлатып алдылар ҙа кискегә ике биҙрәгә аш һалып ебәрҙеләр. Билдәле, эш атының артыҡ ҡаҙыһы булмай инде, шулай ҙа ике баракта ла йылҡы итенең таныш еҫе әллә ҡайҙарға бөркөлөп таралды.

Көндәр үтеп торҙо. Йылҡы ите бер аҙнаға ла барманы, ашалып та бөттө. Ике

баракта ла тоҡ төбө ныҡ ҡына һайыны, ә көн нормаһын бер мәртәбә лә үтәп булманы. Тағы ла бер бәлә өҫтәлде: көн һайын һыуыҡ тейҙереп, биш-алты кеше ауырып эшкә сыға алманы. Көн буйы кейем ташламай, тирләп эшләп йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙы бет йонсотто.

Ике аҙна үтеүгә үҙҙәре менән алып килгән аҙыҡ тамам бөттө. Бар халыҡ урман пункты начальнигының ҡулына ҡарап тороп ҡалды. Колхоз етәкселәренең вәғәҙәләре лә буш булып сыҡты, Ялан ауылынан урмансыларға бер кем дә килмәне. Ризаһыҙлыҡ белдергән тауыштар йышыраҡ ишетелә башланы. Ҡайһы бер ялҡауыраҡ кешеләр ҡасып китеү менән ҡурҡытты. Аптыраған Латиф, Алмабикә менән кәңәшләшеп, яҡындағы ауылдарға тамаҡ эҙләп сығып киткәйне, ләкин бик кисләтеп буш ҡул менән кире ҡайтты. Латиф атын туғарып урынлаштырҙы ла Алмабикәне ирҙәр барагына саҡырҙы.

– Инйәргә барып, ауыл халҡы менән һөйләшеп ҡайттым. Урмандан килтергән һәр йөк утын өсөн икешәр бот картуф бирергә ризалар. Яҡшыраҡ һөйләшкәндә, икмәген дә табырға булыр, бәлки, – тине Латиф, араҡы еҫе аңҡыған ауыҙын ситкә бороп. – Нишләйбеҙ һуң?

– Әлләсе, Латиф ағай, кәрәкмәгән һүҙ-хәбәр булмаҫмы икән?

– Кеше һүҙенән өркөп, халыҡты астан ҡырып бөтөрәйекме ни? Ярай, Алмабикә, бар, ҡыҙҙарға ҡайт. Мин берәй яйын табырмын әле, – тине Латиф һәм Алмабикәне барак ишегенә тиклем оҙатып ҡуйҙы.

Ауылдан үҙе менән алып ҡайтҡан бойҙай башаҡлы шешәне ҡуйынына тығып, Латиф лесопункттың ветеринарына китте. Иртәгәһен бригадир ҡулында ике атҡа бирелгән бюллетень бар ине. Латиф бригадаһынан ике кеше «сирхау» аттарҙы егеп Инйәргә китте. Өс көндән һуң, үҙҙәренең тамағы туйыуҙан тыш, улар дүрт тоҡ картуф, ике тоҡ бойҙай тейәп, баракка ҡайтып төштө. Быларҙың алып килгән болын күргәс, асығып бөткән халыҡтың ҡыуанысының сиге булманы. Шунда уҡ бүлеп биргән бойҙайҙан ҡурмас ҡыҙҙырып, талҡан төйә башланылар. Ике баракта ла биҙрә тултырып картуф бешерҙеләр.

Тамаҡтары туйғас, халыҡтың дәрте күтәрелде, күңеле асылды. Кемдер, араларынан үткерерәге, үҙе сығарған таҡмаҡты башлап та ебәрҙе:

*Ирем китте, ирем китте,*
*Ирем китте войнаға.*
*Ирем китте лә юғалды,*
*Алаһыңмы, ҡайнаға?*

Был йырҙы бик әҙәпһеҙ хисаплап, күңелдәрҙе йыуатырлығын табырға тырыштылар.

*Һары һандыҡ нигә кәрәк?*
*Һабын һалырға кәрәк.*
*Һағынһаң да, һарғайһаң да,*
*Сабыр итергә кәрәк.*

Алмабикә, һике йөҙлөгөнә ултырып, һуңғы хатында Ибраһимға яҙып ебәргән йырын ауыҙ эсенән генә, бик моңһоу итеп йырлап алды:

*Киткән юлдарыңа ҡарап*
*Көн дә көтәм – кис, иртән.*
*Ҡояш кеүек йылмайып*
*Ҡасан ҡайтырһың икән!*

Көн буйы ас йөрөгән, талығып эштән ҡайтҡан халыҡ йоҡларға ята башланы. Алмабикәнең ауырлыҡҡа ла, аслыҡҡа ла бешеккән йән әхирәте Хәтирәнең ике

ҡыҙ менән төндә ғәйеп булыуы бөтә халыҡты тетрәтте. Ике бригадир кәңәшләшеп, төндәрен алмашлап ике баракты ла ҡараңҡырап торорға хәл иттеләр. Был уйламаған ваҡиғанан һуң урмансыларҙың рухы төштө, күңелдәре мөшкөлләнде.

Ауылдан сығып китеүҙәренә бер ай үткәс, бесән, һоло, аҙыҡ тейәгән өс сана менән колхоз рәйесе Абдрахман Игебаев килеп төштө. Ләкин уның ҡапыл күктән төшкән кеүек пәйҙә булыуы бер кемде лә ҡыуандырманы, сөнки урмансылар туңып, асығып, бетләп, камил әкәл сиккә етеп, ауыл тарафына ҡарап, тәртәһен таярлап бөткәйне инде. Икенсе көнөнә Игебаев эш урынына килеп, кемдең нисек ҡыбырҙағанын ҡарап йөрөнә лә кисен халыҡты ҡыҙҙар барагында йыйҙы. Тимер мейес эргәһендәге түмәр өҫтөнә ултырған, байтаҡтан бирле һаҡал-мыйығын сиртмәгән рәйес битен һыйпап һүҙ башланы:

– Бында рәйес һәм сәркәтип һайларға кәрәкмәйҙер, замана ауыр. Бөтә совет халҡына ауыр ҡайғылар, һынауҙар төштө. Ҡулына ҡорал тоторҙай бөтә ир-ат бөгөнгө көндә фронтта дошман менән алыша. Йәшереп тормайым, һеҙҙең ҡайһы бер туғандар, таныштарығыҙ яуҙа батырҙарса һәләк булды.

– Хоҙайым, ағайым ғына булмаһа ярар ине!

– Атайым иҫән булһын ине! – тигән тауыштар ишетелеп ҡалды. Башҡалары, ҡулдарын күкрәктәренә ҡыҫып, Игебаевтан күҙҙәрен алмай ине. Ирҙәр баш баҫып, өндәшмәй генә тыңланы.

– Гитлер илбаҫарҙары Мәскәү эргәһенә үк килеп етте, ләкин беҙҙең Ҡыҙыл Армия уларҙы туҡтатып, һөжүмгә әҙерләнә.

– Ә иптәш Сталин ҡайҙа, ул ундағы хәлдәрҙе беләме? – тип Игебаевтың һүҙен бүлде ирҙәрҙән кемдер.

– Иптәш Сталин Мәскәүҙә һәм ул бөтә фронттар менән баш ҡаланан етәкселек итә. Бына шулай, ағай-эне. Ләкин совет халҡы төшөнкөлөккә бирелмәй, уның Ҡыҙыл Армияһының рухы ныҡ һәм күтәренке. Беҙ дошманды барыбер еңәсәкбеҙ. – Игебаев һәм бер аҙға һөйләүенән туҡтап, ҡарашы менән ауылдаштарын байҡап сыҡты. – Беҙҙең бында оҙаҡ килә алмауыбыҙҙың да сәбәптәре юҡ түгел. Беҙҙе урманға ебәрҙеләр ҙә оноттолар, тип уйламағыҙ. Һеҙҙе онотһаҡ та, ағас әҙерләү заданиеһын онottормайҙар, көн һайын һорап торалар. Силсәүит Ишбирҙин ағайығыҙ райкомға ғариза яҙып, Өфө эргәһендә һуғышҡа әҙерләнеп ятҡан Башҡорт атлы дивизияһына үҙе теләп китте. Парторг Өмөтҡужин да, йәрәхәтләнеп ҡайтыуына ҡарамаҫтан, шул дивизияға ебәреүҙе һорап районға сабыуылай.

– Беҙ ҙә Башҡорт дивизияһына китәбеҙ, беҙ кемдән кәм? Беҙҙе лә һуғыш курсында уҡыттылар. Беҙҙе лә дивизияға яҙығыҙ, – тиеште ирҙәр.

– Мин нишләп бында ҡатын-ҡыҙҙар араһында йөрөргә тейеш? Минең дә ғәскәргә алынырға ужытым сыҡмаған. Мин дә китәм. Бында астан йонсоп, беттән таланып ятҡансы, сәүит власы өсөн шаһит булыу мең тапҡыр хәйерлерәк! – тип ҡысҡырҙы, иҫән ҡулын һелтәп, бригадир Латиф.

– Ағай-эне! Мин бында һеҙҙе фронтҡа яҙыр өсөн килмәнем. Уның өсөн район военкоматы һәм уның комиссары Ғәфиев бар. Бар тиҫтерҙәрем фронтҡа алынған саҡта миңә һеҙҙең менән ултырыуы бик еңел тип уйлайһығыҙмы? Тылда ла эшләргә кеше, дошманды еңеп сығыу өсөн тимере, урманы, икмәге лә кәрәк, – Игебаев ауыр итеп көрһөндө лә һүҙен дауам итте. – Колхоз һеҙҙе урман эшенә ебәргәндә оло ышаныс бағланы. Берәй ай ныҡ ҡына эшләрһегеҙ ҙә дуғаларға ҡыҙыл таҫма тағып ауылға ҡайтырһығыҙ, тип уйлағайныҡ. Һеҙ бер айҙа пландың яртыһын ғына башҡарғанһығыҙ икән. Мин ярҙамға ауылдан кемде ебәрәйем? Бөтә ҡарап торған кешеләрем – һеҙ! Етмәһә, өс кешене ҡасырып

ебәргәнһегеҙ, бер кеше аяғын һындырып бальниста ята, бер аттың башына еттегеҙ... Был ни эш?

– Беҙ камил йонсоноҡ, бетләнек. Ана, ирҙәре янында балаларын ҡосаҡлап ултырған бисәләрҙе беҙгә алмашҡа ебәрегеҙ! Беҙ ҡайтабыҙ! Ирҙәребеҙ фронтта, балаларыбыҙ кеше ҡулында, үҙебеҙ бында этлек сигәбеҙ. Рөхсәт итмәһәгеҙ ҙә, барыбер ҡайтабыҙ! – Эй, ҡысҡырышты олораҡ ҡатындар.

– Минең өйҙә ҡалған ун ике йәшлек ҡыҙымдан башҡа, йорт-ҡураны ҡарарға бер кемем дә юҡ. Бында сыҡҡанда бер сана бесән алғайным, хәҙер үҙ малымдың ашарына бөткәндер инде, – тип зарланды иң оло һаналған Сәрбиямал.

Ләкин колхоз рәйесе, быларҙың зарҙарын тыңлап ултырырға кейефе юҡлығын белдереп, һөйләгәндәрҙе туҡтатты.

– Туҡтағыҙ әле, соролдашмағыҙ! Ҡайтыу тураһында ауыҙығыҙҙы ла асмағыҙ. Колхозға бирелгән планды еренә еткереп үтәмәйенсә һеҙгә ҡайтыу юҡ! Һуғыш ваҡыты, хәрби хәл икәнен оноттоғоҙмы ни? Әйттем бит, немец Мәскәү эргәһендә тора. Мин бында һеҙҙе ауылға алып ҡайтыр өсөн түгел, һеҙҙән хөкүмәт заданиеһын үтәүҙе талап итергә килдем. Көн һайын минең өҫтән төшмәгән райком бюроһына мин нимә әйтергә тейешмен? Урманға ебәрелгән ҡатындарҙың балалары илай, малдарының бесәне бөткән, тип әйтәйемме? Минән күҙ йәше түгел, төҙөлөштәр өсөн ағас, домналар өсөн күмер талап итәләр. Сурытып һөйләп тормайым: рөхсәтһеҙ ҡайтҡан кеше шунда уҡ хөкөмгә тарттырыласаҡ. Ауылда кемдең өйө ҡарауһыҙ, утын, бесәне бөткән икән – уныһы беҙҙең эш. Яҙа торған хаттарығыҙҙы, ебәрә торған нәмәгеҙҙе әҙерләгеҙ ҙә эшкә тотоноғоҙ. Аңлашылдымы?

Игебаев күҙ ҡарашы менән баракты урап сыҡты.

– Әй, онотоп ултырам... – Күн сумкаһын асып, исем-фамилияларын ҡысҡырып, ауылдан алып килгән өс мөйөшлө һалдат хаттарын, һабын менән йәбештерелгән, ҡара еп менән теген сығылған төрлө ҙурлыҡтағы конверттар тарата башланы.

Алмабикә бер түгел, ике һалдат хаты алды. Шатлығынан аяҡ быуындары бушап китте, ҡалтыранған ҡулдары менән, әйтерһең дә, йылы яҡтарҙан яраҡкан Ибраһимы осорған ҡыйғас аҡ ҡарлуғас тотҡан кеүек, хаттарҙы ярһып типкән күкрәгенә ҡыҫты. Һуғышта һәләк булыу тураһында рәсми «ҡара» хаттарҙы Игебаев алдан уҡ айырып, төпкө кеҫәһенә һалып ҡуйғайны. Ҡайғылы хәбәрҙе алдан көтөп торған кеүек, уның йөҙөнә мөлдөрәп туп-тура ҡарап торған бер нисә ҡатындың ҡарашын күреп, колхоз башлығы йөҙөн ситкә борҙо. Йөрәктәре әрнеп, күңелдәре һиҙенеп торған ауылдаш ҡатындарының күҙҙәренә моңһоу итеп ҡарап алды ла уларҙы һуңғы өмөтөнән мәхрүм итергә батырсылығы етмәне һәм ул «ҡара» хаттарҙы кире алып ҡайтты.

Шулай ҙа Игебаевтың килеп китеүенә халыҡтың кәйефе күтәрелде. Билбау аҫты нығынып алғас, кеше тауыштары ла, аттарҙың бышҡырыуҙары ла икенсе төрлөрәк, күңеллерәк ишетелде. Урмансыларҙың таһыллығы, дәрте артты, эш тә ырамланды. Башҡа уларға ауылдан бер кем дә килмәне.

4

Заданиеның дүрттән өс өлөшөн үтәп, тамам хәлдәре бөткән урмансылар февраль аҙаҡтарында ғына ауылға ҡайтып төштө. Ләкин ағас әҙерләү планын үтәмәгән өсөн колхоз рәйесе Игебаевҡа райком бюроһы ҡаты шелтә биреп өлгөргәйне инде. Заданиеның ауыр, үтәй алмаҫлыҡ булыуын иҫбатлап маташҡан өсөн уны фронтҡа ебәреү менән янанылар хатта.

Райком секретары өҫтәл төйөп хата эшләгәнен тиҙ төшөндө. Граждандар

һуғышы йылдарында көсләп Колчак армияһына мобилизацияланған, күп тә үтмәй Силәбе эргәһендә бер нисә иптәше менән ҡыҙылдар яғына сығып, аҡтарға ҡаршы батырҙарса һуғышҡан, фронттың утын да, һыуын да кискән Игебаев, секретарь кабинетынан сығыу менән, Ҡыҙыл Армияға алыуҙы һорап ғариза ҡалдырып ҡайтып китте.

Юлға сыҡҡандың дүртенсе көнөндә, фатирға төшкән һәр бер өйҙә һеркәләрен сәсә-сәсә, сана артынан йәйәүләп, аяҡтарын өйкәтеп, йығылыр хәлгә еткән урмансылар Яланға етте. Уларҙы һәр өй үҙенсә ҡаршы алды. Бер яҡтан, һәр ғаилә үҙ яҡындарының имен-аман ҡайтып төшөүенә ҡыуанһа, икенсе яҡтан, йорт аша тиерлек урмандан ҡайтыусыларҙы ҡайғы көттө. Фронттағы туғандарының ҡайһы берҙәренән үлем хәбәре, күптәрҙең яраланыу тураһында хаттары килеп торған. Һуғышҡа алынғандарҙан бер кеше лә ауылға ҡайтып күренмәгән әле.

Алмабикә атын туғарып, уны һыуытырға бәйләп ҡуйҙы ла ҡамыт-сбруйын соланға индерҙе. Буш һауыт-һаба тултырылған тоғон бер ҡулына, төргәккә уралған түшәк-юрғанын икенсе ҡулына тотоп, үҙ артынан киске һалҡындың аҡ күгелйем боҫон эйәртеп өйгә килеп инде. Сәғилә әбей сей талды тоҡандыра алмай, усаҡ алдында сүкәйеп, быҫҡыған утҡа өрөп маташа ине. Ҡыҙының йонсоу, һыуыҡтан ярылып бөткән битен, шырау ҡулдарын күргәс, әсә кеше иларға тотондо. Һикелә тарамыш еп менән иҫке быйманы табанлап ултырған Уйылдан, ҡарт урынынан тормай ғына:

– Әбей, ҡуйсәле! Өйөңдән үлек оҙатмайһың да баһа, – тине. – Йә, ҡыҙым, иҫән генә ҡайттыңмы?

– Әлегә һаумын...

– Иҫән-һау йөрөп, үҙ аяғың менән өйөңә ҡайтып еткәс, Аллаға шөкөр! Биләрәте әллә ҡайҙарҙа, Ҡырҡты ашаһында ята, Инйәр тигәне унан да ары булыр, шәт?

– Эйе, атай, ул Биләрәттән тағы ҡырҡ саҡрым самаһы арыраҡ.

Алмабикә сисенеп, кейемдәрен мейес эргәһендәге сөйгә элде лә, урындыҡ ситенә ултырып, өй эсен ҡарап сыҡты. Артыҡ үҙгәрештәр юҡ та кеүек ине. Ҡустыһы Рәжәптең бәрәс ояһы менән бәләкәй һике араһында стенаға һөйәп ултыртылған өҫтәл өҫтөндә ғәҙәттәгесә өйөлөп ятҡан китаптары күренмәгәс, Алмабикә һаҡ ҡына һорап ҡуйҙы:

– Рәжәп ҡайҙа?

– Балам, Рәжәп ҡустың юҡ...

Ҡурҡышынан ҡобараһы осҡан Алмабикә, йөрәге ҡабынып:

– Ҡайҙа һуң ул? Әллә бәлә-ҡазаға осраныбы? – тип ҡалтыранған тауыш менән һораны.

– Бәлә-ҡаза юғын-юҡ та, уны башҡа ауыл малайҙары менән Мәғниткә, ФЗОға, алып киттеләр. Өйҙән сығып китеүҙәренә бөгөн туғыҙынсы көн, бер ниндәй хәбәрҙәре юҡ. Нисек былдай көндә барып еткәндәрҙер? Береһенең дә ауылдан ситкә, Әбдрәштән ары сығып йөрөгәндәре юҡ, һау ғына йөрөһөндәр инде, – Сәғилә әбей еүешләнгән күҙҙәрен яулыҡ осо менән һөртөп алды.

Уйылдан эшен ҡуйып, ҡыҙына оҙаҡ ҡына текләп ултырҙы ла эстән генә: «Алмабикә бик тә йонсоу күренә, теләһә ҡайҙа ир-ат менән йөрөп, берәй алама хәлгә юлыҡтымы икән әллә?»,– тип уйлап алды.

– Ҡыҙым, бигерәк тә ябығып киткәнһең, – тигән булды ҡарт.

– Атай, йәһәннәм төбөндә ятҡан Инйәр ул бит ял йорто түгел, урман ҡырҡыу эше лә ҡорһаҡ һимертеп ятҡан урынға оҡшамаған шул. Былай ҡайтҡас та Аллаға шөкөр. Ана, беҙҙең менән киткән Һандуғас, аяғын һындырып, Инйәр больницында һаман ята. Әхирәтем Хәтирә, ауылдың ике ҡыҙын эйәртеп, сөмбәйгә

төшкән балдаҡ һымаҡ, эҙһеҙ ғәйеп булды. Уларҙың ҡайҙа икәнен һаман белеп булманы. Әллә тереләр, әллә юҡ...

– Әй, Алла! Тағы нимә күрәһеләребеҙ барҙыр? Был ҡәһәр һуҡҡан һуғыш ирҙәр башына ғына түгел, балаларға ла етте!

Уйылдан менән ҡыҫыр өйрә генә эсергә әҙерләнгән Сәғилә әбей йәһәт кенә соланға сығып, ҡыҙы ҡайтыуына һаҡлаған ике киҫәк һарыҡ һебәһен индереп, ҡайнарға йыйынған өйрә эсенә һалып ебәрҙе. Йылына башлаған Алмабикәнең тәне тәҡәтһеҙ ҡысыта башланы.

– Әсәй, минең алмашҡа кейә торған сәскә төшкән ҡыҙыл ситса күлдәгем ҡайҙа икән?

– Ана, мөйөштә, йыйылған кейеҙ араһына тәҫләп ҡуйғанмын.

Алмабикә йәһәт генә күлдәген, киндер салбарын тотоп, аяғына ҡата эләктереп соланға сыҡты. Урмандан кейеп ҡайтҡан кейемен сисеп, тиҙәк менән һыланған ситән стенаһына элде лә, кейем алмаштырып, өйгә инде. Ҡыҙы артынан күҙәтеп ултырған ата-әсә бер ни өндәшмәһәләр ҙә, эштең асылын аңлап алды.

Усаҡта бышылдап ятҡан тал ҡыҙа-ҡыҙа дөрләп яна башланы. Алмабикә бәләкәй бүкән алып усаҡ алдына ултырҙы һәм ҡыҙыл телдәрен һоноп яна башлаған ут ялҡынына ҡулдарын йылытты. Усаҡ яҡтыһында ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла үтеп йөрөгән әсәһенең күләгәһе ҡаршы стенала төрлө әкәмәт һүрәттәргә оҡшап сағылды. Өйҙөң эсен шомло тынлыҡ баҫты, тик ҡайҙалыр сыуал артында өй сиңерткәһенең өҙлөкһөҙ сырылдауы, епкә аҫып ҡуйған бесәнде ояла ғы ике бәрәстең керт-керт итеп ашаған тауыштары ғына ишетелде. Усаҡ алдында йылына башлаған Алмабикә бер-ике тапҡыр тертләп алды ла эйәген һалындырып ойоп та китте.

– Алмабикә, урындыҡтағы мендәргә башыңды терәп тор. Аш бешкәс уятырмын, – тип Сәғилә әбей ҡыҙын арҡаһынан һөйөп алды. Алмабикә быуындары талсыҡҡан аяҡтарына баҫты ла, тамам иҙрәп, һикеләгә яҫтыҡҡа ауҙы.

Ашъяулыҡ йәйеп аш ултыртҡас, Сәғилә ҡыҙын уятып ҡараны. Арҡаһынан һелкеткәйне, Алмабикә ауыҙ эсенән ниҙер мығырҙап йоҡлауын дауам итте. Ҙур ҡыйынлыҡ менән генә уята алдылар, ләкин Алмабикә бер-ике ҡалаҡ ғына ҡапты ла тағы урынына ауҙы.

Иртән тороуға Алмабикә кисә ашты ашау-ашамауын хәтерләй ҙә алманы. Иртәнге сәйҙән алда әсәһе йүгерә-атлай күршеләренең мунсаһын өлгөрттө. Алмабикәне мунсаның тәүге эҫеһенә ебәрҙеләр. Уның ҡайтыуына сәй ҡайнатып көтөп торған Сәғилә әбей, һутҡа туйып тирткән сейә кеүек ҡыҙарған ҡыҙын күреп:

– Бына, исмаһам, элекке ҡыҙыма оҡшап ҡалдың. Сәй ҡайнаған, яһап эсә тор, – тине лә ҡарты артынан мунсаға китте.

Алмабикә усаҡ ҡырында торған биҙрәнән ижау менән һыу алып, бер тынанан һемерҙе лә тағы урынына менеп ятты. Ҡарттар мунсанан ҡайтыуға һикелә һуҙылып ятҡан ҡыҙын күреп:

– Китсе, китсе, ҡыҙым! Ҡайҙан был бөтмәгән йоҡо? Ҡояш ҡалҡҡанына ни саҡты ғүмер үткән. Тор инде, балам! Берәй сир һуғылып ҡуйыр! – тип Сәғилә әбей, Алмабикәнең уй-байын тыңламай, сәйгә торғоҙҙо.

Былар өсәүләшеп сәйгә ултырғас ҡына, өйгә төймәләрен дә элмәй, кейгән кәзәкейенең итәктәрен ялпылдатып, тыны бөткән Фатима әбей – Хәтирәнең әсәһе килеп инде. Исәнләште лә, түргә үтергә баҙнат итмәй, ишек төбөндә тапанды. Нимәлер әйтергә уҡталғайны ла, күңеле тулып илап та ебәрҙе. Табынға ултыртҡас, бер аҙ тынысланған әбей йәштәре кибеп тә бөтмәгән күҙҙәрен Алмабикәгә төбәне.

– Йә, Алмабикә, үҙеңдең йәндәй күргән әхирәтеңде ҡайҙарҙа ҡалдырып киттең?

Алмабикә, уның сәйер ҡарашынан ҡурҡыпмы, урынынан ҡуҙғалып ҡуйҙы хатта. Шунан тыныс булырға тырышып, Хәтирәнең бер ниндәй ҙә бәлә-ҡазаға осрамағанын, хәлдәрҙең нисек булғанын һөйләп бирҙе. Фатима әбей тыңлаған саҡта Алмабикәнең күҙенә керпек тә ҡаҡмай текләп торҙо. Бер аҙ уйланып ултырғас:

– Ирҙәр үлһә, фронтҡа китеп, ил һаҡлап яуҙа үлә. Уларҙың ҡағыҙҙары, иптәштәренә хаттары килә. Ә минең Хәтирәм башы-тояғы менән ғәйеп булды. Нишләргә инде? – Фатима әбей күҙ йәштәрен һөртөп алды. – Аптырағас, Ҡотлобикә әбейҙән ноҡот һалдырып ҡарағайным. Тынысланырға, бер ҙә ҡайғырмаҫҡа ҡушты, Хәтирә үҙе лә, уның менән киткән иптәштәре лә хөкүмәт ҡулында, ҡарайып хат эҙҙәре лә төшөп тора, тип сығарҙы.

– Шулай булмай ни? Раҫ шулай! Бушҡа ғауға күтәреп, үҙ балаңды терелəй гүргә тығып йөрөмәле! Сабыр ит, Фатима! Хәтирә бер үҙе генә ғәйеп булһа – бер хәл, улар өс кеше бит. Барыһының да күҙе хәреф таный, ҡыҙың урыҫсаны ла яҡшы белә, юғала торған бала түгел, – Уйылдан хәленән килгәнсә Фатиманы тынысландырырға тырышты.

– Бына күрерһең, яр аҫтынан яу сыҡҡан кеүек, берәй ерҙән шарылдап килеп сығар әле Хәтирәң. Бушҡа хәсрәтләнмә! Бөгөн яҡшы төш күрҙем, изгелеген күрергә насип булһын!

– Амин, шулай булһын инде! Әгәр ки ошо юрауҙарың раҫ булһа, Сәғилә ҡорҙашбикә, берҙән-бер тыу һарығымды ҡорбан итеп салам, Алла бойорһа! – тип Фатима әбей, ҡапыл ҡараңғы болот аҫтынан сыҡҡан ҡояш кеүек, йөҙө яҡтырып ҡайтып китте.

Күлдәк итәктәрен ыштан бөрмәһенә ҡыҫтырып, атаһы колхоз эшенә киткәс, Алмабикә иҙән йыуырға кереште. Уйылдандың был мәсьәләлә үҙенең ҡарашы бар. Өйҙә саҡта «бысаҡ менән ҡырып, иҙән таҡталарын йоҡартаһығыҙ» тип янъял ҡуптара торған. Алмабикәнең йыуғысҡа тотоноуы булды, уны кәнсәгә саҡырттылар.

Төндә кәнсә ҡарауыллап, көндөҙ етәкселәрҙең йомош-юлы менән йөрөгән Асия әбей ярты юл үткәнсе, Алмабикә кәнсәгә барып та инде. Унда Игебаев, парторг Өмөтҡужин, Инйәрҙән ҡайтҡан бригадир Латиф, ферма мөдирҙәре йыйылғайны.

– Ә, Алмабикә ҡарындаш, әйҙә, әйҙә! Тап ваҡытында килдең, – тине Игебаев, башын ҡалҡытып.

Алмабикә мөйөштәге хан заманынан ҡалған, тимер менән көпләнгән ҙур һандыҡҡа ултырҙы. Уға ҡаршы стена ҡырындағы өҫтөнә ҡара тамып бөткән өҫтәл артында – күҙлеген танау киртләсенә төшөрөп кейгән колхоз счетоводы Сабир Ҡаҙаҡбаев. Ул уң ҡолағына ҡәләм ҡыҫтырған да счет төймәләрен шаҡ та шоҡ тарта, әйтерһең, һәр шаҡылдаған төймәһе аҫтынан колхоз кассаһына аҡса яуа. Асылда Сабир колхозсыларҙың хөкүмәткә күпме һалым бирәсәген хисаплап ултыра.

1941 йылдың көҙөндә, ҡапыл ҡар яуып китеү сәбәпле, колхоз ураҡ эштәрен ваҡытында тамамлай алманы. Яртыһынан күберәк эҫкерттәрҙә ултырып ҡалған игенде колхоз бөгөнгө көндә лә һуғыуын дауам итә. Биш-алты йөк булһа ла, көн һайын урындағы хөкүмәт складына план тултырыу иҫәбенә иген тапшырыла, уның биштән бер өлөшө аҙғы сәсеүгә орлоҡҡа һалына. Шуға күрә Сабир ағай әйтмәксе: колхоз шып-шыма «һыуәлләди» кредитор бурыстарға батҡан. Бер кемгә йүнләп һөйләшергә бирмәй счет төймәләрен шаҡылдатып ултырған Сабирға рәйестең йәне көйҙө.

– Сабир ағай, шул нәмәнде туктатып тор әле, хисапла-хисаплама, бурыстарыбыҙ кәмемәҫ. Кешеләргә һөйләшергә бирсе!

Счетын ҡабырғаһы менән ҡуйып, Сабир, күҙлеген төҙәтеп, тәүге күргән кеүек Игебаевҡа ҡараны.

– Әгәр мине эшләтергә уйлаһағыҙ, тәүҙә тейешле шарттар тыуҙырығыҙ. Иҫәп-хисап баш менән уйлап эшләнелә. Мин бында бынан кире эшләй алмайым. Волыста волостной писарь булып эшләгәндә лә үҙемдең айырым бүлмәм бар ине, ә хәҙер, «Ҡыҙыл Ялан» колхозының баш бухгалтеры була тороп, дөйөм бүлмә мөйөшөндә ултырам.

Кәнсәлә ултырғандар барыһы ла йылмайып ҡуйҙы, сөнки Ҡаҙаҡбаевтың ҡасандыр волыста писарь булып йөрөгәнен аҙым һайын маһайып һөйләүе ауылдың бар халҡына мәғлүм.

– Ҡуйсәле шул писарлегеңде! Ишеткәнһеңдер бит, Сабир ағай, беҙҙекеләр немецтарҙы Мәскәүҙән дүрт йөҙ саҡрымға көнбайышҡа ҡыуған. Шул мәлғүндәрҙе бөтөнләй дөмөктөрөп илебеҙҙән түкһәк, алғы бүлмәһе менән үҙеңә бынамын тигән кабинет ҡороп бирермен. Көндөҙ өҫтәл артында түгел, махсус сарлағыңда серем итерһең.

– Юҡ, уйындан ғәйре, эшләргә бер ниндәй ҙә рәт ҡалманы, – тине әҙерәк һыуына төшкән хисапсы. – Йыйылышып көн буйы ләстит һаталар шунда. Һеҙ бында тәмәкене туйғанса тартып, саф һауаға сығып китәһегеҙ, ә беҙ, – ул янында дебет яулыҡ ябынып ултырған колхоз секретары Селдәбикәгә ҡарап алды, – көн буйы тәмәке төтөнөн йотоп ултырабыҙ.

Йыйылған халыҡ бер аҙ тын ғына ултырҙы. Бригадир Латиф тәмәкеһен усына йәшерҙе. Счетовод һүҙен дауам итте:

– Колхозда эш бармаһа, беҙҙең дә эш ырамай. Февраль айы бөтөп килә, үткән йыл өсөн отчетты һаман райфоға тапшырып булмай. Бөгөн унан ревизор Ҡотлобулатов килергә тейеш. Шуны ҡайҙа урынлаштырып, нисек тәрбиә ҡылырға, тип баш ҡатырып ултырам.

– Үҙеңә алып ҡайтаһың инде. Фәхирә әбейгә әйтер инем, ул тоғон тотоп, шундуҡ кәнсәгә продукт һорарға килеп етәсәк. Мин уға ни бирәйем, колхоз келәтендә арыш ондан башҡа бер ни юҡ, – тине Игебаев.

– Ә миңә продукт кәрәкмәйме ни? – Үсегеп китте Сабир ағай.

– Ҡуйсәле! Еңгәмдең келәтендә һинән йәшереп йыйып ҡуйған төйөнсөгө барҙыр әле, – тип йылмайҙы Игебаев.

Рәйестең шаяртыуын ҡолағына ла элмәй, Ҡаҙаҡбаев һүҙен дауам итте:

– Әле мин тик декабрь айының документтарын контировать итеп ултырам, уларҙы баш кенәгәгә разноска яһайһы, счеттарға күсереп яҙаһы бар. Фермаларҙа ваҡытында йүнләп бухгалтерияға отчет бирерлек кеше ҡалманы. Ай аҙағы етһә, барыһы ла форма буйынса отчет төҙөп тормайынса, бер ҡосаҡ накладнойҙарҙы өҫтәлгә ауҙаралар ҙа китәләр. Ултыр шунан тәртипкә килтереп. Был ҡәһәрле һуғыштың касафаты теймәгән урын ҡалманы донъяла! – тип Сабир бер тынанан аһ-зарын һөйләп алды.

– Һин ҡайғыңды һөйләнең, беҙ шым ғына тыңлап ултырҙыҡ. Инде хәҙер минең сират, – тип Игебаев һүҙ башланы. – Тәүҙә Алмабикә ҡарындаш мәсьәләһен хәл итәйек әле.

«Әллә Сабир ағай беҙ Инйәрҙән йөрөп ҡайтҡансы урынынан ҡуҙғалманымы икән? Уның ҡолағы өҫтөнә ҡыҫтырып ҡуйған ҡәләмдән алып кейгән күлдәгенә, яҙып ултырған йыуан ручкаһына тиклем бер ниһе лә үҙгәрмәгән. Беҙ киткәндә лә ошо рәүешле ултырып ҡалғайны, беҙ айҙан ашыу йөрөп ҡайттыҡ – ул һаман, ҡатырып ҡуйған кеүек, шул хәлдә ултыра...»,– Алмабикә ҡапыл һиҫкәнеп, һандыҡ өҫтөндә турайып ултырҙы.

– Хәтереңдәлер, Алмабикә ҡарындаш, һеҙҙе Инйәргә ебәрерҙән алда идараға саҡырып, фронтҡа киткән Ғәбделкәйүм ағайың урынына һине түбән осҡа бригадир итеп тәсдиҡ иткәйнек. Бригадирлығың урманда ҡалды, тип уйлайһыңмы ни? Юҡ, бригадирлыҡ – ул мәңгелек йөкләмә. Бынан кире һине кеше ебәртеп өйөңдән алдырыу ғәҙәтен беҙгә лә, һиңә лә ташларға кәрәк. Асия апайың идараға бер кеше саҡырып килгәнсә ярты көн үтә. Иртәгәнән башлап бригадирҙар, ферма мөдирҙәре сәғәт етегә идарала булырға тейештәр. Беҙ урманда эшләп ятҡанда бындағылар колхоз эштәрен бөтөргән икән, тип уйламағыҙ. Киреһенсә, һеҙҙең ҡайтыуығыҙға күп эштәр әҙерләп торҙоҡ, сөнки үҙегеҙгә мәғлүм, ауылдың барса кешеләрен, йүнле аттарҙы сбруйы менән үҙегеҙ алып киттегеҙ. Ә хәҙер иртәгәнән башлап эшләнәсәк эштәрҙе яҙып ултырығыҙ йәки тыңлағыҙ.

Рәйес һүҙен ҡолағын ҡарпайтып тыңлап ултырған Сабир ағай счет төймәләрен тауышһыҙ ғына шылдырып тарта башланы. Ҡапыл Алмабикә аяғүрә баҫты ла, өҫтөнә кейгән иҫке бишмәттең сабыуҙарын аҫҡа тартып, ҡырт киҫте.

– Игебаев ағай! Һүҙегеҙҙе тыңламаным түгел, тыңланым! Урманда бригадир булып йөрөп ҡайттым, нимә ҡушаһығыҙ, барыһын да эшләргә ризамын, тик бригадир эшенә һәләтем дә, белемем дә юҡ. Ҡырҡ ата балаһы менән баш ҡатырғанса, ике ҡулыма бер эш бирегеҙ, күңелем тыныс булыр!

– Ишеттегеҙме, иптәштәр? Колхоз эше бер Игебаевҡа ғына кәрәк, күрәһең! Ҡалай анһат! Колхоздың эшенә төкөрҙө лә һандыҡ өҫтөнә барып та ултырҙы! – тип председатель Алмабикәгә уҫал ҡараш ташланы. – Ҡайһылай ҙа шәп! Шура рәйесе Ишбирҙин армияға китеп ҡотолдо, Латиф, бригадирлыҡ ауыр, тип еңел эш һорай, Алмабикә һырт биреп ҡасырға самалай... Йә, парторг иптәш, нишләйбеҙ?

Мәхмүт Өмөтҡужин билен быуған ҡайышы аҫтындағы сырышҡан гимнастеркаһын төҙәтеп алды ла, кәүҙәһен турайтып, һүҙгә кереште.

– Иптәш Сынбулатова, һуғыш ваҡытында ҡушҡан приказдан баш тартыу – енәйәт. Председателдең әйткән һүҙе партия ойошмаһы һәм ауыл Советы ҡарашына ла тап килә, – тип уның ҡырында ултырған шура рәйесенә һәм медпункт мөдире Ғәлиәкбәроваға ҡарап ҡуйҙы. – Бында артҡа сигенергә ярамай. Ризалыҡ биреп эш башларға кәрәк. Тейешле ярҙамды күрһәтербеҙ.

Алмабикә өндәшмәй ултырыуын дауам итте. Игебаев һаман да ныҡышты.

– Йә, көтәбеҙ, ни әйтәһең?

– Юҡ, мин эшләй алмайым. Бригадир булыу ҡатын-ҡыҙ эше түгел.

– Һуғыш ваҡытында һеҙҙең ҡулығыҙҙан һәммә нәмә лә килә. Ишеткәнһеңдер бит, тик ҡатын летчиктарҙан ғына торған полк ойошторғандар, командиры Марина Раскова тигән йәш ҡатын, тиҙәр. Ә һин бында ҡулыңдан килгән эштән баш тартып тораһың!

Был тартышты тыңлап ултырған Сабир ағай йәнә һүҙгә ҡыҫылды.

– Ҡарындаш, һиңә әйтәм, оло кешеләрҙең һүҙен тыңларға кәрәк. Үҙеңә шундай ышаныс күрһәткәндә, әрепләшеү килешмәҫ. Беҙҙән ярҙам кәрәк булһа, рәхим ит!

Счетоводтың ҡыҫылыуына Алмабикә һүҙһеҙ ҡалманы.

– Инйәргә китер алдынан мин алып килгән документтарҙы ҡабул итмәй кәнсәнән ҡыуып сығарғайның да баһа!

– Улай ғына була инде. Әллә һин беҙҙе, Игебаев ағайың менән һәр саҡ күгәрсен кеүек гөрләшеп ултырабыҙ, тип уйлайһыңмы? Эш ул талаштыра ла, яраштыра ла.

Алмабикә төрлө сәбәп эҙләп һаман һарҡашланды.

– Бригадир булғас, бригада өҫтөнә продуктыһын да, аҡсаһын да яҙҙырып алырға тура киләсәк. Кешенең труддинен дә теркәп барырға кәрәк, мин труддин сығара торған йәдеүәл һымаҡ ҡалын китапты бөтөнләй төшөнмәйем.

– Әләйһә ярар! – Игебаевтың эсе боша башланы. – Бригадирлыҡҡа кеше табырбыҙ. Иртәгәнән башлап ауылда Йәрмөхәмәт МТС-ы утыҙ ҡатын-ҡыҙҙан торған тракторсылар курсы аса. Шунда барырһың! Ат егеп, кырандаста ултырып йөрөргә теләмәйһең икән, ҡоромға, майға буялып утын яғып йөрөтөлә торған тракторҙа эшләрһең. Бөттө, былай ҙа оҙаҡ ләпелдәп ташланыҡ.

Колхоз етәкселәре ағымдағы мәсьәләләрҙе хәл итеп бөттөләр ҙә, төрлөһө төрлө яҡҡа таралышты. Аптыраған Алмабикә һаман һандыҡ өҫтөндә ултыра... Счетовод үҙенең йәшләй үлеп киткән ҡыҙының тиңдәше Алмабикәне йәлләп ҡуйҙы. Эшен ташлап, уның эргәһенә килде лә кәңәш бирергә кереште.

– Һин ул ғүмерҙә күрмәгән трактор менән нишләмәк итергә уйлайһың? Ул бит – ирҙәр эше, унда бара күрмә! Мин һиңә берәй уҡый-яҙа белгән ҡыҙҙы табып, учет эшенә өйрәтермен. Ул бригадала бөтә хисап эшен алып барыр. Бер сәғәттән рәйес килеп районға шылтыратырға тейеш, шуны көтөүелләп тор ҙа туп-тура үҙеңдең бригадирлыҡҡа риза булғаныңды әйт!

Ысынлап та, тиҙҙән ҡулына йомарлап сыбырткы тотҡан рәйес ашыға-ашыға кәнсәгә инде. Тирләгән башынан ҡолаҡлы бүркен Селдәбикә өҫтәленә ырғытып, почта йәшниге кеүек стенаға ҡағылған һары телефон тотҡаһын, ағас ҡул тирмәнен тартҡан кеүек, дығырҙатып бора башланы. Шунан трубканы ҡолағы төбөнә ҡуйып, бер нисә тапҡыр, тимерлек күрегенә өргән шикелле, трубкаға өрөп алды.

– Хабирово, Хабирово, әлү, әлү! – тип ҡысҡырҙы. Тағы борҙо, тағы ҡысҡырҙы. Ләкин Хәбир почтаһы яуап бирмәне. Тирләгән битен көрәктәй усы менән һөртөп алды ла, ҡаты көрһөнөп, яҡындағы ултырғысҡа терәлде. Шунда ғына һандыҡ өҫтөндәге Алмабикәне шәйләп алды.

– Әллә, ҡыҙым, һаман һандыҡтан төшмәй ултыраһыңмы? Төш. Ни ҡарап ултыраһың унда? – тип йылмайҙы Игебаев.

Рәйестең шаяртып өндәшеүенән Алмабикәнең күҙҙәренә йәш эркелде, берике тамсыһы алһыу бите буйлап тәгәрәне.

– Был ни күҙ шәмәртеп ултырыу? Немецты былайтып илап еңеп булмай, дошманды эш, үҙебеҙҙең берҙәмлек менән генә еңә алабыҙ.

Алмабикә ҡулының һырты менән күҙен һөртөп алды ла рәйес ҡаршыһына һалдат кеүек килеп баҫты. Рәйескә ҡарап көслө, ышанıслы тауыш менән:

– Игебаев ағай, мин бригадирлыҡҡа ризамын, – тине.

– Бына маладис! Вәт рәхмәт! Былай булғас, ҡыҙым, колхоз эше тәгәрәп алға китәсәк! – тип Алмабикәне киң күкрәгенә ҡыҫып һөйөп алды.

– Бына ҡайһылай ҙа матур килеп сыҡты. Тәүҙүк ризалашырға кәрәк ине. Һинән ысын бригадир буласаҡ. Үҙе эшкә әрһеҙ, йүгереп кенә йөрөй, үҙе тәрбиәле бала, – тип маҡтап алды уны ҡарт хисапсы, уның да күңеле йомшарғаны күренә ине.

– Тик, Абдрахман Әбделғәлимович, уның бригадаһына бер хисапсы беркетергә кәрәк. Ул кешене мин үҙем өйрәтермен. Алмабикә үҙ эше менән булашһын, уның башын учет менән ҡатырмайыҡ.

– Ярар! Алмабикә ҡарындаш, һин ултырып тор. Мин районға ғына шылтыратып алайым, – тип Игебаев яңынан телефонға йәбеште. – Хабирово, Хабирово! Әй... инәңде эт йыҡҡан... Ярты ғүмерем ошо телефон төбөндә үтә.

– Бар әле, Селдәбикә, ағайыңа районды алып бир, – тине Сабир ағай секретарь ҡыҙға. – Йәштәр телефондың телен яҡшыраҡ аңлай.

Уныһы шым ғына, бесәй шикелле йомшаҡ  баҫып, телефон эргәһенә килде, нескә генә бармаҡтары менән уның тотҡаһын еңел генә әйләндереп ҡуйҙы. Шунан нәҙек тауыш менән:

– Хәбирово, Хабирово, – тип ҡысҡырҙы.  – Мәфрүзә апай, Игебаев ағайға районды тиҙ генә бир әле! Райком, райком, беренсе секретарь Хәлимов иптәш үҙе кәрәк!

Селдәбикә суйын киленең төйгөсөндәй ауыр телефон трубкаһын председателгә тотторҙо ла шым ғына урынына кире ултырҙы.

– Һаумыһығыҙ, иптәш Хәлимов! – тип өндәште Игебаев һәм трубканы ҡолағына нығыраҡ ҡысты. Рәйестең башын түбән эйеп тыңлауынан һүҙ бик етди мәсьәлә тураһында барғанлығын аңлауы ҡыйын түгел ине.

– Юҡ, юҡ, кире алмайым! Мин уны кире алыу өсөн яҙмағанмын, – тип ҡысҡырҙы Игебаев. – Илгә яу килгәндә мин бер ваҡытта ла, ояһында йәшенеп ятҡан һыуыр ише, ҡасып ятҡаным юҡ. Ҡорал тотоп немец менән генә һуғышырлыҡ самам бар әле. Уларға минең Граждандар һуғышынан ҡалған иҫәп-хисабым бар. Үҙ һүҙемдә ҡалам!

Кәнсәлә ултырған өс кеше  бер-береһенә ҡаранып алды. Күңеле төшкән Сабир ағай: «Юҡ, бының булыуы мөмкин түгел! Колхозды усында тотоп торған Игебаев фронтҡа китһә, беҙгә нишләмәк кәрәк? Был бит күрәләтә тороп колхозды емереүгә тиң. Бөгөн үк парторг менән был турала һөйләшергә кәрәк»,– тип уйланып алды.

– Нимә, нимә? «Тагилстрой НКВД»? Беҙгә шуныһы ғына етмәгәйне!.. Ике мең гектар? Беҙ ул ерҙәрҙә йылдан-йыл бесән сабабыҙ бит... Немецтар тиһегеҙме? Яҡынаялар икән!.. Ауылдан ун дүрт саҡрым. Былай булғас, фронтҡа барып йөрөйһө лә юҡ. ...Үҙебеҙҙең немецтар? Немецтарҙың үҙебеҙҙекеләре буламы ни? – Секретарь Игебаевҡа оҙаҡ ҡына нотоҡ уҡыны. – Ярай, улайһа! Һау булығыҙ, Хәлимов иптәш!

Трубкаһын элеп Игебаев ике сикәһенә йәбеште һәм оҙаҡ ҡына уйланып ултырҙы. Уның өҙөп-өҙөп һөйләшеүенән бик мөһим мәсьәлә тураһында һүҙ барғанын аңлаған кәнсәлә ултырғандар күҙҙәрен рәйескә төбәне. Игебаев Селдәбикәгә тиҙ генә идара ағзаларын, бригадирҙарҙы йыйырға ҡушты ла, Алмабикәгә ҡарап:

– Ҡайтып тамаҡ эсеп кил, шунан кире бында килерһең, – тине һәм тәрән уйға сумды.

Көндөҙгө сәғәт икелә идара кабинетының алғы бүлмәһендә киске уйындарҙа ултырыу өсөн түшәмгә тиклем өйөп ҡуйылған эскәмйәләрҙең бер нисәүһен кабинетҡа индереп теҙҙеләр. Халыҡ ултырышҡас, Игебаев һүҙ башланы.

– Төштән алда ғына райком секретары иптәш Хәлимов менән һөйләшеп алдыҡ. Тагил ҡалаһында һуғыш кәрәк-яраҡтары етештерә торған ҙур завод төҙөлөп ята икән.

– Ундай заводтар Тагилда ғына түгел, бөтә илдә төҙөлә. Унда беҙҙең ниндәй ҡыҫылыш бар? – Һәр саҡ сабырһыҙланып алдан сыға торған, шуның өсөн ауылда «зыр күтән» ҡушаматын йөрөткән ферма мөдире Әһел һүҙгә ҡыҫылды.

– Әҙерәк кенә сабыр итһәңсе, Әһел ағай! Хәҙер эштең асылына килеп етербеҙ, – тине Игебаев. – Шул заводты «Тагилстрой НКВД» тигән ойошма төҙөй икән. Быйыл бесән сабыу өсөн ошо ойошмаға беҙ ике мең гектар бесәнлек бүлеп бирергә тейешбеҙ.

– Бына һиңә кәрәк булһа! Ул ниндәй эш, ти? Беҙҙең ата-бабалар ғүмер буйы үҙ ерҙәренең бер аҙымын да Яйыҡ казактарына бирмәй ҡурсалап килгән, ҡанын түккән, йәнен биргән. Үҙ ереңде сит кешегә бир, имеш... – тиеште йыйылған халыҡ.

– Ул ғына ла түгел. Элек һеҙ ерҙәрегеҙҙе Яйыҡ урыҫтарына бирмәһәгеҙ, хәҙер уны немецтарға бирергә тейеш булаһығыҙ, – тип аңлатты рәйес.

– Ниндәй немецтарға? Ул ҡайҙан килгән немец? Беҙҙекеләр немец менән һуғышып баштарын һала, ә беҙ бында немецтарҙан колхоз ерендә бесән саптырып ятырға тейешбеҙме?

Игебаев яңынан аңлатырға кереште:

– Улар үҙебеҙҙең немецтар, совет немецтары. Уларҙың Һарытау яҡтарында үҙ республикалары булған. Һуғыш башланғас, иптәш Сталин уны бөтөрөп, шунда йәшәгән бөтә немецтарҙы Урал һәм Себер яҡтарына тараҡҡан. Бына шул немецтар беҙгә бесән сабырға килергә тейеш.

– Сталин белмәй ҡыумағандыр әле! Беҙ ниңә уларҙы бында оялатырға тейешбеҙ? Немец ҡайҙа ла немец инде! Мин уларҙы яҡшы беләм... – тип ҡысҡырҙы Беренсе Герман һуғышында яраланып ҡайтҡан Латиф.

– Уның менән генә эш бөтмәй әле. Бесән сабып бөткәс, улар беҙҙең етенсе участок ерендә бөтөнләйгә төпләнеп ҡалырға тейеш. Уларға йорт-ҡура төҙөү өсөн ошо аҙна аҙағында бер төркөм төҙөүсе немецтар килә. Унда немец поселогы төҙөләсәк, – тип аңлатты Игебаев.

Тартҡылаша торғас, ҡасаба төҙөү өсөн етенсе участокты бирергә, ә бесән әҙерләү өсөн Ялан менән Магнит араһында ятҡан Биштүбә һәм Ҡуянтүбә битләүҙәрендәге ике мең гектар бесәнлекте бүлергә, тигән ҡарарға килделәр. Шулай ҙа Игебаев менән Өмөтҡужин нәфрәт менән тулған халыҡҡа немецтарҙың ике төрлө булыуын аңлатып еткерә алманы. Йыйылғандар һәр кем үҙ фекере менән таралды.

5

Бөтә халыҡ ишеккә йүнәлгәс, алдан һөйләшелгәнсә, Сабир уҙаман парторг Өмөтҡужинды алып ҡалды һәм колхоз рәйесенең райком менән һөйләшеүенең бөтә нескәлектәренә тиклем еткерҙе.

– Игебаев иптәш, күрәһең, фронтҡа ебереүҙе һорап ғариза биргән. Һин райком кешеһе бит, һиңә асыҡтан-асыҡ әйтәм: әгәр Игебаев армияға алына торған булһа, барыбыҙ ҙа бөләбеҙ! Сөнки был ауылда колхоз ялалғаны бирле уның ише хужа булғаны юҡ. Рәйес итеп ҡуйырға кемебеҙ бар? Һине тәҡдим итергә булыр ине, быға тешең-тырнағың менән ҡаршы киләсәкһең. Шулаймы? – тине ҡарт хисапсы.

– Шулай! Ә һин минең фекерҙе ҡайҙан беләһең?

– Белмәй һуң. Рәйес булып эшләр өсөн, ҡустым, хужалыҡты, ауылдың һәр әҙәменең холҡон биш бармағың шикелле белеү кәрәк. Кемен хуплап, кемен туҡмап тигәндәй, эшкә ҡуша белеү фарыз. Игебаев бит кешене дуктырға ҡарағанда ла яҡшыраҡ үтә күреп тора, бөтә колхозды усына бөрөп тота. Унан шөрләйҙәр ҙә, уны ихтирам да итәләр, сөнки ул, ҡырыҫыраҡ булһа ла, ғәҙел кеше.

– Шулай инде.

– Шулай булғас, хәҙер үк иптәш Хәлимов менән һөйләш, повестка килгәс, һуң булыр, – тине Сабир һәм артҡа боролоп ҡысҡырып ебәрҙе. – Селдәбикә! Парторг ағайыңа тиҙ генә райкомды тоташтыр!

Селдәбикә һөнәрен тағы ла бер тапҡыр күрһәтеп ҡуйҙы. Гимнастеркаһын төҙәтеп, парторг етди һөйләшеүгә әҙерләнде. Был вазифала биш-алты ай үтеүгә ҡарамаҫтан, Өмөтҡужиндың секретарь менән һөйләшкәне юҡ ине әле. Уның артынан күҙлек өҫтөнән күҙәтеп ултырған Сабир ҡарт: «Райком менән һөйләшеү һиңә быҙау ҡараған ҡыҙҙар менән әңгәмә үткәреү түгел шул. Ҙур кешеләр менән нисек һөйләшкәнеңде ҡарайыҡ әле», – тип ултырҙы.

– Иптәш Хәлимов? Был «Ҡыҙыл Ялан»дан парторг Өмөтҡужин... Арыу...

Рәхмәт!.. Яҙғы сәсеүгә әҙерлек үҙ яйы менән бара... Тырышырбыҙ... Һөт буйынса күрһәткестәрҙе мотлаҡ яҡшыртырбыҙ... Халыҡтың рухы күтәренке... Ремонт эштәре бөтөп бара... Хушығыҙ, – тине төшөнкө тауыш менән парторг һәм тирләгән маңлайын ҡулы менән һөрттө.

– Тиктомалға Хәлимов ағайҙан әрләнеп алынды. Һөт буйынса артта ҡалған өсөн, – тине ул әкрен генә йылмайып ултырған хисапсыға.

«Әй, эттәгенәһе! Нимәгә кәрәк булғандыр инде шул Сабир ҡарттың ҡотҡоһона бирелеп, райком алдында яманатлы булып йөрөргә? Тартай теленән таба, тип белмәйенсә әйтмәгәндәр икән шул»,– тип парторг эстән үҙен битәрләп алды.

Алмабикә өйөнә ҡайтып ингәндә, көн кискә һарҡҡайны. Уны тышҡа сығып та, өйҙөң бер ҡатлы туңған тәҙрәһенән ҡарап та арыған Сәғилә әбей, ҡыҙы ишектән инер-инмәҫтән, һорау яуҙыра башланы:

– Ҡыҙым, ҡайҙа йөрөйһөң? Әллә берәй яҡҡа оҙатып ебәрҙеләрме, тип атаң менән ҡурҡышып бөттөк. Рәжәпте лә шулайтып башта кәнсәгә генә саҡырҙылар ҙа, хушлашырға ирек бирмәй, арбаға ултыртып алып киттеләр. Йә, нигә саҡырғандар?

Алмабикә бишмәтен элеп, һике йөҙлөгөнә ултырып, идарала ни булғанын һөйләгәс, әсәһенең асыуы килде:

– Атаҡ, атаҡ! Был ниткән эш? Бригадирлыҡ ҡыҙ ҡулынан килә торған йомошмо ни? Көнө-төнө ир-ат араһында, ҡайҙа етте, шунда сабыулап йөрөргә башҡа кеше тапмағандармы ни? Булмаҫ!

– Булды инде, әсәй! Ҡаршы тороп бер ни ҡыла алманым. Бригадирлыҡҡа бармаһам, иртәгәнән тракторсылар курсына ебәрәләр ине.

Тамам иҫе-аҡылы киткән Сәғилә әбей нимә әйтергә белмәй тымды. Күп тә үтмәй ҡайтып ингән Уйылдан ҡарттың был хәлгә артыҡ иҫе китмәне. «Сәүиттең бисә-сәсәгә ирҙәр менән тиң хоҡуҡ биреүе ошо булалыр инде. Хәйерлегә булһын. Тик киске йыйылыштарҙа ирҙәр менән бергә ултырып, көн буйы шулар менән уралып, шуларға тирегеп китмәһә, ярар ҙа һуң. Хоҙай тәүфиҡ бирһен. Нишләйһең, заманаһы шулайҙыр»,– тип уйланды.

Иртәнге сәғәт етегә Алмабикә кәнсәгә ингәндә, унда кеше тауыштары ишетелеп тора ине. Силсәүит бүлмәһендә ун алтынан илле йәшкә тиклемге ирҙәр өсөн хәрби уҡыуҙар бара икән.

– Химик газдар араһынан хәҙерге ваҡытта немецтар тарафынан замин, иприт ҡулланыуы мөмкин. Уларҙы Беренсе империалистик һуғышта ла ҡулланғандар. Был газдар тын юлдарына зарар килтерә, – тип һөйләгән мәктәп директоры Әкбал Әлимғафаровтың тоноҡ ҡына һабағы ишетелеп ҡалды.

Алмабикә тағы ла һандыҡ өҫтөнә ултырҙы. Халыҡ йыйылғайны инде. Ултырғыста башын өҫтәлдәге янып торған унлыҡ шәм яҡтыһына эйеп, ҡулындағы ҡағыҙға күҙҙәрен текәгән рәйес бөгөн үҙен ҡаты тотто, бер кемгә лә ауыҙ асырға ирек бирмәне.

– Инйәрҙән ҡайтҡандар ике көн хәл алды. Бөгөн үк эшкә тотонһондар. Бесәнселәрҙән алып торған ат-сбруйҙарҙы, саналарҙы теп-теүәл эйәләренә ҡайтарып бирегеҙ. Урманға китерҙән алда кем фермаларға, конный дворға бесән ташыған, шул эшенә сыҡһын. Быйыл яҙ бик иртә килергә уйлай, сана юлы барҙа бесән ташыуҙы тиҙләтергә кәрәк. Саналарҙы ҡарағыҙ, үрәсәләрен, ҡарамаларын тартһындар.

Иген һуғыуҙы дауам итегеҙ. Салғыя аҫтындағы иген эҫкерттәре бөтөп килә, комбайнды Ҡабаҡ тауы яғына күсерергә кәрәк. Башта трактор ебәреп юл ярҙырып алығыҙ. Быйыл көрт ҡалын, – Игебаев хисапсы яғына бороллдо. – Сабир ағай, ҡалдауҙа әҙ генә һоло ҡалған, шуны бригадаларға тарат. Алмабикә ҡарындаш,

Ғәбделкәйүм ағайыңдың Ҡуянморон атын санаға егеп ал да эшкә тотон. Әйтә торғаным шул.

Төшкө сәйгә Алмабикә Файзулла хажи өйөрөнән килгән Ҡуянморон исемле йөнтәҫ һары ат егеп ҡапҡаға туҡтағас, Сәғилә әбейҙең йөрөгө «жыу» итте.

– Ыстағафирулла! Был кем икән? Налуг эгинте тиһәм, бисә кешегә оҡшаған! – тип ул урам яғы тәҙрәгә ҡапланды.

Бәләкәй генә кашауай сананан төшөп килгән ҡыҙын күргәс, әсә кешенең ғорурлығы эсенә һыйманы. «Ҡандай килештереп ултырып йөрөй бит, аҡылы камил, ҡулынан килгәс, әйҙә йөрөһөн!» – тип эстән генә ҡыуанып алды Сәғилә әбей.

Элекке бригадир, һуғышҡа алынған Ғәбделкәйүм, һары атты һәр саҡ ҡапҡаһын ябып егә торғайны. Ат егелеп бөткәс, уның һыртына сыбыртҡы менән бер-ике тартып алыр ине. Шунан ҡапҡаны асыр-асмаҫтан меҫкен ат йән-фарман урам буйлап елдерә. Берәй урында туҡтарға тура килһә, күҙ ҡырыйы менән артҡа ҡарап, аяҡтарын сәнсә баҫып, йәнәһе лә, сыҙамай, һары ат бейеп тора торғайны.

Иртән санаға ултырғас, Алмабикә дилбегәне тартҡас та, Ҡуянморон хужаның кем икәнен шундуҡ шәйләп алды. Элекке кеүек үрәпселәп кеше өҫтөнә менеп барманы, ҡуҙғалыр алдынан бер-ике тапҡыр ҡойроғон болғап, ашыҡмай ғына ике яҡҡа һелтәне лә әкрен генә ҡуҙғалып китте. Аянлатып бер аҙ килде, унан һәлпәнләп юртыуға күсте. Алмабикә күпме генә дилбегә ҡағып, сыбыртҡы болғап ҡарамаһын, Ҡуянморон аҙымын йышайтманы. «Һинең һымаҡ бала-сағаға ошо ла ярар» тигән кеүек, таныш булмаған Уйылдан ҡарт ҡапҡаһына килеп туҡтаны.

Колхоздың ҡамыт-сбруйын төҙәтеп йөрөгән Уйылдан ҡарт та төшкө сәйгә ҡайтҡайны. Ҡыҙының өйгә сыбыртҡы тотоп ингәнен күреп, ғорурлығын йәшермәйенсә:

– Йә, ҡыҙым, Һары ат һине тыңлаймы? – тип һораған булды.

– Тыңлауын тыңлай ҙа, элекке кеүек бейеп тормай, – тип яуапланы Алмабикә.

Ҡыҙҙарының ат егеп йөрөүенә ата-әсәй шатланды. Ғүмер буйы бригадирҙан ат һорап ялынған Уйылдан ҡарт: «Аллаға шөкөр, хәҙер ат үҙебеҙҙең ҡулда, йомош-юлға йөрөү өсөн кешегә ялынып йөрөйһө юҡ»,– тип уйлап алды. Эшкә китер алдынан ҡыҙына эш ҡушырға ла онотманы.

– Алмабикә, келәтебеҙҙә ҡырҡ ҡаҙаҡ самаһы бойҙай бар. Шуны МТС тирмәнендә тартып алып ҡайтһаң, яҡшы булыр ине, – тине ҡарт.

– Ярай, атай, эштәрҙе бөтөргәс барып килермен, – тип ултырып ҡалды Алмабикә.

Бөгөн уның йомоштары муйынынан. «Игебаев ағайға рәхәт, кәнсәгә саҡыртып эш ҡуша ла, ә миңә көн һайын иртәнсәк һәр өйҙөң тәҙрәһен шаҡып йөрөргә тура киләсәк»,– тип уйланы Алмабикә. Күп тә үтмәй, өйгә Селдәбикә килеп инде.

– Сәйҙе яңы ғына эскәйнек, самауырҙы яңыртырға тура килер инде. Өйгә тәүге аяҡ баҫҡан кешене ҡоро сығарып ебәреү – оло гонаһ, – тип Сәғилә әбей урынынан тороп иҫке самауырына йәбеште.

– Рәхмәт, инәй, мин яңы ғына өйҙә тамаҡ эсеп килдем. Мине Сабир ағай ебәрҙе. Алмабикә апай, һин ҡаршы килмәһәң, мин һиндә учетчик булыр инем.

– Ниңә ҡаршы булайым, ти. Үҙем дә шуны уйлап йөрөй инем, әйтергә телем генә барманы, – тип Алмабикә ҡыҙҙы ҡосаҡлап алды.

– Хәҙергә кәнсәлә бер-ике көнлөк эшем бар, шунан һуң ҡайҙа ҡушһаң, шунда барырмын. Бригадирға көнөнә ике ярым труддин яҙһалар, миңә шуның ҡап яртыһы буласаҡ, – тип Селдәбикә иғлан итте.

Сәғилә әбей ҡыҙына ни тиклем хеҙмәт хаҡы тура килгәнен ныҡлап төшөнмәһә лә, ғәҙәттәгенән байтаҡ булыуын төҫмөрләне. Башҡа сәй эсеп торманылар. Алмабикә ҡыҙҙы санаһына ултыртып кәнсәгә яҡын ҡалдырҙы ла үҙ йомошо менән юлланды.

Колхоздың ат һарайы ихатаһында ҡамыт-сбруй һаҡлау өсөн бәләкәй генә тәҙрәле өйҙә сана ҡарамалаған Уйылдан ҡарт бөгөн төштән һуң бер тапҡыр урамға ла сыҡмай эшләне. Атҡа килгән кешеләр менән һуғыш хәлдәре тураһында әңгәмәләшеп торорға ла ваҡыт тапманы. Сыуал артына йомшартыр өсөн һөйәп ҡуйылған бер ҡосаҡ муйыл ботаҡтарын ҡараңғы төшкәнсә ҡарамаға, сана башына тотоноп та бөттө. Тышҡа сығарған әҙер дүрт сананы күргәс, ат һарайында эшләгән Мәрғиә менән Сафыя аптыранды. Ҡарттың тырышлығының серен улар тик иртәгәһенә, ҡыҙы Алмабикәнең бригадир булып тәғәйенләнгәнен ишеткәс кенә, төшөндөләр.

Арманһыҙ булып ҡайтып ингән Уйылдан ҡартты күргәс, өйҙәгеләр башта борсолоп ҡуйҙы.

– Ҡыҙым, бөгөн атайың оборона фонды хисабына ике сана урынына дүрт сана йүнәтеп ҡуйҙы. Ҡурҡма, Алмабикә, минең өсөн һиңә ҡыҙарырға тура килмәҫ, – тине Уйылдан ғорурлыҡ менән.

Алмабикәнән ике йәшкә кесе булһа ла, үҙен уның әхирәте һанаған Ғилмивафа тыны бөтөп өйгә килеп инде. Бер аҡшам намаҙына ултырған Уйылданға, бер ҡашыҡтар йыуып маташҡан Сәғилә әбейгә ҡарап:

– Инәй, бөгөн клубҡа кино килгән. Алмабикәне шунда саҡырырға килдем, – тине ул.

Ундай-бындай эшкә ҡартынан үтеп ҡыҫылырға күнекмәгән Сәғилә әбей:

– Әлләсе, – тине лә йөгөнөклəп намаҙлыҡ өҫтөндә ултырған ҡартына ҡараны. Өсөһө лә хужаның әйткәнен көттө.

Уйылдан ҡарт намаҙын тамамлап, намаҙлыҡты урап урҙаға элде лә:

– Ысынлап та, ҡарттар менән ниңә ултырмаҡ кәрәк? Әсәйеңдең йомошо булмаһа, барып ҡайт, әҙерәк күңелең дә асылыр, – тине.

Быны ғына көтөп торған Сәғиләнең йөҙө яҡтырып китте.

– Бар, балам, кеше араһында күңелең дә күтәрелер. Тик өҫтөңдө генә алмаштыр.

Был Алмабикәнең һуғыш башланғаны бирле ауыл клубына беренсе тапҡыр аяҡ атлауы ине. Дөрөҫөн әйткәндә, унда артыҡ күңеле лә тартманы, үлемесле һуғыш барғанда клуб ҡайғыһымы ни? Ауыл бизмәненә һалып самалағанда, Алмабикәнең йәше лә уҙған кеүек, егерме бер йәшен тултыра бит. Уның шайы ауыл ҡатындары ике-өс балаға әсә булырға ла өлгөрә.

Клубтың ишеген асып ебәреү менән Алмабикә бында ник килгәненә үкенде. «Нишана, ат аҙғыны тайға эйәрә, тип юҡҡа әйтмәгәндәр икән»,– тип үҙен битәрләп тә алды. Элекке кеүек, болдорға менгәс тә гармунсы Сабурҙың дәртләнеп уйнаған гармун тауышы, ҡыҙ-ҡырҡындың сыр-сыу килеүҙәре, егеттәрҙең клуб иҙәнен һығырҙай итеп бейегәндәре лә ишетелмәне.

Ике утыҙлыҡ шәм менән яҡтыртылған һалҡын, шөҡәтһеҙ клубта бер нисә ун алты йәшлек әле мыйыҡ та сыҡмаған малай, шул йәштәрҙәге ауыл ҡыҙҙары, кейәүгә сыға алмаған ике ҡатын, һуғыштан инвалид булып ҡайтҡан үрге остан Сәхей һәм Сомтор урамдан Зариф ҡына ине. Оҙон эскәмйәгә теҙелешеп, бер-береһенә һыйынышып ултырғандар ҙа кино башланғанын көтәләр. Һәр ваҡыттағыса, клубҡа инергә аҡсалары булмаған малайҙар, тыныс кистә ут яҡтыһына йыйылған ваҡ себен кеүек, тыш яҡтан тәҙрәгә һарылған.

Бөгөн «Суҫҡа ҡараусы һәм көтөүсе» тигән кино күрһәтәләр икән. Бар халыҡ Мәскәү күргәҙмәһенә ебәрелгән Глаша Новикова менән Мусагиб Катуевтың

ҡайнар мөхәббәтен кисереп, әҫәрләнеп ҡарап ултырҙы. Алмабикә лә танауын мырш-мырш тартып, күҙен еүешләтеп алды. Ташкентта госпиталдән сығып, яңынан һуғышҡа әҙерләнгән Ибраһимы күҙ алдына баҫты. Кинолағы ике йәш кешенең бер-береһен яратыуы уға Ибраһим менән бергә мөхәббәт ялҡынында дөрләп янған ҡәҙерле мәлдәрҙе, нескә тойғоларҙы хәтерләтте. Бер нисә мәртәбә лента өҙөлөүгә ҡарамаҫтан, бер кем дә урынынан ҡуҙғалманы. Ете төн уртаһында кино тамамланғас, йәштәр эскәмйәләрҙе стена буйлатып теҙеп сыҡтылар ҙа уйнарға төшөп киттеләр.

Ғилмивафа уйынға ҡалырға теләмәгән Алмабикәгә һағыҙаҡ һымаҡ йәбеште.

– Апай, ҡалайыҡ инде! Уйнағың килмәһә, ҡарап ҡына ултырырһың. Йәйгә тиклем башҡа уйын әллә була, әллә юҡ! – тип ялбарҙы.

Ситтәрәк ултырған Алмабикә эргәһенә Мәхмүт Өмөтҡужин килде. Нимәнән һүҙ башларға белмәгән парторг, оҙаҡ ҡына гимнастеркаһын рәтләгәндән һуң:

– Йә, Алмабикә, кино оҡшанымы? – тигән булды.

– Оҡшаны, харап шәп уйнайҙар, – тине Алмабикә, эсендәге хистәрен йәшереп.

Күптән бейемәгәнгә табаны ҡысып торған «Таш тояҡ» ҡушаматлы, быйыл армияға алынырға тейешле Зөлҡәрнәй уртаға сығып баҫты ла:

– Нишләп шымтайып киттегеҙ? Бында үҙ-ара ләпелдәшергә килдегеҙме ни? Уртаға сығығыҙ! – тип, яңы ғына ҡысҡырырға өйрәнгән көҙгө әтәс һымаҡ, йыр башлап ебәрҙе:

*Ер шарында алты ҡитъа,*
*Унын береһе – Азия.*
*Йәшәһен Совет власы,*
*Бөтһөн буржуазия!*

Башҡалар берҙәм ҡушылды:

*Наза, Наза! Наза матур ҡыҙ бала!*
*Наза – матур комсомолка, эйҙә колхозъа табан!*

Йәштәр берәм-берәм урындарынан тороп, ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәк яһап, икенсе йыр һуҙҙы.

*Аяъындаъы ботинка*
*Шыъырҙап бирә тауыш.*
*Миңә һинән шул фатиха –*
*Һөйгәнең менән ҡауыш!*

Өмөтҡужин Алмабикәне ҡыҫтаны-ҡыҫтаны ла, уныһы бөтөнләй ыҡҡа килмәгәс, түңәрәккә бейеүгә үҙе төшөп китте. Ләкин ҡайһы бер баҙнатһыҙыраҡ йәштәр унан тартынып кире урындарына ултыра башлағас, парторг уртанан сығып, Алмабикәгә яңынан килде.

– Круг өсөн ҡартайғанмын, күрәһең. Һыуҙа шыйлап килгән суртандан ҡаҫҡан сабаҡ көтөүе кеүек, минән дә йәштәр ҡурҡып ҡасалар. Минең ҡиәфәтем кеше ҡурҡытырлыҡ микән ни? – тип шаяртты Өмөтҡужин.

– Әлләсе! Бер ҙә кеше өркөтөрлөк түгел һымаҡ, – тигән булды Алмабикә.

– Былай тигәс, баҙарым бөтөнләй юҡҡа сыҡмаған икән!

– Юҡ, юҡ! Бынамын тигән һыу һөлөгөндәй ҡыҙҙы ҡаратырлыҡ әле һин.

– Яҡшы һүҙең өсөн рәхмәт, Алмабикә! «Әгәр һин риза булһаң, миңә бер ниндәй ҙә һыу һөлөгө кәрәкмәй, ни ерем килешмәйҙер инде?» – тип әсенеп уйланы Өмөтҡужин. Парторг гимнастеркаһын, кейгән бүркен төҙәтте, көҙгө кеүек ялтырап торған итектәренә ҡарап ҡуйҙы.

Зөлҡәрнәй «Күрше» уйынарға тип, билен быуған һалдат ҡайышын ысҡындырып, усына шап та шоп һуғып ҡараһа ла, уйынарлыҡ егеттәр табылманы. Еткән егеттәр барыһы ла армияла, әле үҫеп килгәндәр күңеле тартҡан ҡыҙҙы асыҡтан-асыҡ йәнәш ултыртыу дәрәжәһенә етмәгәндәр, оялалар, уларҙың мөхәббәте хәҙергә еүеш сыра ише ҡабынып китә алмай, йөрәк төбөндә генә яна. Йәштәр иҙәнде йәлләмәй бейенеләр ҙә, клубты бикләп, өйҙәренә тауышһыҙ ғына таралыштылар. Элекке һымаҡ урам тултырып, ауыл йырҙарын бер кем дә йырламаны.

6

Иртә менән, ауыл эттәрен ҡурҡытып, кәнсә ҡапҡаһы төбөнә был яҡтарҙа ғүмерҙә булмаған ҡара төҫлө «Эмка» машинаһы килеп туҡтаны. Машина Магнит яғынан килгәндер, тип уйланы уны күреүселәр, сөнки был ваҡытта тик шул яҡҡа ғына үтергә мөмкин. Ниндәй генә көслө буран-дауыл булмаһын, Магнит менән Баймаҡ араһында машина юлы бер көнгә лә өҙөлмәй, сөнки Баймаҡ заводы көнө-төнө оборона өсөн баҡыр иретергә тейеш. Ә Ялан ауылы тап шул юлда тора ла инде.

Машина эсенән башына кара бүрек, тышы һары хром менән ҡапланған кара бөҙрә яғалы пальто, аяғына аҡ бурка кейгән, ҡалын күҙлекле, мыҡты ғына ир кеше сыҡты ла ышаныслы аҙымдар менән кәнсәгә йүнәлде. Иртәнге йыйылышыуҙан таралып өлгөрмәгән колхоз активы ҡурҡыу ҡатыш һорау менән ингән кешегә төбәлде. Ингәс тә ул ап-аҡ батист ҡулъяулығын сығарып, ашыҡмай ғына күҙлеген һөрттө. Күҙен ҡыҫыңҡырап, йөнтәҫ ҡаштарын ҡалҡытып, бөтә кешегә һөҙөп ҡараны.

– Колхоз рәйесе кем бында? – тип һораны шунан.

– Мин булам, – тип ултырған урынынан ғына яуап ҡайтарҙы Игебаев.

Ингән кеше үҙ фамилияһын әйтеп, уның менән генә күреште һәм ҡуйын кеҫәһенән ниндәйҙер ташҡа баҫылған ҡағыҙ сығарып Игебаевҡа һуҙҙы. Игебаев дүрткә бөгөлгән ҡағыҙҙы асты ла ҙур диҡҡәт менән ул кешенең фамилияһын уҡып ҡараны, ләкин аңлай алманы. Шунан һуң ҡағыҙҙағы ҡыҙыл менән ҡуйылған ҡултамғаға иғтибар итте. Был Оборона Дәүләт Комитеты ағзаһы Косыгин ҡул ҡуйған мандат ине. Документта тап үҙенең фамилияһы – «Ҡыҙыл Ялан» колхозы председателе Игебаевҡа» тиелә ине унда – булыуы уны ныҡ аптырауға ҡалдырҙы. Нисек инде Мәскәүҙәге иптәш Косыгин, был фамилияны ул гәзиттәрҙә уҡығаны бар ине, әллә ҡайҙа ятҡан колхоз председателен белеүе мөмкин? Бында ниндәйҙер шик бар:

– Хәҙер, иптәш Дилбәршкәин, ултырып тороғоҙ! – Көтөлмәгән ҡунаҡтың фамилияһын үҙенсә боҙоп, Игебаев телефонға йәбеште.

Райком секретары урынында булмай сыҡты. Хәйер, район башҡарма комитеты председателе Шәриповты тиҙ генә табып булды. Игебаев көрәктәй ҡулы менән трубканы ҡаплап, иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, хәлде һөйләп бирҙе.

– Эйе, шундай кеше һеҙгә килергә тейеш. Ул «Тагилстрой НКВД» вәкиле иптәш, нисек әле шуны... Зильберштейн, буғай. Районда был мәсьәлә тикшерелгән, килешелгән. Мәскәүҙән дә, Өфөнән дә был турала шылтыраттылар. Иптәш Косыгин ҡул ҡуйған документта фамилияң булыуына аптырама, был бәндә тишекһеҙ ергә лә керә белә. Нимә эшләргә, тиһеңме? Һораған ерҙе ҡағыҙында күрһәтелгән миҡдарҙа бирергә тура килер. Эйе, седьмой участканан. Хәл юҡ, ләкин һорайһы нәмәләреңде ҡайырып һорап ал. Әгәр инде ҡаршы килеп маташһа, мин колхоз ерен йыйылышһыҙ бирә алмайым, тип әйт тә ҡуй. Иртәнән һуңға районда һеҙгә землемер ебәрермен, – тине Шәрипов һәм, хушлашып, трубканы элде.

Район менән һөйләшкәс, Игебаевтың баштағы ҡаушауының әҫәре лә ҡалманы. Барлыҡ һәләтен йыйып, ул ҡатмарлы һөйләшеүгә әҙерләнде.

– Йә, иптәш Игебаев, нишләйбеҙ? – тип Зильберштейн председателгә һорау бирҙе.

«Ысынлап та, шымарған әҙәм икән. Ләкин беҙ ҙә эттән ҡарыҡҡан түгелбеҙ әле!» – тип уйланы рәйес һәм үҙ дәғүәләрен теҙеп ҡуйҙы.

– Нисек инде улай? Һеҙҙең йыйылышты көтөп ятырға минең ваҡытым юҡ. Һуғыш ваҡытында ниндәй йыйылыш булһын, ти? – тип вәкил һыртын ҡабартырға уйланы.

– Һуғыш – бөтәбеҙ өсөн дә һуғыш. Беҙ ҙә бында тик ятмайбыҙ, оборона өсөн кәрәк-ярағын, аҙыкты етештерәбеҙ. Дәүләт ерен колхоздан алыуҙың үҙ тәртибе бар. Ул турала колхоз уставында яҙып ҡуйылған, – тип Игебаев өҫтәлдә ятҡан бүркен, сыбыртҡыһын ҡармап алды ла тора башланы.

– Документҡа иптәш Косыгин үҙе ҡул ҡуйған бит! Шуны аңламайһығыҙмы ни? – Зильберштейн туҙ моҙғаһын ҡыптырҙатырға уйлағайны, ләкин председатель аптырап ҡалманы.

– Косыгин ҡул ҡуйһа ни? Унда, колхозсыларҙан һорамайынса хөкүмәт ерен таратырға мөмкин, тип әйтелмәгән бит! Беҙҙең устав – үҙ законыбыҙ бар.

– Былай булғас Мәскәүгә, Косыгиндың үҙенә, телеграмма һуғырға тура килә инде.

– Теләһә кемгә бирегеҙ! Беҙҙең устав – Сталин уставы тип атала, уны Сталин үҙе раҫлаған, – тип Игебаев сыға ла башланы.

Сталин исемен ишеткәс, Зильберштейн, һыуға һалған ҡайыш кеүек, ҡапыл ебеп төштө. Нишләргә белмәй, тауышына ялбарыу төҫө керетеп, ул рәйестең итәк салғыйына йәбеште.

– Зинһар, китмәгеҙ, иптәш председатель! Һеҙгә исем-шәриф менән нисек өндәшергә? – Зильберштейн күн тышлы блокнотын сығарҙы ла, Игебаевтың исемен яңынан һорап, ниндәйҙер үҙе яҙа торған ручка менән унда теркәп ҡуйҙы. Ҡөрьән доғаларын ятлаған шәкерт һымаҡ ирендәрен ҡыймылдатып, бер нисә тапҡыр ят исемде ҡабатланы. – Ҡуйығыҙ инде, ҡыҙмай тороғоҙ, Абдрахман Әбделғәлимович, – тип ул яңынан блокнотына ҡарап алды. – Һөйләшәйек тыныс ҡына. Әгәр инде бында уңайһыҙ хисаплаһағыҙ, аулағыраҡ урынға барып ултырайыҡ. Беҙҙең ойошма бөтә Союзға билдәле, унда ҡош һөтөнән башҡа бөтә нәмә бар, колхозығыҙға ярҙам итерлек мөмкинселектәр ҙә табылыр.

«Әһә, ипкә ултыра башланыңмы?» – Игебаев бер аҙ уйланып торҙо ла, вәкилде урынлаштырырға йүнле урын булмағас, уны өйөнә алып ҡайтты. Шәмсинур килгән-киткән кешегә өйрәнеп бөткән инде, кем һәм ҡайҙан килгәнен һорашып та тормай, булған нәмәһен өҫтәлгә ҡуя ла боҫорап торған самауырын килтереп тә ултырта. Ауыл халҡын, бигерәк тә ҡойроҡтарын ҡыҫып, ҡапҡа аҫтынан баштарын ғына сығарып өрөргә ҡурҡҡан эттәрҙе аптыратып, «Эмка», үҙе артынан күгелйем төтөн ҡалдырып, председатель ҡапҡаһы төбөнә барып туҡтаны. Күп тә үтмәй, шул уҡ машина менән Игебаев колхоз хисапсыһы менән парторгты өйөнә алып килде.

Икенсе көн иртә менән бите ҡыҙарып шешмәкләнгән, былай ҙа ҡыҫығыраҡ күҙҙәре бысаҡ йөҙө шикелле генә булып ҡалған рәйес, башҡа йомоштарын бөтөргәс, килгән активҡа кисәге һөйләшеүҙең һөҙөмтәһен аңлатып бирҙе.

– Кисә теге вәкилде ҡыҫа башлағас, байтаҡ нәмә һығып сығарҙыҡ. Беренсенән, уларҙың ойошмаһынан колхозда үҙ яғыулығы менән бер НАТИ тракторы, бер өс тонналы машина эшләйәсәк. Улар көҙөн ҡар төшкәнсә беҙҙең ҡарамаҡта була. Бынан тыш, бесән сабыу мәлендә үҙҙәренең ат-сбруйы менән быларҙың

биш косилкаһы беҙгә бесән сабыуҙа ярҙам итәсәк. Шунан һуң туҡтап ҡалған стройка – йөҙ һыйыр һыйҙырышлы һарайҙы төҙөп бөтөрөүҙе һораныҡ. – Игебаев өндәшмәй генә тыңлап ултырған Өмөтҡужинаға һәм Сабир ағайға ҡарап алды. Тегеләр уны хуплап баш һелктеләр. – Бына шуның өсөн ысын һуғыш булды ла инде. Төҙөүселәр, материалдар етешмәй, тип ҡырҡа баш тартты бит. Барыбер өсөбөҙ өс яҡтан йәбешеп, камил әжерен алдыҡ тегенең. Күн кейем кейеп, ҡоро кәперәйеп йөрөгән бер әҙәм. Сәйәси яҡтан да һайыраҡ булып сыҡты. Нимә һораһаң да, һуғышҡа һылтана, әйтерһең дә, беҙ ғүмер буйы һуғышырға йыйынабыҙ. Беҙҙең еңеп сығыуыбыҙға артыҡ ышанып та етмәй, буғай. Өс яҡтан ҡыҫмаҡҡа алғас, барыбер хәле бөттө.

– Һарай тураһында нисек һөйләштегеҙ?

– Бер һүҙ менән әйткәндә, ул үҙ материалдары һәм кешеләре менән бар төҙөлөш эштәрҙе мал кәртәгә инеүгә бөтөрөргә һүҙ бирҙе.

– Ситәндән үрелгән һыуыҡ һыйыр утлығынан ҡотолабыҙ икән! – тип шатланды ферма мөдире. – Ә бик ҡыйбат һорамаҫтар микән?

– Билдәле, шул хөкүмәт хаҡы менән инде. Бында Әндрәй ҡаҙнаһы юҡ! Үҙебеҙҙең хәл дә бик мөшкөл генә, – тине ситтә генә ултырған Сабир ағай. – Тик уларҙың кешеләрен дә, аттарын да яҡшы итеп ашатырға кәрәк. Немец яҡшы эшләй, ләкин яҡшы ашарға ла өйрәнгән, уны беҙҙең халыҡ кеүек һөт, ҡатыҡ, ҡурмас-талҡан менән алдап булмай.

– Немец тауыҡ итен ярата, ти. Былай булғас, ауылда тауыҡтар бөтә инде. Ҡош та булдымы мал, ул хәшәрәт ҡошто мин бөгөн үк бөтөрөр инем...

– Туҡтағыҙ, мин һөйләп бөтмәгәнмен әле! Тирмән эргәһендә буш ятҡан туғайҙа быйыл йәшелсә, картуф сәсергә, тигән фекер бар. Үҙегеҙ беләһегеҙ, икмәк бик наҡыҫ буласаҡ, халыҡҡа бер аҙ еңелерәк булыр, бәлки.

– Уны нишләргә тейешбеҙ? – тип төпсөндө олораҡ йәштәге ферма мөдире Әһел.

– Барығыҙға ла ер бүлеп бирәм, шунда картуф сәсерһегеҙ.

– Ҡуйсәле, иптәш Игебаев! Әллә беҙҙән көләһеңме? Беҙҙән шул нәмәкәйҙе сәстертеп, урыҫ яһарға уйлайһыңмы?

– Һуңғы һүҙем шул: биш тонна картуфтың яртыһын һеҙгә, активҡа, бирәм, ҡалғанын колхозсыларға таратырбыҙ. Һәр саҡ икмәккә, иткә иҫәп тотоу етәр! Урыҫ ашына ла өйрәнә башларға кәрәк. Әҙәм көлкөһө бит: ике йөҙ илле хужалыҡҡа ни бары өс кенә двор картуф ултырта. Колхозда йәшелсә һәм картуф сәсеү эшен ойоштороп ебәреү өсөн иртәнән һуңға беҙгә «Тагилстрой» ярҙамсы хужалығынан немец агрономы киләсәк. Уға тороу өсөн йүнле фатир әҙерләргә кәрәк.

– Алмабикә алып ҡайта инде. Ауылда Сәғилә еңгәйҙән дә тәрбиәле кеше юҡ. Аш-һыуға ла килеп тороп оҫта.

Быны ишеткән Алмабикәнең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Нисек инде немец менән бер өйҙә тороп, бер өҫтәлдә ултырып, шунда уҡ бер һауыттан ашап-эсеп йөрөмәк кәрәк!

– Кем уны саҡырған, шул үҙе алып ҡайтһын! Миңә немецығыҙ ҙа, картуфығыҙ ҙа кәрәкмәй! – тип Алмабикә ҡырт киҫте.

Ғәҙәттәгесә һыр бирмәгән Игебаев был юлы ниңәлер еңел генә сигенде.

– Улай булғас, мин үҙем алып ҡайтырмын. Барыһы ла тик миңә, Игебаевҡа ғына кәрәк – йәшелсәһе лә, картуфы ла, һыйыр һарайы ла!

Сабир ҡартлас рәйесте ысын күңелдән йәлләп ҡуйҙы.

– Ярай, әләйһә, иптәш Игебаев, ул әҙәмде үҙемә алып ҡайтырмын! Үҙебеҙ нимә ашайбыҙ, уға ла шуны ашатырбыҙ.

– Нисауа, немец булһа ла, барыбер әҙәмгә оҡшағандыр әле. Беҙҙәй генә

урыҫса ла беләлер әле, аңлашырһығыҙ. Тәртипкә лә беҙҙе бер аҙ өйрәтер, бәлки. Ярай, иптәштәр! Эшегеҙҙә булығыҙ! – тип Игебаев халыҡты таратып ебәрҙе.

Йәшелсә ултыртыласаҡ ерҙәр түбән ос бригадаһына ҡарау сәбәпле, йәшелсә звеноһын, Алмабикәнең теше-тырнағы менән ҡаршы килеүенә ҡарамаҫтан, уның ҡарамағына ҡалдырырға хәл иттеләр.

Алмабикә иртә менән ҡырып-һепереп ун сананы Салғыя аҫтындағы ҡышҡы ырҙынға иген ташырға ебәрҙе. Ун йөккә ун ҡатын беркетте. «Коммунар» бункерынан сыҡҡан игенде ҡул иләге менән иләү өсөн ауылдың ике тәжрибәлерәк кешеһен – Әхмәдиәр һәм Әбдрафиҡ ҡарттарҙы ҡуйҙы. Улар ҡара таңдан алып шәфәҡ ҡыҙыллығы бөткәнсә ырҙында иген иләне. Ырҙын мөдире Миһран бабай өйөнә ҡайтмай, бындағы таҡта өйҙөң ишеген эсле-тышлы кейеҙ менән көпләп, шунда ғына ҡунып йөрөнө, төндә ырҙын ҡарауылланы, көндөҙ иген ебәрҙе.

Колхоз келәтенән етешәр-һигеҙәр тоҡ тейәп, шуларҙың өҫтөндәге ылауҙы ҡатын-ҡыҙ ырҙын уртаһында туҡтатты. Былай ҙа өтәләнеп барған Миһран ҡарт килә ятҡан аттарҙың алдына йүгереп сыҡты.

– Һеҙҙең бында ҡайһынығыҙ старший? – тип һораны.

Саналарынан төшөп, өшөгән ҡулдарын ыуып торған бисәләрҙән кемдер:

– Миһран апа, беҙ бында бөтәбеҙ ҙә старший! – тип мәрәкәләп маташты.

– Мин һеҙҙең һәр берегеҙгә накладной яҙып торорға писарь түгел, документты бер кешегә генә яҙам. Ҡайтҡас, Алмабикәгә әйтегеҙ, бынан кире старшийҙы тәғәйенләп ебәрһен. Тәртибе шулай!

Ҡыҙҙар Миһран ҡарт әйткән һүҙенән кире ҡайта торған кеше түгел икәнен белеп, бер аҙ өйөлөшөп кәңәш ҡорҙолар.

– Старший итеп Ғилмивафаны ҡуябыҙ, – тип ҡысҡырҙылар һәм уны алға эткеләп сығарҙылар.

– Ярай, бик яҡшы. Һин үрге ос Солтанәхмәт Ғәббәсов ҡыҙы булырға тейешһең кеүек?

– Эйе, шуның ҡыҙы.

Ҡарт ҡуйынынан ҡағыҙҙар сығарып, химик ҡәләм менән белер-белмәҫ урыҫ телендә нимәлер яҙған булды.

– Тик тормағыҙ! Ана, ятҡан һоҫҡолар менән тейәй башлағыҙ! – тип үҙе ҡарҙан ҡара ергә тиклем таҙалап һалынған иген өйөмөнә күрһәтте. Ҡыҙҙар шаулашып тоҡтарына иген тултыра башланы. – Тоҡтарығыҙҙы лыҡа тултырмағыҙ, ауыҙын бәйләргә урын ҡалдырығыҙ! Тоҡ бауын сеймәлтмәй генә элмәкләп бәйләгеҙ!

Йәтеш кенә кәүҙәле Миһран ҡарт бер нисә тоҡто үҙе бәйләп-сисеп күрһәтте. Тоҡ бәйләгән бауҙың элмәгенән тартыуы була, бау бөтөнләй сиселеп тә төшә. Күтәрергә хәлдәре булмағас, тоҡ ауыҙына икешәр ҡыҙ йәбешеп, уларҙы ҡар өҫтөнән һөйрәтеп үлсәгес янына ташый башланылар. Быны күҙәтеп торған ырҙын мөдире:

– Былайтып бында ла, тегендә лә һөйрәтеп йөрөтһәгеҙ, тоҡтарығыҙ ике килеүгә лә етмәҫ. Уны ошолай эшләйҙәр! – тип ул уң ҡулы менән ауыҙынан, ә һул ҡулы менән аҫҡы мөйөшөнән күтәреп күкрәгенә ҡыҫты ла үлсәгес өҫтөнә алып барып һалды. – Һеҙҙең улайтып күтәрергә хәлегеҙҙән килмәҫ. Икешәр кеше ташығыҙ.

Кемдеңдер тоғоноң ауыҙы сиселеп, бойҙайы ҡар өҫтөнә түгелгәс, Миһран ҡарт, сыҙай алмай, бер урында әллә нисә тапҡыр өйөрөлөп алды.

– Бешәлкәһеҙҙәр! Колхоз афәттәре! Өйөрлө майғул! – тип төкөрөнә-төкөрөнә иген тейәргә ҡарттарҙы саҡырҙы. Әхмәдиәр менән Әбдрафиҡ иләктәрен ташлап, бар тоҡтарҙы үҙҙәренсә яңынан бәйләп, бер нисәүһен ырғыттылар ҙа яңынан үҙ эштәренә тотондолар.

Игенде тейәп бөткәс, Ғилмивафа беренсе булып атында ауылға юл башланы. Һигеҙ йөктө мәсеттә һаҡланған хөкүмәт игене өҫтөнә бушаттылар, ҡалған икеһен, орлоҡҡа тип, колхоз келәтенә алып киттеләр. Иң артҡы йөктә килгән Факиһа юлда нишләптер туҡтай-туҡтай, санаһынан бер-ике тапҡыр төшөп, аттың арҡалығын төҙәткән булды. Мәсеткә ул һуңлап ҡына килде.

– Әллә берәй хәл булдымы, Факиһа?

– Эй, шул ҡамыттың тамаҡ бауы әллә нисә мәртәбә ысҡынып йонсотто.

Тура һүҙле Ғилмивафа иғтибарлыраҡ ҡараны ла, оҙаҡ уйлап тормай:

– Ҡарағыҙ әле, ҡыҙҙар! Факиһа бер көн эсендә әллә нишләп йыуанайҙы ла китте! Әллә ауырлы инде?

Шул саҡ Факиһаның ыштан балағының осон бәйләп торған ебе өҙөлдө лә, ҡар өҫтөнә гәрәбәләй бойҙай шауҙырлап ҡойола башланы. Балаҡтарынан, билен быуған бишмәте эсенән игене ҡойолоп бөткәс, Ғилмивафа ҡобараһы осҡан Факиһаны яғаһынан тотоп бер-ике һелкте лә ҡыҙҙарҙың береһен ауылдың участковыйы Ишдәүләтов артынан йүгертте. Бер аҙҙан, ҡарҙа бата-бата, ҡып-ҡыҙыл битенә сыҡҡан бөрсөк тирҙәрен һөртә-һөртә, унығы килеп тә етте.

– Бына бур тотоҡ! Тегендә беҙҙең атай-ағайҙарыбыҙ ҡан түгеп немец менән һуғыша, ә Факиһа ыштан балаҡтарына тултырып колхоз игенен урлап йөрөй. Ана, урлаған игенен үлсәп, моҡсайға һалдыҡ – бөтәһе һигеҙ кило ярым булды, – тип Ғилмивафа ҡарҙа ятҡан бәләкәй ҡапсыҡҡа күрһәтте.

Ишдәүләтов Факиһаға яҡын килеп, уның ҡаҡса ғына кәүҙәһен тирәләп алаптай ҡулдары менән ҡапшап-һәрмәп сыҡты ла, башҡа бер ни ҙә таба алмағас:

– Әйҙәгеҙ, гражданка Байсарина, силсәүит кәнсәһенә протокол яҙырға! – тине. – Тот ҡапсығыңды! Һин урлаған игенде мин йөкмәп алып барыр тиһеңме?

Факиһа ҡалтыранған аяҡтары менән бер-ике аҙым ғына атлағайны, шунан ҡурҡыуынан бөтөнләй телдән яҙып, сөгөн ише ауыр тойолған моҡсайын күтәреп участковый алдынан кәнсәгә ҡарай атланы. Протокол төҙөгәндән һуң, Факиһаны өйөнә ҡайтармай ауыл сәүитендә бер төн тоттолар ҙа иртән ҡарауыл аҫтында районға оҙаттылар. Был хәлгә һәр кешенең ҡарашы үҙенсә булды. Берәүҙәр уны ысын күңелдән йәлләне, сөнки уның атаһына күптән инде «ҡара ҡағыҙ» килде, өйөндә унан бәләкәйерәк өс бала ас ултыра, әсәһе күптән сирле – үпкә ауырыуы менән ыҙалай. Икенселәре шулай уҡ ысын күңелдән ҡәһәрләне. Әсәһе Ҡотлобикә иһә һике өҫтөнә ятып, быуылып-быуылып ҡайнар йәштәрен түкте:

– Минең ҡыҙымды нахаҡҡа етәкселәр алдында ярамһаҡланып ултырҡаны өсөн Ғилмивафа был донъяла изгелек, ғүмере буйы ир рәхәте күрмәһен! Башы серегер! – тип ҡарғаны. Ҡотлобикә һәм уның туғандары Ғәббәсовтар менән башҡа һөйләшмәне лә, һаулыҡ та һорашманы.

## 7

Кисен аҡшам намаҙын уҡып ултырған Уйылдан ҡарт Сибайға үтеүсе «Башзолото» тип яҙылған кокс тейәгән машинанан бер оҙон, башына бүрек, өҫтөнә пальто кейгән кеше төшөп ҡалғанын күрҙе. Уның ҡулында ике урындан ҡайыш менән быуылған ҙур күн сумаҙан ине. Теге кеше кемделер туҡтатып ниҙер һорашты ла үрге осҡа, кәнсә яғына, ҡарай атлап китте.

Уйылдан ҡарт намаҙлығын бөкләп урынына элде лә, ике быялаһы ике епкә тағылған күҙлеген ҡолаҡтарына эләктереп, Мысыр яҡтарынан килгән әллә ҡасанғы йәдеүәленә күҙ йүгертеп, көндөң оҙонлоғон һәм ҡояш ҡасан байығанын хисаплап алды. Бер юлы быйыл рамаҙан айының беренсе яртыһына тура килергә тейешле ҡорбан айытының көнөн дә дөрөҫләне.

Эштән ҡайтҡан Алмабикә малдарҙы ябып, көндөҙ мал ашап бөтмәгән бесәнде йыйыштырып, ҡосағына утын алып өйөнә инде. Ҡыҙы сисенер-сисенмәҫтән, Уйылдан ҡарт күҙлеген тәҙрә яҡтауындағы сөйгә элде лә:

– Ҡыҙым, яңы ғына Мәғниттән килгән машинанан сумаҙан тотҡан әҙәм төшөп ҡалды. Былай ҡиәфәте менән һалдатҡа оҡшап тора ине, – тине.

Алмабикәнең йөрәге жыу итте. Әллә Ибраһимы ҡайтып төштөмө икән? Шундай уйҙан уның битенә ҡапыл ҡан бәрҙе. Эске әҫәрләнеүен йәшерергә теләп, ҡыҙ һораған булды:

– Ниндәйерәк ине ул кеше? Өҫтөндә шинеле бар инеме? Киң яурынлы, мыҡты кәүҙәле инеме? – тип Алмабикә күңелендә ул кешене Ибраһимына оҡшатырға тырышты.

– Әлләсе, уның яурынын кем үлсәгән? Өҫтөндә йөнлө бишмәт, башында быҙау тиреһенән тегелгән бүреге бар ине, шикелле.

Атаһының ул кешене төҫмөрләмәгәнен ишеткәс, Алмабикәнең асыуы ҡабарҙы.

– Эшһеҙ кеше һымаҡ, урамдағы теләһә нәмәне ҡарай ҙа ултыраһың! Минең бына бер ҙә тәҙрәгә ҡарарға ваҡытым юҡ!

– Сабыр ит, ҡыҙым. Һин дә ҡартайырһың әле. Оло йәштә күҙҙең кеше танырлыҡ нуры ҡалмай шул, ә күргән кешене таныйһы килә.

– Һәр үткән-ниткәнде таныу һиңә нимәгә кәрәк? Өйөң йылы, йомшаҡ урының түрҙә, самауыр көтөп, тәсбихыңды тартып тик ултыр!

Был сер тик иртәгәһенә кәнсәгә барғас ҡына асыҡланды. Йыйылғандар араһында һипкелле, һары ҡаҡса битле, йәшел күҙле, һары төрмәс сәсле бер ят кеше әллә ҡайҙан уҡ айырылып тора ине. Һүҙ башларҙан алда Игебаев, төҫөнә етдилек өҫтәп:

– Бына был егет «Тагилстрой»ҙан килгән йәшелсә буйынса агроном Ганс Фишер була, – тине.

Рәйес уның исемен әйткәнен ишеткәс, был оҙон һонтор әҙәм аяғүрә баҫып башын эйҙе.

– Был исемде әйтергә беҙҙең тел әйләнмәй. Был бәндә менән нисек аңлашырбыҙ икән? – тиеште халыҡ.

Бындай һөйләште ғүмерендә ишетмәгән Фишер, башын сайҡап:

– Нихт ферштейн! Нихт ферштейн? – тигән булды.

– Вот что, иптәш агроном! Мин бында бер һинең өсөн үҙ ауылдаштарым менән урыҫса һөйләшә алмайым. Бер кешене беҙҙеңсә өйрәтеү күпкә еңелерәк булыр, – Игебаев ҡаты ғына руссаланы.

– Поняль, товарищ председатель, – тине тиҙ генә Ганс Фишер.

Игебаев бригадирҙарҙы ҡалдырып, ауылдағы еңел эшкә ярарлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙан йәшелсә буйынса звено төҙөнө. Ул бер аҙ уйлап ултырҙы ла Алмабикәгә өндәште:

– Ҡарындаш, һин был эштән күпме ҡотолорға ныҡышһаң да, уны һиңә беркетмәй әмәлебеҙ юҡ. Йәшелсә сәсәһе туғай һинең бригада ҡарамағында. Икенсенән, хәҙергә Фишерға бер үҙенә генә ат беркетеп ҡуйырға мөмкинлек юҡ, ул һораған йомошон үҙ атың менән йомошларһың инде. – Ултыра торғас, рәйес һораған булды: – Иптәш Фишер, һин ат егә беләһеңме?

– Нишләп белмәҫкә, мин дә колхозда эшләнем бит. Тик беҙҙә аттарҙы парлап бер тәртәле фургонға егәләр. Нимәләр сәсергә иҫәп тотаһығыҙ? Орлоғоғоҙ бармы? Ерегеҙ әҙерме? Йәшелсә ултыртасаҡ ергә күпме тиреҫ сығарҙығыҙ? – тип һорауҙар яуҙырҙы Ганс.

– Орлоҡ тигән нәмә беҙҙә ғүмерҙә булғаны юҡ. Һеҙҙән килгән вәкил, алты

тонна картуф бирәбеҙ, тип вәғәҙә әйтеп киткәйне. Ә тиреҫкә килгәндә, беҙ донъя яратылғаны бирле ергә тиҙәк түгеп уны бысратҡаныбыҙ юҡ. – Быны тыңлап ултырған бригадирҙар танауҙарын сирып ситкә боролдо. – Беҙ мал буғынан ҡышын өйҙәрҙе яғып йылытыу өсөн тиҙәк һуғабыҙ. Күреп тораһығыҙ бит, ауылдың тирә-яғы – ҡола ялан. Шунан артҡанын беҙ ҡыш буйы Ҡыҙыл ярына ташыйбыҙ ҙа, һыу таша башлағас, шунда ауҙарабыҙ. Еребеҙ әле әҙер түгел, ҡарҙан әрселгәс, уны яҡшы итеп һөрөрбөҙ.

Аптыраған немец оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ ултырҙы. Шунан:

– Юҡ, бындай участок бармай, – тип ҡырт киҫте.

– Ана, бригадир Алмабикә урынын күрһәтер, кәңәшләшерһегеҙ. Унан һуң тағы ла һөйләшербеҙ, – тине эсе бошоп ултырған председатель. «Был йәшелсә ниңә кәрәк булғандыр инде миңә? Был соролдоҡтан баш ауырып китте»,– тип уйлап алды үҙе шул арала.

Фишер өҫтәл ҡырына ултырып блокнотына эште ойоштороп ебәреү өсөн нимә кәрәклеген барыһын да теҙеп ҡуйҙы. Шунан Алмабикәне эҙләп сығып китте һәм уны ат дворында тапты:

– Я хотель бы поехать и посмотреть поле – это можно?

– Атаҡ, атаҡ! Бөгөндән башҡа көн бөткәндер шул! Мин атты туғарып ҡуйғайным бит әле.

Фишер ныҡыша торғас, атын яңынан ектереп, йәшелсә ултыртыласаҡ ерҙе ҡарарға киттеләр. Уларҙың санала ҡушлап ултырып ауыл осо яғына китеп барыуҙарын көйәнтәләп һыуҙан ҡайтып килгән бер-ике ҡатын күреп ҡалды.

– Ҡара, ҡара, Уйылдан ҡарттың Алмабикәһе әллә ниндәй һары мәте кеүек егет менән аҫҡы урамға төшөп китте, – тине береһе.

Тирмән эргәһендә туҡтағас, аттан төшөп, Фишер тирә-яҡты ашыҡмай ғына урап сыҡты, ҡара ер күренгән урындарҙа тупраҡты соҡоп, хатта еҫкәп ҡараны.

– Был урында бер ниндәй ҙә йәшелсә үҫмәҫ, тупрағы артыҡ тоҙло, ҡояш та етмәйәсәк, – Фишер яҡындағы ҡалҡыулыҡ яғына ҡулы менән күрһәтте. – Шунда ултыртырға мөмкин…

Ҡояш байыуға Алмабикә үҙенә юл буйына серле ҡарап килгән немецты Сабир ҡарт өйө тапҡырында төшөрөп ҡалдырҙы.

Иртәнсәк сәғәт ете тулыр-тулмаҫтан Фишер кисен яҙған ҡағыҙҙары менән кәнсәлә ултыра ине. Килешеп торған костюмына, таҙа күлдәгенә, шығырҙап торған калушлы итегенә барыһы ла иғтибар итте. Колхоз активы менән һөйләшеү бөткәс, Ганс ҡағыҙҙарын председателгә тотторҙо.

– Был ниндәй ҡағыҙҙар? – тип һораны аптыраған Игебаев.

– Был – йәшелсә звеноһының эш планы. Ошо көндән башлап беҙ төҙөлгән план буйынса ғына эшләйәсәкбеҙ, – тине Фишер.

– Рәхим ит, эшләй күр! Һиңә кем ҡамасаулай? – тип Игебаев, папканың бауын да сисмәй, уны кире һона башланы.

– Юҡ, иптәш председатель, был документҡа һеҙ ҡул ҡуйырға тейешһегеҙ!

Игебаев папканы асып, тигеҙ генә хәрефтәр менән яҙылған бер ҡосаҡ ҡағыҙ биттәрен сығарып өҫтәлгә һалды.

– Һәлә-лә… Был тиклем ҡағыҙҙы мин колхоз ойошҡаны бирле уҡығаным юҡ! Уны уҡып сығырға бер аҙна кәрәк, – алдына һалып, бармағы менән йөрөтөп, бер-ике юлын ижекләне Игебаев. – Үҙең генә уҡып аңлатып бир инде.

Фишер планын ҡулына тотоп, бер-ике тапҡыр тамағын ҡырып, уҡырға тотондо:

– «Ҡыҙыл Ялан» колхозының йәшелсә звеноһына ошондай бурыстар йөкмәтелә… – яртыһына еткәс, ул аяҡтарын алмаштырып алды ла, тауышын көрөрәк сығарып, уҡыуын дауам итте.

Быны тыңлап ултырған Игебаевтың түҙемлеге бөтә башланы.

– Иптәш Фишер, кишер сәсәбеҙ тип, барыбыҙ ҙа был эшкә тотона алмайбыҙ, унан башҡа ла эшебеҙ муйындан. Башҡортта «Өрә етәр – артынан һөрә етәр» тигән мәҡәл бар. Мин һинең ҡарамаҡҡа ун ике кеше биргәнмен, шулар менән идара ит. Килеп сыҡҡан мәсьәләләр тураһында, ана, Сабир ағайың менән һөйләш. Тик түшәгегеҙгә ҡарап ҡына аяҡ һуҙығыҙ, – тип папканы кире бирҙе.

Тамам аптыраған Фишер:

– Иптәш председатель, һеҙ ҡултамға ҡуймайынса... Был документ булып иҫәпләнмәй.

– Ярай, килтер! – тип пландың мөйөшөнә өҫтәлдә ятҡан ҡыҙыл ҡәләм менән имзаһын ҡуйҙы. «Был әҙәм көн дә ошолайтып һарыуға тейә башлаһа, мине камил ҡаңғырта икән»,– тип уйланы үҙе.

«Рәйес ҡайҙандыр йәшелсә үҫтерергә немец алдырған...» Был хәбәрҙе иртән сепаратҡа килгән ҡатындар тиҙ генә таратып ебәрҙе. «Беҙҙең ирҙәребеҙ немецтар менән һуғышып баш һала, ә Уйылдандың ҡыҙы, донъялары теүәл булғас, немецты санаһында йөрөтә», – тип тә Алмабикәгә төрттөрөп һөйләнделәр.

Фишер Алмабикә менән һөйләшкәндә батырлана төштө. Элекке һымаҡ һүҙ ҡушҡанда ҡыҙарып та китмәне, нисек тә булһа ҡыҙға оҡшарға, уға ҡарата ишанычлылыҡ күрһәтергә тырышты. Был кеше күҙенән ситтә ҡалманы. Ысынлап та, Ганс был йомро ғына, муйыл күҙле, ҡара ҡашлы, тумалаҡ битле, йылмайғанда аҡ ынйы кеүек тештәрен күрһәткән, баҫҡанда ут сығарып йөрөгән Алмабикәне бер күреүҙә үк оҡшатты. Бергә барғанда гел ҡулынан алырға маташты. Бер көн кәнсәнән икәү ҡайтып килгәндә тиктомалға Фишер унан, «яратам» тигән һүҙ башҡортса нисек була, тип төпсөндө. Алмабикә бер аҙ өндәшмәй барҙы ла, шунан туҡтап, Фишерҙең күҙенә туп-тура ҡараны:

– Бына нимә, иптәш Фишер, минең тирәлә башҡа уралып йөрөмә! Ана, йәшелсәң менән бул, беҙҙең ҡатындарға уны үҫтереү тәртибен өйрәт тә, дүрт яғың ҡибла! Минең йөрөгән егетем бар, ул фронттан ҡайтҡас, ҡауышырға һүҙ бирештек. Былай ҙа беҙҙең турала ғәйбәт тарата башланылар.

– Һуғышта ниндәй генә хәлдәр булмай бит, унан ҡайтмауы ла мөмкин, – тип уйламайынсараҡ һүҙ ысҡындырҙы Фишер.

– Әгәр үлһә, ил өсөн, халыҡ өсөн үлер! Ул бәғзеләр һымаҡ кишер үҫтереп йөрөмәне, илебеҙҙе һаҡларға китте! Ибраһим ҡайтмаған хәлдә лә, кейәүгә сыҡмаһам сыҡмаҫмын, ләкин һинең ишеләр менән дә йөрөмәйәсәкмен, – тип Алмабикә тураһын әйтеп, тиҙ-тиҙ алға атлап китте.

Аптыраған, бындай ҡаты һүҙҙәрҙе ишетергә уйламаған Фишер артта тороп ҡалды. Алмабикә һуңынан ғына белде: ҡайтып барған Фишерҙы ауыл егеттәре туҡмаған икән. Был турала быны күргән Әбделғәни ағай председателгә белдергән. Ошо ваҡиғанан һуң немец ауырыуға һабышып, өс көн кеше күҙенә күренмәй, Сабир ҡарт өйөндә ятты.

Тик ауылда Алмабикә менән немец тураһындағы имеш-мимеш таралып өлгөрҙө һәм Уйылдан өйөнә лә килеп етте. Ҡарт һике йөҙлөгө өҫтөндә, Сәғилә әбей күҙҙәрен яулыҡ осо менән һөртә-һөртә түрбашта ултырып, Алмабикәнән тәфтиш алдылар.

– Йә, ҡыҙым, әйт әле, был ләғнәт менән санаға икәүләп ултырып, көпә-көндөҙ ни эшләп йөрөйһөгөҙ? Бөтә дәүләт герман менән һуғышып йөрөгәндә, һинең ул немец менән йөрөүең ни була? Бына шуның раҫын ғына әпсәң менән миңә һөйләп бир! – тине атаһы, Алмабикәгә ҡарашын уҡ һымаҡ атып.

Өйҙә ауыр тынлыҡ баҫты, тик стеналағы сәғәт кенә сылт-сылт һуғыуын дауам итте. Ҡарттар көттө, Алмабикә өндәшмәй генә башын түбән баҫып бәләкәй

урындыҡта ултырыуын белде. Сабырһыҙ Уйылдан, осаһына беҙ менән сәнскән кеүек, урынында борғаланып алды.

– Берәй эш булғандыр, юғиһә алға һалып һөйләп бирер ине, халыҡ бушҡа ғына тумбытмаҫ! – тип Уйылдан тағы һикеһендә өйөрөлдө. – Әйт, ҡыҙым! Булһа – әйт! Был ауырлыҡты көллөбөҙ күтәрәйек.

Алмабикә ҡапыл аяғүрә баҫты, ата-әсәһен уҫал күҙ ҡарашы менән ялмап алды.

– Тәфтишегеҙ бөттөмө? Ниңә һеҙ, оло кешеләр, ҡыҙығыҙға шик тотоп, урамдағы юҡ-бар хәбәргә ышанып йөрөйһөгөҙ? Беләһегеҙ бит, мин Ибраһимды көтөргә һүҙ бирҙем, минең һүҙем бишәү түгел, берәү генә. Әгәр ул ҡайтмаһа, – Алмабикәнең күҙҙәре йәш менән тулды, – мин кейәүгә бер кемгә лә сыҡмам!

Күптән күҙе шәмәреп ултырған әсәһенә етә ҡалды, ул да быуылып иларға кереште. Уйылдан күпме генә тырышмаһын, барыбер йомшап китеп, күлдәгенең салғыйын ҡайтарып, йәшкеҙәгән күҙҙәрен һөртөп алды. Туйғансы илағандан һуң, Уйылдан ҡарт өйөндә был мәсьәләгә нөктә ҡуйҙылар.

Шулай ҙа быны менән генә эш бөтмәне. Икенсе көнөн кис Алмабикәне парторг саҡырҙы. Өмөтҡужин Игебаевты ла һөйләшеүгә ҡыҫтырырға уйлағайны, тик рәйес ҡырт киҫте:

– Мин, ҡустым, ҡыҙым ише баланы тикшереүҙә ҡатнаша алмайым, быға выжданым да бармай. Шуны ғына әйтә алам: Алмабикәнең бер ниндәй ҙә ғәйебе юҡ, нахаҡ һүҙҙәрҙе тыңлап, һәләк итеп ҡуймағыҙ. Ул ундайҙарҙан түгел! – тине лә Игебаев сығып уҡ китте.

Алмабикә ишекте тауышһыҙ ғына асты ла, һаулыҡ һорашып, һандыҡ өҫтөнә барып ултырҙы. Өмөтҡужин, Алмабикәнең тыныс битендә нимәлер күрергә теләгәндәй, диҡҡәт менән уға ҡарап алды, ҡағыҙ-ҡәләм сығарып яҙырға әҙерләнде. Үҙе оҙаҡ ҡына һөйләшеүҙе нисек башлап китергә аптыраны. Шунан, тауышына яғымлылыҡ өҫтәп, һүҙ башланы.

– Йә, Алмабикә, кеше һөйләгәнен мин дә ишеттем... Хәлдең нисек булыуын үҙең генә һөйләп бир.

– Ә һин, Өмөтҡужин иптәш, нимәләр ишеттең һуң? Башта үҙең һөйләп бир, аҙаҡ мин өҫтәрмен. Минең һөйләй торған хәбәрем юҡ!

– Мин һиңә ышанам, тик, хәбәр таралғас, беҙ уны тикшерергә тейешбеҙ. Теге немецты беҙҙең егеттәр ҡаҡҡылап ташлаған, ишеткәнһеңдер? Әллә барып хәлен белеп киләһеңме?– тип һораны парторг.

– Уны туҡмауҙа минең ҡыҫылышым юҡ. Ундай хәлдәр беҙҙә мәжлес һайын булып тора. Әгәр һиңә кәрәкһә, уның хәлен үҙең бел. Миңә ул немецтың хәжәте ике тин! – тип Алмабикә кәнсәнән сығып китте.

Өмөтҡужин ошо ғауғаны башлап ебәргән Әбделғәни ҡартты саҡыртырға булды. Тик ул да артыҡ нәмә һөйләй алманы. Ҡарттың әйтеүенсә, «мин ферманан ҡайтып килгәндә, теге немецты ике ауыл кешеһе туҡмап ята ине. Мине күргәс, тегеләр өйҙәр яғына ҡасып юғалдылар, береһен дә таный алманым...»

Әбделғәни сығып киткәс, парторг прокурор менән кәңәшләшергә булды. Ваҡыттың һуң булыуына ҡарамаҫтан, теге урынында булып сыҡты. Һаулыҡ һорашып, Ялан ауылындағы ике көн элгәре булған ваҡиға тураһында бик сырмалсыҡ итеп булһа ла һөйләп бирҙе. Прокурорҙың оҙон һүҙенә Өмөтҡужин өҙөпөҙөп кенә бер нисә яуап ҡайтарҙы.

– Эйе... Шулай инде, иптәш прокурор... Әлегә бер кем дә заявление яҙмаған... Тырышырбыҙ, әлбиттә... Һау булығыҙ.

Иртәгәһен колхоз активы йыйылғас, парторг прокурор әйткәнде халыҡҡа еткерҙе.

– Иптәштәр, өс көн элек ауылда булған күңелһеҙ ваҡиға тураһында мин кисә район прокуроры менән кәңәшләшкәйнем. Әгәр ҙә туҡмалған немец ялыу менән мөрәжәғәт итһә, егеттәрҙең башы харап буласаҡ. Был хәлгә сәйәси баһа биреүҙәре мөмкин. Ҡайһы бер районларҙа совет немецтарын туҡмау, хатта үлтереү осраҡтары йышайған икән, тип һөйләне прокурор. Әлбиттә, совет халҡының илебеҙҙе баҫып алған фашистарға нәфрәте ҙур, ләкин немецтар араһындағы айырманы ла күрә белергә кәрәк. Немец милләтенән булған, беҙҙең кеүек үк совет кешеләренә ҡарата беҙ башбаштаҡлыҡты күрһәтә алмайбыҙ. Ярай әле, шуның менән генә үтеп китһә.

– Үтеп китмәһә, беҙҙең ауыл ҡыҙҙарына ҡулын һуҙмаһын, үҙе ғәйепле! – тип ҡысҡырҙы кеше араһына ышыҡланған комсомолдарҙың береһе.

Парторг ике бите ҡыҙарған, башын аҫҡа эйеп ултырған Алмабикәгә ҡарап алды һәм дауам итте.

– Беҙ ентекле тикшереү үткәрҙек, – Өмөтҡужин рәйескә төбәлде. – Алмабикәнең бында бер ниндәй ҙә ғәйебе юҡ. Беҙҙең бригадирға нахаҡтан яла яғып, уның намыҫына тап төшөрөргә бер кемдең дә хаҡы юҡ.

Бер аҙҙан Асия әбейҙе Фишер артынан ебәрҙеләр. Ике күҙ төбө лә күгәргән немец, һаулыҡ һорашып, буш урынға барып ултырҙы. Бөтә кеше уға текләп тынып ҡалды. Шомло тынлыҡты парторг боҙҙо:

– Йә, иптәш Фишер, ни эш бөтөрәһегеҙ?

Йөҙөндә борсоу, хатта бер аҙ ҡурҡыу билдәләре күренгән Фишер күтәрелеп, оҙаҡ ҡына бер нәмә әйтә алмай баҫып торҙо. Шунан ҙур ҡыйынлыҡ менән генә һүҙгә килде:

– Иптәштәр, һеҙҙең алдығыҙҙа бригадирҙан ғәфү итеүен һорайым, – тип, күҙенән эркелгән йәштәрен йәшерергә теләп, битен ситкә борҙо.

Кәнсәлә ултырғандар, өҫтәренән ауыр йөк төшкән кеүек, еңел тын алып ҡуйҙы. Алмабикә өндәшмәне. Уның ҡарауы, ҡәнәғәт булып киткән парторг урынынан һикереп торҙо.

– Әлбиттә, әлбиттә! Алмабикәнең һиңә бер ниндәй ҙә асыуы юҡ, – уның эштең тәрәнгә китмәүенән ҡәнәғәтлеге йөҙөнә сыҡҡайны. Игебаев, башын ҡалҡытып, парторгҡа күҙ һирпеп ҡараны ла уның сабый бала шикелле ҡыуаныуына йылмайып ҡуйҙы.

Шул уҡ көндө агроном Фишерҙы Алмабикә ҡарамағынан Латифҡа беркеттеләр. Сыбыртҡыһын ҡулына йомарлап тотҡан Латиф:

– Алай-былай булһа, мин уның атаһын танытырмын, – тип шаяртып ҡуйҙы.

Ошоноң менән был бәләкәйҙән генә башланып, ауылды бер нисә көн шаулатып алған ваҡиғаға нөктә төртөп ҡуйғандай булдылар.

8

Яҙғы сәсеүгә төшөү алдынан Алмабикәгә ғәҙәттәгенән ҡалынраҡ өс мөйөшлө һалдат хаты килеп төштө. Почтальон хатты һонғас та, ул уның Ибраһимдан икәнен таныны. Ниңәлер Алмабикәнең йөрәген шомло тойғо, насар хәбәрҙе алдан һиҙенеү телеп үтте. Ситкәрәк китеп, утын түмәре өҫтөнә ултырып, ян-яҡҡа ҡаранып алды. Конвертты асып уҡый башлауы булды, аптырап китте – элекке һымаҡ хат башында «Һөйөклөм, йәнем...» тигән һүҙҙәр юҡ. Алмабикәнең янып барған битенә боҙло һалҡын бәрҙе. «Ошо араларҙа һинән хат килмәгәс, әҙерәк борсола ла башлағайным, хәҙер барыһы ла аңлашылды: һинең миңә хат яҙырға ваҡытың булмайыраҡ киткәндер, моғайын. Нисә айҙар буйы мөхәббәтең, мәңге тоғролоғоң тураһында оҙон-оҙон хаттар яҙып мине алдатҡанһың, минең изге тойғоларымдан көлөп йөрөгәнһең... Кем менән бит әле? Беҙ бында немецтар

менән ҡанлы һуғыш алып барған саҡта, һин немец ҡосағында ятаһың икән! Бындай ҡара хыянатты кисереп йәшәгәнсе, миңә һуғышта үлеү мең тапҡыр еңелерәк...» Алмабикә, хатты усына йомарлап, ҡапыл быуындары мамыҡҡа әйләнгән аяҡтарына саҡ баҫып, иҫерек кеше кеүек сайҡала-сайҡала өйгә инеп, ҡаҡ һикегә ауҙы.

Ауылға килгән алман* менән Алмабикә тураһында йөрөгән имеш-мимеш хәбәр, билдәле, Ибраһимдың атаһы, төндә хөкүмәт игене һалынған мәсетте ҡарауыллаған, ә көндөҙ бригадир Латифтың йомош юлында йөрөгән Әбделхәким ҡарт та ишетте. Ире ишеткәс, көнө-төнө уның менән сөңкөлдәшкән әбейе Вәрәҡә нишләп ишетмәҫкә тейеш? Әлбиттә, хәбәр уның ҡолағына ла сағылды. Ишетеү генә түгел, ғәрлектәренән кеше күҙенә күренергә оялып йөрөнөләр. Бигерәк тә Ибраһимдың әсәһе өҙгөләнде, сөнки армияға китер алдынан улы: «Әсәй, белеп ҡуйығыҙ, Алмабикә – һеҙҙең өйөгөҙгә килә торған киленегеҙ, мин иҫәнһау ҡайтҡанса уға күҙ-ҡолаҡ булып тороғоҙ!»– тип бер нисә тапҡыр киҫәткәйне. Фронтҡа китеп барған Ибраһимдың Һарытауҙан Алмабикәгә яҙып һалған һуңғы хаты Вәрәҡә әбейҙең тап шул «күҙ-ҡолаҡ» булып йөрөүенең нәтижәһе ине.

Алмабикә тураһындағы ғәйбәтте ишетеп, тиреһенә һыя алмаған әбей, күрше Рәшит исемле малайҙы саҡырып, уның алдына ҡаймаҡ туҡыған бер туҫтаҡ ойотҡан ҡуйҙы ла Ибраһимға хат яҙырға ҡушты. Малай икмәк таҡтаһын һике йөҙөнә һалды, кеҫәһенән ҡәләм сығарып, Әбделхәким ҡарттың иҫке китабынан йолҡоп алынған ҡағыҙға әбейҙең сәләмдәрен теҙә башланы. Башта хат шыма ғына барҙы. «Ауыл хәлдәренә күскәндә, һинең һөйөклө Алмабикәң...» Ошо урынға еткәс, Рәшит, яҙыуынан туҡтап, һораулы күҙҙәрен әбейгә төбәне.

– Яҙ, балам, яҙ! Минең әйткәндәрҙе түкмәй-сәсмәй ҡағыҙыңа төшөр, улым.

– Юҡ, инәй! Мин Ибраһим ағайға бындай насар хатты яҙалмайым, – тип Рәшит йөгөнөкләп ултырған урынынан торҙо. – Әсәйем быны, юҡ хәбәр, тип әйтте. Эскән ойотҡанды һыйырыбыҙ быҙаулағас ҡайтарырмын.

Малай тиҙ генә өйҙән сығып та ҡасты. Вәрәҡә, уйлап алғандан һуң, икенсе күршене – аҡылға бер төрлөрәк Мәрғиәне саҡырҙы. Уның инеүенә самауыр ҡайнатып, колхоздан бирелгән норма ононан май икмәк бешерҙе. Мәрғиә тупһа аша атлар-атламаҫтан:

– Әй, уңғанһың да инде, Вәрәҡә еңгә! Һинең өйөңдә йыйыштырып ҡуйғанһың! Иҙәнеңә баҫырлыҡ та түгел, шул тиклем таҙа!

Күңеле тамам тулған Вәрәҡә әбей:

– Әйҙә, Мәрғиә күрше, түрҙән үҙ! Был арала эсем бошоп тора әле, ағайың менән хәсрәтләнәбеҙ. Ибраһим Ташкентта госпиталдә ранин булып ятҡайны, ҡайтып төшөр, тип өмөтләнгәйнек. Булманы шул. Ситтә ашайһы ризыҡтары, эсәһе һыуҙары бөтмәгәндер, күрәһең. Хатында, яңынан фронтҡа китәбеҙ, тип яҙған.

– Иҫән-һау ғына булһын инде, Хоҙай бәлә-ҡазаларҙан һаҡлаһын, уға тейәһе дошман уҡтарын Тәңре ситкә осорһон! – Күршеһенең изге теләгенән Вәрәҡә әбейҙең күңеле тулды, ул эстән генә: «Халыҡтың Мәрғиәне аҡылға еңелерәк тигәне буш хәбәр икән», тип уйлап та алды.

– Амин! Әйткәнең килһен, иҫәнлектә күрешергә насип булһын!

– Шулай булмай ни? Минең теләгем һәр ваҡыт ҡабул булып тора ул, – Мәрғиә теләктәренең Хоҙайҙың амин тигән мәленә тура килгәненең бер нисә миҫалын

---

**Алман* — герман кешеһе, немец (ғәрәпсә).*

һөйләп алды. – Иҫән-һау ҡайтып, боҙоҡлоҡ ҡылып ятҡан дошмандарҙың йөрәгенә ут һалһын!

Шулай итеп, Мәрғиә ауылда яңы ғына булып үткән ваҡиға тураһында тәүге ҡармаҡты ташлап ҡуйҙы. Ул яңылышманы. Вәрәҡә әбей шундуҡ килеп тә ҡапты.

– Әйтмә инде, күрше! Әҙәм мәсхәрәһе бит! Баламдың башын әйләндереп, хатлашып ятҡан була бит әле! Ата-әсәһенән оялмаһа, мирҙән әҙерәк оялһа ни булған? Етмәһә, үҙен бригадир итеп ҡуйғандар! – тип Вәрәҡә әбей, Алмабикәнең исемен әйтмәй генә, Мәрғиә алдында бер талай сөңкөлдәп алды.

Төрлө ғәйбәт сәйнәй-сәйнәй, Алмабикәнең оятһыҙлығын ҡат-ҡат тылҡып, оҙаҡ итеп сәй эстеләр. Май икмәк менән ҡаймаҡлы сәй Мәрғиәнең ҡырҡ быуынын, бигерәк тә уның оҙон телен бөтөнләй тағатып ебәрҙе.

– Был оятһыҙҙарҙың ҡара эштәрен былай ғына ҡалдырыу ярамаҫ, донъяныҡын донъяға ҡайтарыу лазым. Был турала Ибраһимға хат аша белдереү кәрәк, – тип Вәрәҡә әбейҙең күптән уйлағанын Мәрғиә үҙе белдерҙе.

– Кем яҙһын һуң уны? Үҙебеҙҙең күҙебеҙ танымай, тота һалып ундай эште теләһә кемгә ҡушып та булмай бит әле, – тип әбей байғошланып та алды.

Үпкәһен йөҙҙөргәнсә сәй эскәндән һуң, бер кемдән һорап тормай, Мәрғиә үҙе хат яҙырға тотондо. Вәрәҡә әбей башта ни яҙырға икәнен үҙе әйтергә маташҡайны, ләкин Мәрғиә уның ҡолаҡ төбөндә һәр һүҙен, яңы ҡайнатҡан туҙ һағыҙы кеүек, һуҙып тороуын яратманы. Күңеле ни теләһә – шуны рәхәтләнеп яҙҙы, өҫтәп-өҫтәп, ҡабартып-ҡабартып яҙҙы. Донъяға булған үҙенең үпкәһен, ир рәхәте күрмәй яңғыҙ йәшәүенең асыуын да хатына ҡушып яҙҙы. «Берәүҙәргә, исмаһам, аяҡһыҙ-ҡулһыҙ йәнвәлид тә юҡ, ә икенселәр туйып ҡоторалар, һуғышта берәүһе уны өҙөлөп ярата, икенсеһе бында теләһә кем артынан тағылып йөрөй» тип көнләште ул.

Мәрғиә хатты яҙып бөткәс, уны ҡулдан эшләнгән конвертҡа тыҡты, ҡара еп менән уратып тегеп сыҡты һәм тышына «Полевая почта» һанын яҙып, дебет шәле осона төргәс, елберҙәтә баҫып сығып та китте.

Кис эштән ҡайтып төшкән Әбделхәким ҡарт ишек асыу менән, танауын сирып тарта-тарта, ҡурылған һарыҡ майы тәмен тойоп, ҡаҙан яғына күҙ йүгертеп алды.

– Әбей! Әллә бөгөн берәй самаң бармы? – тип һораны, мәрәкәләп.

– Ул ҡайҙан килгән сама булһын, ти?

– Өйҙә майлы нәмә бешкәнен танауым һиҙә шул! Әллә берәй ҡунаҡ-фәлән килдеме?

– Ниндәй ҡунаҡ булһын, ти, был заманда? Ибраһимға хат яҙҙыртмаға күрше Мәрғиәне саҡырғайным.

Быны ишетеү менән, сисенеп торған ҡарт һағая төштө.

– Яҙҙымы һуң?

– Яҙмай ни? Үҙе пуштаға һалырға китте.

– Ниҙәр яҙҙығыҙ һуң?

Вәрәҡә әбей түҙмәне, хатта ентекләп «булаһы килен» Алмабикәнең биткә серкеү килтереүе хаҡында яҙыуын бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе. Ләкин тәмләп һөйләй башлаған һүҙен ослай алманы, асыуынан шырты ҡабарған Әбделхәким сисергә өлгөрмәгән быймаһын аяғынан һелкте лә түрбашта сәй әҙерләп маташҡан әбейенә ырғытты.

– Тапҡанһың кем менән кәңәш ҡорорға! Йәштәрҙең араһын һин боҙмаһаң, башҡа әҙәм табылмаҫ, тип ҡурҡтыңмы? Бынан һуң Алмабикәнең күҙенә нисек күренмәк кәрәк? Кешенең юҡ-бар хәбәрен ниңә таратып йөрөйһөң?!

Май икмәк менән сәй эсеп алғас, ҡарт бер аҙ йомшарҙы.

– Эх, әбей, әбей! Сабыр итеңкерәп торорға кәрәк ине, уның бөкилле буш хәбәр булырға тейешлеген күңелем һиҙеп торғайны. Шундай хатты алғас, малайың ҡыҙыулыҡ менән Алмабикәгә ҡаты бәрелһә...

– Әлләсе, ул тиклемен кем уйлаған уның? Ибраһимды йәлләп, асыуым килгәйне шул.

– Аҙағы хәйерле булһа ярай ҙа ул, – тине ҡарт, бер аҙ тынысланып.

Ләкин был бәләнең башы ғына булған икән. Бер-ике аҙна ваҡыт үткәс, ҡояш байып, ауыл урамы һил булып ҡалғас, Әбделхәким өйөнә тыны бөткән Сәғилә әбей килеп инде. Уның айбары сәсрәп ингәнен күргәс, хужалар икеһе лә ҡуҙғырышып, тороп ҡаршы алдылар. Вәрәҡә әбей, битенә яһалма борсолоу төҫө күрһәтеп:

– Әйҙә, түрҙән уҙ, ҡорҙашбикә! Әллә нишләп төҫөң ҡасҡансы? Әллә берәй насар хәбәр менән килдеңме? – тигән булды.

– Төҫөң түгел, әллә ниҙәрең ҡасыр был заманда! – тип Сәғилә әбей әҙәп һаҡлап, һыр бирмәҫкә тырышты. Иң тәүҙә хужаға, унан һуң Вәрәҡәгә ике ҡулын һуҙып күреште лә һикегә ултырып доға ҡылды, иҫәнлекте, мал-тыуар именлеген һорашты. Шунан, ҡапыл нимәлер иҫенә төшкән кеүек, һүҙен дауам итте. – Һүҙгә әүрәп онотоп та киткәнмен, мин һеҙгә оло йомош менән йөрөйөм. Кисә Алмабикә Ибраһимдан хат алғайны, шуны уҡығас, ауырып китте. Һаман да ята әле. Ниндәй хат булғандыр инде?

Өй хужалары бер-береһенә серле итеп ҡарашып ҡуйҙы.

– Ыстағәфирулла! Әллә Ибраһим менән берәй нәмә булдымы? – тип Вәрәҡә әбей ике ҡулы менән йөрәгенә йәбешкән булды.

– Белмәйем шул, Алмабикә, бер ни ҙә өндәшмәй, хатты иҙәнгә ырғытты. Аптырап һеҙгә килдем бына. Башҡа ҡайҙа барайым һуң? – Сәғилә әбей түрбаш яғына боролоп, түшелдерегенән йомарланып бөткән хатты сығарҙы.

Башта Әбделхәким, шунан әбейе хатты ҡулдарына алып ҡаранылар һәм икеһе бер тауыштан:

– Эйе, был яҙыу Ибраһимдыҡы! – тинеләр.

Ҡарт: «Нишләргә инде? Хатты кемдән уҡытырға? Уны теләһә кемдән уҡытып, бөтә ауылға яманатың сығыуы бар!» – тип уйлап алды.

– Әбей, күрше Мөғлифәнең улы мәктәпкә йөрөй, буғай? Шул баланың хат танырлыҡ ҡына белеме барҙыр, моғайын? Йәһәт кенә шуны алып ин әле.

Бер аҙҙан әбейҙең ойотҡанын эсеп, хат яҙмай сығып киткән малайҙы алып килделәр.

– Балам! Ибраһим ағайыңдың мынау хатын беҙгә уҡып ишеттер әле!

Рәшит таушалып бөткән хатты һикенең балаҫын ҡайтарып, ҡаҡ таҡтаға һалды ла бәләкәй генә усы менән уны һыйпап, тигеҙләп алды. Шунан хатты ҡулына тотоп, бер урында ла туҡталып тормай, көйләп уҡый башланы: «Алмабикә! Ошо араларҙа һинән хат килмәгәс, әҙерәк борсола башлағайным, хәҙер барыһы ла аңлашылды: һинең миңә хат яҙырға ваҡытың булмайыраҡ киткәндер, моғайын. Нисә айҙар буйы мөхәббәтең, мәңге тоғролоғоң тураһында оҙон-оҙон хаттар яҙып, мине алдатҡанһың, минең изге тойғоларымдан көлөп йөрөгәнһең икән...»

Хат тыңлаусылар өсөһө өс яҡҡа боролоп, баштарын түбән эйҙе. Әбделхәким ҡарт: «Был хаттың ахырында китапҡа ярамаҫлыҡ әллә ниндәй һүҙҙәр килеп сығыуы мөмкин, имен саҡта был малайҙы туҡтатыу хәйерлегә булыр»,– тип уйланы һәм:

– Улым, бик шәп уҡыйһың икән! Уҡыуыңды туҡтатып тор әле, – тине. – Рәшит бит әле? Һинең Ибраһим ағайыңа хат яҙырға хәлеңдән киләме?

– Әбделхәким апа, әгәр хат насар булһа, мин уны яҙып та тормайым! – тип малай урынынан тора башланы.

– Үҙе сөй буйы ғына булһа ла, харап тиҫкәре малай ул! Әллә кемгә оҡшаған-дыр? Атаһы улай булмай торғайны! – тигән булды Вәрәҡә әбей.

– Бик дөрөҫ эшләй! Ирҙең әйткәне бер булырға тейеш! Юҡ, юҡ, улым, яҡшы хат яҙҙырам мин һинән. Бар, тиҙерәк ҡағыҙ-ҡәләмеңде алып кил. Был тирәлә һинән дә шәберәк хат яҙыусы юҡтыр, – тип ҡарт Рәшитте ҡупырайтып ебәрҙе.

– Ярай, мин ҡайтайым инде. Былай ҙа ләпелдәп оҙаҡ ултырып киттем, – тип Сәғилә әбей урынынан тора башланы. Хужалар сәй эсергә ҡыҫтаһалар ҙа, ул ҡайтыу яғын ҡараны.

– Беҙҙән Алмабикәгә сәләм тапшыр. Артыҡ өҙгөләнмәһен, беҙ бөгөн үк, эштең айышын төшөндөрөп, малайға хат яҙырбыҙ, – тине Әбделхәким хушлашҡанда.

– Ҡуйсы инде, Сәғилә! Ауылдағы юҡ-барҙы Ибраһимға еткерергә кемдең теле ҡысытҡандыр инде? Балаларҙың бер-береһенә ихлас хатлашып ятыуҙарына кемдеңдер эсе көтөрҙәй, күрәһең! – тип Вәрәҡә әбей, күрше малай юғында, үҙ башынан себен осороп ҡалырға ашыҡты.

Икәүҙән-икәү ҡалғас, Әбделхәким һаҡалын һыйпап алды ла, әбейен тәүге күргән төҫлө, күҙҙәрен йоммай, уға оҙаҡ ҡына ҡарап ултырҙы.

– Утыҙ йыл бергә тороп, һинең туғыҙ ҡырлы икәнеңде белгән юҡ ине. Шул тиклем күрәләтә алдаҡ һөйләп, дәрелбаҡыға ҡайтҡас, гонаһынан ҡурҡмайһың-мы? – тип һорап ҡуйҙы.

Вәрәҡә әбей, иҫе китмәй генә:

– Ете ҡат аҫтындағы теге донъяға ҡарағанда, бөгөнгөһө биш тапҡыр ҡыйы-нyраҡ әле. Уныһына барып етергә кәрәк әле, шунан күҙ күрер, – тигән булды.

– Ҡара үҙең, әбей! Мин һинең гонаһыңды үҙ иңемә алалмайым.

Күрше малай, ҡәләм-ҡағыҙын алып килгәс, бәләкәй бүкәнгә ултырып ҡарт-тың әйткәндәрен ҙур тырышлыҡ менән, танауын тарта-тарта, ҡағыҙға төшөрә башланы. «Алмабикәнең һинең алдыңда бер ниндәй ҙә ғәйебе юҡ»,– тип баш-лап: – Колхозда тырышып эшләп, һине көтөп йөрөгән баланың нахаҡҡа күңелен төшөрмә! Элеккесә уға матур итеп хат яҙ!»– тип хатты бөтөрҙөләр.

Шулай итеп, Ибраһим менән Алмабикәнең һүнеп ҡуя яҙған мөхәббәтенә ике өйҙә лә ҡулдан килгәнсә йән өрҙөләр, уны яңынан дөрләп янһын өсөн тырыш-лыҡ һалдылар. Күп тә үтмәй, фронтҡа килеп еткән Ибраһимдан Алмабикәгә икенсе хат килеп төштө. Һеңгәҙәп, һуңғы ваҡытта башы хәсрәткә батып, күләгә кеүек йөрөгән колхоз бригадирына яңынан йәшәү дәрте керҙе, хатта йөрөүҙәре лә үҙгәрҙе. Ибраһимға булған көслө, ҡайнар мөхәббәтен Алмабикә колхоз эше, көн дә сығып торған бригадир хәстәрҙәре менән һүндерергә тырышты.

## 9

Апрелдең башынан уҡ көндәр ҡапыл сыуаҡҡа тартылды. Һәр өйҙә, бөтә ғә-ләмде ниндәй генә ҡара һөрөмлө хәсрәт баҫмаһын, тормош барыбер быуындан быуынға башҡарылып килгән эш талап итте. Яҙ ҡояшының үткер нурҙары ерҙе ҡаплап ятҡан аҡ юрған өҫтөндә бихисап тишек тиште, ҡар күҙҙе сағылдырыр-лыҡ төҫөн әкренләп икенсе – һарғылт-тут төҫөнә алмаштырҙы, мең ҡораманан ялғап йүрмәлгән биҙәкле юрғанға оҡшап ҡалды. Үҙәгерәк урындарҙа беренсе йүгерек гөрләүектәр арыуыҡ баҫылған ҡар аҫтынан үҙҙәренә юл йырҙы. Аяҡ аҫты бермә-бер еүешләнде, һыу ҡатыш ҡарҙа сана табандары һыҡыны. Ирҙәре һуғышҡа китеп, көҙ йүнләп ҡаралмаған мал аҙбарҙары түбәһенән тамсылар тамып, кәзә-һарыҡты, оҙон ҡыш бауырын арыҡлап сыҡҡан һыйырҙарҙы өй артына, сыуаҡҡа ҡыуҙы. Һыртын ҡояш йылыһына ҡуйып, ауыл һыйырҙары,

ниндәйҙер сикһеҙ оло ғәмгә юлыҡҡан шикелле, күҙҙәрен йомоп сәғәттәр буйы көйшәнде. Ҡояш нурҙары төшкән ситән бағанаһы төбөндә ҡыҙыл баҙыянға оҡшаған меңәрләгән көнйылыҡтыс хәрәкәткә килде.

Һуғышҡа киткән Әхтәмде алмаштырған Мәһәҙи колхоз тимерлегендә тырмаларға тимер тештәр ослай, кәҫ ҡырҡҡыс, һабандарҙы үткерләй. Элекке тимерсе Әхтәм һәм колхоздың бригадиры Яҡуп өйҙәре эргәһендәге иң башта ҡарҙан әрселгән, бәләкәй генә, ус аяһындай ерҙә түбән ос малайҙары,– әйтерһең дә, улар өсөн бер ниндәй ҙә һуғыш ғәме юҡ – ҡырҡ урындан ямалып бөткән, табандары йүкә бауы менән бәйләнгән ботинкаларын йәлләп, бер урынға өйөп һалып, ялан аяҡ туп тибәләр.

Алмабикә, өйөнә ҡайтҡас, бригаданың яҙғы сәсеүгә төҙөгән эш планын ҡарап сыҡты. Үткән көҙ, ҡар иртә төшөү сәбәпле, ярауайҙар сәсеү өсөн байтаҡ ер һөрөлмәй ҡалды. Был бәләгә күп кенә тракторсыларҙың фронтҡа алыныуы өҫтәлде. Шуға күрә быйыл «Ҡыҙыл Ялан» колхозы 450 гектар ерҙе тик ат һабаны менән һөрөп сәсергә тейеш. Шул майҙандың яртыһынан күберәге Алмабикәнең бригадаһына төшә. Йыл да эшләй торған ике рәтле ат сәскесен йүнәтеп, орлоҡ сәсерлек ирҙәр юҡ тип әйтерлек. Был эшкә ауыл ҡарттарын ҡуйырға тура киләсәк. Былтыр тырмала йөрөгән малайҙарҙы – һабан артына, ә ат башында йөрөгәндәрҙе тырмаға күсереүҙән башҡа әмәл юҡ. Ҡул менән игенде сәсеү өсөн буйҙаҡ, быуынлыраҡ ҡатын-ҡыҙҙы ҡуйырға кәрәк булыр. Ә инде үҙемә Мәстүрә менән һабан өҫтөндә ятып йөрөргә тура килер, тип уйлай Алмабикә.

«Ырҙындағы игенде ташытып, орлоҡҡа алмаштырып өлгөртөргә лә кәрәк. Ырҙын мөдире Миһран ҡартты иген ярауайлаштырырға, орлоҡ ағыулау эшенә киләһе аҙнанан уҡ ҡуйырға ваҡыт. Ун һабанға ҡырҡ ат, шул тиклем ҡамыт, ыңғырсаҡ, һикһән постромка, ун ҡарлау әҙерләргә ирҙәрҙе иртәгәнән үк тәғәйенләргә... Әле былары – күренеп торғаны ғына, ә күпме эш, ямғырҙан һуң ҡалҡҡан ҡый үләне шикелле, көн һайын килеп сыға...»

Апрелдең егермеләрендә Алмабикә атаһы рәтләп биргән дүрт тәгәрмәскә ҡулайлаштырылған таҡта өйҙө, бригада ҡаҙанын, ярыш йомғаҡтарын яҙып бара торған ҡара таҡтаны, бригаданың аҙыҡ-түлеген, документтарын һаҡлай торған, йыйылыштар үткәргәндә өҫтәл булып хеҙмәт иткән ҙур һандыҡты эшләйһе урынға – «Әтәс тирәк» төбөнә күсерҙе. Бер нисә көндән ҡырҡҡа яҡын кеше, һәр кем үҙ кәрәк-ярағын алып, ҡыр станына сыҡты. Таҡта өйгә ауылдың иң оло йәштәге колхозсыларын, сәсеүҙе үҙ елкәләрендә һөйрәп сығарырға тейешле Әхмәдиәр, Әбдрафиҡ, Фәйзулла, Камалетдин, Ғәфүр һәм Исмәғил ҡарттарҙы, төнгә көтөүсе Әбделғәниҙе урынлаштырҙылар. Алмабикә менән Мәстүрәгә, икеһенә бер ҡыуыш ҡороп, тышын бүлек менән яптылар, эсенә йәтеш кенә һике яһап бирҙеләр. Башҡалар ҙа төркөмдәргә бүленеп, һәр кем үҙ танышы, туғаны тирәһенә һырышты. Ут яғыр өсөн соҡор ҡаҙып усаҡ эшләнеләр, уның өҫтөнә ун биҙрә һыймалы ҡаҙан ултырттылар. Быға колхоз төҙөлгәне бирле яҙҙан ҡара көҙгә тиклем бригадала ашнаҡсы булып эшләгән таҡмаҡсы Камал еңгә етәкселек итте.

Иртәнге тамаҡтан һуң, Алмабикә халыҡты бер урынға йыйҙы. Был тәүге йыйылыш булғанға күрә, бригадаға Яғал исемле колхоз айғырына атланып Игебаев та килеп етте. Бөтә бала-саға, үсмер малайҙар ҡойроҡ-ялы ергә тейә яҙып торған киң күкрәкле, сысҡан һыртлы, маңлайындағы аҡ урайына бер тотам сәсмәү төшкән айғырҙы уратып алды. Берәүҙәре – эйәрҙең көмөш өҙәңгеһен, икенселәре көмөш ялатылған тимер төймәләрҙән эшләнгән йыйылма ҡойошҡанын, күн менән тышлап, һынлы итеп сигелгән ҡапталды, ялтыр тимер менән көпләнгән эйәр ҡашағаһын тотоп-тотоп ҡаранылар. Бөлдөргәһенән эйәр

ҡашағаһына эленгән, һабының осона гильза кейҙерелгән суҡлы ҡамсыны күреп, кемдер: «Әллә Игебаевтың ҡамсыһына айыу майы һөртәбеҙме?» – тигән булды.

– Һөртөп ҡара! Шул ҡамсы менән һыртыңды ярыр, – тине кемдер.

Ат эргәһендә йыйылған балалар янына килгән Әбдрафиҡ ҡарт айғырҙың ялын ҡулы менән тотоп ҡараны ла Алмабикә менән һөйләшеп торған колхоз рәйесенә:

– Игебаев ҡусты, өйөр айғырын ашатырға ҡуйһаң да ярар ине. Айғырҙы ябыҡтырғанһың, хәҙер бейәләр саптыра торған мәл етте! Унан башҡа айғырҙар барыһы ла һуғышта бит, – тигән булды.

– Ишеттем, ишеттем, ағай! Бөгөн идараға килгән Миһран ҡарт та шул айғыр өсөн һүтеп алды әле үҙемде. Ҡайтҡас та ашатырға ҡуйырмын, – тип яуапланы рәйес. Һүҙе һүҙ булыуына маһайып алған Әбдрафиҡ ҡарт ҡапыл буйға үҫеп киткәндәй булды хатта.

Йыйылышты асып, Алмабикә халыҡты бригаданың буласаҡ эш-көшө менән таныштырҙы, кем нимә эштәргә тейешлеген, кемгә ниндәй аттар тәғәйенләүен әйтеп китте. Шундуҡ ғауға ҡупты, барыһы ла бер юлы ҡысҡырыша башланы.

– Минә Барый турыһы кәрәкмәй! Ул бураҙна боҙа, ултырған малайға баш бирмәй... Ғәлиәкбәр Беттекәйен миңә бирмәгеҙ! Ул сабан ат, уға мисәү табып булмай... Мин Тайыш турат менән эшләйем. Беттекәй менән икеһен парлайым – башҡа ике атығыҙ ҙа, малайығыҙ ҙа кәрәкмәй!.. Ат башына Әүхәҙи ултырһын, уның ҡулы ҡатынҡы, бешәлкәһеҙ Ахунды икенсе кешегә бирегеҙ!

Игебаев быларҙы туҡтатырға мәжбүр булды.

– Сабыр итегеҙ әле, ағайҙар! Ниңә бүреләр, һымаҡ, соролдашып алып киттегеҙ? Йыйылыш бөтмәгән бит әле. Әйҙәгеҙ, уны әҙәмсә генә, ҡаңғырышмай үткәрәйек әле, – тине һәм уртаға сыҡты.

Ергә яңы ғына төшкән ҡырау кеүек аҡ башын һулаҡай ҡулы менән тырнап алды ла һалмаҡ ҡына, зыңҡылдатып сөй ҡаҡҡан шикелле, Игебаев һәр бер һүҙенә баҫым яһап телмәр тотто.

– Ағай-эне! Ошондай уҡ йыйылыш үткәрергә үрге бригадаға парторг Өмөтҡужин китте. Һуғыш башланғаны бирле был – беҙҙең беренсе тапҡыр яҙғы сәсеүгә сығыуыбыҙ. Ауылыбыҙҙа радио тигән нәмә юҡ, гәзит тә бик һуңлап килә, шуға күрә фронт хәлдәрен әйтеп китәйем башта.

– Бик тә мәхҡул! Әйҙә һөйлә! Һуғыш хәлдәрен белгебеҙ килә! – тиеште халыҡ.

– Һуғыш хәлдәре әлегә шулай: Мәскәү эргәһендә беҙҙекеләрҙең һөжүме дауам итә. Хәҙерге көнгә Ҡыҙыл Армия, дошманды тар-мар итеп, алға ынтыла. Беҙҙең ғәскәр Мәскәүҙән көнбайыш йүнәлешендә былтырғы декабрҙән алып ике йөҙ илле саҡрымдан ашыу алға китте. Был һөжүмдә немецтың утыҙ һигеҙ дивизияһы ҡыйратылды. Гитлерҙың йәшен тиҙлегендә һуғышты тамамлау хыялы юҡҡа сыҡты.

– Тиҙҙән үҙе лә юҡҡа сыҡһа ярар ине, ҡороғор! Эҙләгәндәрен тапҡандар икән, ҡәһәр һуҡҡырҙар!

– Бына шулай, ағай-эне! Беҙҙең илгә Гитлерҙан алда ла баҫып инергә теләүселәр күп булды. Ләкин ундайҙар һәммәһе лә ҡәберҙәрен беҙҙең ерҙә тапты. Фашистар ҙа беҙҙә үлем табасаҡ. Илебеҙгә инеүселәр ҡара сәүкә һымаҡ ябырылып килһәләр ҙә, аяҡтарын һөйрәп үҙ иленә ҡайтып етеүселәр бик аҙ булыр. Шулай элек тә булған, әле лә шул буласаҡ!

Рәйестең ҡыҫҡа, әммә ихлас сығышын тыңлап ултырған ҡарттарҙың күбеһе кереккән теүәтәйҙәре менән еүешләнгән күҙҙәрен һөртկөләне.

– Афарин! Дөрөҫ һүҙгә ни әйтәһең? Шулай ғына булһын!

Игебаев һүҙен дауам итте:

– Ошондай ҡыйын шарттарҙа тылда һәр кем үҙ урынында нисек эшләргә тейешлеге хаҡында сурытып һөйләп тороуҙың һис тә кәрәге юҡтыр, тип уйлайым, – рәйес халыҡты ҡарашы менән байҡаны. – Көндәлек заданиены үтәү – һәр беребеҙҙең намыҫ эше. Кем дә кем үҙ эшенә илке-һалҡы ҡарай – ул кеше үҙ ялҡаулығы менән дошманға ярҙам итә, тип хисапларға. Ошо көндән башлап кем дә кем яҙғы сәсеүҙә нормаһын арттырып үтәй икән, уға «Фронт гектары» яҙыла. Сәсеү йомғаҡтары буйынса алдынғылар халыҡ хөрмәтенә лайыҡ буласаҡ.

Сәсеүҙә ниндәй ат егеү хаҡында тауыш булып алды. Минең шундай тәҡдимем бар: иң башта колхоз терәге булған аҡ һаҡаллы ағайҙар аттарҙы һайлап алһын да, ҡалғандарын йәштәргә беркетерһегеҙ. Быға йәштәр бер ҙә ҡаршы килмәҫ, тип уйлайым...

Рәйесең һүҙен бүлеп, Камалетдин ҡарт урынынан ҡысҡырҙы:

– Иптәш Игебаев! Улай ғәҙел булмай! Беҙгә, ҡарттарға, ниндәй ат, ниндәй малай булһа ла ярай, кем менән булһа ла эшләй алырбыҙ. Тик балаларҙы үҙ туғандарына беркетергә ярамай. Беренсенән, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡҡа әйләнә, икенсенән, ҡәрҙәштәре ҡулында улар, үҙҙәрен йәлләтеп, эшкә өйрәнә алмай, былйырыҡ үҫә. Аҙаҡтан бындай балаларға ир ҡатылығы етмәй.

– Дөрөҫ, Камалетдин ағай!.. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ! – тиеште халыҡ.

– Ярай, иптәштәр! Эшегеҙгә тотоноғоҙ! – тип рәйес йыйылышты ябып ҡуйҙы.

Халыҡ, шаулаша-шаулаша урындарынан тороп, ситтә теҙелеп ҡуйылған һабан, тырмалар, ҡамыт-сбруй янына йүнәлде. «Был миңә!», «Быныһы миңә кәрәкмәй!» тигән һүҙҙәр ишетелә башлағайны, ҡарттар тоттолар ҙа йәрәбә һалдылар. Аттарҙы ла шул рәүештә бүлделәр.

– Кемдең аттарына сбруй килешмәй, үҙ-ара алмашып алырһығыҙ, хәҙер ҡайһы ергә нисә һабан төшөүен тыңлап тороғоҙ. Кем менән кем бер ыҙанда һөргәне тураһында ла үҙ-ара килешерһегеҙ, – тине Алмабикә.

Тәүге көн бөтә һабансыларҙы Алмабикә ер башына үҙе алып барып төшөрҙө. Кемдең нисек һабан егеп ҡуҙғалып китеүҙәрен иғтибар менән күҙәткәндә йөрәге елкенде, күңеле ашҡынып торҙо. Тәүге көн ер өҫтөндә эш башлап ебәреү менән үтте. Берәүҙәренең посторомкалары өҙөлдө, икенселәрҙең һабаны килешмәне, ҡайһыларының аттары тигеҙ тартмау сәбәпле, бураҙна боҙолдо. Шулай ҙа бөтә һабансылар эштәрен тамамлап, ат туғарғас, бригада станына күтәренке рух, ниндәйҙер эске йәнләнеү менән ҡайтты. Уларҙың эшен бөгөн Мәстүрә үлсәп тә торманы, шуға күрә таҡтаға ла яҙып торманылар.

Киске аштан һуң бөтә халыҡты бер урынға йыйып, Мәстүрә бригадаға тамаҡ ташыусы Хаммат ҡарт менән Өмөтҡужин биреп ебәргән «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитен уҡып ишеттерҙе. Шунан йәштәр бригада патефонын уйнатты, шиғырҙар уҡыны.

Иртән ҡояш сығыуға сырылдап һауаға атылған һабантурғайҙар тауышына ҡаҙан эргәһенә элеп ҡуйылған тимерҙең сыңлауы ҡушылды. Кешеләр ҡысҡырыша. Кирелә-һуҙыла тәмле йоҡонан уяна алмай ятҡан алты-ете йәшлек ат йөрөтөүсе балаларҙы тартҡылап торғоҙҙолар. Мискәләге һалҡын һыу менән биттәрен һыйпап алғас, дәү ҡаҙандан сәй эстеләр. Ҡарттар быға ғына хушһынмай, һәр кем сәйнүгенә сәй төшөрөп, үҙ йүнен хәстәрләне.

Бына төнгө атбаҡар Әбделғәни һайтлатып йылҡы көтөүен стандан ситкәрәк, ел аҫтына, өйөрҙө. Һәр кем үҙ йүгәнен алып, аттарына менеп, кисә ҡалдырып киткән һабандарына йүнәлде. Алмабикә Мәстүрә менән һәр һабансыға сама менән ер бүлеп бирҙе. Бер нисә һабандың бер үк бураҙнанан береһе артынан икенсеһе

эйәреп йөрөүен улар кәрәкһеҙ тип тапты. Һабансылар ҡаршы килмәне, әйҙә, кемдең ҡайһылай эшләгәне көҙгөләге кеүек күренеп торһон!

Төшкө ашҡа туҡтағанда таҡта һымаҡ тигеҙ, киң баҫыуҙа ҡыртышы әйләндерелгән, ҡыл тартҡан кеүек төҙ бураҙналар алыҫтан ҡояшҡа ялтырап, ҡарайып күренә башлағайны, Алмабикә һөрөү эшенең дәррәү башланғанын күреп, бригадаһы менән ғорурланып та ҡуйҙы. Алъяпҡысы кеҫәһенән атаһы сантиметрлап һыҙыҡ билдәләп биргән линейка сығарып, бураҙналарҙың тәрәнлеген үлсәне. «Арамъяһыҙ, тәрән һөрәләр!» – тип эстән генә маҡтап та алды. Бөгөн һәр һабансы туҡһан биш сутый һөрөп, заданиены тултырһа, йәмғеһе туғыҙ ярым гектар ер һөрөлә, ун көндә – 95 гектар һөрөләсәк. Юҡ, былай бармай! Нисек кенә булмаһын, егерме көндә ер һөрөүҙе тамамларға кәрәк, шуның өсөн тағы ла өс-дүрт һабан өҫтәү яҡшы булыр. Уларын ҡайҙан алырға икән?»

Көн бөтөүгә ауыр сажин менән һәр һабансы һөргән ерҙең буйын үлсәп ҡара тиргә батҡан Мәстүрәне Әбдрафиҡ ҡарт саҡырып алды.

– Бынан кире, ҡыҙым, һәр кемдең һөргән ерен улайтып үлсәмә, – ҡарт ҡулы менән яландың оҙон яғын күрһәтте. – Был ерҙең оҙонлоғо бер. Шулай булғас, бер тапҡыр ғына буйын үлсәп ал да көн һайын һәр кем һөргән ерҙең арҡырыһын ғына үлсә. Яңылышмаҫ өсөн ер башына үҙ билдәңде ҡуйып бар, һабансылар ер башын кәкерсәкләмәһен өсөн, теге баштың иңенә тигеҙ итеп маяҡ ҡуй. Кем шәбәйеп маяғыңдан уҙып аша китһә, ул артыҡ һөргән ерҙе үлсәмә, төшөрөп ҡалдыр. Ҡабат ул тик һинең маяҡҡа еткәс кенә бороло, – тип аңлатты ҡарт.

Һабансылар иртән тороуға күрһәткестәр таҡтаһына Мәстүрә кисәге эш һөҙөмтәләрен яҙып та ҡуйҙы. Беренсе урында Өмөтҡужин Әхмәдиәр, иң аҫта норманы үтәмәгән Уралбаев Нурфәиз тора ине. Таҡтаның ҡара өлөшөнә, кисә төпкө атының муйынын һыҙтырған Нурмөхәмәтте тәнҡитләп, Камал апай сығарған таҡмаҡ аҡбур менән яҙып ҡуйылғайны.

*Нурмөхәмәт бураҙнала*
*Ниндәй йырҙар йырлаған?*
*Нурмөхәмәт аттарының*
*Муйындарын һырлаған.*

Ошо ябай ғына таҡмаҡ бөтә кешенең теленән төшмәне. Бригадалағы һәр кем нисек тә Камалдың әсе теленә эләкмәҫкә тырышты. Бер нисә көн үткәс, колхоз келәтенән кладовщик Ишморат ашҡа һалмалыҡ бойҙай оно урынына ҡап-ҡара ҡырҙыҡ оно һәм еҫе сыға башлаған үпкә-бауыр ебәргәс, таҡтала икенсе таҡмаҡ барлыҡҡа килде.

*Һабансының ашағаны*
*Ҡара ҡырҙыҡ, ыуаҡ таш.*
*«Һабансыға ярай ул»,– тип*
*Ебәргәндәр һаҫы баш.*
*Ишмораттың келәтендә*
*Үпкә-бауыр һаҫыған.*
*Һабансыға ярай, тиеп*
*Боҙолғансы ятҡырған.*

Был таҡмаҡтарҙы Игебаев менән Өмөтҡужин бригадаға килмәйенсә юйманылар. Уларҙы уҡып, ике етәксе лә таҡмаҡты ҡуйын дәфтәрҙәренә күсереп алып ҡайтты. Бынан кире бригадаға ебәрелә торған аҙыҡ сифатын Игебаев үҙе тикшереп торҙо. Ләкин бригадаларға ебәрерлек аҙыҡ-түлек юҡ хисабында ине. Һабансыларға һәм сәсеүҙә эшләгән оло кешеләргә – ҡаҙаҡ ярым, бала-сағаға бер

ҡаҙаҡ иҫәбенән тейешле икмәкте табып биреү ҙә колхоз идараһы өсөн сикһеҙ ауырлашты. Ҡайһы көндәрҙә икмәк урынына ике тапҡыр ыумас ҡына эсерерлек он эләкте.

Бер-ике тапҡыр һабансыларға яртышар ҡаҙаҡ хисабынан кәзә ҡаймағынан бешелгән май ебәргәйнеләр. Ләкин шул тиклем етеҙ майҙы икмәкһеҙ тигәндәй ашау һөҙөмтәһендә күптәргә бураҙна буйында йыш ҡына туҡталырға тура килде. Шунан һуң был майҙан бөтәһе лә берҙәй баш тартты. Хәллерәк ауыл кешеләре бригадаға тамаҡ ташыған кеше аша икмәкте, һөт-ҡатығын өйөнән алдырҙы, ләкин күпселек халыҡ колхоз ебәргән аҙыҡҡа ҡарап ҡалды. Игебаев та көнө-төнө колхозсыларҙың ашарына эҙләп сапты. Аптырағас, ауыл эргәһендәге Баҡыр-Үҙәк руднигына руда ташыу өсөн ун ат, уның электростанцияһына торф ташыуға алты пар үгеҙ бүлергә мәжбүр булды.

Һуғыш алдынан үгеҙ егеп эшләгән ирҙәрҙән мыҫҡыл итеп көлгән ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәре үгеҙ егеп алды. Башҡарған эш өсөн рудник колхозға 16 ололар һәм 32 балалар өсөн икмәк карточкаһы бирҙе. Алған икмәгенә ҡушып колхозға әҙ-мәҙ шәкәр, сәй ҙә эләкте. Уны Игебаев сәсеүҙә эшләгәндәргә үҙе ебәреп торҙо.

Сәсеүҙе яртылағас, райкомға исем ҡуйылмаған ялыу килеп төштө. «Игебаев, колхоз уставын боҙоп, ат менән үгеҙҙәрҙе сәсеү ваҡытында ситтә эшләтә, шуның өсөн тейешле икмәкте теләһә кемгә тарата» тип яҙылғайны унда.

Күп тә үтмәй, гимнастеркаһын һары яҫы ҡайыш менән һыға быуып, ялыуҙы урында тикшереү өсөн Шунин фамилиялы инструктор килеп тә етте. Кәнсәләге бөтә кешеләр сығарылып, Игебаев ҡына ҡалғас, Шунин шығырҙап торған күн полевой сумкаһын өҫтәлгә һалып, үҙенең ниндәй йомош менән килеүен аңлатҡас, Игебаев туп-тура әйтә һалды:

– Эйе, дөрөҫ яҙғандар. Яҙғы сәсеүҙә эшләгән колхозсыларҙы ашатыр әмәлем ҡалмағас, ошо аҙымға барырға мәжбүр булдым. Ләкин колхозға килгән аҙыҡ-түлектең мин мыҫҡалына ла теймәнем,– тине рәйес, бер ни йәшермәй.

Килгән инструктор колхоз кәнсәһендә ултырып ҡағыҙҙар буйынса аҙыҡтың килемен-сығымын тикшерҙе лә, ҡырҙағы ике бригадаға барып, рәйес һүҙен дөрөҫләгән аңлатмалар яҙҙырып алып ҡайтты. Өс көндән һуң райкомдың сираттан тыш бюроһында ауыл хужалығы артеленең уставын тупаҫ боҙғаны өсөн «Ҡыҙыл Ялан» колхозының рәйесе Игебаевҡа ҡаты шелтә иғлан итеп, уны эшенән бушаттылар. Партия ойошмаһы секретары Өмөтҡужинға сәйәси һиҙгерлеген юғалтҡаны, партия контролен йомшартҡаны өсөн ҡаты шелтә бирҙеләр.

НКВД начальнигы Арыҫлановтың «Бөтә совет халҡы үлемесле һуғышта үҙ ныҡлығына һынау биргән саҡта уҫал рәүештә закон боҙоп, дәүләт мәнфәғәтенә ҡул һуҙып маташҡан халыҡ дошманы Игебаевты фирҡәнән сығарып, ҡаты яуапҡа тарттырырға» тигән тәҡдимен, район прокуроры Борханшиндан башҡа, бөтә бюро ағзалары кире ҡаҡты. Шаҙра битле, ялбыр ҡаштары өҫкә тартылып торған, һәр һүҙ һайын наганын һәрмәп торған Арыҫланов бюро ағзаларына, башын түбән эйеп торған Игебаевҡа уҫал ҡараш ташланы:

– Ярай, ҡарарбыҙ әле... – тип урынына ултырҙы.

Бюроның ҡарарын иғлан иткәс, райком секретары Ғәле Хәлимов ҙур кинәнес менән әйтә һалды.

– Иптәш Игебаев, һинең элекке ғаризаңды ҡарап, үтенесеңде ҡәнәғәтләндерҙек, фронтҡа повестка көт! Һинең сохариҙарың күптән әҙерҙер инде, – тип, йөҙөнә тантаналыҡ төҫө индереп, йылмайып ҡуйҙы. Ун бер йыл эшләү осоронда байтаҡ секретарҙарҙы үҙ башынан кисергән Игебаев та аптырап ҡалманы.

– Ҡапаҡламағыҙ, иптәш секретарь! Минең сохариҙар Граждандар һуғышынан

бирле әҙер, ҡапсығы һәр саҡ сөйҙә элеүле тора. Һеҙҙең өсөн сохари киптереп, һуғышҡа китеү ҡурҡыныс язалыр, бәлки, минең өсөн ул бер ниндәй ҙә яза түгел, мөҡәддәс бурыс. Бөтә ирмен тигән ир ҡан түгеп һуғышып ятҡанда, мин үҙемдең бында йөрөүемде мәсхәрәгә хисаплайым, – тине Абдрахман.

– Күрҙегеҙме, Игебаев нисек әтәсләнә? Һине партиянан сығарып, яуапҡа тарттырмағанға бюро ағзаларына рәхмәт уҡы! Беҙ мәсьәләне икенсе төрлөрәк тә хәл итә ала инек бит! – тип Хәлимов, бюро ағзаларын барлап, уларға күҙ йөрөтөп сыҡты.

– Ярай. Рәхмәт әйтергә ҡушҡас, әйтәйем инде. Бюро ағзаларына рәхмәт белдерәм! Булдымы?

– Булды! Һеҙгә сығырға мөмкин! – тине эсе бошҡан Хәлимов. «Әҙәм арҡырыһы булмаһаң, бәлки, тыныс ҡына урыныңда эшләп тә ятыр инең әле, телеңә ҡарап тап-тамам. Хәҙер военкомат оҙаҡ көттөрмәҫ, бөгөн-иртәгә ҡулына повестка тотторор», – тип секретарь ишекте шаҡ иттереп ябып сыҡҡан Игебаевтың киң яурындарына ҡарап ҡалды. Өмөтҡужинды кабинетта ҡалдырып, яңы рәйес тапҡансы уның вазифаһын башҡарырға ҡуштылар.

Бер кырандаста ултырып ҡайтҡан элекке рәйес һәм парторг, юлға сыҡҡас, оҙаҡ ҡына өндәшмәй килделәр. Район үҙәгенән дүрт-биш саҡрымда кырандас оҙон һарҡыуға тәгәрәй башлағас, ҡулында дилбегәләрен бушатҡан Игебаевҡа күҙ ҡырыйы менән генә ҡарап, Өмөтҡужин һүҙ башланы:

– Игебаев ағай, бигерәк тә ҡырыҫ кешеһең дә инде! Нишләп һуң шул секретарь менән һүҙгә килешергә? Йомшағыраҡ һөйләшергә булмай инеме ни? Ғәйебеңде танып, кисереүҙәрен үтенһәң, ғәфү итерҙәр ине. Ә хәҙер бына нисек булды аҙағы!

– Һин нишләп мине йәлләргә булдың әле? Мин, ҡустым, улай ҙа, былай ҙа бөгөлөп, төрлө сүрәткә кереп йөрөргә бәпембә үләне түгел! Ғәйепле хисаплайҙар икән – теләһә нишләһендәр! Ҡайһы яҡтан ел өрһә, шул яҡҡа ҡанаттарымды бороп торорға мин ел тирмәнеме ни! – тине Игебаев һәм тағы уйға сумды. – Был минең эшем түгел, әлбиттә, ләкин һорайым әле. Һине бюрола ҡалдырып, минең турала берәй нәмә һоранылармы? – тине бер аҙҙан рәйес.

– Юҡ, Игебаев ағай. Яңы рәйес килгәнсә һинең урыныңда эшләп торорға ҡуштылар.

Игебаев бер аҙ йәнләнә төштө.

– Бына быныһы шәп булған! Теләһә кемде килтереп ҡуйғансы, бөтөнләйгә рәйес итеп ҡалдырырҙар, бәлки. Әйҙә, эшлә, ҡустым! Фронтҡа киткәнсе ҡайһы бер мәсьәләләрҙә ярҙам да итеп торормон. Рәйес ҡамыты әҙерәк икенсерәк шул, күпкә тосораҡ та, муйынды ла йышыраҡ һуҡҡылай, – тип йылмайҙы Игебаев.

«Рәйесте эштән алғандар икән» тигән хәбәр ауылға улар килеп инмәҫтән алда таралып өлгөрҙө. Иң башта ул яңылыҡты Алмабикә бригадаһына аҙыҡ ташыусы Хаммат килтереп еткерҙе. Төш мәлендә һабансы ҡарттар йыйылып, ысын күңелдән ҡайғырҙылар, фекер алыштылар.

– Беҙ ни шул колхоз ойошҡаны бирле Игебаевтан башҡа хужаны күргәнебеҙ булманы һәм беҙгә бүтәне кәрәкмәй ҙә.

– Райкомда ултырған түрәләр уның кем икәнен, ҡалай эшләгәнен белмәй микән?

– Беләләр, бик яҡшы беләләр! Шуның өсөн уны сығаралар ҙа! Беҙ уның менән әсеһен дә, сөсөһөн дә бергә татыныҡ бит. Ул бит беҙҙең арабыҙҙан сыҡҡан кеше!

– Юҡ, быны былай ғына ҡалдырып булмай. Хәлимовтың үҙенә барырға кәрәк!

Игебаев, бер ни булмағандай, икенсе көнөнә идараның мисәтен тапшырҙы ла Алмабикә бригадаһына эшкә сыҡты. Унан алда Игебаев менән Өмөтҡужин

колхоз хәлдәре тураһында һөйләшеп алды. Колхоз ҡаҙнаһында ни бары 14 һум 83 тин... Бригадаларҙы ашатырға өс көнлөк аҙыҡ ҡына ҡалған... Уйлана торғас, «Тагилстрой»ға ярҙам һорап кеше ебәрергә булдылар. Трест ошо көндәрҙә ауылға трактор менән машинаны килешеү буйынса ебәрергә тейеш ине. Улар бер-береһен төҙәтә-төҙәтә хат яҙҙылар, шунан ҡағыҙға икеһе лә ҡул ҡуйып, сельсовет һәм колхоз идараһының мисәттәрен баҫтылар. Хат менән ебәрергә башҡа кеше булмағанға күрә, Өмөтҡужин сыҡты юлға.

Бригадаға аҙыҡ ташыған Хаммат арбаһына ултырып эш кейемендә килеп төшкән Игебаевты күргәс, Алмабикә генә түгел, башҡалар ҙа аптырап ҡалды. Игебаев үҙен уратып алған кешеләр менән баш ҡағып иҫәнләште, шунан ҡарттарға килеп, һәр береһе менән күрешеп сыҡты. Алмабикәнең ҡойолоп төшкәнен күргәс:

– Алмабикә ҡарындаш, һин бер ҙә аптырама, мин бригадаға эшкә килдем. Бөгөн үк һабанды йүнәтәм дә иртәгә бөтә кеше менән эшкә сығам, – тине Игебаев.

– Игебаев ҡусты, һин бала-саға араһында ятмаҫһың инде, әйҙә, беҙҙең менән таҡтөйгә! – тип Камалетдин ҡарт уны таҡта өйгә алып китте. Түшәк-юрғанын да таптылар.

Шулай итеп, «Ҡыҙыл Ялан» колхозы ойошторолғаны бирле уның алмашһыҙ рәйесе булып эшләгән Абдрахман Игебаев ябай һабансы булып китте. Уның был хәленә бер кем дә аптыраманы, сөнки ошо ауыл кешеләре араһында ҡайнашып үҫкән Игебаев бер ҡасан да түрәлеген күрһәтмәне, бала менән балаларса, ололар менән ололарса һөйләшә белде, ун бер йыл буйы ал-ял белмәй колхоз йөгөн тартты. Шатлығын да, ҡайғыһын да ят күҙҙәрҙән йәшерә белде, юҡҡа ауыҙ йырып көлөп йөрөмәне, ҡайғы-хәсрәтте лә ирҙәрсә ҡаршы алды.

Игебаев, эш башлауға дүрт көн үткәс, Хаммат ҡарт төшкө ашҡа бер ни ҙә килтерә алманы. Төшкө ялға туҡтап, аттарын туғарып ҡыуыштарына ҡайтыусыларҙы ҡаҙан эргәһендә, бүре һуға торған суҡмарға оҡшаған оҙон һаплы сүмесенә таянып, Камал еңгә ҡаршы алды. Бер кем дә һорауҙар бирмәне. Камалдың бойоҡ йөҙө, ғәҙәттәге алсаҡ күҙҙәренең моңһоу ҡарашынан барыһы ла аңлашылды. Ҡаҙанда ҡайнаған һыуҙан башҡа бер ни юҡ ине. Кемдер моҡсай төбөндәге ҡалдыҡ-боҫтоҡто тәғәм итте, икенселәре ҡылған араһында яңы шыҡҡан йыуа эҙләргә китте.

Шул саҡ ошо көндәрҙә колхоз өсөн яуаплы булып ҡалған Сабир ҡарт һыбайлы ат өҫтөндә, эркет тултырылған турһыҡ шикелле, ике яҡҡа сайҡалып Игебаев эргәһенә туҡтаны. Улар, бер яҡ ситкәрәк китеп, ниҙер тураһында һөйләшеп алды. Күргән кешеләр быны нисек юрарға белмәне. Кисен ас, хәлдән тайған һабансыларҙы ит еҫе ҡаршыланы. Камал еңгә бешкән итте ике ҙур ағас табаҡҡа бушатты. Хәҙер инде итте кеше хисабына киҫәкләп бүлергә кәрәк. Был эштең оҫтаһы – Камалетдин ҡарт салғы бәкеһен сығарып, тире салбарының ялтырап бөткән тубығы өҫтөндә бер-ике янып алды ла ҡырҡ ас пар күҙ аҫтында өләшә башланы. Иттең йомшағыраҡ, ҡалъялы урыны тура килһә, һоғонорға ла онотманы.

Һалмаһы булмаһа ла, ярайһы ғына тоҙлоғо сыҡҡан ҡоротланған һурпа менән йылҡы итен ашап алғас, халыҡтың күңеле күтәрелеп, күҙҙәр ялтырап китте. Уларҙан да бигерәк, һурпа ҡойған Камал еңгә ҡыуанды.

– Әйҙәгеҙ, килегеҙ! Һурпа барығыҙға ла етәрлек! Тағы ла өс-дүрт бешерерлек ҡалды. Колхоз һеҙҙең өсөн йылҡы һуйған бит, – тип ҡарттар араһында һүҙһеҙ генә һурпа эсеп ултырған Игебаевҡа ҡараш ташланы.

Шулай итеп, һабансылар тағы дүрт тәүлек көн итте. Шул саҡ ГАЗ-5 машинаһына егерме ҡапсыҡ арыш оно, һоло, ҙур ағас мискә тоҙло балыҡ, илле таҡта

сәй тейәп Өмөтҡужин ҡайтып төштө. Сабир ҡартҡа алып килгән аҙыҡ өсөн накладнойын биргәс, теге күҙлеге аша ғына ҡағыҙға бер генә ҡарап алды ла, танауын сирып, уны бер яҡ ситкә этәреп ҡуйҙы. Шунан бер аҙ башын икенсе яҡҡа бороп, аптырап ултырҙы ла яңынан ҡағыҙҙы ҡарай башланы.

– Был тиклем аҡсаны колхоз ғүмерҙә түләп бөтөрә алмаясаҡ!

– Ярай, яйлап түләп бөтөрөрбеҙ әле.

– Түләрһең, атаң башын! Бында түләү срогы күрһәтелгән бит! Ваҡытында хисаплаша алмаһаң, беҙҙе инкассаға ҡуйып, бөтә тапҡан аҡсабыҙ һорамай-нитмәй шуларға китеп торасаҡ.

Икенсе көнөнә Алмабикә бригадаһына килгән Өмөтҡужин тағы бер яңылыҡ алып килде. Имеш, техниканы Ҡыҙыл Армияға күпләп мобилизацияланыу арҡаһында, алдан һөйләшелгәнсә, трест трактор менән машинаны бирә алмай, шуға күрә бының урынына трест аҙыҡ бирергә булды, тине яңы рәйес. Май аҙаҡтарында яҙғы сәсеүҙең осо күренә башланы. Игебаевҡа нишләптер һаман хәрби комиссариаттан повестка килмәй торҙо.

10

Йәй башында ныҡ ҡоралланған дошман ғәскәрҙәре, Харьков эргәһендә беҙҙең оборонаны өҙөп, бөтә фронт һыҙығы буйынса һөжүмгә күсте. Шул ауыр көндәрҙә Ялан ауылынан һуғышҡа тағы унлаған ир оҙатылды. Былар инде сәстәренә сал ингән, бөтәһе лә Герман һәм Граждандар һуғыштарында ҡатнашып, дары еҫен байтаҡ еҫкәгән Абдрахман Игебаевтың тиҫтерҙәре ине. Был юлы ла ул нишләптер тағы алынмай тороп ҡалды.

Райкомдың инструкторы Шунин колхозға яңы рәйес алып килде. Ул Ҡыҙыл Армияның кадровый офицеры, Мәскәү эргәһендә Доватор корпусы составында яраланып ҡайтҡан, әле итектәге шпорҙарын да алмаған капитан Мурагимов тигән кеше ине. Яңы рәйес күрше ауылдан булып сыҡты. Улар икәүләп аңғармаҫтан кәнсәгә килеп ингәс, өҫтәл артында ултырған Өмөтҡужин ҡапыл аяғүрә баҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды. Матур һынлы, киң яурынлы, битенә аҙ ғына шаҙра һипкеле төшкән, зәңгәр күҙле офицер кейемендәге Мурагимов шпорҙарын зыңҡылдатып үксәләрен бер-береһенә һуҡты ла Өмөтҡужиндың ҡулын шытырлата ҡыҫып күреште. Төрлө хәл күткән, ләкин Ҡыҙыл Армияның кадровый офицеры колхоз менән етәкселек итер, тип башына ла килтермәгән парторг Шунинға һораулы ҡараш ташланы. Бының икеләнеүен күреп торған инструктор:

– Эйе, эйе, иптәш Мурагимов кисә райком бюроһында һеҙҙең колхозға рәйес итеп тәҡдим ителде, – тип аныҡланы.

Өҫтәл артында һөйләшеү бик ҡыҫҡа булды. Күберәге райком вәкиле һөйләне, парторг менән яны рәйес тыңлап ултырҙы. Бөгөн Мурагимовты ике бригадаға, фермаға, трактор бригадаһына алып барып, халыҡҡа күрһәтергә, тип һөйләштеләр. Шунин рәйескә иртәгә үк эшкә сығырға кәңәш итте, сөнки бындай ҡыҙыу мәлдә дөйөм йыйылышты барыбер үткәреп булмаҫ ине. Шулай итеп, ауылға ҡунаҡ күрһәткән шикелле, Мурагимовты колхозсылар менән таныштырып сыҡтылар. Һәр барған ерҙә ул үҙенең ғүмер буйы кавалерияла хеҙмәт итеүенә баҫым яһап, ҡыҫҡаса ғына тормош юлын һөйләп сыҡты. Күптән ир күрмәгән ҡатын-ҡыҙ, бигерәк тә уларҙың еңел-елкенсәктәре, уға майлы күҙҙәре менән ашарҙай итеп ҡараны. Ҡайһы бер донъя күргән зыялыраҡтары: «Рәйестең бисәһе бармы икән? Әллә буйҙаҡмы?» – тип үҙ-ара шыбырҙашып та өлгөрҙө. Йәш ат һымаҡ, бер урында тик кенә торалмай, шпорҙарын зыңҡылдатып алды-артлы йөрөүе, артҡа ҡайырған ҡулының бармаҡ быуындарын

өҙләкһеҙ шартлатыуы оло кешеләргә оҡшап етмәне. «Ай-һай, был кәпитән зыр күтән булып сыҡмаһа, ярар ине», – тип уйланы ҡайһы бер һынсыл ҡарттар. Йәш егеттәр күберәк Мурагимовтың тышҡы ҡиәфәтенә, ялтлап торған кейеменә ҡыҙыҡты.

Райком вәкиле ҡайтҡанына бер көн үтеүгә, яңы хужа, йылҡы көтөүен ауыл ситендәге мөгәзәй эргәһенә ҡыуҙыртып, Ҡыҙыл Армия фондынан дүнәнгә сыҡҡан ҡара айғырға ҡороҡ һалды. Ҡырағай айғыр башына, йүгән, нуҡта кейҙермәй, бөтә көсөнә ҡырталашты, ҡабырғаһына, һыртына гөрһөлдәп ауҙы, ләкин тәжрибәле кавалеристы еңә алманы. Көтөүселәр ярҙамында Мурагимов айғырҙы кешәнләне, ҡыл сылбыр менән ирендәрен быуып бәйләгәс, хәле бөткән айғыр ҡуршылдап ергә йығылды.

– Шулай итәләр уны! – Рәйес маңлайынан аҡҡан тирен һөртөп, тип-тигеҙ аҡ тештәрен күрһәтеп көлөп ебәрҙе.

Ул бөтә тәне дерелдәп ҡалтыранған айғырҙың кешәнен ысҡындырҙы ла уның өҫтөнә етеҙ генә менеп тә ултырҙы. Сылбыр осон тотоп торған көтөүсегә һомғол кәүҙәһе менән төрлө яҡҡа ташланған айғырҙың иренен ебәрергә ҡушты. Ирене ысҡыныуы булды, айғыр һыртына һөлөк һымаҡ йәбешеп ултырған яңы колхоз хужаһын далаға алып олаҡты. Айғыр башын аҫҡа һоноп, артҡы аяҡтарын һауаға сойорғоп, өҫтөндәге һыбайлыны һелкеп ырғытырға маташты, бер-ике тапҡыр ҡабырғаһына ауып та ҡараны, ләкин сос кавалерист ат аҫтында ҡалманы, уның менән йәнәш йығылып, теҙгенде ҡулынан ысҡындырманы. Ат аяҡтарына баҫыуға, Мурагимов тағы ла уның өҫтөндә булды. Ауыл осондағы һөрөлгән ер өҫтөндә ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла сабып, камил хәле бөткән, аҡ күпереккә төшкән айғырҙы капитан ҡылған ситенә сығарып, һауырынан шапылдатып һөйөп алды ла, бөтә кешене аптыратып, идара алдына килеп туҡтаны.

Икенсе көнөнә һыуынып таң ашырған, ныҡ ҡына эсе тартылған айғырға атланып, Мурагимов бригадаларҙы урап сыҡты. Уның Ҡыҙыл Армия фондының айғырына менеп йөрөүен күргәс, Игебаев түҙмәне:

– Ай-һай, иптәш рәйес, фонд айғырына йүгән һалып йөрөүҙең законы бик ҡаты бит, яуап бирергә тура килмәгәйе, – тине ул.

– Ул ремонтный частарҙа* барыбер күнегеү үтергә тейеш, минең ҡулда өйрәнһен, – тип кенә әйткән булды Мурагимов.

Яңы рәйес колхоздағы үҙенең тәүге эшен ат һарайынан башланы. Уйылдан, Әбделғәни, тағы бер-нисә ҡартты саҡыртып, ат һарайын ваҡ ҡына бүлектәргә бүлеп, кормушкалар эшләргә, иҙән йәйергә ҡушты. Һәр бүлек алдында аттың исеме, тыуған йылы, йәше күрһәтелгән яҙыу эшләтте.

– Ул таҡталарҙы, ҡустым, Игебаев ағай яңы эшләнеп ятҡан һыйыр һарайына алдырғайны. Беҙ уларҙы шунда тип әҙерләгәйнек, – Уйылдан ҡарт һаҡ ҡына һорап ҡуйҙы.

– Мин биргән приказды сәйнәнмәй үтәргә өйрәнегеҙ! Мин бында һәр берегеҙ менән һүҙ бутҡаһы бешерергә ебәрелмәгәнмен! Аңлашыламы?

Элекке батша һалдаты Әбделғәни, рәйестең тыныуын һиҙеп, уйынлы-көлкөлө рәүештә урынынан торҙо.

– Так точно! – тип кәкре бармаҡтарын сикәһенә терәне. – Слушаюсь!

– Бына, бына шулай! Һәр ваҡыт шулай булһын! – тип ҡартты ҡәнәғәт төҫ менән Мурагимов хуплап та алды.

---

**Ремонт частары — кавалерияға тапшырырҙан алда аттарҙың тәүге күнекмәләр үтә торған урын.*

Икенсе көнөнә ат һарайының тирә-яғын, утлыҡ кәртәһен һеперттереп, һарай ҡапҡаһына һыҙма мылтыҡ тоттороп дневальный ҡуйҙы. Ҡапҡаның ике яғына, көлтәләре менән өҫкә ҡаратып, ике һепертке ҡуйырға ҡушты. Ҡапҡа ҡоймаһына янғынға ҡаршы щит эшләтте. Ауылдың төрлө урындарында халыҡты тревога менән уятыу өсөн тимерҙәр элдерҙе. Көн һайын теп-теүәл иртәнге сәғәт алтыла, шул тимерҙәргә һуғып, халыҡты уята башланылар. Мәктәп балаларына тик строй менән генә йөрөргә ҡушты. Шулай итеп, бер нисә көн эсендә колхоз хәрби лагерға әйләнде. Көн буйы айғырға атланып, Мурагимов ауыл буйлап йөрөп, үҙ әмерҙәренең үтәлеүен тикшереп ҡыланды. Кәнсә ишеге төбөнә лә ҡораллы пост ойошторҙо.

Бер көн райкомдың беренсе секретары Ғәле Хәлимов райондағы берҙән-бер еңел машинаға ултырып Ялан ауылына килеп төштө. Ауылда ул ниндәйҙер гүр тынлығы тойҙо. Ғәҙәттә, ауылға инер-инмәҫтән машинаға өрөп ҡаршы сыҡҡан эттәр ҙә был юлы күренмәне. Хәлимовтың машинаһы кәнсәгә килеп туҡтаны. Хужа егеттәрсә һикереп төшөп, ян-яғына ҡаранып, хәрби кейемен ҡаҡҡылап алды ла кәнсә ишегенә йүнәлде. Бейек болдорҙан менеп, уның һуңғы баҫҡысына баҫҡас, ишек төбөндә уға мылтыҡ тоҫҡап торған ҡартты күреп, тертләп китте.

– Мин райкомдың беренсе секретары Хәлимов булам, – тине район хужаһы. – Рәйесегеҙ ҡайҙа? Шуны ғына әйт тә ишек көтөүеңде дауам ит.

– Уның ҡайҙа йөрөгәнен мин ҡайҙан беләйем? – Тынысланған ҡарт мылтығын иҙәнгә һөйәне. – Конный двор тирәһендәләр. Ул һәр саҡ шул тирәлә йөрөй.

Хәлимов ат һарайының ҡайҙалығын һорашып, машинаһында рәйесте эҙләп китте. Унда ла, боронғо мылтыҡ тотоп, ҡарауылсы ҡарт тора ине.

– Рәйес ҡайҙа? – тип һораны аптыраған Хәлимов.

– Ул башҡа ҡарауылдарҙы тикшерә. Хәҙер мин уға сигнал бирәм, – ҡарт, мылтығын һөйәп, ерҙә ятҡан ҙур ағас сүкеш менән эленеүле торған рельс киҫәгенә зыңғылдатып һуғырға тотондо.

Күп тә үтмәне, дөм-ҡара айғырға менеп, йән-фарман Мурагимов сабып та килде. Ул атын дүрт аяҡтарына сәнсә баҫтырып туҡтатты ла өҙәңгелә һығылмалы кәүҙәһен турайтып рапорт бирҙе.

– Иптәш секретарь! «Ҡыҙыл Ялан» колхозсылары көн тәртибе буйынса эш итәләр! – Мурагимов атынан һикереп төшөп, теҙгенен эйәр ҡашағаһына ырғытты ла төҙ аҙымдар менән секретарь янына килеп ҡулын бирҙе.

– Йә, иптәш Мурагимов, яҙғы сәсеүҙе ҡасан бөтөрәһегеҙ? Колхозда эштәр нисек бара? – тип һораны аптыраған Хәлимов.

– Хәҙергә уның менән булашырға, асығын ғына әйткәндә, ҡул тейгәне юҡ әле. Әлегә маршал Буденныйҙың аттарҙы ҡарау тураһындағы күрһәтмәһен үтәп ятабыҙ. Таҡмаҡта ла әйтелгән бит:

*Буденныйҙың колхоздаръа*
*Арнап яҙъан хатында,*
*Яҡшы ҡараръа ҡушҡан бит*
*Үгеҙен дә, атын да.*

Ат һарайын өр-яңынан төҙөтәм. Һәр атҡа айырым бүлектәр эшләтәм. Үҙегеҙ беләһегеҙ, ат – ул ауыл хужалығында ла, Ҡыҙыл Армияла ла иң кәрәкле, мөһим көс.

– Уныһы шулай, әлбиттә. Ләкин халыҡ тураһында, илде, фронтты икмәк менән тәьмин итеү хаҡында иң тәүге сиратта уйларға кәрәктер бит!

– Ат булһа, бөтәһен дә эшләргә була! – тип бер шикләнмәй яуап бирҙе Мурагимов.

«Был әҙәмгә ат зәхмәте ҡағылып, бөтөнләй хыялый була башлаған икән!» тигән фекергә килде Хәлимов, ат һарайын ҡарап сыҡҡас.

– Ә бөтә урында ла постар ҡуйыуҙың хәжәте нимәлә?

– Һуғыш бара бит! Был ауыл халҡы ҡабырға серетеп, көнө-төнө йоҡлап ятмаһын өсөн эшләнелгән. Әле бөтә ирҙәргә лә билдәрен ҡайыш менән һыға быуып йөрөргә ҡуштым, – тип йылмайҙы Мурагимов һәм үҙенең билен быуған, ике яурыны аша төшкән ҡайыштарын, ат арҡалығын төҙәткән кеүек, шығырҙатып тағы ла нығыраҡ тартып ҡуйҙы.

– Ауылда ҡалған ир-аттың билен һин ҡыҫмаһаң да, уны һуғыш, аслыҡ ҡыҫа, һинең билдегеңдең кәрәге юҡ, – тине бының һөйләгәнен аптыраған төҫ менән тыңлап торған Хәлимов.

– Әҙәм балаһына ас йөрөү бик файҙалы ул, уның хәрәкәттәре етеҙләнә, башы яҡшыраҡ эшләй, күҙе алыҫҡараҡ күрә, – тип Мурагимов үҙ фекерен дәлилләп ҡуйҙы.

Хәлимов Ялан ауылынан ҡайтып төштө лә, кабинетына инеп, өҫтөн һалмайынса өҫтәленә үтте. Тәртипте, кейгән кейеменә кер ҡундырмай йөрөтөүҙе яратҡан, үҙенә буйһоноусыларҙан да шуны талап итергә өйрәнгәнлектән, өҫтәле артына ултырғас, иҙән буйлап йәйелгән ҡыҙыл келәм өҫтөндә үҙенең аяҡ эҙҙәрен күреп, күңеле ҡырылды. «Йүнһеҙ, бынауы яндырай капитанға көйәләнеп, галоштарҙы һалырға онотҡанмын!» – тип үҙен-үҙе битәрләп алды. Шунан өҫтәл аҫтында бысраҡҡа батҡан галоштарын һалды, танауын сырып уларға тағы ла бер ҡараны ла, гәзиткә урап, ишек төбөнә ҡуйҙы. Хәлимов стена ҡырындағы ҡара күн менән ҡапланған, кешеләр күп ултырыуҙан йышылған, элгәрге һығылмалығын юғалтҡан диванға ятты ла тәмәкеһен ҡабыҙҙы. Ул шулай кабинетта бер үҙе генә ҡалған саҡтарында йә «Беломор», йә «Рион» папиросын тоҡандырып, суңҡаһын диван ҡабырғаһына терәп, уйланып ятырға ярата. Диmegadiвандың дауамы булып уның бер башында бәләкәй өҫтәлдәге һуғыштан алда Германиянан килгән бәләкәйерәк ҡумта дәүмәлендәге радиоалғыстың кнопкаһына баҫты. Уның төрлө мәмләкәт, сит илдәрҙең ҡала исемдәре яҙылған бите шундуҡ яҡтырып китте. Кемдер әсе тауыш менән немец телендә ашығып һөйләй, шунан радиоалғыстан ҡолаҡ тондорғос джаз ишетелде. Уның әлдән-әле алмашынып, төрлөләнеп тороуынан Хәлимов быныңфронттағы «батыр һуғышсы»лар өсөн дошман концерты икәнен аңланы. Радионы икенсе тулҡынға күсереп, ул Өфө тапшырыуын эҙләне, ләкин төрлө дағыр-доғор тауыштарҙан, һыҙғырыуҙан башҡаға юлыҡманы. Сәғәтенә ҡарағас, кабинет хужаһы радио инде күптән эшен тамамлағанын аңланы. Ул урынынан торҙо, өҫтәлендә ултырған ала-сыбар көрән төҫтәге хәрби-ялан телефонын бер ҡулы менән баҫып, икенсеһе менән тотҡаһына саҡ ҡына ҡағылыуы булды, трубкала телефонистканың «Иптәш секретарь! Мин һеҙҙе тыңлайым» тигән көмөш тауышы ишетелде. Алмашһыҙ көнө-төнө дежурҙа ултырған ҡыҙҙар Хәлимовтың ғәҙәттәрен күптән белеп алғандар. Ул, башҡа кешеләр кеүек, телефондың тотҡаһын дығырлатып оҙон-оҙаҡ бороп тормай, һуҡ бармағы менән тотҡаһына бер генә төртөп ала ла яуап көтә. Телефон станцияһында эшләгән ҡыҙҙар шундай шалтырауҙы ишеткәс тә, бөтә эштәрен ташлап, райком нөктәһенә тиҙерәк штепсель тығып, яуап бирергә ашыға.

Райком бинаһы урамға сығып торған тәҙрәләре менән телефон станцияһына ҡарап ултыра, шуға күрә ҡайһы бер шуғыраҡ телефонисткалар хужаның урында булғанын ут яҡтыһынан күреп тора. Кабинетта утыҙлыҡ шәм тоҡанһа, һағая төшәләр, әгәр ут яҡтыһы күренмәһә, иркенләп үҙ-ара гәпләшеп тә алалар.

– Ҡыҙҙар, ҡыҙҙар, Хәлимов ағайығыҙ ҡайтты! Марш урынығыҙға! – тип өлкән телефонистка Клавдия Васильевна әмер бирә. Шунан һуң колхоздарға,

совхоздарға шылтыратыуҙар башлана, үҙ ваҡытында яуап биреп, ҡыҙҙар егәрләнеп ала. Әгәр секретарҙың тәҙрәһе һүнһә, бөтә нәмә элеккегә ҡайта: ҡыҙҙар әллә нисә ирҙең башына еткән, бөтә кәүҙә күҙәнәктәренән ут ялҡыны бәреп торған, атлағанда ла алаптай күкрәктәрен юрый һелкетеп йөрөгән, үҙенең үтә ҡыҙыу нәфсеһе битенә юлаҡ-юлаҡ булып эҙ һалған Клаваны уратып ала. Улар кеҫәләренә тултырып алып килгән бойҙай ҡурмасын шартлатып Клаваның ниндәй ирҙең ҡатын-ҡыҙҙы нисегерәк яратыуы хаҡында, эске ләззәтенән түҙә алмай, зәңгәр күҙҙәрен йома-йома һөйләгән сихри әкиәтен тыңлайҙар.

Шундайыраҡ саҡтарҙа донъя күрмәгән, Клаваның башынан үткәндәрҙе тик алыҫтағы һөт ише томан итеп күҙ алдына килтергән ҡыҙҙар: «Уф, ыстағәфирулла! Ҡуйсы, ҡуйсы, Клава апай, шул тиклем дә ирҙәрҙе яратып булмайҙыр ҙа инде, оят бит!» – тип әйтһәләр, Клава, телен аңҡауында шартлатып ала ла яртыһын башҡортса, яртыһын русса һөйләп ултырған урында саф башҡортсаға күсә: «Эй, ҡыҙҙар, ҡыҙҙар, нисегерәк булһа ла булыр ине, тик йүнле ирҙәр генә юҡ»,– тип ҡаты көрһөнөп ала.

Бына тап ошо мәлдә хужа тәҙрәһендә ут шәйләгән Клава ҡапыл урынынан һикереп торҙо ла, күп ултырыуҙан осаһына һылашып торған зәңгәр шевиот юбкаһының итәген тартып-төҙәтеп, кире ултырҙы. Ниһайәт, уға оҙаҡ көтөргә тура килмәне, хужа трубкаһын күтәрҙе. Клава үҙ тауышына ожмахтағы һөт йылғаһының сылтырауыҡлы ағыш тауышын, тылсымлы иркәләү һыҙаттары өҫтәп: «Һеҙҙе тыңлайым, иптәш секретарь!» тип өндәште лә ҡыҙҙарға буш ҡулын һелтәне, был ишараһы «Баҙарығыҙҙы ослағыҙ, барығыҙ ҙа урындарығыҙға!» тигәнде аңлата ине. Теге остағы телефон трубкаһында ҡыуарған ағастың япраҡ ҡыпшырлағанына оҡшаған таныш тауыш ишетелде.

– Клава, был һинме?

– Мин, мин, иптәш секретарь, – хужаға мөкиббәнлеген белдереп яуапланы моңло тауыш эйәһе.

Хәлимов, Клавдияны бер ҡасан да күҙмә-күҙ осратып ҡарамауына ҡарамаҫтан, үҙенең уға ҡарата махсус йылы иғтибарын бер кемдән дә йәшереп тормай. Хатта кәйефе күтәренке саҡтарҙа «минең яуапһыҙ мөхәббәтем» тип тә ебәрә. Ә был уйнап ҡына әйтелгән йылы һүҙ иргә сарсаған Клава өсөн байтаҡҡа йән аҙығы була һәм бергә эшләгәндәр араһында уның абруйы ҡанатланып күккә оса.

– Клавочка, мин юҡта өлкәнән берәү ҙә шылтыратманымы? – тип һорай теге сихри тауыш.

Клава ҡаҡса аҡ йөҙөнә бәхет саҫҡылары йүгертә һәм, бер минут алда ғына урынына ултырыуына ҡарамаҫтан, ышаныслы яуап бирә.

– Юҡ, юҡ, иптәш секретарь, мин, көн буйы телефон төбөнән китмәй, һеҙгә шылтыратыуҙарын көтөп ултырам, – тип хәйләләй.

Клаваның был шуҡлыҡтары хужаға оҡшай, ҡайһы саҡтарҙа «Эх, ошоно тотоп ҡосаҡлайһы ине!» тигән көфөр уйҙар ҙа тыуа, ләкин секретарҙың ундай әхлаҡһыҙлыҡҡа юл ҡуйырға теләге лә, ысынын әйткәндә, ваҡыты ла юҡ. Ул тик ир булараҡ ҡына, Клаваның тауышын ишеткәс кенә уның тураһында уйлап ала. Эш унан да ары китмәй, сөнки ҡурҡыбыраҡ, һәр саҡ плащҡа төрөнөп, ҡояшлы көндә лә хром итеге тышынан калуш кейеп йөрөгән секретарҙың уға йөрәге етмәй. Көмөш телле, күҙҙәренән йәшен атып торған Клава тик хужаның татлы хыялында ғына йәшәй.

Хәлимов «Ҡыҙыл Ялан» колхозына шылтыратты, ләкин телефонға киске эшкә ҡалған Сабир ҡарттан башҡа бер кем килмәне. Стенаға ҡаҙаҡланған ике ҡыңғыраулы телефондың ғәҙәттән тыш көслө һәм оҙаҡ тауышынан ҡарт хисапсының

күңелендә ниндәйҙер борсоулы тойғолар тыуҙы. «Нишләргә? Алырғамы, юҡмы?». Аҫҡа һалынып төшкән ҡорһағын ҡоршау һымаҡ ураткан яҫы ҡайышҡа ике ҡулын тығып, бер аҙ торҙо ла ҙур һаҡлыҡ менән телефон трубкаһын ике ҡуллап ҡолағына ҡуйҙы. Унан Клавдияның ярһыған тауышы ишетелде.

– Һеҙгә ҡырғын тейҙеме әллә? Берегеҙ ҙә яуап бирмәй! – тине телефонистка һәм, ауыҙ асырға ла бирмәй, мышылдап, йыш-йыш тын алып, трубка тотоп ултырған Хәлимов барлығын белеп, ҡысҡыра башланы. – Һеҙ нимә? Район хужаһының үҙенә яуап бирмәйһегеҙ! Хәҙер иптәш Хәлимов менән тоташтырам!

Сабир ҡарт итләс йомшаҡ устарынан тирләй башлаған шыма телефон трубкаһын иҙәнгә ырғытып ташларҙай булды, ләкин һуң ине инде.

– Эйе, эйе, «Ҡыҙыл Ялан» колхозының галауный бухгалтеры Ҡаҙаҡбаев тыңлай! – тине ҡурҡа-ҡурҡа Сабир.

Теге яҡтағы трубканан тоноҡ ҡына, ләкин әмергә оҡшаш тауыш ишетелде:

– Бына нимә, иптәш писер, иртәгә иртәнге сәғәт туғыҙға һеҙҙең рәйесегеҙ райкомға килеп етһен! – Бөтөнләй ҡойолоп, һүҙһеҙ ҡалған ҡарт трубканы ҡулында оҙаҡ ҡына тотоп торҙо, шунан һаҡ ҡына ырғағына элеп ҡуйҙы.

Сабир ағай шымарып бөткән күн мендәр һалынған урындығына барып ултырҙы. «Ҡара һин уны! Минең Бөрйән волысында ҡасандыр писер булып эшләгәнде район хужаһы ла белә икән. Был кавалеристы райкомға саҡыртып, рәйеслектән алып ташлаһалар, ҡалай яҡшы булыр ине. Тын алырға ла бирмәй бит»,– тип ҡорһағы аҫтында эсе тартылып бушаған ат айылы һымаҡ һәлпәйгән ҡайышын һелкетеп алды.

«Иптәш кәпитан, һине иртәгә сәғәт туғыҙға райком секретары Хәлимов саҡырта» тип бәләкәй генә яҙыу яҙҙы ла, йылы мейескә арҡаһын терәп йоҡлап ятҡан Асия апайҙы уятып, уны рәйескә ебәрҙе.

Иртән Хәлимов райком ишеген асыуға, ҡара айғырға атланып әллә ҡасан уҡ килеп еткән Мурагимов шпорҙарын сылтлатып уның алдына килеп баҫты. Ҡулын башына ҡыйшайтып кейгән кубанкаһының ситенә ҡуйып үксә шыҡылдатып алғас, ғәжәпләнеп бер урында тапанып торған Хәлимовҡа честь бирҙе.

– Иптәш секретарь! – тине ул, һәр бер һүҙенә баҫым яһап. – Ҡушыуығыҙ буйынса, капитан Мурагимов һеҙҙең ҡарамаҡҡа килеп етте!

Кисә һөйләшелгән буйынса, райкомға бюро ағзалары йыйылды. Хәлимов уларҙың һәр береһе менән Мурагимовты эштән алыу тураһында һүҙ ҡуйышҡайны инде. Тик НКВД начальнигы Арыҫланов ҡына үҙенең фекере менән башҡаларҙан айырылып тора ине. Ысынын әйткәндә, Мурагимовтың тышҡы ҡиәфәте һәм теләһә ниндәй әмерҙе үтәргә әҙерлеге уға бер күреүҙә үк оҡшап ҡалғайны.

Коридорҙа үрле-түбәнле йөрөгән Мурагимовты кабинетҡа саҡырҙылар. Ул инеү менән ҡысҡырып честь биргәс, бюро ағзалары бер-береһенә ҡарашып йылмайышып ҡуйҙы. Хәлимов йөҙөн һытып ултырған ойоштороу бүлегенең мөдиренә уны ашарҙай булып ҡараш атты. Тап ул Мәскәү эргәһендәге һуғыштарҙа имгәнеп ҡайтҡан ошо капитанды колхоз рәйесе итеп ҡуйырға тәҡдим яһағайны.

Мурагимовты эштән бушатыу тураһындағы тәҡдимде индереүҙе бүлек мөдиренә ҡушҡас, ул бюро башланыр алдынан секретарға инеп: «Башҡа берәй кешегә ҡушығыҙ, сөнки бер ай элек кенә рәйеслеккә уны мин тәҡдим иткәйнем дә баһа!» – тип тә ҡарағайны, үҙе лә бер аҙ уңайһыҙланған Хәлимов, башын ҡалҡытып ҡарамайынса ғына, өҫтәле өҫтөндә ятҡан ҡағыҙҙарҙы йыйыштырған булып һүҙ башланы:

– Нишләйһең, вазифаң шул булғас, эшкә ҡуйыу ҙа, эштән алыу ҙа – беҙҙең өҫкә йөкмәтелгән бурыс.

Бер әйтелгәнде ҡабаттан һорарға ғәҙәтләнмәгән бүлек мөдире хужаһына тилмереп, тоғролоҡ тулы ҡарашын төбәне лә, янбашын ҡыйшайтып, галифе салбарын өҫкә күтәреп алды. Хәлимов уның менән оҙаҡ йылдар бергә эшләп, бының ишараһы ни аңлатҡанын шундуҡ төшөндө.

– Нимә, әллә салбарың төшөп барамы? Үҙ салбарыңа хужа булалмаһаң, ярҙам итергә була, – тине секретарь, битенә мыҫҡыл ҡатыш йылмайыу йүгертеп, иҙәндә аяҡтарын алмашлап баҫып торған, аҡ битенә борсоулы төҫ кергән бүлек мөдиренә башын ҡалҡытты. Тегенеһе хужаның ни әйтергә теләгәнен, билдәле, аңланы. Кинәйәле һүҙе «Телеңә ныҡ һалышһаң, иртәгә үк фронтҡа китергә повестка төшөүе лә бар» тигәнде аңлата ине. Ә сикәһенә сал инеп, маңлай сәстәре ҡойола башлаған, үҙенең йомшаҡ холҡо арҡаһында ваҡытынан алда олоғая төшкән бүлек мөдиренә фронт ниндәйҙер дәһшәтле тамуҡ уты һымаҡ.

Секретарь үҙенең ошо «суҡмар таяғы» менән Игебаев ише тиҫкәреләрҙе генә ҡурҡыта алмай, ә уның алдында ҡайтарып һүҙ әйтергә ҡурҡып, фронттың үҙенән генә түгел, хатта һүҙенән дә дер ҡалтырап торған кешеләр өсөн бик тә кәрәкле сара ул. Хужа, юҡ-юҡта шул «суҡмар»ын уңға-һулға һелтәп, бәғзеләрҙең ҡотон алырға ярата.

– Ниндәй сәбәп менән эштән бушатабыҙ? – тип һорарға бүлек мөдиренең баҙнатлығы етте.

Әҙерәк йәнләнә төшкән хужа:

– Ә быныһы – икенсе эш, юғиһә... – тип көлөмһөрәне һәм дауам итте. – Запастағы капитан Мурагимовты, Көньяҡ Урал хәрби округының штабы ҡарамағына китеүе сәбәпле, «Ҡыҙыл Ялан» колхозы рәйесе вазифаһынан бушатырға! Йә, нисек? Шулай яраймы?

Хәлимов ҡаҡса битенә оло кинәнес һыҙаттары йүгертеп, ҡымтыған йоҡа ирендәрен саҡ ҡына йырып йылмайҙы ла ултырғысына ҡырын ятты. Ошоно ғына көтөп торған бүлек мөдире, күкрәге алдына бармаҡтары бергә ҡайтарылған ҡулдарын һелкә-һелкә:

– Ну, иптәш секретарь, башығыҙ эшләй бит! Баш ҡынамы ни? Тотош Юғары Совет ул! – тип кейгән кителенең сусайып сыҡҡан яуырындарын һелкетә-һелкетә, сылтырап аҡҡан шишмә тауыштары сығарып кеткелдәп алды.

– Беҙҙе баш булған өсөн тоталар ҙа бит, бөтә район яҙмышы өсөн яуап бирергә аҡылдың камил булыуы мотлаҡ! Бушҡа ғына йырҙарҙа «Аҡылдарың камилға күрә...» тип йырланмай шул, – ҡапыл битенә етдилек яғылды. – Ярай, бюро ағзаларын индер!

Кабинетҡа ингән Мурагимов, дүрткелерәк шаҙра битен ҡалҡытып, ҙур, йәшел күҙҙәренең үткер ҡарашын өҫтәлдең түр башында ултырған хужаға төбәне. Уның өтөп алырҙай утлы ҡарашынан шөрләгән секретарь башын аҫҡа эйҙе. Ә Мурагимов, үҙен армияла өйрәткәндәрсә, «начальникты күҙе менән ашау»ҙы дауам итте. Секретарҙың эйәк ҡағыуы булды, ойоштороу бүлеге мөдире папкаһын асып уҡый башланы.

– ...Запастағы капитан Мурагимовты «Ҡыҙыл Ялан» колхозы рәйесе вазифаһынан, Урал хәрби округының штабы ҡарамағына китеүе сәбәпле, бушатырға!

Хәлимов, урынынан тормай ғына, бюро ағзаларына күҙ йүгертеп сыҡты.

– Иптәштәр! Ҡараған мәсьәлә барыбыҙ өсөн дә асыҡ, тип уйлайым. Уны тикшереп тороуҙың кәрәге лә, унан бигерәк, беҙҙең хаҡыбыҙ ҙа юҡ. Хәрби

приказ барыбыҙ өсөн дә закон, – тип үҙ ҡаршыһында турайып ҡатҡан мыҡты кәүҙәле капитанға беренсе мәртәбә ҡараны. – Бына шулай, иптәш капитан!

– Мин – һалдат! Ватан ҡайҙа барырға ҡушһа ла, мин һәр саҡ әҙер! – тип Мурагимов шпорҙарын сылтлатып, үксәләрен шаҡылдатып ҡуйҙы.

– Беҙ икенсе яуап көтмәнек тә, маладис! – тине ҡәнәғәт төҫ менән секретарь.

Был һүҙҙәрҙе ишетеү менән, Мурагимов кәүҙәһен тағы ла турайтыбыраҡ тотоп, киң күкрәген алға сығарып:

– Советтар Союзына хеҙмәт итәм! – тип һипкелле бите яҙылғанса киң йылмайып ебәрҙе.

Бюронан һуң, бер ҡатлыраҡ капитан, ойоштороу бүлегенең мөдире уҡыған ҡағыҙ ысынлап та хәрби округ штабының приказы икән тип, тегенең артынан инеп, приказ таптыра башланы. Уға, былдай документтарҙың кабинеттарҙа нисегерәк «бешеп» сыҡҡанын аңламаған кешегә, приказ таптырып, был ишекте байтаҡ ҡына асып-ябып йөрөргә тура килде. Бюронан һуң ике аҙна ваҡыт үткәс кенә Мурагимов ҡулына тейешле документты алды. Уны штабта оҙаҡ тотманылар, фронтҡа атлығып торған капитанды тура алғы һыҙыҡҡа оҙаттылар.

Ялан ауылы халҡы араһында «ат зәхмәте» ҡағылған капитан тураһында төрлө хәбәрҙәр бер аҙ шаулап алды ла, һүрелә-һүрелә барып, бөтөнләй һүнеп ҡалды. Байтаҡ ваҡыт үткәс кенә кемдер фронт гәзитендә Мурагимов батырлығы тураһында яҙылғанын күргән.

– Булыр, булыр. Бик шәп кавалерист ине. Ул бит үҙенең ҡиәфәте менән дә немецты ҡурҡытырлыҡ әфисәр! – тип һөйләнделәр ауылда.

## 11

Ошо ваҡиғаларҙан һуң бер нисә көндән Игебаевты яңынан райкомға саҡырҙылар. Һуң ғына район үҙәгенә килеп еткән Абдрахманды көтөп ултырған секретарь уны урынынан тороп ҡаршы алды. Үҙенең ҡырындағы урындыҡҡа ултыртып, Хәлимов төнгө ҡунаҡты диҡҡәт менән ҡарап сыҡты. «Һабан һөрөп йөрөһә лә, бер ҙә ит ташламаған, ысынлап та, был бик беше кеше икән, тик бите генә ҡояшта янған»,– тип уйлап алды кабинет хужаһы.

– Ярай әле, беҙҙең бәхеттән фронтҡа алып китмәгәндәр үҙеңде. Тағы уйлаштыҡ та һинең кандидатураға туҡталырға булдыҡ. Теге атлы яндырайҙан эш барып сыҡманы. Бөтәбеҙҙе лә стройға баҫтырып, марш менән ҡыуа башларҙан алда эштән бушатырға хәл иттек.

– Быға минең ниндәй ҡатнашлығым бар?

– Юҡ, иптәш Игебаев, улай сәнскеле итеп һөйләшмәйек әле. Әлбиттә, һинең беҙгә үпкәләрлек урының бар, ләкин бөтөнләй сәбәпһеҙгә генә һиңә шелтә иғлан итмәнек бит. Колхоз уставын боҙоу раҫ булды.

– Устав боҙмайым тип, ауыл халҡын астан ҡырып булмай бит. Халыҡты һаҡлап ҡалмаһаҡ, ул уставтың кемгә хәжәте бар? Һуғыштағы ауылдаштар алдында кем яуап бирәсәк?

– Әйҙә, иптәш Игебаев, үпкәләшеүҙәрҙе бөтөрәйек. Ҡыҙыулыҡ менән, уйламайыраҡ килеп сыҡты шул. Һиңә һәр саҡ ышаныс күрһәтеп торған ауылдаштарың хаҡына ҡайтып эшкә тотон.

Секретарға Абдрахманды байтаҡ ҡына өгөтләргә тура килде. Оҙаҡ уйланып ултыра торғас, Игебаев ризалығын бирҙе һәм ауылына ул яңынан колхоз рәйесе булып ҡайтты.

Яҙғы сәсеүҙе тамамлауға бер-ике көн генә ҡалғанда, Алмабикәнең бригадаһында тағы бер ваҡиға булып алды. Төнгө көтөүсе бөтә халыҡты ике сәғәттән

артыҡҡа эшкә һуңлатты. Таң яҡынлашып, аттар юшай башлағанға тиклем ат өҫтөнән төшөп серем дә итмәгән көтөүсе Байназаров Әбделғәни таң һыҙылып килгәндә сылбырының осон терһәгенә урап бәйләне лә әҙерәк ял тиергә булды. Бындай осраҡтарҙа Ғәйнулланың туры бейәһе көтөүҙе башлап берәй яҡҡа алып китә башлаһа, көтөүсенең аты уны муйынына бәйләнгән сылбырынан тартып уята торғайны. Был юлы Әбделғәни бер ниндәй шипкертте һиҙмәне. Ҡояш йылылығынан уның күҙе асылыуға ҡояш дилбегә оҙонлоғо һауалағайны инде.

Йоҡонан уянған Әбделғәни эйәренең тартма айылдарын нығытып тартты ла атына атланды. Ләкин яҡын-тирәлә ат көтөүе күренмәне. Күмәк йылҡы үткән ысыҡлы эҙ артынан көтөүсе тәрән үҙәккә төштө, шунан тағы күтәрелде. Шик юҡ: туры бейә бөтә көтөүҙе колхоздың арыш баҫыуына алып киткән. Ни күҙе менән күрһен – һырт буйындағы йәм-йәшел булып ятҡан арыш майҙанында, ҡара сәүкәләр кеүек, бригада аттары йөрөй! Сыбыртҡыһын шартлатып, ҡысҡыра-ҡысҡыра Әбделғәни аттарын өйөргә йыйҙы ла йән-фарман бригада яғына ҡайырҙы. Ул өйөрҙө ҡыуыштарға алып килгәндә, ҡулдарына йүгәндәрен тотҡан һабансылар уны күптән көтә ине инде. Алмабикә йөҙөнә сыҡҡан борсоулы төҫ менән һораны:

– Әбделғәни ағай, ни булды? Төндә берәй ҡош-ҡорт осрап, көтөүеңде өркөтөп алып киттеме әллә?

Ғәҙәттә аҙ һүҙле көтөүсе тураһын әйтте.

– Таңға, ат юшағанда, ятып торғайным да, аңғармаҫтан йоҡлап киткәнмен. Ғәйнулланың анауы алама турыһы аттарҙы арышҡа алып киткән. Иртәнсәк мин уларҙы баҫыуҙан ҡыуып сығарҙым, – тине ул.

Алмабикә был турала ауылға ҡайтып Игебаев ағаһына әйтмәй булдыра алманы. Рәйестең ҡушыуы буйынса, Сабир ҡарт ревкомиссия ағзаларын саҡыртты, ә улар инде колхозға килгән зыянды урынына сығып ҡарарға булдылар. Әбделғәниҙе кәнсәгә саҡырып, рәйес ҡыҙҙырып сығарырға ла уйлағайны ла, райком секретарының «Халыҡ менән кәңәшләшмәйһең, эштең бәләкәйен дә, ҙурын да үҙ белдегең менән, колхозсыларҙың фекерен һанға һуҡмай эшләп тик йөрөйһөң!» тигәне иҫенә килде. Ысынлап та, ул ни өсөн бөтә тишеккә морон тығырға тейеш һуң әле? Был эш менән, ана, ревкомиссия шөғөлләнһен. Игебаев колхоздың ревкомиссияһын бар тип тә белмәй, тип һөйләнеп йөрөмәҫкә яҡшы булыр.

Баҫыуға барып, арыш потраваһын самалап, Әбделғәни килтергән зыянды ҡайтарыу өсөн эште ауыл судына бирҙеләр. Үҙенең кем икәнен кеше араһында тағы бер тапҡыр күрһәтергә сәбәп кенә эҙләп йөрөгән ауыл суды рәйесе Байназаров Ғәфүр, кәнсәгә килеп, бик етди рәүештә Сабир ҡарт ҡулынан тейешле ҡағыҙҙарҙы ҡабул итеп алды. Мәктәпкә уҡыған малайының тотҡаһыҙ, таушалып мендәргә әйләнеп бөткән портфеленә уларҙы һалды ла ҡайтып китте.

Һандыҡ төбөндә сепрәккә уралған көйөнсә ятҡан ике Георгий тәреһен өрөп-өрөп кейеҙ киҫәге менән йылтыратҡансы таҙартты ла кәзәкейенең түшенә ҡаҙап ҡуйҙы. Уларҙы йөрөтөргә ҡәтғи тыйылғас, ул георгийҙарын утыҙ йылға яҡын бүрәнә егендә һаҡланы. Һуғыш башланыу менән, батша наградаһын үҙенең тышлы баса күрпәһенең түшенә яңынан таҡты. Был турала ишетеп ҡалған НКВД уполномоченныйы быны эшкә һанап, Ғәфүр ҡартты төнгө сәғәт берҙә кәнсәгә саҡыртып, уны ҡыҫмаҡҡа алырға уйлағайны, Ғәфүр бирешеп торманы, ашыҡмай ғына кеҫәһенән «Красная звезда» гәзитендә Ҡыҙыл Армия көнөнә баҫылып сыҡҡан дүрт Георгий таҡҡан бер украин ҡартының фотоһын күрһәтте лә, гәзит киҫәген кире кеҫәһенә тығып, ҡойолоп төшкән уполномоченныйҙың үҙен генә ҡалдырып,

кәнсәнән сығып та тайҙы. Бынан һуң был мәсьәлә менән уға бер кем дә бәйләнмәне.

Ғәфүр ҡарт төн буйы ултырып эште өйрәнде лә, иртәгәһенә тағы улының иҫке портфелен ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, аяҡтарын һуҙа-һуҙа, ашыҡмай ғына янъяғына ҡарана-ҡарана, бригадаға йүнәлде. Суд үткәреү өсөн өҫтәл таба алмағас, бригаданың аҙыҡ-түлек һаҡлай торған ҙур ҡыҙыл һандығын ҡыуыштан һөйрәп сығарып, уртаға ултырттылар. Төш мәлендә бригаданы йыйып, ике яғына ике заседатель ултыртып, Ғәфүр Байназаров суд башланы. Халыҡ йыйылғас, ул, кәзәкей салғыйын әйләндереп, түшендәге георгийҙарҙы ышҡып алды.

Ғәфүр ҡарт ғәйепләнеүсе сифатында үҙенең ике туған ҡустыһы Байназаров Әбделғәниҙе килтерергә ҡушты. Тегене ҡыҙыл һандыҡ алдына баҫтырҙылар. Ауылдаштарының үҙенә төбәлгән ҡараштарынан оялыпмы, Әбделғәни аяҡтарын алмашлап баҫып, ҡыҙарған битен аҫҡа эйҙе. Ғәфүр ҡарт портфеленән ҡағыҙҙарын һандыҡ өҫтөнә сығарып һалды ла тарамыш епкә бәйләнгән, бер нисә урынынан ватылып ҡоршалған күҙлеген ашыҡмай ғына ике ҡолағына элеп ҡуйҙы. Шунан үҙенең ике яғында ултырған заседателдәргә күҙ йүгертеп, шыбырлап һорап ҡуйҙы:

– Башлайбыҙмы? – Тегеләр ризалыҡ белдереп, баштарын һелкте.

Үҙе ултырған күн мендәрҙән ҡапыл ғына торалмай, бер аҙ мәтәләнеп, суд рәйесе аяғүрә баҫты. Тамағын ҡырып, бөтә кешеләр ишетерлек итеп һөйләй башланы.

– Йәмәғәт! Ялан шураси ауыл мәхкәмәсенең ултырышын ачыҡ дип иғлан ҡылам. – Тыңлап ултырыусылар йылмайып ҡуйҙы. Бер кемгә лә иғтибар итмәй, Ғәфүр ҡарт «лап» итеп кире мендәргә ултырҙы. Танауына төшкән күҙлеге аша оҙаҡ ҡына алдында торған ҡустыһына ҡарап ултырҙы ла һаман татарсалап һорытты.

– Ялан ауылы гражданы Байназаров Әбделғәни син буласыңмы? – тип һораны.

Ерҙә ултырған колхозсылар геү килеп, эстәре ҡатҡансы көлөп алды. Быға ҡарамаҫтан, Ғәфүр ҡарт, бер ни булмағандай, халыҡ көлөп бөткәс, ауылдаштарына мөрәжәғәт итте:

– Бу кешенең мәсьүлиәткә тарттырылыусы Байназаров Әбделғәни булыуында шигегеҙ юҡмы?

– Шул! Тас үҙе! – тиеште халыҡ. Ҡайһылары төшөнмәй ҡалды. – Әллә һаташып бараһыңмы? Бына берғайыш – үҙ ҡустыңды танымаҫҡа!

– Мин, мин инде. Мин – Әбделғәни! Башлай һал судыңды! – тип ҡысҡырҙы һандыҡ алдында оятынан ер тишегенә инерҙәй булып торған көтөүсе.

– Ғәйепләнеүсе Байназаров Әбделғәни! Сән хөкөм состафы белән ризамы? – тип һораны Ғәфүр. Бер ни аңламаған көтөүсенән яуап алалмағас, заседателдәргә ҡарап һорауын ҡабатланы. – Икенсе һүҙ менән әйткәндә, сән бездән ризамы?

Ағаһын һуғып осорорҙай булып асыуы ҡабарған Әбделғәни:

– Риза булмай ни? Ризамын, – тип мыҫҡыл ҡатыш йылмайҙы.

Сәғәттән ашыу төпсөнөп, тәфсирләп тәфтиш алғандан һуң, суд ситкәрәк китте. Кәңәшкә. Бына Ғәфүр, заседателдәре менән таҡта өйҙән сығып, яй ғына халыҡ көтөп торған урынға яҡынлашты. Кемдер: «Тороғоҙ! Суд килә!» – тип ҡысҡырҙы. Бөтәһе лә тын баҫты. Үҙенең кинәнеүен йәшерә алмай, күкрәген ҡаҡайта биреп, Ғәфүр: «Ултырығыҙ!» – тине лә, һандыҡ артына баҫып, тантаналы рәүештә хөкөм иғлан итте.

– Рәсәй йөмһүриәте исеменән Абзан төбәге шураһы ауыл мәхкәмәһе мәхкәмә рәйесе Байназаров Ғәфүр, халыҡ заседателдәре Байбулова Мәлифә, Шакирова

Ямал ҡатнашлығында «Ҡыҙыл Ялан» колхозының түбәнге бригадаһы көтөүсеһе Байназаров Әбделғәниҙең бригада аттарын арыш сәсеүлегенә төшөрөп, колхозға матди зыян килтереү тураһындағы эшен ҡараны. Рәсәй йөмһүриәте Енәйәт ҡанундарының 168-се матдаһына бинаэн көтөүсе Байназаров ошбу эште ҡылыуҙа мәсьүлиәтлы хисаплана. Уның эшен ентекләп тикшергәндән һуң, «Ҡыҙыл Ялан» колхозына килтергән зыянды ҡайтарыу ниәтендә, унан кәрәкле миҡдарҙа штраф түләтеү өсөн ауыл шураһына тапшырырға... – Ғәфүр ағай ҡарарын уҡып бөттө лә мәхкәмәне ябыҡ тип иғлан итте.

Халыҡ таралыша башлағас, Әбделғәни хөкөмдар ағаһы эргәһенә килеп, уны сәй эсеп ҡайтырға ҡыҫтап та ҡарағайны, ләкин Ғәфүр бөтә кеше ишетерлек итеп: «Мин колхоз милегенә ҡоротҡослоҡ ҡылған кеше менән бергә ҡуштап ултырып сәй эсә алмайым!» – тип, портфелен ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, ауылға йәйәү ҡайтып китте.

Ошо ваҡиғанан һуң улар, уларҙың балалары, ғүмер буйы ут күрше булып йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, оҙаҡ йылдар бер-береһе менән аралашманы. Ул ғына ла түгел, ике өй араһындағы элек баштарын һалып һөйләшә торған ситәнде бейегәйттеләр, уны ике яғынан да һыйыр тиҙәге менән, энә күҙәүендәй ҙә ек ҡалдырмай, һыланылар.

Урамда осраған һәр кеше Әбделғәнигә «Байназаров Әбделғәни син буласыңмы?» тип өндәшә башланы. Был мисәт уға үлгәнсә йәбеште, ул үлгәс, балаларына күсте.

...Колхоздың йәшелсә звеноһында ла эштәр ярайһы ғына алға китте. Май баштарында Фишер биш-алты ҙур ғына түтәлгә һуған, кишер сәстерҙе. Ҡыяр өсөн дә урын әҙерләне, ер башына тиреҫ сығартты. Бер-ике ай эсендә әҙ-мәҙ эшенә ҡағылышлы башҡорт һүҙҙәре өйрәнде. Үҙенең ҡул аҫтында эшләгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың латин хәрефтәрен белеүенә шатланып бөтә алманы һәм дәфтәренә кәрәкле һүҙҙәрҙе яҙып алды. Ер камил йылынғас, ике гектарҙан ашыу картуф та ултыртылды.

Быйыл яҙғы сәсеүҙе тамамлап оҙон ауыл урамы буйлап ҡайтыусыларҙы һәр йылдағы һымаҡ һыуға ҡойондороусы булманы. Һабандарын ҡырын һалып, уларҙың өҫтөнә ултырып алған ҡояшта янған һабансылар, тырмаларының тешле яғын әйләндереп, урам саңын туҙҙырып ҡайтҡан тырмасылар шау-шыуһыҙ өйҙәренә таралышты.

Быйыл ғәҙәттәге һабантуй ҙа булмаҫ, ахырыһы. Унда кемдәр барһын да кемдәр үҙ һөнәрен күрһәтһен? Ҡурайсы Солтанәхмәт, бейеүсе Сабур, Нуретдиндар, көрәшсе Сәхәү Әлимғафаров, Сәхәү һәм Тәхәү Ҡалҡамановтар, йүгерек Ғәббәс – бөтәһе лә фронтта. Ҡайһы берҙәре бейеүҙән, йырлауҙан, бил бирмәй алышыуҙан мәңге туҡтаны...

Өс йыл да юҡ бит әле, халыҡ һаман һөйләгән була... 1939 йылдың район һабантуйында Урал аръяғының иң күренекле йүгерегә Ғәббәс, ун саҡрым беренсе килеп, ике йөҙ метр самаһы йүгерергә ҡалғас, туҡтап, аҙымға күсеп, үҙе артынан килгән биш-алты кешене үткәреп ебәрҙе. Бөтә халыҡ ҡысҡыра башланы: «Дауай йүгер! Был ни ҡыланышың, Ғәббәс?» Ғәббәс туптай ҡаҡлығып, айғыр кеүек бер нисә мәртәбә кешнәп, ел кеүек осоп алға киткәндәрҙе уҙып китте. Күрһәгеҙ шунда халыҡтың ҡоторонғанын? Һуңынан премияға биргән башҡа нәмәләр араһындағы ҡара сатин трусикты, ни икәнен белмәйенсә, аҡ ыштаны өҫтөнән кейеп, кеше араһында Ғәббәстең баш сөйөп йөрөүҙәре! Нисек кенә аяҡтары етеҙ, йүгерек булмаһын, ҡәһәрле дошмандың пуляһынан ҡаса алманы, һуғыштың тәүге йылында фронтта һәләк булды.

Ә ҡайҙа һуң ҡырҡ биш саҡрым ерҙе йөклө арбаға егелеп район үҙәгенә еткән, шунан ял итмәй, тәртәнән сыҡҡас та тағы егерме биш саҡрымға сабып, колхозға иген һуҡҡыс алып биргән Байбулат һымаҡ аттар? Күрһәгеҙ ине шунда уның хужаһының – Миһран ҡарттың – улы атланған аты тәүге урынды алғас, ғорурлы төҫөн! Байбулаты ла, улы ла хәҙер фронтта, ҡайталармы, юҡмы – билдәһеҙ. Һабантуй ҡайғыһымы ни?

* * *

Өйгә ҡайтып төшкән Алмабикәне өс хат көтә ине. Ул сисенер-сисенмәҫтән хаттарға йәбеште. Беренсеһе Ибраһимдан ине. «Фронтҡа килеп еттек. Дон йылғаһының боролошонда беҙҙең оборонаны өҙөп һөжүмгә күскән дошмандарға ҡаршы торорға әҙерләнәбеҙ. Был тирә ҡола ялан, ауылыбыҙ яғына оҡшаған. Ләкин бында беҙҙәге кеүек дөм-ҡара ер ҡайҙа? Бындағы ер һоро төҫтә, башты йәшерерлек тә ағас әҫәре юҡ, һирәк-мирәк соҡор-саҡыр. Һуғыш өсөн бер ҙә уңайлы урын түгел, бөтә тирә-яҡ әллә ҡайҙарға күренеп ята. Көн аяҙ, ҡояш бик ныҡ ҡыҙҙыра. Эсәр һыу юҡ. Беҙҙәге һымаҡ аҙым һайым шишмәләр осрамай. Фронтҡа яҡынлашып киләбеҙ. Хуш, бәғрем, форсат булһа, тағы яҙырмын»,– тиелә ине унда.

Икенсе хат Инйәрҙә тағы ике ҡыҙ менән төндә ғәйеп булған Хәтирәнән ине. Кире адресы ла бар: Силәбе ҡалаһы, ЧТЗ, 10-сынсы ятаҡ. «Алмабикә һылыуым! Яҙырға бер ниндәй әмәл булманы. Шунан, милиция эҙләр, тип тә ҡурҡып йөрөнөк. Инйәрҙә ашау бигерәк тә насарланғайны бит. Бынан имен ҡайтып булмаҫ, тип беҙҙең эргәнән үтеп йөрөгән поездың ваҡытын күҙәтеп йөрөнөк тә, төндә барактан китеп, өсәүләп поезға ултырҙыҡ. Визауай станцияһына еткәнсе шаҡырайып ҡаттыҡ. Шунда беҙҙе милиция тотто. Исем-шәрифтәрҙе үҙгәртеп яҙҙыҡ. Мин хәҙер Ялан ауылынан түгел, Әбделмәмбәтова Хәтирә түгел, ә Ҡыҙыл Һарт ауылы Мәмбәтова Хәниә булдым, хатты ла шулай яҙығыҙ. Минең менән киткән Әминә һәм Йәмиләне минән айырҙылар, ләкин улар ҙа ошо Силәбелә, иҫән-һауҙар, эшләп йөрөйҙәр. Тик уларҙы күптән күргәнем юҡ. Мине, олораҡ та, таҙараҡ та булғас, трактор заводына килтереп, бер ай токарлыҡҡа өйрәттеләр, хәҙер станокта эшләйем. Хаҡы бара, эше ауыр, ләкин урман эшенә ҡарағанда байтаҡҡа еңелерәк. Икмәк карточкаһы бирҙеләр, тороуым дөйөм ятаҡта. Алмабикә! Һиңә үтенесем бар: Әүхәҙиҙән хат-хәбәр булһа, уларҙы миңә ебәрә күр. Мин инде һуғыш бөтмәйенсә ҡайта алмам, минең һымаҡ яңғыҙ башҡа ҡайҙа ла бер, ике ҡулыңа бер эш. Бында заводта бронь менән йөрөгән татар, башҡорт егеттәре лә байтаҡ. Әсәйемә әкрен генә минең турала хәбәр ит...»– тип яҙылғайны унда.

Өсөнсө хат ҡустыһы Рәжәптән ине. Алмабикәгә килгән өс хатына төрлөсә ҡыуандылар. Хәтирәнең иҫән булыуына бигерәк тә Фатима әбей шат. «Әйткән һарығымды һуйҙырам!» тип кис ул Уйылдан ҡартты саҡырырға килгәйне. Ҡарт быға ҡаршы төштө: «Май айында кеше һарыҡ һуямы? Итен нисек һаҡлайһың? Хәтирә үҙе лә килеп төшөр, бәлки, шунда салырбыҙ! Тәүбәм башыма етер, тип ҡурҡма, хәҙер тәүбәңдең мөҙҙәтен кисектереү өсөн Хоҙайҙан үҙем теләк теләйем». Уйылдан ҡарт Ҡөрьәндең ниндәйҙер сүрәһен уҡыны, һәм Фатима әбей тынысланып ҡайтып китте.

Алмабикә менән Латифтың яҙғы сәсеүе бөтһә лә, Игебаев өсөн ул бөтмәгәйне әле. Быйыл колхоз активын картуф сәстерергә вәғәҙә биргән рәйес һүҙендә торорға тырышты. Игебаев егерме кешелек исемлек төҙөп, эргәһенә парторгты ултыртып, кешеләрҙе берәм-берәм кәнсәгә саҡыртты. Исемлек башына үҙен яҙҙы. «Уларҙың барыһын бергә саҡырһаң, һүҙ беркетеп, берҙәй баш тартасаҡтар»,– тип уйланы рәйес.

Бригадир Латиф, муйынына ҡамыт кейҙермәҫкә маташҡан байтал кеүек, тиҫкәреләнергә уйлағайны ла, Игебаев унының менән бик ҡаты һөйләште. Латифтың ризалыҡ бирмәй әмәле ҡалманы, ҡайтып, ул асыуының ҡөһөрөн бисәһе, баларынан алғас ҡына бер аҙ тынысланды. Һөрөүҙән бушаған һабан менән Игебаев тәүге көн үҙенән башлап, картуф сәсәһе бар кешеләрҙең кәртә артын һөрҙөрөп сыҡты ла, икенсе көнө ат ектереп, орлоҡҡа тигән картуфты шуларға таратты.

Ҡалған эште Фишерға тапшырҙы. Игебаевтың әмерен ул үҙ халҡына хас тырышлыҡ менән урын-еренә еткерҙе. Картуф сәселгән һәр участканың планын төҙөп, хужаларынан ҡул ҡуйҙыртты. Аҙаҡтан Фишер ҡағыҙҙарҙы шнурлап, ауыл шураһының мисәтен баҫып, рәйескә тапшырҙы. Игебаев был ҡалын ғына «Картуф дәфтәре»н ҡулына алып, ентекле генә ҡарап сыҡты һәм ғүмерендә бер ниндәй документҡа ҡул ҡуймаған ҡатыны Шәмсинурҙың имзаһын күреп ҡалды. «Немец немец инде, беҙгә лә шуларҙан күп нәмәләргә өйрәнәһе ине!» – тип уйланды рәйес.

12

«Тагилстрой»ҙан килгән бер төркөм төҙөүселәр, райондан өлкән землеустроитель, колхоз вәкиле Ҡаҙаҡбаев Сабир, етенсе участкаға сығып, буласаҡ немец поселогы урынын самалап, ҡағыҙға төшөрөп ҡуйҙылар. Поселокта барыһы илле йорт хужаһы булырға тейеш икән. Геодезик белгестәр буласаҡ урамдың ике яғын да тәҙләне, һәр бер йорттоң нигеҙ кимәлен үлсәп, рейкалар ҡағып сыҡтылар. Быны ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп торған Сабир ҡарт:

– Нишләп быларҙың йорттарын барыһын да бер тигеҙ эшләргә итәһегеҙ? Бында йәшәйһе немецтарҙың ғаиләләре бер ишме ни? – тип һораны.

Төҙөүселәрҙән бер быштыҡ немец, хужалыр инде, яуап ҡайтарҙы:

– Немецтарҙың бар нәмәһе лә бер тигеҙ булырға тейеш. Һеҙҙең генә ул бер күҙегеҙ һәр саҡ күршегә ҡарай, беҙҙә ундай юҡ. Был өйҙәр иң күп ғаиләле кешеләргә иҫәпләнгән.

– Әгәр балалары булмаһа? – Һаман төпсөндө Сабир.

– Балалары булмаһа, тырышһындар! Бынауындай сәхрәлә бала тыуҙырмай нишләп ятмаҡ кәрәк? Беҙҙә, һеҙҙәге һымаҡ, был мәсьәләлә ҡаты закон юҡ – үҙең булдыра алмайһың икән, күршең ярҙам итә! Был беҙҙә ғәйеп түгел.

– Үәт, ауыҙыңа май бөргән, илле йәшкә етеп, шундай рәхәт донъя барын бөгөн тәүләп ишетәм,– тип елкенде тамам аптыраған ҡарт.

– Ә һәр бер хужаның ихатаһында була торған һарай, ялан кәртә ҡайҙа? Бесәнлек өсөн нишләп урын бүлмәйһегеҙ?

– Беҙҙең бөтәһе лә бер ҡыйыҡ аҫтында була. Өйҙән сыҡҡас та һыйыр, суҫҡа һарайына инәһең. Өҫтөндә бесәнлеге була. Ошонда уҡ мунсаһы. Һеҙҙәге һымаҡ, илле метрҙа ултырған һарайға сығыу өсөн ҡышҡы буранда ваҡыт үткәреп кейенеп тормайбыҙ, өйҙән сығабыҙ ҙа һарайға инәбеҙ.

Сабир ҡарт бер ҙә бирешергә теләмәне.

– Әгәр янғын сыҡһа, малығыҙ менән ҡуша янаһығыҙ ҙа! – тине ул.

– Беҙ һәр һарайға мискә менән һыу, һәр мөйөшкә ут һүндергес ҡуябыҙ. Ҡайһыларҙың ҡыңғырауы була: Ут сыҡһа, барыһы ла ярҙамға йыйыла..

Бер нисә көндән ошо урында кәҫтән эшләнгән, хужаһыҙ, яртыһынан ергә һеңгән өйҙәрҙе емереп, яңы төҙөлөш башлап ебәрҙеләр. Был тирәлә балсыҡ, ҡом булмау сәбәпле, ауыл файҙаланған балсыҡ соҡорона килделәр, ә ҡомдо Ҡыҙыл буйынан алдылар. Төҙөүселәр көнө-төнө балсыҡ баҫып, кирбес һуҡты. Һуғылған кирбестәрҙе штабелгә өйөп, дүрт-биш аҙна ҡояшта киптерҙеләр. Һәр

бер өйгә  тәҙрә, иҙәнлек, түшәм  таҡталарын Тагилдан машинаға тейәп килтерҙеләр. «Быларға ҡандай рәхәт! Өйҙәренең ҙурлығы бер булғас – тәҙрәләре, яҡтауҙары, ишектәре һәм башҡалары ла быларҙың бер. Өлгөрөп еткән теләһә ниндәй өйгә ҡуя башла. Беҙҙәге ише, йөҙ йортҡа йөҙ төрлө тәҙрә түгел. Бына һиңә немец!» – тип һөйләнде Сабир кәнсәһендә.

Икенсе тапҡыр Ялан  кешеләре  һәр төҙөләһе йорт алдында рәүеше менән сыйырсыҡ ояһына оҡшаған, бер кеше һыймалы, ҡыйығы ябылған аласыҡ күрҙеләр. Иҙәне өҫтөндә ултырыу өсөн тишекле бәләкәй ултырғысты күргәс кенә, кемдер, төшөнөп: «Ҡара, ҡара! Былар өйөнән алда әбрәкәй төҙөйҙәр!» – тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Алдан һөйләшелгәнсә, төҙөүселәр колхоз өсөн һыйыр һарайы төҙөй башланы. Ауылдағы кеүек, уларҙың прорабы таң менән өй һайын тәҙрә ҡағып, кешеләрҙе эшкә саҡырып йөрөмәне. Төҙөүселәр минутлап эш башланы, тейешле ваҡытта эштән туҡтаны. Алмабикә үҙ халҡын йыйып алғансы, немецтар бер тына эшләп, ялға туҡтап ала. Эш ваҡытында  төрлө эш ҡорамалдары туҡылдауынан, гөжләүенән башҡа тауыш булмай. Бер-береһенә ҡысҡырыу, һүгенеү ҙә ишетелмәй, әйтерһең дә, бында һаңғырау, телһеҙ кешеләр генә эшләй. Йәкшәмбе көнө төҙөлөш тып-тын ҡалды. Бөтә кеше ял итә икән. Күбеһе күрше-тирә ауылдарға «донъя күрергә» таралды, бәғзеләре үҙ йомоштары менән Мәғнит яғына китте.

Бер аҙҙан һәр йорт ихатаһында эшләнгән таҡта өйҙәргә бында торасаҡ ҡатындар, уларҙың бала-сағаһы килде. Бер кем дә ҡул ҡаушарып ултырманы. Берәүҙәре кирбес һуҡты, икенселәре һыртында һуҙылып ятып йоҡларлыҡ, аяҡтары телефон бағанаһы, тояҡтары бәләкәйерәк батмус ише аттарҙы дуғаһыҙ егеп, Оло Ҡыҙыл   буйынан ҡом, балсыҡ ташыны. «Интернационал» тракторы килеп, кәртә артын төп-төҙ итеп һөрөп, дүрт-биш тапҡыр тырматып китте. Бына шунан һуң башланды ҡыҙыу эш! Бөтә немец ғаиләләре, бала-сағаһы менән сығып, ҡара сәүкәләр һымаҡ, баҡса эшенә тотондо. Ялан ауылының кәртәләре артынан яҙғы ташҡын мәлендә ағыҙып ебәреү өсөн өйөм-өйөм ятҡан тиреҫте бер туҡтауһыҙ баҡсаларына ташынылар. Ауыл халҡы ла эшһеҙ ултырманы, рәхәтләнеп, бот сабып немецтарҙан көлдө. Ысынлап та, һыйыр буғы өҫтөндә үҫкән йәшелсәне нисек сикәнмәй ашамаҡ кәрәк? Унда үҫкән һуғандан да тиҙәк еҫе килеп торалыр ул? Бындай картуфты нисек ашҡа турамаҡ кәрәк?

Немецтарҙың баҡса эшкәртеп сәсеүенә берәй ай ваҡыт үткәс, Фишер, звеноһының бер нисә ҡыҙын өгөтләп, уларҙы Седьмойға, хәҙер инде Төньяҡ тип аталған поселокка алып килде. Улар килеүгә бындағы түтәлдәрҙә йәм-йәшел, тигеҙ, ҡамыш кеүек ҡуйы булып һуған, кишер, һарымһаҡтары сығып та өлгөргәйне. Быларҙы күреп, ауыл ҡыҙҙары хайран ҡалды. «Ҡара-ҡара, үҫтермәгән нәмәләре юҡ! Ҡалай барыһын да уйлап эшләйҙәр – артыҡ   тиҙәкте лә ағас бураларға тултырып ҡуйғандар!»

Фишер милләттәштәре менән үҙҙәренсә һүҙгә кереште. Бер аҙ торғас, килгәндәрҙе бер ғаилә ашарға саҡырҙы. Уларҙы итле кәбеҫтә ашы менән һыйланылар. Ҡыҙҙарҙың был беренсе тапҡыр кәбеҫтәне тәмләп ҡарауы ине. Ҡайтҡанда Фишер үҙ милләттәштәренең шул тиклем йомартланып киткәненә аптырағаны тураһында һөйләп бирҙе.

– Был һуғыш немецты ла ҡайһы бер нәмәгә өйрәтә башлаған, ахыры. Беҙҙең немецҡа үҙе туҡ булһа еткән, башҡа кеше асмы-туҡмы – уның эше юҡ. Улар Ялан ауылы башҡорттары түгел, сит кеше өйөнә инер-инмәҫтән самауырына йәбешмәй, күршегә йомошҡа йөрөмәй, тормош кәрәк-ярағы һәр кешелә үҙенеке булырға тейеш. Һеҙҙәге шикелле, тауығы йомортҡа һалһа ла кеше саҡырып бармай, беҙҙә ғөмүмән саҡырыу юҡ.

– Атаҡ, атаҡ, кеше менән ҡатнашмай, кеше саҡырмай нисек йәшәмәк кәрәк? Беҙ ней, ошо араларҙа йәштәр менән йыйылышырға уйлайбыҙ, – тине ҡыҙҙар.

– Саҡырһағыҙ, мин дә килермен! Һеҙҙең тәртип миңә күберәк оҡшай! – тип көлдө Фишер.

Фронттан көн һайын күңелһеҙ хәбәрҙәр яуа башланы. «Көньяҡта немецтар һөжүмгә күсеп, Ҡыҙыл Армия ғәскәрен Сталинград йүнәлешендә ныҡ ҡыҫырыҡлай икән» тигән хәбәрҙәр йөрөнө. Ялан ауылында радио булмаһа ла, рудникта эшләгәндәр Совинформ яңылыҡтарын көн һайын тигәндәй ауыл халҡына еткереп торҙо. «Совет-герман фронтында артыҡ үҙгәрештәр юҡ, фәлән ҡала тирәһендә көсөргәнешле бәрелештәр бара» тигән һаран ғына мәғлүмәттәрҙән дә халыҡ тейешле һығымта яһай барҙы. Тимәк, иртәгә беҙҙекеләр ул ҡаланы ҡалдырып китәсәк, тип йомғаҡ яһаны бәғзеләр. Ысынлап та, иртәгәһенә үк ҡала немецтар ҡулына күскән булып сыға. Июнь айында дошман самолеттары Саратов ҡалаһына етеп, нефть эшкәртеү заводын бомбаға тотто. Заводҡа артыҡ зыян килтерә алмаһалар ҙа, унда шартлаған бомба тауыштары алыҫ Урал аръяғына – Ҡыҙыл һыуын һыулаған бәләкәй генә төпкөл башҡорт ауылы Яланға ла килеп етте.

– Һамар яғы бына ғына ята бит! Немец унда еткәс, – бер ынтылһа, Урал артылып, беҙҙең яҡҡа ла килеп етеүе бар! – тиеште донъя күргәнерәк ауыл ҡарттары.

1942 йылдың йәйенә ауылдан алынаһы кешеләр бөтөнөһө лә тигәндәй фронтҡа китеп бөттө. Төрлө сәбәптәр менән армиянан ҡалып йөрөгән оло йәштәгеләрҙе, ошоға тиклем алынмай йөрөгән, броне булған тракторсыларҙы, етәксе район, ауыл работниктарын – барыһын да һепереп хәрби комиссариат повесткалары фронтҡа саҡырҙы.

Китеүселәр араһында һуғыш башланыу менән военкоматҡа бара һалып, беренсе булып ҡулына бронь алып ҡайтҡан минзагтың агенты Әбүзәрҙең булыуы бөтә ауылды аптыратты, сөнки ул «Туфан һыуы ҡалҡып, ахыры заман еткәндә лә мине һуғышҡа алмаясаҡтар!» тип маҡтана торғайны. Нисек инде ул фронтҡа китергә тейеш? Ул киткәс, Йәрмөхәмәт силсәүитендә кем ит, һөт, тире, һалымдар йыясаҡ? Заготплан ваҡытында үтәлмәһә – районға, бөтөн ил өҫтөнә ҡыйынлыҡ төшөүе бар ҙа баһа! Ул ошо Сәүит власы кендеге түгелме ни? Әбүзәр үҙе тураһында бына ошолай уйлай. Ауыл кешеләре лә ошо фекерҙә, сөнки Совет власы урынлашҡаны бирле улар ит, һөтөн хөкүмәт алдындағы башҡа бурыстарын Әбүзәргә генә тапшырып барҙы. Шуға күрә ауылдаштары уны властың айырылғыһыҙ ҡушымтаһы, күҙ-ҡолағы тип белә.

Әбүзәрҙең тышҡы рәүеше һәр саҡ үҙгәрә торҙо: заманында ул наган йөрөттө, йәйәү ҙә йөрөнө, атлы ла булды, хәҙер инде күк буҫтауҙан тегелгән ҡайтармалы яға остарына икешәр йондоҙ беркетелгән форма, башында шундай уҡ төҫтәге матур итеп эшләнгән кокардалы иләк ҙурлығы фуражка йөрөтә. Ошо форма менән ҡола атына атланып берәй ауылдашының ҡапҡаһына борһа, тегенең йәне алҡымына килә. Сөнки Әбүзәр тигенгә генә туҡтамай, йә һөтөң тапшырылып бөтмәгән, йә үткән йәкшәмбелә һарыҡ тиреһен икенсе агентҡа биргәнһең. Әбүзәр атын ҡапҡаға терәй ҙә ҡамсы һабы менән бөтә күрше-күлән ишеттерерлек итеп ҡапҡа шаҡырға тотона.

– Нишләп көпә-көндөҙ ҡапҡа бикләп ултыраһығыҙ? Асығыҙ! Үлеп бөттөгөҙмө әллә?

Ул туҡталған һәр кешенән башта ҡапҡа астыра. Ул ихатаға һыбай инеп, атының теҙгенен ситән бағанаһына ырғыта ла, бер кем менән дә һаулыҡ һорашмай, кәртә-ҡураны, һарайҙарҙы ҡарап сыға. Унда ятҡан бесән өйөмөн итеге

менән типкеләй, өйөлгән утын әрҙәнәһе аша үңәсен һоноп ҡарай. Үҙенән башҡа һәр кешене ул Совет власының дошманы тип хисаплай.

Әбүзәр алдында ҡалтыранған йорт хужаһын шундуҡ ҡыҫмаҡҡа ала.

– Һеҙҙең декабрҙә тыуған орғасы һарыҡ ҡайҙа?

– Ҡайҙа булһын, үҙебеҙҙең мал менән ҡуша йөрөй. Инәһенән яңы ғына айырҙыҡ, –тип аҡлана хужа.

– Һин нимә? Әбүҙәрҙе һиңмай, кәбәк мейегә һанайһыңмы? Ҡайһы һарығығыҙ ҡасан бәрәсләгән һәм нисә бәрәс китергәнен – мин барыһын да белеп торам! Рөхсәтһеҙ һуйып һатҡан бәрәстең тиреһен иртәгә үк, ер аҫтынан булһа ла табып, миңә тапшыраһың! Әгәр тапшырмаһаң, үҙеңдең тиреңде тунап алырмын! Төшөндөңмө? – Әбүзәр, атына атланып, икенсе йортҡа йүнәлә.

– Һыйырым быйыл ҡыҫыр ҡалды бит, үҙебеҙ ҙә һөтһөҙ ултырабыҙ. Хөкүмәткә һөт планын үтәй алмам инде, – тигән кешене Әбүзәр тыңлап та тормай.

– Өй тулы балаларың һөтһөҙ ултырһа, буҡ та булмаҫ! Хөкүмәт һөтһөҙ ултыра алмай! Уның планы – закон! – тип яуаплай агент атынан төшмәй генә. – Аҙаҡтан, Әбүзәр алдан киҫәтмәне, тип шыңшып йөрөмә!

Ит заданиеһын үтәмәгән кешенең кәртәһенә инеп, яңғыҙ һыйырын етәкләп сығып китергә лә тартынмай Әбүзәр. Ауылда ул бер кем менән дә иҫәнләшмәй. Бөтә кеше унан һаулыҡ һорашырға бурыслы, тип һанай ул. Колхоз рәйесе Игебаев та, ниндәй генә көслө ихтыярлы кеше булмаһын, Әбүзәрҙән алыҫыраҡ торорға тырыша һәм үҙ һалымын бөтә кешенән алда түләп ҡуя.

Бына шундай кешегә лә повестка тотторғас, фронтта эштәр бик мөшкөл икәнен аңланы халыҡ. «Әбүзәр киткәс, хөкүмәттең берәй мөйөшө бүҫерелеп төшөр инде!» тип ысын күңелдән уйлаған ябай ауыл халҡының фекерен тормош бик тиҙ кире ҡаҡты. Ул киткәндән һуң бер ай ғына үтте, ауылға Әбүзәрҙең батырҙарса һәләк булғаны тураһында «ҡара ҡағыҙ» килеп тә төштө, ләкин хөкүмәткә бер ни ҙә булманы. Игебаев район менән һөйләшеп, сепаратор пуктының мөдире Баныуҙы агент итеп ҡуйҙыртты һәм эш үҙ яйы менән китте. Башҡа берәү ҙә элекке кеүек тентеп, кәртәнән «йәшергән » мал эҙләп йөрөмәне, көсләтеп йоморҡа, һөт таптыртманы, киреһенсә, иркен тын алған ауыл халҡы бөтөн һалымдарҙы ваҡытынан алда түләп бөтөрөргә тырышты. Ил өҫтөнә килгән ауыр ваҡытта ярҙам итергә ылдым тырышып ятҡан Ялан халҡына Әбүзәрҙең сыбыртҡыһы башҡа кәрәкмәне.

Ҡыҙыл Армияға сажин оҙонлоғо, ифрат та мыҡты кәүҙәле «Торна Ғөбәйт» тә китте. «Ул да фронтҡа киткәс, немец бирелмәй ҡайҙа барһын!» – тип һөйләп йөрөнө ауыл халҡы. Ысынында, ауылдың иң бейек, иң ғәйрәтле кешеһе Ғөбәйт ғүмерендә себенгә лә тейгән әҙәм түгел. Уның оҙонса, сыйырсыҡ ояһына оҡшаңҡырап торған башы, әйтерһең дә, яуырынан үҫеп сыҡҡан. Уның алғараҡ сығып торған алғы оҙон өҫкө бер генә теше араһынан һөйләшкәндә бышылдап һауа сығып тора. Үҙе ҡолаҡҡа ҡатыраҡ булғанғалыр инде, сит кешегә бик һирәк ҡысҡырып өндәшә. Башҡа кеше һымаҡ юҡ-бар ләпелдәп, әҙәм маҙаһыҙлап та йөрөмәй Ғөбәйт. Уның оҙон ҡулдары, көрәктәй устары бик тә һалыулы, ләкин үҙенең йәмәғәте Гөлсөм еңгәйгә ғүмерендә бармаҡ та сирткәне юҡ. Ул эш өсөн генә яратылған, торғаны колхоздың «һапһыҙ ҡара балтаһы» инде.

Утыҙынсы йылдарҙа «Ҡыҙыл Ялан» колхозына бер кем күрмәгән «Фордзон» тракторы бирҙеләр. Тик ,ни сәбәп менәндер, ул ауылға «үҙ аяғы» менән ҡайтманы. Аптырағас, Игебаев элек-электән тимер-томор эше менән шөғөлләнгән Ғөбәйтте саҡыртты. Игебаев ағаһының ҡолаҡ төбөндә ҡысҡырып-ҡыскырып һөйләгәнен өндәшмәй генә тыңлағас, Ғөбәйт тышҡа сығып, кәнсә урамында ултырған үҙе йөрөргә тейешле «ут арбаһы»н бер нисә тапҡыр урап сыҡты. Шунан уның ауыр кәүҙәһен көскә күтәреп артҡа һығылған тимер ултырғысына менеп ултырҙы ла,

ян-яғына ҡаранып, уның тәгәрмәс ҡоршауы һымаҡ түңәрәк рулен, борғостарын тотоп ҡараны. Осло тимерле тәгәрмәстәре ергә батҡан, ҡара ҡуңыҙ кеүек бәләкәй генә трактор өҫтөндә күбәләй булып ултырған Ғөбәйткә ҡарап, йыйылған халыҡ уның өс тәрәнле һабан тағып ер һөрә алыуына ышанманы.

– Ҡуйығыҙ әле! Ошо тимер нәмәкәй һабан һөрә, тиме ни? Уның, ана, өҫтөндә ултырған Ғөбәйткә лә көсө етмәйәсәк! Ғөбәйт әҙерәк ҡыҙмасалап алһа, уны үҙе лә һөйрәп йөрөтә ала ул! – тиеште ауылдаштар.

Үҙҙәрен ауылда ҡарыулыға һанап, йыйындарҙа бил бирмәгән бер нисә кеше тракторҙың алғы күсәренә тотоноп, күтәрергә маташып ҡараны.

– Ҡара, ҡара! Үҙе йәтеш кенә күренһә лә, һәлмәк икән! Һәлмәк булмай, ул бит сөгөндән эшләнгән! Ғөбәйт, булмаһа, ошо ғәләмәттең алғы күсәренән ҡуҙғатып ҡарайһыңмы әллә?

Ғөбәйт ағас ҡаҙау ҙурлығы һыңар тешен күрһәтеп йылмайҙы ла тракторҙың алдына йәбеште. Ҡырғандан һуң еҙ сәсе үҫә башлаған ҙур башын һул яҡҡа һалып, ҡая һымаҡ текә кәүҙәһе менән трактор алдына аяҡ остары менән сүкәйеп ултырҙы ла ҡапыл турайып ергә баҫты. «Фордзон» тракторының алғы яғы уның ҡан тамырҙары бармаҡ йыуанлығы булып ташҡан ҡулдарында ерҙән айырылып, һауала аҫылынып ҡалды. Көсәнеүенән ҡыҙарған күҙҙәре менән Ғөбәйт ян-яғына ҡараны ла тракторҙың алдын бер метр ситкә ултыртты. Уны урап алған халыҡ – әйтерһең, тракторҙы улар күтәрҙе – берҙәй тын алып ҡуйҙы.

– Әй, маладис, биргән бит Хоҙай үҙеңә көс-ғәйрәт, ул бер үҙе һабан тартырлыҡ! – тип ҡысҡырҙы халыҡ.

Урамдағы шау-шыуға кәнсәнән Игебаев та сыҡты. Эштең айышына төшөнгәс, ул усын ыуып уңайһыҙланып торған Ғөбәйттең киң арҡаһына һуҡты.

– Бына шулай, Ғөбәйҙулла ҡустым! Был ғәләмәтте һинән башҡа йүнәтеп эшкиндерерлек кеше юҡ, бураҙнала батып-нитеп ултырһа, үҙең һөйрәтеп сығарырһың, – тип көлөп ҡуйҙы.

Икенсе көнөнә өс пар үгеҙ егеп, Ғөбәйт тракторҙы үҙ урамына алып ҡайтып ултыртты ла, ергә бәләкәй күл ҙурлығы бүлек йәйеп, уның моторын һүтә башланы. Ҡышын тимерлектә эшләп, йәйен кәбән һалыуҙа йөрөгән Ғөбәйтте бөтә эштәрҙән бушатып, трактор йыйырға ҡуштылар. Йәй айының оҙон көн буйы ул сәғәттәр буйы аяғүрә баҫып тракторына тексәйеп ҡарап торор булып китте. Ай ярым тигәндә Ғөбәйт, бер ниндәй курс бөтмәй, тракторҙы тоҡандырып, бөтә ғәләмде аптыратып, ҡойроҡтарын бот араһына ҡыҫып, яҡын килергә ҡурҡып торған эттәрҙе абалатып, тракторынан әллә ниндәй тарһылдаған мылтыҡ тауыштары сығарып, ауылды бер тапҡыр урап үтте. Ошо оло ҡыуаныстандыр инде, ғүмерендә ауыҙына шарап ҡапмаған Ғөбәйт, бер «бәләкәй»ҙе эсеп, төнө буйы ҡотороп сыҡты. Иң башта күрше йәшәгән Әхтәмдәр өйөнөң мөйөшөндә ятҡан күбә дәүмәлле ташты тәгәрәтеп, юл уртаһына килтереп һалды. Мәҙәк өсөн, бер нисә көн үткәс, ул ташты «калдауай үлсәүе»ндә үлсәп ҡаранылар – таш утыҙ биш бот тартты. Ауыл клубына барып, Ғөбәйт ике сәтәкәй бармаҡтарына икешәр ботло герҙәрҙе элеп, тамаҡ төбө менән әсе һыҙғырып бейене, имеш, шунан ҡайтып китте.

Бына 1942 йылдың йәйендә Ялан ауылының беренсе тракторсыһы Байназаров Ғөбәйҙуллаға ла һуғышҡа китергә сират етте. Ауылдан сығып китеүенә өс ай тулды тигәндә Гөлсөм еңгәй Ғөбәйт ағайҙың батырҙарса үлеме тураһында «ҡара ҡағыҙ» алды. Шулай итеп, бәһлеүән Ғөбәйттең Сталинград эргәһендә ғүмере өҙөлөп ҡалды.

13

Үҙ тиҫтерҙәрен оҙатып бөткәс, Игебаев та һуғышҡа китеү мәсьәләһен ҡуҙғатып ҡарағайны, ләкин уның үтенесен ҡолаҡҡа элеүсе булмағас, ул эҙмышын донъя ағышына һалды. Фронттағы хәлдәрҙе белеү өсөн йыраҡ йөрөүҙең хәжәте ҡалманы, сөнки ундағы эштәрҙе ауылда ир-егеттең һирәгәйеүе асыҡ күрһәтте. Ил бер ҡайғы, бер ғәм менән йәшәне, ҙур диңгеҙҙең бер тарафында ҡупҡан дауыл дәһшәтле тулҡын булып икенсе ярға бәрелгән кеүек, фронт ғәрәсәте лә, ҙурмы-бәләкәйме, һәр ҡаланы, һәр ауылды ялмап, өтөп үтте. Был дауыл өйөрмәһенән осһоҙ-ҡырыйһыҙ даръя булып йәйелеп ятҡан Рәсәйҙә ике-өс өйлө утар ҙа ситтә ҡалманы. Әкиәти Ҡаф тауы ҙурлығы хайуандың йәрәхәтен уның бөтә ағзалары ла тойған кеүек, фронт йәрәхәттәрен дә һәр ҡала, һәр ауыл, һәр йорт үҙ яраһы итеп ҡабул итте. Ул әкиәт йәнлектең миллионлаған ҡан тамырҙарынан йүгергән кеүек, фронт менән башҡа ил араһында ла ул ҡан йөрөшө күҙ йомған араға ла туҡтаманы. Алғы һыҙыҡтан көн һайын меңәрләгән, миллионлаған һалдат хаттары таралды, илдең төрлө мөйөштәренән кире яҡҡа сәләм, өмөттәр тулы хаттары менән ҡуша һәр ғаилә оҙатҡан ойоҡбаш, бейәләй, бүрек туҡтауһыҙ ағылып торҙо. Был бер секундҡа ла туҡтамаған бәйләнеш фронттағы яугирҙарға ла, тылдағы хеҙмәт батырҙарына ла көс бирҙе, дәрт өҫтәне.

Ләкин 1942 йылдың һуғыш йәйе Ялан халҡы өсөн ауыр һынау осоро ла булды. Июнь-июль айҙарында Урал аръяғында йыш ҡабатлана торған ҡоролоҡ килде. Мосолман дүәле буйынса Йылҡы йылы насар булырға тейеш булмаһа ла, йәй башының эҫе ҡояшы, ямғырһыҙ көндәре сәскән игенде ҡурып киптерҙе, түбә баштарында, тау биттәрендәге ҡылған һарғайып ҡатты. Ялан халҡы ғүмер баҡый сабылмаған Өмөтбай арығындағы тирмән янындағы туғайҙа үҫкән күрәнгә тотондо. «Ҡыҙыл Ялан» колхозының баҫыуҙарында һирәк кенә үҫеп килгән бойҙай, әсә һөтө күрмәгән етем бала буй алмай ваҡытынан алда сүгеп ҡалған һымаҡ, ҡатып ҡалды, мөҙҙәтенән күп элгәре емһеҙ башын ҡоҫто. Колхозсылар, иген утарға сыҡҡан мәктәп балалары һәр башаҡты һаҡларға тырышып, ҡыйлы үлән утағанда уларҙы урап үтте, башаҡта әле һөтө лә кибеп етмәгән бойҙай бөртөгөнөң бешмәҫтән алда ҡатып, сырышып ҡалыуын күреп ҡайғырҙы. Йылдағы кеүек, уталған ҡый үләндәрҙе телһә ҡайҙа ташлап исрафлау ҡәтғи тыйылды. Уны ригә менән йыйып, фермаға ташынылар. Шундай тырышлыҡ менән кешегә таратып сәстергән Игебаевтың картуфы ла, үпкә ауырыуына дусар булған кеше кеүек, һарғайып кибеп ҡатты.

Ауыл ҡарттары, иртән торһа ла, кис ятһа ла, нурҙары һүнә башлаған күҙҙәренә ҡулдарын ҡуйып, ҡараштарын зәңгәр күккә төбәне, ләкин күк көмбәҙендә июль айы буйына ҡолаҡсындай ҙа болот әҫәре күренмәне. Элгәре күк үләнгә туйып, мышылдап ауыр тын алып, һөт менән тулышҡан елендәрен бот араларына һыйҙыра алмай һарайҙарына килеп йығылған ауыл һыйырҙары ла еңелсә генә ҡайта башланы. Элек-электән ауылда хәлле хисапланып килгән Әхмәдиәр, Әбдрафиҡ, Фәйзулла ҡарттарҙың да иген буралары таҡырайҙы. Ауылда киләсәген уйламай ҡайыра тешләп икмәк ашаусы кеше ҡалманы. Урта ғына ғүмер итеп йәки колхоз идараһы биргән көндәлек норманы тартып-һуҙып йәшәгәндәр тураһында әйтәһе лә юҡ!

Уйылдан ҡарттың да йылдың насар килеүенә бик эсе бошто. Бошмаҫлыҡмы ни? Колхоз яҙғы сәсеү эшен тамамланғаны бирле ер өҫтөнә бер тамсы ла ямғыр төшкәне юҡ! Алла ғына ярлыҡаһын, берәй бала-саға шырпы менән уйнап янғын сығарһа, ауылдың көлө генә ҡаласаҡ! Бер генә урамдан торған Яланды ут бөтөнләйе

менән ялмап алыр, хәҙерге заманда ауылда йүнле һүндереүсе лә ҡалмаған, тип борсола Уйылдан.

Быйылғы игендең торошо һәм уңышы күпме буласағы ҡарт өсөн бигерәк тә мөһим мәсьәлә, сөнки ул игенде түбән ос бригадиры Алмабикә Сынбулатова сәстерҙе. Уның атаһы кем? Уйылдан ҡарт. Ауылда уны ихтирам итмәгән, белмәгән кеше бармы? Олоһо ла, балаһы ла кәпәс һалып әллә ҡайҙан сәләм биреп китә. Бушҡа ғынамы ни ауылдағы бөтә им-томдо, өшкөрөү-төкөрөүҙе ул, Уйылдан ҡарт, атҡара, кеше сырхаулаһа йә мал берәй ҡазаға юлыҡһа, барыһы ла уға йүгереп килә. Кеше иртәнге сәйгә ултырғансы, «ас ҡарындан» ул үҙенең ҡөҙрәтле-шифалы төкөрөгө менән шәкәр-сәйлек эшләп тә ала. Ясин, йыназаны тәпсирләп уҡыусы Уйылдандан башҡа кем бар? Берәү ҙә юҡ! Ауылда ясин уҡырға, үлек тәрбиәләргә кемгә киләләр? Әлеге Уйылдан ҡартҡа көндәре төшә. «Илдә үлек күбәйһә, мулла туҡ була» тип боронғолар белмәй әйтмәгән, шәт. Башҡалар асығып ҡытлыҡ сиккәндә лә, Уйылдан ҡарт, ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, саҙаҡаһын ташый. Уның аҡса янсығы берәй ваҡыт буш булғаны бармы? Юҡ! Эреһе артыҡ күп булмаһа ла, ваҡ аҡсаһы ҡуйын кеҫәһендә шалтырап тора. Һуғыш ҡына уның бәкәленә һуҡты – килем кәмене: никахтар әҙәйҙе, ҡатындар бала тапмай башланы, аҙан әйтеп исем ҡушыуҙар һирәгәйҙе. Нисауа, Алла теләһә, һуғыш бөтөп, ир-егеттәр ҡайта башлаһа, никахы ла, балалар табыу ҙа ишәйер әле! Бына шунда Уйылдан ҡарттың баҙары бермә-бер күтәреләсәк!

Ошондай тойғолар, хистәр менән уянды бөгөн Уйылдан ҡарт. Үҙ-үҙенән риза булып, күңеле йомшап, ҡарсығы Сәғилә менән кәңәш итергә уйланы.

– Әбей, хәтереңдәме, һуғыш башланыуға бер йыл алда Йәрмөхәмәт МТС-ының баш бухгалтеры Минһажетдиндар өйөндә аҫылынып үлгәйне?

– Хәтерҙә булмай ни, хәтеремдә! Шул урыҫтан башҡа риүәлүтсиәнән һуң беҙҙә үҙенә үҙе ҡулын һалған әҙәм булманы ла. Ул һиңә ниңә хәжәт?

– Йылдар бигерәк ҡыуанға тартып китте бит. Былар бөкиллеһе – бәндә гонаһының касафаты. Ауыл ҡарттары менән теләк теләп, тәкбир әйтеп, шул урыҫтың ҡәберенә, китапта әйтелгәнсә, ҡырҡ биҙрә һыу ҡойғанда, Хоҙайҙың ҡөҙрәте менән ямғыры ла яуып китер, тим.

– Яумай ни, яуыр! Анауы йылы, хәтерeңдәләр әле, Алмабикәгә ике йәш саҡта, бесән мәлендә шулайтып йыл ҡороға тартып киткәс, һеҙ күрше Буҙ Тирәк утарына барып, бер аҫылынып үлгән урыҫтың зыяратына һыу ҡойоп ҡайтҡас, ҡалай ҙа күк күкрәп яуын яуып киткәйне. Алла бойорһа – тик ятҡансы, ҡулдан килгәнде эшләп, ниңә Хоҙайҙан теләк теләмәҫкә?

Әбейенең һүҙе шикләнеберәк ултырған Уйылданға ҡанат ҡуйғандай булды. Шул көнө кис ул бөтә ауыл ҡарттарын йәүкәләп сыҡты. Иртәнсәк тәһәрәт алып, түбәнге мәсет эргәһенән бер төркөм ауыл ҡарттары зыяратҡа табан йүнәлде. Күптән мәнфәғәтһеҙ, мөйөштә элеүле торған сәлләһен кейеп, Уйылдан ҡарт алдан төштө.

«Аллаһы әкбәр! Аллаһы әкбәр! Лә иллаһа илалла!» Ҡарттар артынан ҡулдарында бәләкәй биҙрәләр, һауыт-һаба тотҡан байтаҡ бала-саға эйәрҙе. Уйылдан ҡарт үҙенең саған таяғын да алырға онотманы. Артынан килгән унлап ауыл ҡартына күҙ ҡырыйы менән ҡарап, ул үҙен, кәм тигәндә, Булат пәйғәмбәр итеп хис итә. Уның тик ҡылысы ғына юҡ, шулай ҙа күк ҡабағын таяғы менән тишергә теләгәндәй, тәкбир әйткәндә таяғы менән һауаға төртөп-төртөп ала, күктән ниндәйҙер кирәмәт көтә. Хәйер, был хәл һуғыштан алдараҡ булһа, силсәүит Ишбирҙин, камсамул менән партия ағзалары, өйрәк өйөмөн тубы менән пыр туҙҙырған ҡарсыға кеүек, был ҡарттарҙы нишләтергә белерҙәр ине! Ләкин хәҙер

һуғыш ваҡыты, барыһы ла фронтта, Сәүит хөкүмәте лә диндең теҙгенен оҙонайтып ебәрҙе. Шуға күрә Уйылдан ҡарттың аҙымы киң, ышаныслы, ул ергә ныҡлы баҫа. Ағара башлаған кәзә һаҡаллы эйәген алға һуҙған. Бөтә иғтибары, күҙ ҡарашы күккә төбәлгән. Ул барыһынан да нығыраҡ тырыша, әсерәк ҡыҫҡыра, әйтерһең дә, уның осло эйәге, һыу йырып килгән кәмә кеүек, уны алға, Хоҙайҙың ямғыр яуҙыра торған кәнсәһенә, күк ҡатламына әйҙәй. Уйылдан бер кемгә ҡарамай, бер нәмәгә иғтибар ҙа итмәй, мөкиббән үҙ хистәрендә йөҙә.

Дөйөм зыяраттан ситтәрәк, тәҡәтһеҙ эҫенән өҫтөндәге ҡылғаны һарғайған теге урыҫтың ҡәберен табып, ҡарттар уны уратып йөгөнөкләп ултырҙы. Биҙрәләрен сылтыратып һыуға киткән малайҙарҙы туҡтатып, боронғо тәртипте һаҡлап, ҡарттар, ҡулдарына биҙрәләр тотоп, һыуға үҙҙәре төштө.

– Үҙ ҡулың менән һыуҙы алып килмәһәң, теләкте ҡабул итмәй, – тип аңлатты Уйылдан ҡарт йыйылған халыҡҡа.

– Уйылдан ҡорҙаш! Нисә биҙрә һыу ҡойорға фарыз? – тип һораны ҡарттарҙың береһе.

– Китапта ҡырҡ биҙрә тиелгән, ләкин ҡырҡтан ашһа ла, бер ниндәй ҙә хилафлыҡ юҡ, уныһын да Хоҙай ҡабул итә.

Балалар текә ярҙан һыуҙы алып биреп торҙо, теҙелеп торған ҡарттар биҙрәләрҙе ҡулдан ҡулға биреп, өҫкә күтәрҙеләр. Иң яуаплы урында, ҡәбер төбөндә, Уйылдан үҙе торҙо. Ҡәбергә һәр биҙрәне ҡойған саҡта ул күккә ҡараны. Уның уйынса, мосолман әһеле Уйылдан ҡарттың шул тиклем тырышлығын, күрһәткән изгелеген ете ҡат күк ҡатламынан күҙәтеп Хоҙай Тәғәлә, ҡырҡынсы биҙрәне ҡойғас та күк ҡабағын асып, сатнап дымға һыуһаған ергә шундуҡ ямғырын ебәрер төҫлө тойолдо. Ләкин өҫтә һаман болот әҫәре күренмәне. Тик ҡырҡынсы биҙрәне һурып алған ҡәбер эсенән һыуға күшеккән йомран ғына сығып ҡасты. Быны күреп тамам ҡурҡҡан Уйылдан шыр ебәреп, артына ултыра төштө.

– Собханалла, собханалла! Иннәниләйһи вә иннәниләйһи рәжигүн! Был ни хикмәт?

Йөҙө аҡ ҡағыҙға әйләнгән Уйылдан аҫтан һыу биреп тороусы ҡарттарҙы саҡырҙы. Тындары бөтөп, йүгерешеп килгән ҡарттар ҡурҡышынан ни әйтергә белмәй ҡатып ҡалған Уйылданды уратып алды.

– Ни булды, ҡорҙаш? Әллә ҡәбер ене ҡағылдымы? Төҫөң бөтөнләй ҡасҡан!

Уйылдан тотлоға-тотлоға эштең асылын аңлатҡас, ҡарттар:

– Ыстағәфирулла тәүбә, ыстағәфирулла! Был ниндәй ғилләә икән? Әллә Хоҙайҙың берәй изге тереклеген ҡуҙғаттыҡ микән? – тип тиештеләр.

Телгә килгән Уйылдан:

– Беҙ кафыр ҡәберенә оялаған йомран һүрәтенә кергән иблисте ҡасырҙыҡ. Хоҙайҙың беҙгә тейешле ямғырын бына шул хасис быуып ятҡан булыу кәрәк. Иншалла! Яҡты күҙҙә яумаһа ла, донъялар һил ҡалғас, беҙҙең изге теләктәребеҙ Хоҙай Тәғәлә хәҙрәттәре тарафына барып етер, бөгөн төн, иншалла, ямғыр яуасаҡ! – Ҡарт ҡиблаға ҡарап доға ҡылды.

– Амин, амин! Әйткәнең килһен, Уйылдан мулла!

«Мулла» тип өндәшеүҙе ишеткәс, Уйылдан шундай ҡәҙерле һүҙҙе йөрәк түрендәге һандыҡ төбөнә бикләп ҡуйҙы. Күптән ҡолаҡҡа салынмаған был абруй өҫтәп торған тылсымлы һүҙ Уйылдан ҡарттың иләкләнеп йомшара башлаған йөрәгенә бигерәк тә хуш. Бындай дәһшәтле һуғыш барған ваҡытта һәр әҙәм үҙенең тынысһыҙ йәненә ышыҡ эҙләй, кемгә лә булһа һыйынырға тырыша, әҙерәк боронғоса белгәндәр Хоҙайға һырына. Өс мәҙрәсәлә ғилем алған Уйылдан, мәғзүм бөтә ғәләм ярҙам көткәндә, ниңә йәшеренеп ятырға тейеш? Ул,

бәлки, ошо мосолмандар араһына Хоҙай һәм уның фәрештәләре тарафынан ебәрелгән дин әһелелер? Шулай итеп, егерме йылдан артыҡ күҙен йомоп, Уйылдан башында уңай ғына ваҡытты көтөп ятҡан дин иблисе ҡапыл күҙен асты һәм уны хәрәкәткә өндәне.

Урыҫ ҡәберенә һыу ҡойған төндә дөһөрләп күк күкрәп, дауыллы ямғыр яуып үтте. Камил күңеле йомшарған Уйылдан ҡарт, күҙенә эркелгән йәштәрен һөртә-һөртә, бик тырышып, урынына еткереп намаҙын уҡып ятты. Бынан һуң уны ололар «Уйылдан мулла», йәшерәктәр «Мулла ағай» тип йөрөтә башланы, ә ҡарт тәне менән дә, йәне менән дә тулыһынса дин юлына төшөп китте. Алмабикә кистәрен: «Атай! Уҡыған намаҙыңды шым ғына, мөйөшөңдә ултырып, кешегә артыҡ белгертмәй башҡарып булмаймы ни?» – тип әйтеүҙәре ҡарттың дингә булған ынтылышын көсәйтте генә. Уйылдан уның һайын тырышлығын нығыраҡ күрһәтте. Әкренләп өйҙәгеләр уға ҡул һелтәне.

Уйылдан мулланың эштәре, сеймәлмәй генә тағатылып киткән йомғаҡ шикелле, үҙ яйына һәүетемсә тәгәрәп бара хәҙер. Иртән береһе булмаһа икенсеһе уға им-том менән килгән ауылдаштары һуңғы тәғәмен балаларынан айырып килтереп торалар ине әле. Көн һайын һис юғында әле һыуынып та өлгөрмәгән дүрт-биш йомортҡа, һирәк-мирәк берәй сеүәтә ҡаймаҡ Уйылданға бер ҙә артыҡ түгел. Ишкә ҡуш тигәндәй, Алмабикәнең көн дә алған нормаһы ла эләгеп торғас, һәр тере йәндең тәҙрәһен шаҡып торған аслыҡ Уйылданды ситләтеп үтә ине.

Быйыл, ҡарышҡан һымаҡ, ураҙаһы ла иң көнө оҙон айға – июнгә тура килде. Билдәле, Уйылдан, ауылдаштарын йыйып, ошо айҡанлы һүҙен әйтмәй булдыралманы. Үҙенең ихатаһында аяҡ салып ултырған Уйылдан өгөт-нәсихәт һөйләне.

– Ураҙаны тотоу һәммәбеҙгә лә – олоһона ла, кесеһенә лә  фарыз. Ураҙа осоронда Тәңребеҙгә һырынынҡырап, илебеҙ өҫтөнә килгән дошмандың дөмөгөүен, дәүләтебеҙгә, халҡыбыҙға бәрәкәт, ниғмәт артынан ниғмәт биреүен теләйек.

Заһретдин уға ҡаршы сығып:

– Уйылдан ҡорҙаш, йылдар саманан тыш ауыр килә. Иртән тороп сәхәр эсәрлек сәйебеҙ, кисен ауыҙ асырлыҡ тәғәмебеҙ юҡ. Былай ҙа аслы-туҡлы халыҡ, ураҙа тотоп, бөтөнләй йонсоп китмәҫме? Колхозда көн дә атҡара торған эштәребеҙ күп бит әле, – тип фекерен әйткәйне, ләкин ышандыра алманы.

– Һин, Заһретдин ҡорҙаш, мосолмандың биш фарызын хәтерендән сығарып, бында ҡотҡо таратып, хилаф һүҙ һөйләп ултырма! Ғәрәп, Мысыр яҡтарында ла мосолмандар көн дә ҡалъя ашап ятмай, ләкин бер кеше лә, асмын тип, ураҙанан ҡалмай. Әгәр ураҙа осоронда аслыҡтан мөслим дәрелбаҡыға рихләт ҡылһа, ул дин юлында, изге юлда шәһит үлгән әрүахҡа хисаплана. Һәр беребеҙгә маңлайға Хоҙай Тәғәлә тарафынан яҙылған тәҡдир ҡушыуынан ғәйре йәшәмәк юҡ! – тип туҙынып алды Уйылдан.

Бөтә ауыл халҡын өндәп, үҙе ситтә тороп ҡалмаҫ инде, Уйылдан  да ураҙаны тота. Ләкин уның ураҙаһы бик сомтор булып сыҡты. Рамаҙан айының бишенсе көнөнә тамам асығып, хәле бөткән ауыл «муллаһы» көндөң нәҡ уртаһында һалҡын соланға инеп, ниҙер булһа ла ашарына эҙләй башланы. Әйткәндәй, уның соланында ла аҙыҡ-түлек күптәнән ишелеп ятмай. Аяғына ҡата эләктереп, иңбашына кәзәкейен һалып, ул туп-тура солан мөйөшөндәге йәй мәлендә һөтҡатыҡ һаҡлау өсөн ҡаҙылған мөгәрәпкә ҡулын тығып, ҡаймаҡ күнәсеген һәрмәп тапты. «Хоҙай изге кешеләргә шулай биреп тора ул!» – Уйылдан күнәсекте сығарҙы ла, тамшанып, ҙур ләззәт менән ҡарһаланып, иртән генә айыртылған ҡаймаҡты эсә башланы.

Нәҡ шул ваҡытта солан ишеге ҡапыл асылып китте, һәм унда ҡулына сеүәтә тотҡан күрше малай күренде. Былай ҙа аланлап, һайыҫҡан һымаҡ ян-яҡҡа ҡаранып, ҡаймаҡ эсеп торған Уйылдандың ҡулынан күнәсеге ысҡынып төшөп китте, ҡаймағы иҙәнгә сәсрәне. Асыуынан ул шаҡ ҡатып торған малайға ташланды.

– Йөрөйһөң шунда, мәлғүн, кеше өркөтөп! Сит кеше соланына инер алдынан тамаҡ ҡырып инергә ҡушылған китапта. Бар, юлыңда бул, йүнһеҙ! – тип теге ауырыу күҙен өшкөртөргә килгән малайҙы ҡыуып сығарҙы.

Ул бала Заһретдин ҡорҙашының малайы булып сыкты. Ҡурҡҡан малай ҡайтып, арба тәгәрмәсенә тырнаҡтар сабып ултырған атаһына түкмәй-сәсмәй барыһын да һөйләп бирҙе. Заһретдин оҙаҡ ултырыуҙан ҡатҡан билен тотоп торҙо ла:

– Бына һиңә мулла, замана муллаһы! Кешенән ураҙа тотторған була бит әле, хыуас! Ә үҙе, әҙәмдән ҡасып, көпә-көндөҙ ҡаймаҡ эсә икән. Бар, әбсәңә әйт, сәй ҡуйһын!

Быны ишеткән әбейе үҙ ҡолағына ышанманы.

– Атаҡ, атаҡ! Тәүбә, тиң! Ураҙаны боҙоп, көпә-көндөҙ, гонаһынан ҡурҡмай, ауыҙ асып ятмаға! Әҙәмдән оялыр инең, исмаһам!

– Ана, Уйылдан мулла оялһын! – тип Заһретдин ергә төкөрөп ҡуйҙы. – Соланда ҡаймаҡ эсеп торғанын малайың күреп ҡайтҡан.

Атаһына әйткән хәбәрен әсәһенә лә һөйләгәс, Заһретдин ҡарттың әбейе, уфтана-уфтана, доға ҡылып ян-яғына төкөрөнә-төкөрөнә, итәк аҫтарынан иблисте ҡыуа-ҡыуа, самауыр ҡуйҙы.

Ошо хәлдән һуң «муллалыҡ теҙгене» ҡапыл ҡулынан ысҡынып киткән Уйылдандың кәмәһе ҡомға терәлде, ураҙа тотоуҙы ла, өшкөрөм-төкөрөмдө лә һәр кем үҙ выжданына һалды. Олораҡ ауыл кешеләре фекерҙе ҡәтғиерәк тотто.

– Шулда булдымы мулла? Ул заманында юлдан сыҡҡан зимагур ине бит! Йүнле бала атаһын бөтә йәмәғәт алдында хурлаймы? Ул бит камсамулға кереп, атаһы – имам-хатиб Мөхәммәтрәхимдән көлөп йөрөнө! – тип Уйылдандың һикәлтәле йәшлеген бер ҡәүем иҫтәренә төшөрөп алдылар һәм тиҙ генә оноттолар ҙа.

Бер уйлаһаң, ҡыҙыҡ та инде ауыл халҡы. Кисә генә үҙ муллалары менән ғорурланып, Уйылдандың белеме, төкөрөгөнөң шифалығы тураһында ауыҙ тултырып һөйләгән әҙәмдәр, башына селлә кейҙереп, мулла тәхетенә мендергәйнеләр, бөгөн ураҙала ҡаймаҡ эскәне өсөн бәреп тә төшөрҙөләр. Ул ғына ла түгел, ҡый үләне менән ҡапланып бөткән Уйылдандың йәшлек һуҡмағына кире әйләнеп, уның шәкерт сағындағы шуҡлыҡтарын, ауыл малайҙарын шарап эсергә, дөхән көйрәтергә өйрәтеүен соҡоп сығарҙылар. Халыҡтың хәтере оҙон ғына түгел, хатта мәңге шул. Халыҡ ауылдаштары ҡылған изгелектең дә, эшләгән яуызлыҡтың да бер кәлимәһен онотмай, һәр саҡ күңелендә һаҡлай.

Билдәле, Уйылдан ҡарт тирәһендәге шауҡым Алмабикәгә лә теймәй ҡалманы. Уның һүҙен һанға һуҡмай: «Ана, өйөңдәге атаңды өйрәт, күҙ буяп йөрөгән атаңды эшкә ҡуш!» – тип әйтеүселәр баштараҡ булды-булыуын, тик быны ишеткән Игебаев уларҙың ауыҙын тиҙ япты. Алмабикәнең атаһы эшенә ҡыҫылышы булмағанын яҡшы аңлаған колхоз хужаһы ғәйбәт таратыуҙы шундуҡ туҡтата һалды.

Ҡартты ғына ҡайғы-хәсрәт баҫты. Ул күҙгә артыҡ күренмәй, һуҡыр сысҡан шикелле, өйөндә ятты-ятты ла, үҙ ғүмерендә икенсе тапҡыр, был юлы инде мәңгегә, диненән ваз кисергә мәжбүр булды.

Уйылдан ҡарттың Хоҙайҙан теләп алған ямғырынан, яңы ҡалҡып килгән айға: «Иншалла! Ай күрҙем аман белән, ауыҙым тулы иман белән, бурам тулы иген белән, кәртәм тулы мал белән»,– тип һамаҡлап ултырыуынан ил дә, Ялан ауылы ла йәһәт кенә байый алманы.

Яҙғы баҫыу эштәренең июндең башына тиклем һуҙылыуы, колхозда дүрт йөҙ гектарҙан артыҡ майҙанды арлы-бирле сыймаҡлап сәсеү, етмәһә ваҡытында яуын-төшөмдөң булмауы ҡырҡ икенсе йылдың уңышын алдан уҡ билдәләне. Ә яңы икмәккә етешергә байтаҡ ваҡыт бар ине әле.

Фронтта ла хәлдәр бик мөшкөлләнде. Дошман ғәскәрҙәренең уң яҡ осо Сталинградтан көньяҡтараҡ Волга йылғаһының ярына уҡ терәлде. Июнь айында һуғышҡа алынған һуңғы сал башлы ирҙәр генә фашистар тарафынан өҙөлгән фронттың бүҫелгән йыртығын ямай алманы. Сентябрь айҙарында барыһынан тигәндәй үлем хәбәрҙәре ауылға килде.

Тылдың иңен-буйын айҡап йөрөгән аслыҡ, күҫәген һөйрәп, Ирәндектең көнсығыш далаһында Ҡыҙыл һыуын һыулаған Ялан ауылын да ялмап алды. Йәй айҙарында бөтә аяғына баҫҡан әҙәм колхоз эшен атҡарһа, өйҙә ҡалған бала-сағаға, ҡояшҡа кибеп ярылған ирендәрен ялай-ялай, тау араларында, үҙәк буйҙарында, һөрөлмәй ҡалған эт-ятыу ерҙәрҙә үҙенә тамаҡ эҙләне. Берәүҙәре тау-таш араһында һарына, ҡуянтубыҡ соҡоно, икенселәре йыуа йыйҙы, башҡалары ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, балтырған көпшәһе өҙҙө. Еләк мәле еткәс, муйындарына моҙғалар аҫып, элек-электән еләк суғым-суғым үҫкән Өс тирәк, Ҡорүҙәк һәм Һыулы үҙәк буйҙарын ҡыҙырҙы, ләкин ҡоролоҡтан еләге лә ваҡытынан алда сөрөшөп, борсаҡтай ғына булып кибеп ҡатты. Ҡулдарына тотҡан биҙрәләрен көсө етмәгәнлектән ерҙән һөйрәп, бала-саға Әмин тауы яғына ла барып ҡайтты, ләкин ундағы сейә лә, табала ҡыҙҙырылған бойҙай ҙурлығы һымаҡ, һабағында кипкән булып сыҡты. Тик яҫы, күп япраҡлы ҡалмыҡ йыуаһы ғына, бер ни булмағандай, ишелеп үҫте. Хәйер, уны эҙләп ыҙалайһы ла юҡ! Тамырынан үҫеп сығыр-сыҡмаҫтан ҡыуарып өлгөргән ҡылған араһынан һәр һабағы бысаҡ йөҙө яҫылығы өйкөм-өйкөм булып аша ҡарап ултыра. Бына шуны, хәленән килгәнсә күтәреп, ауыл балалары өйҙәренә алып ҡайтты. Уны ойотҡанға турап, һөт-ҡатығы юҡ халыҡ йыуаның яҫы һабағын шул көйөнсә ашаны.

Йәй айҙары халыҡты бик ҡурҡытмай ҙа ул. Һауыр һыйыры булғаны, уның ағына ҡушып, һәр миҙгелдә ерҙә үҫкән емеш-еләк менән туҡланды. Һыйырһыҙ йәки бөтөнләй малһыҙ кешеләргә ҡалдауҙың мөгәрәбенә төшөрөп ҡуйылған алты тоҡ ондан келәтсе Ишморат, Игебаев бойороғо менән, көнөнә яртышар ҡаҙаҡ он таратты. Уны, ер иҙәнендә ултырған ауыр, ҙур үлсәүескә ышанмай, бәләкәй бизмәндә үлсәнеләр. Нимәлә үлсәһәң дә, ярты ҡаҙаҡ – ярты ҡаҙаҡ инде, бер мыҫҡалға ла артмай. Уны шул көнөндә үк ыумас итеп эсеп, ҙур күҙҙәре төпкә батҡан, иңбаштары ослая башлаған шул уҡ кешеләр оялып ҡына кәнсәгә, Игебаев алдына, яңынан киләләр. Шулай бер нисә көн дауам итте. Игебаев кәнсәгә килеп, уның күҙҙәренә мөлдөрәп ҡарап торған моңһоу ауылдаштарына: «Ағай-эне, бөгөн һуңғы тоҡтоң төбөн ҡаҡтыҡ, иртәгә бирерлек бер нәмә лә юҡ!» – тип әйтергә баҙнат итмәне. Күҙҙәрендәге нуры һүнеп барған ас кешеләрҙең һуңғы өмөттәрен өҙөргә... Игебаев, йөрәгенең нескә ҡылдары зыңлап торһа ла, эске тойғоларын тышҡа сығарманы, ете ҡат ҡарыны аҫтына йәшерҙе.

Уның ышаныслы, тыныс ҡиәфәтен күреп, колхоз кәнсәһенә «нурмы» һорарға килгән кешеләр: «Ярай, бөгөн булмаһа, иртәгә булыр әле»,– тип өйҙәренә таралды. Ләкин хәлдәр ысынлап та мөшкөлләнде. Әйткәндәй, Игебаев үҙе лә ауылдаштар көнөндә ине. Кисен халыҡтың асыҡҡанын күреп өҙгөләнеп ҡайтҡан иренә Шәмсинур ҡалмыҡ йыуаһы туралған бер сеүәтә ойотҡандан башҡа бер ни ҙә ултырта алманы, ләкин ҡатығы ла Игебаевтың тамағына төйөр булып тығылды. Ул көсләп тигәндәй ярты сеүәтәне эсте лә ҡалғанын кире ҡатынына һондо.

– Нишләп эсмәйһең? Әллә туйҙырып ҡайтарҙылармы?

– Минең урында бер-ике сәғәт ултырып ҡара, шунан белерһең! Тиҙҙән халыҡ шешенә башлаясаҡ. Эсмәйем тигәс эсмәйем! Ҡалғанын балаларға бирерһең.

Шәмсинур иренә йәлләү ҡатыш мөхәббәт менән тулы ҡараш ташланы.

– Шуны ғына эсеп бөтәр инде. Үҙең дә йонсоп китһәң, беҙ ни эшләрбеҙ? Шул тиклем өҙгөләнмә, берәй яйы табылыр әле.

* * *

Абдрахман өҫтәл артында һүҙһеҙ генә бер туҡтауһыҙ тәмәке көйрәтте. Әйтерһең дә, өй эсендәге томан шикелле күтәрелгән күгелйем тәмәке төтөнө эсендә ул үҙ һорауҙарына яуап эҙләй. Аҙаҡ сисенмәй генә мөйөштәге ялтыр башлы тимер карауатҡа һуҙылып ятты. «Әллә райкомға барып, Хәлимов алдында тағы фронтҡа китеү мәсьәләһен ҡуҙғатып ҡарайыммы икән? Был ауырлыҡтарҙан һырт биреп ҡасыу булмаҫмы? Бергә үҫеп, тир һеңешеп бергә эшләгән, әле фронтта дошман менән көрәшеп ятҡан ауылдаштар миңә тапшырып ҡалдырған ҡатындар, балаларҙан ҡасып китеү түгелме был? Һуғышта баштарын һалғандар алдында мин мәңгегә бурыслы бит. Минең намыҫым пак та кеүек, бар хәлемсә тырышып-тырмашып эшләйем, шунан һуң беҙҙең өй эсенән фронтта бер кеше – төпсөк малайым Вахиттың булыуы етмәгәнме ни?» Бына шундай борсоулы уйҙар бөгөн Абдрахманға оҙаҡ тынғы бирмәне.

Иртәгәһенә Игебаев кәнсәгә килгән ике бригадир менән тиҙ генә һөйләшеп алды.

– Йә, нимә эшләйбеҙ? – Ул Алмабикә менән Латифҡа һораулы ҡараш ташланы. – Халыҡты нисек ашатабыҙ? Әллә күршеләрҙән ярҙам һорап ҡарайыҡмы?

– Әлләсе, хәҙерге заманда кемдән һорамаҡ кәрәк? – тине икеләнеберәк кенә Алмабикә.

Күпме ултырһалар ҙа, бер кем дә бер ниндәй йүнле фекер әйтә алманы. Ысынлап та, яҡындағы ауылдарҙа – ҡайҙа ҡарама – шундай уҡ хәл. Иртән йыйылған халыҡҡа эш ҡушып, уларҙы сығарып ебәргәс, Игебаев тәмәкеһен көйрәтеп, бер аҙ уйланып ултырҙы. Халыҡты аслыҡтан ҡотҡарыр өсөн берҙән-бер генә юл бар ине. Рәйес ашыҡмай ғына «семенной запас»ынан ун центнерҙы колхозсыларға таратыу тураһында бойороҡ яҙҙы, шунан сейфтан мисәт алып, имзаһына һуҡты. Игебаев яҡшы аңлай: һуғыш осоронда бының өсөн төрмә янай, ләкин башҡа юл юҡ. Көҙ көнө яңы уңыштан алған арыш менән бурысты ҡапларбыҙ, тип өмөтләнде рәйес.

## 14

Ҡырҡ икенсе йылдың көҙө бик иртә килде. Халыҡтың:«Иген-бесәндең рәте булмағас, исмаһам, көҙ ямғырлы, йылы килһә, мал кәртәгә ҡурпыға туйып инер ине»,– тигән өмөттәре аҡланманы. Йыйып алған бесән наҡыҫ булыуына ҡарамаҫтан, ҡар иртә төшөү сәбәпле, малды кәртәгә иртә ябырға тура килде. Һәр йыйылыш Игебаевтың: «Ағай-эне, быйыл хәл килгәнсә бесәнде әҙерләп ҡалырға кәрәк! Йыл бик ауыр килергә оҡшай»,– тип өгөтләүҙәре бушҡа булманы. Ирәндек яғында, Ҡыҙыл йылғаһының элек аҡҡан үҙәндәрендә, ҡолаҡтарында үҫкән ҡамышты, күрәнде халыҡ ни етте шуның менән йығып, бесән әҙерләне. Үткән йылдарҙан ҡалған аҙау кәбән төптәрен, ағыуҙан, ашатыуҙан ҡалған арыш, һоло һаламдарын, Игебаев ҡушыуы буйынса, йыйҙырып, өйҙөрөп ҡуйҙылар.

Һуңғы йылдарҙа үҙҙәренә бесән сапмай, колхоздан күпме кәрәк, шул тиклем яҙҙырып ҡына алырға өйрәнеп киткән халыҡ ҡулына салғы-ураҡ тотоп, соҡорсаҡырҙан бесән әҙерләргә мәжбүр булды. Быға ҡаршы булған имеш-мимеш хәбәрҙәрҙе Игебаев ишетмәгән һымаҡ, иртәнге йыйылышта ныҡлап әйтеп китте.

– Бар халыҡҡа әйтегеҙ: быйыл идараға бесән яҙҙырабыҙ, тип береһе лә өмөт тотмаһын. Һәр кеше үҙенә кәрәк бесәнде үҙ көсө менән әҙерләһен! Сапҡанды алып ҡайтырға ат-сбруй менән ярҙам итербеҙ, – тип барыһына ла аңлатырға тырышты рәйес.

Бындай хәбәрҙәрҙе ҡаға булһа ла ишеткән Шәмсинур кисен сәй әҙерләгән саҡта һүҙ ыңғайында һорап ҡуйҙы.

– Быйыл бесәнде нишләтәбеҙ? Ҡышҡылыҡҡа башмағы менән бер һыйыр, дүрт-биш баш кәзә-һарыҡ ҡалдырмай булмаç бит?

Итеген дә һалмай өҫтәл артында ултырған Игебаев, сынаяғынан башын да ҡалҡытмай, әйтерһең дә, бисәһенә түгел, икенсе кешегә күрһәтмә биргән шикелле:

– Үҙеңә, ике ҡыҙыңа йәтеш кенә салғылар һаплап ҡуйғанмын. Алмабикәнән барып ал да, бесәнселәреңде ултыртып, бесән йүнләргә үҙең китерһең, – тине.

– Атаҡ, атаҡ, Хужа бисәһе була тороп, кешенән оялмай, балаларым менән салғы күтәреп бесәнгә китергә тейешме?

– Тап шулай! Һуғыш бөтә әҙәмгә лә нужаһын тигеҙ бүлеп бирҙе. Һәр кеше үҙенә төшкәнде үҙе башҡарырға тейеш. Аңланыңмы?

– Ишеттем. Ләкин мин әллә ҡасан онотолған салғымды тотоп сабып йөрөй алмайым.

– Йөрөй алмайһың икән, башҡа минән ауыҙ асып бесән һорама. Бөгөн эштән иртәрәк бушарға тырышырмын. Ҡараңғы төшкәнсә, һеҙгә барып үҙем сабышырмын, – Игебаев ишеген шарт ябып сығып та китте.

Ошо һөйләшеүҙән һуң Шәмсинурҙың Алмабикәгә бармай әмәле ҡалманы. Ә уныһы, рәйес ҡатынын көтөп торған һымаҡ, ат егә һалған да үҙе ҡаршы сыҡҡан. «Былар алдан һүҙ ҡуйышып алғандар икән, бригадиры ла көтөп торған һымаҡ»,– тип уйлап алды Шәмсинур.

– Еңгә, һин үрге осҡа, Һыулы үҙәк буйына барырһың! Билән юлы буйында, урылып бөтмәгән бойҙай баҫыуы башында, мин һине көтөрмөн, – тине лә Алмабикә үҙенең ике тәгәрмәсле арбаһында ары ҡуҙалды.

Ғүмерҙә ултырмаған ригәһенә салғылар, тырма тейәп, артына ике ҡыҙын ултыртып, Шәмсинур Алмабикә әйткән яҡҡа атын атлатты.

«Ҡара! Ҡара! Игебай бисәһенә салғы тотторған! Уның бисәһе биртенгән әбейме ни? Әйҙә, башҡа кешеләр һымаҡ сапһын, уҡаһы ҡойолмаç әле! Ауылда тыуып-үҫкән мәрйәләр иген-бесән эшенә харап шәп була ул! Игебайға эләкһәң, сослоҡҡа өйрәтер ул!» – тиеште быларҙың бесәнгә киткәнен күргән халыҡ.

Баҫыу башында уларҙы Алмабикә ҡаршы алды. Ул игенлектең бирге башында арыу ғына үҫкән ҡолон ҡойроҡ, билсән, тиле шалҡан үләндәре булған ерҙе күрһәтте.

– Бына ошо ерҙең был яғынан теге башына тиклем сабып сыҡһағыҙ, байтаҡ бесән эшләп алырһығыҙ. Тик бойҙайҙың бөртөгөнә лә теймәгеҙ! Игебаев ағай бының өсөн башты ашар! – тине Алмабикә салғыһын тотоп, нишләргә белмәй аптырап торған рәйес ҡатынына. – Еңгә! Һин улайтып торма! Башта атты ситкәрәк сығарып туғар. Ана, эрәгәндең күкрәгендә тышауы тора, шуның менән атыңды тышап ебәр. Өҫтөңә кейгән мынау кофтаңды сис.

Алмабикә тағы бер аҙ ҡарап торҙо ла көлөп ебәрҙе.

– Бынау ҡупшы, әберсәле күлмәгеңде ыштаныңа ҡыҫтырып ҡуй. Бына-бына, ошолайтып! – тип ул үҙенең күлмәген ҡыҫтырып күрһәтте. – Ә унан һуң усыңа бер сартлата төкөрөп ал да салғыңды һелтәй башла.

Алмабикә аяҡтарын йәтешләп баҫып, алға иңкәйеберәк, янбаштарын артҡа-раҡ сығарҙы ла киң итеп саба ла башланы.

– Ҡайһылай ирҙәр һымаҡ сабаһың, артыңдан атлап эйәреп тә булмай, – тине Шәмсинур, уға һоҡланып.

– Игебаев ағай барыбыҙҙы ла бына ошолай ир яһап бөттө инде. Беҙ хәҙер үҙе-беҙҙең ҡатын-ҡыҙ икәнебеҙҙе лә онота башланыҡ, – тине Алмабикә, салғыһын тағы ла киңерәк һелтәп.

– Ибраһимың иҫән-һау ҡайтып төшһә, ҡыҙ кеше икәнеңде иҫеңә төшөрөрһөң әле! – тип йылмайҙы Шәмсинур.

Яратҡан кешеһенең исемен ишетеү менән, Алмабикәнең тир бөрсөктәре сығып, былай ҙа алһыулана башлаған битенә ялҡын бөрккән юше булды, аяҡ бы-уындары ҡалтырап китте, һығылмалы тәненә ниндәйҙер сихри әҫе йүгерҙе, та-бансаһы ергә тигеҙ генә ятып, бер үләнде лә ҡалдырмай сабып барған салғы-һының осо ергә ҡаҙалды. Ул бер аҙға туҡтап торҙо, шунан, ҡапыл һиҫкәнеп, үҙен йәһәт кенә ҡулға алырға тырышты.

– Уй, ошо еңгәмде... Теләһә ни һөйләп кешенең эшенә ҡамасаулап тораһың! – тигән булды Алмабикә һәм, сабыуынан туҡтап, алыҫ көнбайышҡа, күк йөҙөнә мөлдөрәп ҡараны. Әйтерһең дә, ана, күҙ күреме ерҙә, офоҡ ситендә, томан кеүек күгәреп ятҡан Ирәндек тауы өҫтөнән был яҡҡа әкрен генә йөҙгән, йыртыҡ аҡ юр-ғанға оҡшаған ҡара болот өҫтөндә йөрәге өҙөлөп көткән Ибраһимы ҡайтып килә.

Ул, бер аҙ тынысланып, яңынан элекке ҡолас менән саба башланы.

– Бына шулай, еңгә! Сабаһың да сабаһың, эшең дә бара, ҡайғың да онотолоп тора!

Теге башҡа еткәс, Алмабикә, нимәлер һиҙенеп, йәлләү ҡатыш бойоғоп торған Шәмсинурға моңһоу ғына итеп йылмайырға тырышты. Ләкин һиҙгер Шәмсинур аңғармаҫтан төн йоҡоларын йоҡламай өҙөлөп яратҡан Ибраһимының һуғыш тамуғынан ҡотолоп, иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуын мең-мең тапҡырҙар теләп ялбарған Алмабикәнең нескә йөрәк ҡылдарын сиртеп ебәреүенә үҙе лә үкенде.

– Бына ошолай! Салғы тотҡаһын ул тиклем ҡаты тотма! Салғыңды ергә һа-лыңҡырап, салғы башын кәксәйтеңкерәп сап! Ул тиклем ҡабаланма! Әйҙәгеҙ, ҡыҙҙар, һеҙ ҙә әсәйегеҙ артынан төшөгөҙ, – бригадир Игебаевтың бер-бер артлы етеп килгән Зилә, Дилә тигән ҡыҙҙарына өндәште. – Бер-берегеҙгә яҡын торма-ғыҙ! Аяҡтарығыҙҙы һаҡлағыҙ! – Алмабикә яңынан салғыға йәбеште. – Ҡулығыҙ салғы һабы буйлап һәр саҡ шылып торһон. Атыу хәҙер усығыҙҙың тиреһен һу-йып төшөрөрһөгөҙ.

Тәүге ҡаушау таралып, Игебаевтарҙың эше яйға һалынғас, Алмабикә арба-һына йүнәлде. Ләкин уның ғәҙәттәге ышаныслы атлауы, һәр ваҡыттағыса нур һибеп торған йөҙөндә шатлыҡ әҫәре осҡайны инде. Ҡыҙҙың уңалмаған йөрәк яраһына яңылыш тоҙ һипкән Шәмсинур ғәйепле төҫ менән Алмабикә артынан оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. «Бына бит ҡәһәр һуҡҡыры һуғыштың касафаты! Ба-лалар табып, рәхәтләнеп донъя көтөп ятырлыҡ бынамын тигән сибәр ҡыҙ ирҙәр эшендә ғүмерен заяға үткәреп йөрөй. Ә күпме көтәһе бар әле?».

Көн кискә ауышҡас, Игебаев һыбай килеп етте. Быларҙың байтаҡ ҡына үлән йығып ташлағанын күргәс, ул ихлас ҡыуанды.

– Ҡара, ҡара! Минең өйөмдә ниндәй шәп бесәнселәр булған икән! Быға тик-лем шуны беленмәгән дә! – Ул, атын тышаулап, былар эргәһенә килде. Ҡыҙҙар-ҙың ҡыҙарған биттәрен күреп: – Минең ҡыҙҙар бигерәк тә уңған икән! Һеҙ былай эшләһәгеҙ, дүрт-биш көндә ҡышлыҡ бесән эшләйһегеҙ. Әҙерәк ял итеп алығыҙ. Ҡана, бисәкәй, бир әле салғыңды!

Абдрахман йәшел фуражкаһын ригә таҡтаһына элде лә, гимнастеркаһының яғаларын ысҡындырып, сабырға кереште. Шәмсинур иренең киң бакуй һелтәгәненә һоҡланып ҡарап торҙо. Бер аҙҙан Игебаев арҡаһына тире сыға башлаған гимнастеркаһын сисеп ташланы, салбар ҡайышын бушатып, яңынан сабырға тотонды. Уның кискә һарҡҡан ҡояш нурҙарында сағылып ҡалған дөм-ҡара башында сал сәстәрен күргәс, Шәмсинур ирен йәлләп: «Абдрахмандың йәш сағы үтеп тә бара... Һуғыш ауырлыҡтарын нисек иңендә күтәрә икән?»– тип тә уйланды.

Теге осҡа етеп, артҡа әйләнеп ҡарағас ҡына, Игебаев эргәлә торған ҡатынын шәйләне. Усы менән тирләгән битен һөрттө лә Шәмсинурҙың күҙҙәренә ҡараны. Шул рәүештә һүҙһеҙ генә бер-береһенә йылмайышып оҙаҡ ҡына торҙолар. Ике ҡыҙы ла йүгерешеп килеп аталарының көслө муйынына аҫылынды. Ҡыуанысын йәшерергә тырышҡан Абдрахман ысынлы-уйынлы:

– Был һеҙҙең нишләүегеҙ? Һеҙгә биш-алты йәш түгел бит, хәҙер йығаһығыҙ!

– Беҙҙең атайыбыҙ көслө! Ул бер ҡасан да йығылмаясаҡ!

Шунан сабылған үләнгә ултырып сәй эстеләр. Был көн Игебаев ғаиләһе өсөн һуғыш башланғандан алып иң бәхетле көндәрҙең береһе булды. Абдрахман атланып килгән атын ригә артына бәйләне лә, яңы сабылған бесәнде тейәп, ҡатынын, ҡыҙҙарын ултыртып, кисләтеп кенә ауылға ҡайтты.

Билдәле, партия ойошмаһы секретары Өмөтҡужин бесән әҙерләү буйынса рәйестең был инициативаһын бигүк хупламаһа ла, килешмәй булдыра алманы. Партия йыйылышында был мәсьәлә күтәрелгәс, бер аҙ тартыш та булып алғайны.

– Нисек инде ул, иптәш Игебаев, колхоз ойошҡаны бирле беҙҙең колхозсылар бер ҡасан да үҙҙәренә бесән әҙерләмәне. Онотмаһам, был тәртипте һин үҙең индергәйнең, – тип тауыш күтәрҙе бригадир Латиф.

– Улай түгел, хәҙер хәтергә төштө. Колхозсыларҙың үҙҙәренә бесән әҙерләү дөйөм хужалыҡтың нигеҙен тарҡата, тип колхоз йыйылышында кем сығыш яһаны? Һин түгелме? – Ошоға тиклем түңәрәк тимер мейес артында тәмәкеһен бысҡытып ултырған Юлмөхәмәт ҡарт тауыш бирҙе.

– Кәнде шулай! Был тәртипте, колхоз малына бесән әҙерләгәндә колхозсылар илке-һалҡы эшләмәһен өсөн Латиф үҙе индерҙе! – Кәнсә ҡараусы Асия әбей ҙә Игебаевты яҡлап сыҡты.

Рәйес һүҙҙе йомғаҡлар өсөн һүҙ һораны.

– Был тәртипте беҙ үҙебеҙ һуғышҡа тиклем индергәйнек, ләкин үҙ заманына яраған был тәртипте бөгөн ҡулланып булмай. Беренсенән, элекке һымаҡ, косилкаға ултырып бер йәйҙә ике йыллыҡ бесән әҙерләй торған кешеләребеҙ юҡ, икенсенән, быйылғы ҡоролоҡ йылында әҙме-күпме бесән тик тау-таш, соҡор араһында ғына, уны ҡул салғы менән генә сабып була. Халыҡты йонсота-йонсота булһа ла, колхоз малы өсөн бесәнен әҙерләп алдыҡ, хәҙер инде һәр кем үҙенә әҙерләһен!

Шул саҡ Өмөтҡужин урынынан баҫты.

– Ағай-эне, коммунистар! Тағы бер уйлап алайыҡ әле. Игебаев иптәштең һүҙе дөрөҫтөр, моғайын. Ысынлап та, һәр йортта ҡулына салғы тоторлоҡ кешеһе булһа, бәлки, шулай уңай ҙа булыр. Ләкин элек колхоз ағзаһы булған, колхоз эшенән ҡалмай йөрөгән ҡарттарҙы, ирҙәре һуғышта һәләк булған ҡатын-ҡыҙҙы, ауырыуҙарҙы ҡайҙа ҡуябыҙ? Бына, мәҫәлән, Вәрәкә инәйҙе алайыҡ, ике өрлөктәй улын һуғышҡа оҙатты, икеһенә лә «ҡара ҡағыҙ» килде, уға кем ярҙам итергә тейеш? Әйҙәгеҙ, иптәштәр, төптәнерәк уйлашайыҡ әле.

– Ысынлап та, беҙҙә ундайҙар байтаҡ йыйыла бит. Минеңсә, ҡарауһыҙ ҡарттарҙың исемлеген төҙөп, уларға бесән әҙерләп биреүҙе колхоз идараһына йөкмәтергә кәрәк.

– Дөрөҫ, әле бесән эше бөтмәгән бит әле, шулай ғәҙелерәк булыр.

– Мин риза. Иптәш Өмөтҡужин исемлек төҙөһөн дә, шунан ҡабат ҡарап сығырбыҙ. Шуны ла онотмағыҙ, һуғыштан алда ун бер-ун ике йәшлек ир баланың кәсебе йәйен туп, ҡышын сәкән һуғыу булһа, бөгөн ундайҙар колхозда эшкә яраҡлы хисаплана, – Игебаев урынына ултырғайны, төртмә тел Латиф был осраҡта ла һүҙһеҙ ҡалманы.

– Игебаев ағай, минең аңлауымса, өйөңдәге етеп килгән ҡарындашты ла, һиңә аш-һыу таярлап ултырған Шәмсинур еңгәне лә хисапҡа алабыҙҙыр бит? – тип ауыҙын ҡыйшайта биреп йылмайҙы бригадир.

– Бушҡа ауыҙ йыраһың, ҡустым! Миңә тамаҡ әҙерләгән еңгәң дә, ике ҡыҙым да кисәнән бирле бесәнде әҙерләй башланы инде. Унһына һинең эсең көтөрҙәмәһен! – тине Игебаев.

– Ярай, Игебаев ағай! Өмә яһап булһа ла һинең генә малыңа бесәнде әҙерләп бирербеҙ! – тиеште колхозсылар.

– Минең өсөн башығыҙ ауыртмаһын! – тине ҡаты ғына итеп Игебаев. Латифҡа үпкәле ҡараштарын йүнәлтте.

Халыҡ таралышырға ғына торғанда, Өмөтҡужин тағы ла бер мәсьәләне ҡуҙғатты. Бөтә кеше уға ҡарап ҡуйғас, уңайһыҙланыпмы, нишләптер ҡәләменең осо менән сикә сәсен тырнап алды.

– Иптәштәр! – Барса ғәм һағайып тыңларға әҙерләнде. Юлмөхәмәт ҡарт үңәсен һоноп, усын ҡолағына ҡуйҙы. – Бесән менән ярҙам итәһе кешеләр араһында төрлөләре бар.

– Асығыраҡ һөйлә, хәбәрең аңлашылмай! – тип ҡысҡырышты халыҡ.

– Асығы шул: исемлектә торған кешеләрҙең һуғышта батырҙарса һәләк булған туғандары менән бер рәттән, хәбәрһеҙ юғалғандары ла бар бит әле.

– Уларҙы нишләтмәксеһең? Әллә табып бирергә хәлеңдән киләме?

– Хәбәрһеҙ юғалғандарҙы башҡалары менән берҙәй хисаплап йөрөтөү дөрөҫ булырмы? Кем белә, ул «хәбәрһеҙ юғалғандар» үҙҙәре теләп әсир төшкәндер, бәлки?

– Китһәнә! Ҡайһылай эсең ҡара икән һинең! Ике туған ағайың, районда иң алдынғы тракторист Өмөтҡужин Әнүәр, йүгерек Ғәббәс, ғүмер буйы колхоз эшен емереп эшләгән Муллаәхмәт үҙҙәре теләп пленға төшкәнме? Быға кем ышанһын?

– Ярай, ярай, мин былай ғына, кәңәшләшергә генә уйлағайным, – ярҙам һораған һымаҡ, Өмөткужин рәйескә ҡараны. – Һуғышта төрлө хәлдәр була. Кемдер ҡамауҙа ҡала, икенселәр яраланып әсир төшөүе мөмкин. Һуғышта немец ҡулына эләгеү – бер ҙә ғәжәп хәл түгел, тимәксемен.

– Беҙҙең ауылдаштар әсир ҡалып, ил һатып йөрөмәҫ! Башҡа туҙға яҙмаған хәбәреңде беҙҙең алда һүҙ итеп һөйләп ултырма!

– Булды, булды. Мин һеҙҙең фекерегеҙҙе генә белергә уйлағайным, – тип парторг һүҙен йомғаҡланы.

## 15

Октябрь баштарында, бөтә ырҙынды ҡырып-һепереп тигәндәй, Игебаев, райкомдың ҡыҫмаҡҡа алыуына ҡарамаҫтан, тотто ла үҙ белдеге менән ун биш йөк аҡтыҡ игенде орлоҡ фондына оҙатты.

Райкомдың беренсе секретары Хәлимов, тегендә-бында шылтыратып, иген

тапшырыу планының бик яй барғанын күрҙе. «Был Игебаев нишләп әкрен ҡуҙғала башланы һуң әле? Бесән эшен дөргөн генә тамамлағайны, игенгә төшкәс, ниңәлер ығышланды»,– тип Ялан ауылына үҙе барып әйләнергә булды. «Эмка» машинаһының көҙгө саңды туҙҙырып Ялан яғына йүнәлгәнен күреп, «Осҡон» колхозы рәйесе Дәүләтов телефондан күршеһенә шылтыратты.

– Игебаев ағай, ҡунаҡ көт! Һинең яҡҡа уҙып китте.

– Ниндәй ҡунаҡ булһын был заманда? – Абдрахман аңламай ҡалды.

– Атлы ҡунаҡ түгел инде! Ут арбаһында арттан төтөн сығарып йөрөй торған ҡунаҡ.

– Ә, аңлашылды. Рәхмәт! – Игебаев телефон трубкаһын элде.

Ул хужаны идарала ғына көтөргә булды. Берсә тәҙрәгә барҙы, берсә тышҡа сығып, бейек күтәрмәнән дә ҡараны, ләкин хужаның машинаһы бер ҡайҙа ла күренмәне. Бер аҙҙан, бөгөн таң менән Салғыя һыртындағы ырҙындан тейәп ебәргән ун биш йөктөң иң алдағыһына үҙе ултырып, ҡалғандарын артынан эйәртеп, райком секретары колхоз кәнсәһенә килеп туҡтаны. Эштең айышына тиҙ генә төшөнөп алған Игебаев яурындарын көмрәйтеп, иҫәнләшмәй ҙә тиҙ-тиҙ атлап идараға инеп киткән секретарь артынан йүнәлде.

Кәнсәгә инеү менән Хәлимов, өҫтөндәге пальтоһын, йәшел фуражкаһын сөйгә элеп, һөжүмгә әҙерләнгән кеше һымаҡ, яурыны аша һалынған ҡайышҡа эленгән наганын һәрмәп ҡуйҙы. Оҙаҡ ваҡыт йоҡламауҙан ҡыҙарып шешмәкләнгән күҙҙәрен, аҫҡа ослайып төшкән ябыҡ битен ҡулъяулыҡ менән һөрттө лә, кәнсәне тәүгә күргән кеше шикелле, бөтә яҡҡа һөҙөп ҡараны. Шунан күҙҙәренән осҡондар сығарып һорап ҡуйҙы:

– Бына ошолайтып, һуғыштың иң ауыр мәлендә, үҙебеҙҙең тыуған хөкүмәтебеҙгә, фронтҡа икмәк тапшырып ятабыҙмы?

Хәлимов, ике ҡулы менән өҫтәлгә таянып, иҙән уртаһында фуражкаһын ҡулында йомарлап тотоп торған Игебаевҡа тәүгә күргәндәй карап, ҡулдарын артҡа ҡуйып, бер аҙ йөрөп алды. Ә Игебаев, баштары туҙа башлаған итектәрен алмашлап баҫып, өндәшмәйенсә тороуын дауам итте. Ил өсөн түгел, үҙе өсөн ҡайғыртҡан түрәләрҙе ул күп күргәне бар ине. Рәйестең һаман ләм-мимһеҙ тороуынан шартлар сиккә еткән Хәлимов уны бер нисә ҡат әйләнеп сыҡты ла, башбармаҡтарын билендәге яҫы ҡайышына тығып, ҡушкөбәкле мылтыҡ тоҫҡаған шикелле, ике күҙен секерәйтеп Игебаевҡа төбәне.

– Беләһеңме, иптәш Игебаев, һинең был ҡылығың өсөн ниндәй яза бирергә кәрәк? Хөкүмәткә иген тапшырыуҙың мөһим сараһын тупаҫ боҙған өсөн, һин партбилетты һалырға тейешһең! Быныһы – иң кәм тигәндә әле! – «Ә унан һуң ҡулыңа повестка тотоп, фронтҡа китерһең!» – тип әйтергә уҡталғайны ла, Игебаевты быны менән генә ҡурҡытып булмаясағын иҫенә төшөрҙө. – Артабан һинең менән нимә эшләргә кәрәген Арыҫланов менән Борханшин әйтер, – тине Хәлимов артабан, НКВД начальнигы менән район прокурорына ишара яһап. – Улар партияның ҡушҡан бурыстарын һинең һымаҡ илке-һалҡы башҡармайҙар, йәне-тәне менән тырышып үтәйҙәр.

– Аңра түгелбеҙ, уларҙың нисек тырышҡанын ишетеп ятабыҙ, – тине Игебаев.

– Әле һаман да төшөнмәнеңме ни әле?

– Төшөндөм, уның нимәһен төшөнмәҫкә?

– Бына нимә, иптәш Игебаев! Һинең ҡылыҡтарың туйҙыра башланы инде, – Хәлимов уң ҡулының оҙон, итһеҙ башбармағы менән гимнастеркаһының иркен яғаһынан сығып, шарнирға ҡуйылған һымаҡ, төрлө яҡҡа әйләнеп торған балта һабындай нәҙек үңәсен ышҡып алды. – Һуң, нисә кәррә әйтелде бит һиңә! Әллә башың икәүме? Әллә юрый ғына башыңды һиңмайлыҡҡа һалаһыңмы? Ошо

тиҫкәре башың арҡаһында күпме ыҙа сиктең? – Игебаевтың сикәһенә һуҡ бармағы менән төртөргә уйлағайны, Абдрахмандың төҫө үҙгәреп китте.

– Ҡулығыҙҙы һуҙмай тороғоҙ, иптәш секретарь! Ҡул менән һабаҡ өйрәтергә мин һеҙҙең ялсығыҙ түгел! Мин партияға, Совет власына хеҙмәт итәм, тик Хәлимовтың үҙенә түгел! АңлаНығыҙмы?

Быны көтмәгән секретарь бер мәлгә генә ҡаушап ҡалды, шунан тар ғына күкрәген Игебаевҡа терәп тигәндәй, был юлы ҡулдарын аҫҡа төшөрөп, һелтәнмәй генә һирәк тештәре араһынан:

– Ә мин кемгә хеҙмәт итәм? Әллә хөкүмәткә һәм партияға минең тоғро хеҙмәт итеүем хаҡында һинең шигең бармы? – тип ҡысҡырҙы.

– Ниңә ул ҡәҙәре тамаҡ яраһың! Совет кешеһен ҡысҡырып ҡына ҡурҡыта алмаҫһың! Ә һинең хеҙмәт итеүең тураһында шуны әйтер инем: һин илгә түгел, үҙеңә, үҙеңдең былай ҙа самалы шәхсән абруйыңа хеҙмәт итәһең! Ярамһаҡланып, ҡойроҡ болғап торғандарҙы үҙ ҡанатың аҫтына алаһың! Илгә һәм халыҡҡа һинең эше хеҙмәт итмәйҙәр!

– Инде хәҙер мине өйрәтергә тотондоңмо? –Хәлимов тауышын бер үлсәмгә түбәнәйтте.

– Әллә һине өйрәтеү хилаф тип һынайһыңмы? Белмәгәнде кешеләрҙән, тормоштан өйрәнә барыу бөтәбеҙ өсөн дә мотлаҡ!

Тамам сығырынан сыҡҡан Игебаев стена ҡырындағы бүкәнгә ултырҙы ла, янсығын сығарып, тәмәкеһен төрә башланы. Икеһе лә шымып ҡалдылар. Колхоз хужаһының уҫал һүҙҙәренән күңеле борсолған секретарь әңгәмәне ялғарға тырышты.

– Мин алдымда ҡойроҡ болғағандарҙы яҡлайым, тиһең инде? – Ул Игебаевҡа текләне. – Ул кешеләрҙең фамилиялары ла барҙыр, тим?

Ләкин Абдрахман өндәшмәне. Терһәктәре менән аяҡтарына таянды ла тәмәке борҡолдатыуын белде. Секретарҙың йөҙөндә тәрән борсолоу билдәһе күренде, һәм ул урынынан торҙо.

– Ярай, һинең икмәк тапшырыуға булған ҡарашың миңә көн һымаҡ асыҡ, һөйләшеү урынын райкомдың бюроһына күсерәйек. Һинең менән бында мин баҙар ҡороп, һатыулашып ултыра алмайым! – Хәлимов стенаға ҡаҙаҡлап ҡуйылған телефон тотҡаһын дығырҙатып борорға тотондо. Ләкин яуап биреүсе булманы. Ул телефон тотҡаһына яңынан йәбеште. Бер ниндәй ҙә яуап булмағас, түҙмәне:

– Инәнде... ошо маңҡа ҡыҙҙар ҙа минең районға сыҡҡанды көтөп кенә торалар. Бер әҙәм менән һөйләшермен тимә! – тип өнһөҙ телефонға ҡарап үртәлде. – Иртәгә бюроға килеү тураһында телеграмма алырһың. Ә был тейәткән ылауыңды хөкүмәткә оҙат, ишеттеңме?

Хәлимов, юл ыңғайында пальтоһын кейә-кейә, машинаһына барып ултырҙы. Кәнсә эргәһенән ҡуҙғалып киткән машинанан секретарь, тәҙрәгә күҙ йүгертеп, Игебаевтың болдорға сығыуын көтөңкөрәп тә ҡарағайны, ләкин рәйес уны оҙатырға сыҡманы. Машина, урамдағы эттәрҙе ҡурҡытып, күҙҙән юғалды.

Кәнсәлә яңғыҙы ҡалған Игебаевты күңелһеҙ уйҙар солғап алды. «Хәлимов менән ара тамам боҙолдо. Хәҙер инде колхоз рәйесе булып эшләп булмаҫ, бюроға кейем-һалым, сохари алырға тура килер. Йыш ҡына бюрола ғәйепләнгән кешеләр шундуҡ ҡулға алынып, йә төрмәгә, йә фронтҡа китеп тора бит». Ысынлап та, теге аҙнала ғына «Үрнәк» колхозы рәйесе Солтанбәковты, ауыл артеленең уставын боҙған өсөн, Верхнеуральск төрмәһенә оҙаттылар. Бында ла шулай килеп сығыуы мөмкин.

Бригадир Алмабикәнең сыбыртҡы тотоп ҡапыл кәнсәгә килеп инеүе Игебаевты һиҫкәндереп ебәрҙе.

– Йә, Игебаев ағай, тыштағы игенде нишләтәбеҙ? Хөкүмәткә тапшырабыҙмы, әллә орлоҡҡа ҡалдырабыҙмы?

– Хөкүмәткә тапшырабыҙ, – Игебаевтың тауышы тыныс ине.

– Һуң, икенсе йыл ни сәсәбеҙ? Минең бригадала орлоҡ юҡҡа хисап бит!

– Уныһын иптәш Хәлимовтан һорағыҙ! Ул ҙур хужа, орлоҡто тартып алырға белгәс, кире ҡайтарып бирергә лә хәленән килер. Иртәгә мине был мәсьәлә буйынса бюроға саҡыралар. – Игебаев бер аҙ уйланып торҙо. – Алмабикә ҡарындаш, нисек кенә ҡыйын булмаһын, киләһе йыл игенде барыбер сәсәбеҙ! Иртәгәһенә «Коммунар» комбайнын Ҡабаҡ тауы эргәһендә өйөлгән иген эҫкертенә бойҙай һуғырға ҡуй. Ҡоро мәлдә шуны йәһәт кенә һуктырып, орлоҡ һалып ҡалырға кәрәк. Көҙ байында колхозсыларға бер аҙ хеҙмәт көнөнә икмәк өләшеп булмаҫ микән, тип уйланылғайны, барып сыҡманы инде.

Алмабикә уға тәү тапҡыр күргәндәй ҡарап торҙо ла:

– Ярай, Игебаев ағай, аңлашылды, – тип һаҡ ҡына ишекте ябып, эшенә ашыҡты.

Абдрахман был ауыр һөйләшеүҙән һуң кәнсәнән бер сыҡты, бер инде. Шунан атына атланып, һыйыр һарайын ябыусы эшселәр янына барып ҡайтты. Ауылды тап уртаға бүлеп ятҡан Ҡорүҙәк соҡорондағы емерек күперҙе күргәс, иртәгә үк төҙәтергә, бер нисә кешене ҡуйырға кәрәк, тип уйланы. Өмөтҡужин менән дә иртәгәһе көн тураһында һөйләшеп алырға кәрәк булыр. Парторг иртә менән Салғыя ырҙынынан орлоҡлоҡ иген алып ҡайтырға киткәйне, ул секретарь Хәлимов менән булған һөйләшеү тураһында белмәй ҙә бит әле.

Игебаев кәнсәгә яҡынлашып килгәндә тәҙрәнән телефондың ярыла яҙып шылтырауын ишетте. Трубканан әсе тауышлы ҡатын: «Бөтәгеҙгә лә ҡырғын тейҙеме әллә? Райкомдан телефонограмманы ҡабул итегеҙ! – тип ҡысҡырып уҡый башланы. – «Ҡыҙыл Ялан» колхозы партия ойошмаһы секретары Өмөтҡужинға, колхоз рәйесе Игебаевҡа. Беренсе октябрь көнө иртәнге сәғәт унда бюро ултырышына һеҙҙең һуңға ҡалмай килеп етеүегеҙҙе район комитеты ҡәтғи ҡуша, хөкүмәткә иген тапшырыу планының үтәлеше хаҡында һеҙҙең отчетығыҙ тыңланасаҡ». Кем ҡабул итте?

– Игебаев.

Теге яҡтағы усал тауыш йыуашая төштө.

– Нәҡ өҫтөнә баҫҡанмын икән. Хушығыҙ!

Игебаев ҡағыҙға яҙылған әмерҙе ауыҙ эсенән тағы бер нисә мәртәбә уҡып алды. Оҙаҡламай һыбайлы парторг ҡайтып етте. Ул, баҫҡысты аша яҡлап инеринмәҫтән, төҫөнә ҡәнәғәтләнеү һыҙаттары сығарып:

– Игебаев ағай, теге Әмин тауы янындағы баҫыуҙан ун биш йөк игенде тейәтеп ҡайтарҙым! Бойҙайы шул тиклем эре, үтә күренеп тора. Әйтерһең дә, уны ҡул менән сүпләп алғандар. Орлоҡҡа найәт буласаҡ! – тип эшен күрһәтте.

– Эй, ҡустым, ҡустым! Балалар һымаҡ шатланаһың... Орлоҡҡа тигән бойҙай юҡ инде: Хәлимов иптәш уны хөкүмәткә тапшырырға ҡушты. Был турала үҙ-ара шаулашып та алдыҡ әле, – тине Игебаев бойоҡ ҡына.

– Нисек инде улай? Киләһе йыл ни сәсәбеҙ һуң?

– Уныһын инде, Өмөтҡужин ҡустым, иртәгә бюрола Хәлимовтан үҙең һорарһың. Иртәгә икебеҙҙе отчет менән районға саҡырылар. Әллә ниндәй хәл килеп сығыуы бар – әҙерләнеңкерәп барыу хәйерле булыр.

– Беҙгә нимәнән ҡурҡып торорға? Фронттан ары ебәрә алмаҫтар!

– Уныһы шулай ҙа ул. Тик һинең менән миңә биш йөҙ йәндән артыҡ ауылдаштар яҙмышы тапшырылғанын да иҫтән сығармайыҡ. Нисәмә кеше – кисәге һабансылар, кәбәнселәр, трактор йөрөтөүселәр – ҡатындарын, бала-сағаларын, донъя

малын беҙгә ышанып ҡалдырып, фашист менән һуғышып ята бит. Уларҙың арты ҡарауһыҙ булһа, ҡустым, дошман менән һуғышыу ҡайғыһы ла китер ул. Яугирҙың беҙгә ҡалдырып киткән бала-сағаһы, ата-әсәһе, ҡатыны өсөн күңеле тыныс, рухы күтәренке булыуы шарт. Шул саҡта ғына беҙ дошманды еңә аласаҡбыҙ.

Күҙлеген танауына төшөрөп, тирләп-бешеп Сабир ҡарт килеп инде.

– Бөгөн  кәнсә тирәһендәге кешеләрҙе йыйып, Алмабикә бригадаһына иген таҙартырға алып сыҡҡайным. Шуға һуңланым, –  хисапсы Игебаев ҡырындағы ултырғысҡа терәлде.

Бер аҙ торғас, ауыл Советы рәйесе Ғәлиәкбәрова Хөснә, йәнә ике бригадир ҙа килеп инде. Игебаев һүҙ алды.

– Заманалар бик ҡатмарлы. Сталинградта үлемесле һуғыш бара. Иртәгә бюронан әйләнеп ҡайтмаһам, минең урынға иптәш Өмөтҡужин ҡалыр. Партия эшендә лә, хужалыҡ тармағында ла ул бер йыл эсендә байтаҡ нәмәгә өйрәнде. Кеше менән эш итә белә, үҙе эшсән,  намыҫлы егет.

Барыһы ла Өмөтҡужинға тәүге күргәндәй ҡарап алдылар.

– Ҡуйсәле, Игебаев ағай, алдан һөйләп ултырма! Әле бергәләп, башыңды ҡатыра-ҡатыра, эшләйһебеҙ бар! – Бригадир Латиф, рәйесте ауыр уйҙарҙан ҡотолдорорға теләп, йылмайған булды.

– Әйҙәгеҙ, таралышайыҡ. Иптәш Өмөтҡужин, мин һиңә иртәнге сәғәт алтыла килермен. Ат менән. Килен эргәһендә бик иркәләнеп ятма. – Игебаев йәтеш кенә шаяртты.

Абдрахман ашыҡмай ғына өйөнә табан атланы. Ҡатыны киске аш-һыу әҙерләп йөрөй ине. Игебаев, сисенмәй, өҫтәл артына барып ултырҙы. Ҡаҙандан бөҫөрап сыҡҡан ит еҫен һиҙеп:

– Әллә, ҡарсыҡ, бөгөн һурпа менән һыйларға самалайһыңмы? – тине ул, йылмайып.

Усаҡ тирәһендә йүгереп йөрөгәндән бите алма кеүек ҡыҙарған Шәмсинур иренә һораулы ҡараш атты.

– Һин нишләп бөгөн көндәгенән иртә ҡайтып индең әле?

– Шулайыраҡ килеп сыҡты... Һинең ит бешергәнеңде танауым әллә ҡайҙан һиҙеп тора бит, шуға ҡайттым, – тине Абдрахман.

– Көн һайын ҡоро-һары менән бигерәк асҡаҡһып киттең бит. Шуға күрә, күрше малайҙан тауыҡ салдырып, туҡмас бешереп ятам.

– Ә ҡыҙҙар ҡайҙа? – тип белешә Игебаев.

– Атаҡ, атаҡ! Белмәйһеңдер шул? Һинең ҡыҙҙарыңа хәҙер беҙ түгел, Алмабикә хужа. Һин бит үҙең октябрь бөткәнсе өлкән синыф балаларын, уҡыуҙан бушатып, бригадаларға таратып бирергә ҡушҡанһың.

– Әй, шулай бит әле! Әллә ниндәй заманалар килде, кисә әйткәнде бөгөн онотаһың. – Игебаев ян-яҡҡа ҡаранып алды. – Минең һырылған салбар менән фуфайҡа ҡайҙа икән?

– Улар һиңә ниңә хәжәт?

– Кәрәге тейеүе бар шул. Иртәгә райком бюроһына саҡыралар.

Ошо һүҙҙе ишеткәс, Шәмсинур иңкәйеп торған еренән билен яҙып, иренә ғәжәпһенеп ҡарап торҙо.

– Әллә тағы шул райком менән яғалашып ҡайттыңмы? Ни генә етмәйҙер инде һиңә? Бүтәндәр ише баш баҫып, өнһөҙ-һүҙһеҙ генә эшләп булмаймы ни? – Шәмсинур еүеш ҡулдарын алъяпҡысы менән һөртөп алды ла ире янына ултырҙы. – Бөгөн мин урамда иң алдынғы колхоз рәйесе ҡатынына тап булдым. Уның бер туған һеңлеһе беҙҙең ауылға килен булып төшкәйне. Кем әле шуның фамилияһы? Уны һәр саҡ гәзиттә маҡтап яҙалар.

– Теге Молотов колхозының рәйесе Мардановты әйтәһеңдер?

– Шул, шул! Мисәүле ат ектереп, күсерҙе ултыртып китеп бара. Минең көйәнтәләп һыу апҡайтҡанды күргәс, атын туҡтатып, көлә башланы: «Китсе! Колхоз хужаһының бисәһе була тороп, үҙең һыу ташып, ниңә уның абруйын кеше алдында төшөрөп йөрөйһөң»,– ти.

Күп бытылданы инде. «Игебаев колхозын ярлыларға таяндырған, тип һөйләйҙәр ине, шул хәбәр ысын икән. Ауылыбыҙ ғүмер буйы фәҡирлектән сыҡҡаны юҡ. Рәйесегеҙ үҙ һүҙле, тәкәббер, шуға халҡыбыҙ һәр саҡ ас йөрөй. Игебаев хужалар әйткәнен һанға һуҡмай. Үҙенең ҡәҙерен үҙе төшөрөп, башын ауыл көтөүселәренә, ҡара халыҡҡа тиңләп йөрөй, ти. Ә беҙҙең колхозыбыҙ һәр саҡ алдынғы. Ҡунаҡ та өҙөлгәне юҡ, прокурор булмаһа, милиция начальнигы килә, ҡайһы ваҡыт Хәлимов үҙе лә килеп, ашап-эсеп, ауыл мунсаһын кереп, ҡунып ҡайтып китә. Бөгөн дә районда кемдер килергә тейеш. Тәкә һуйылған, ҡаҙы әҙер, бәлеште мейескә генә тығырға ҡалды. Бына нисек йәшәргә кәрәк! Ә һинең Игебаев, халҡына ярайым, ғәҙел йәшәйем тип, үҙе лә ас ултыра, колхозы ла иң артта һөйрәлә. Халыҡҡа изгелек менән бер ҡасан да ярап булмай ул!» – тип һөйләнде. Ул тәтелдек бисәгә беҙҙәге хәлде кем еткереп тора икән?

Абдрахмандың һарыуы ҡайнаны.

– Һатлыҡ йәндәр! Бөтә ил дошман менән алышҡанда, былар аслы-туҡлы халыҡ ауыҙынан тартып алып, үҙҙәренә бәхетле тормош ҡороп яталар! Нисек халыҡтан оялмайҙар? Нисауа, беҙҙең урамға ла байрам килер әле! Ә һин ниңә урамдан юҡ-бар хәбәр йыйып йөрөйһөң?

Шәмсинур артыҡ һөйләп ташлағанын аңлап, шымды. Уның иренә текләгән ғәйепһеҙ зәңгәр күҙҙәрендә гәлсәр йәш күренде, был – иренең һүҙенән ғәрләнеү билдәһе ине. Игебаев ҡатынының муйынынан ҡосаҡлап, бер ни өндәшмәй, икенсе ҡулы менән уны арҡаһынан һөйҙө. Уға терәлгән Шәмсинурҙың ҡалҡыу күкрәге, өйәнәк тотҡан шикелле, бер нисә тапҡыр һелкенеп алды, шунан иркәләүҙән тамам күңеле йомшарған ҡатын, эркелгән тойғоларға баш булалмай, һулҡылдап иларға тотондо. Бындай хәлдәр һирәк-мирәк элек тә булғылай ине, башта Абдрахман быға артыҡ иғтибар итмәҫкә лә уйлағайны, ләкин ҡапыл иртәгәһен районға барасағы иҫенә төштө. «Кем белә, Шәмсинур менән һуңғы кис бергә ултырамдыр, бәлки? Ул бит – балаларымдың әсәһе! Йомшағыраҡ бәрелмәһәм, ни булған?» Илауҙан саҡ туҡтап, күкрәгенә башын һалып, ебегән танауын мырш-мырш тартҡан Шәмсинурҙы Абдрахман биленән күтәреп карауатҡа ултыртты, үҙе уға йәнәш һыйынды.

– Шәмсинур, биллаһи, мин һине һис кенә лә кәмһетергә уйламағайным. Ғәйеп миндә, теләһә ни эшлә! – Ул сикәләре ағарған, түбәһендә лә сал сәстәре күренә башлаған башын бисәһенең тубыҡтарына һалды. Шәмсинур йомшаҡ ҡулдары менән уның башын наҙлы ғына һыйпарға кереште. Ғүмерендә һәр саҡ иркәләүҙе, иркәләнеүҙе кешенең эске йомшаҡлығына хисапларға өйрәнгән Игебаев был юлы тыныс ҡына ҡатынының тубығында ятыуын белде. «Ҡартайыуҙан күңел ҡылдары бушап барыуы ошо булалыр инде»,– тип уйланы үҙе.

Ошо һөйләшеүҙән һуң уға күп нәмә асыҡланды, байтаҡ һорауҙарына яуаптар табылды. Кешене һәм уның ете ҡат ҡарыны аҫтында ятҡан эс серҙәрен еңел генә белеү мөмкин түгелдер. Башта комсомолда активист булып йөрөгән, хәҙер партия райкомына хужа булған Хәлимовты Абдрахман бик күптән белә кеүек. Һәр саҡ күҙҙәренә ҡалын быялалы күҙлек кейгән ҡаҡса, йонсоу битен һыйпай-һыйпай, йәш саҡтан һирәк йоҡа сәсен һыйыр ялаған шикелле туп-тура өҫкә тараған Хәлимов үҙенең сығыштарында коммунистарҙың намыҫы, принципиаллеге тураһында һөйләргә ярата. Күрәһең, Игебаев уның ялтырап торған тышын

ғына күргән... Хәлимовтың эсендә ниҙәр ятҡанын ул бөтөнләй белмәгән... Колхозда нимәлер һиҙемләһә лә, уның булмышын, эске донъяһын тут баҫа башлауын тоймаған, уның сиктән тыш мин-минлегенә иғтибар итмәгән.

Эштең бик ҡатмарлы икәнен әлегә белмәгән Шәмсинур һандыҡтан Абдрахмандың һырылған салбарын, фуфайкаһын сығарҙы.

– Ҡәҙимге кейерлек әле, ямалған-ниткән ере юҡ, көйә лә төшмәгән, – хужабикә иренең кейемен тышта ҡағып, сөйгә элеп ҡуйҙы.

– Кәпәс тә кәрәк булыр.

– Ыстағәфирулла! Әллә ҡара көҙҙән үҙенде Биләрәткә ағас ҡырҡтырырға ебәрәләрме? – тип төпсөндө Шәмсинур.

– Бер ҙә белеп булмай. Заманалар бик ауыр, ебәреп ҡуйыуҙары ла бар. Әйткәндәй, һин Вахиттың адресын яҙып, минең ҡуйын кеҫәһенә тыҡ әле.

Иренең йыйынғанына һаман да ышанып етмәгән Шәмсинур:

– Ярай, бушҡа юрап ултырма! Йә ысынлап китеп барырһың, – тине лә өҫтәлгә аш ҡуйҙы.

Һүҙһеҙ генә ашанылар. Шунан Абдрахман ҡуйын дәфтәрен сығарып, ниҙер һыҙғылап алды. Ятыр алдынан ул мейес башында, сөйҙә элеүле сохарийлы бәләкәй моҡсайҙы алып, юлға әҙерләгән әйберҙәр араһына һалды. Түрбашта һауытһаба йыуып маташҡан хужабикә, артына әйләнеп:

– Буш менән башыңды ҡатырма! Мынауындай заманда һине, колхоздан алып, ҡайҙа ебәрһендәр? Бөгөн ауылда фронттан еңел, тип уйлай микән һинең Хәлимовың? Райкомдан әмер биреп ултырыу анһат та ул, бында килеп һинең урыныңда берәй аҙна эшләп ҡараһын әле – һырт биреп ҡасҡанын күр ҙә тор!

– Барыбер әҙерләнеңкерәп барыуы хәйерлерәк. Ҡыҙҙар ҡайтып өлгөрмәне, их, күрмәйенсә кителер инде.

16

Игебаев менән Өмөтҡужин, майланған кырандас тәгәрмәстәренең сиҡылдауын тыңлап, байтаҡ ҡына һүҙһеҙ барҙы. Өҫтөнә шинель кейгән парторг, Игебаевтың өҫ-башына ҡарап:

– Һин, Игебаев ағай, тәс урман ҡырҡырға барған һымаҡ кейенеп алғанһың, – тигән булды.

Игебаев өндәшмәне. Уның тәрән уйҙарын бүлеп, Өмөтҡужин тағы һүҙ башланы.

– Был бюрола ни хаҡында мәсьәлә икән?

– Уныһы инде, ҡустым, хужаларҙың эше. Кешенән тәфтиш алыуы эште ойоштора белеүгә ҡарағанда байтаҡҡа еңелерәк ул. Хәлимов һорар, беҙ хәлдән килгәнсә яуап ҡайтарырбыҙ.

Райком бинаһына килеп ингәс тә, Игебаев коридорға күҙ йүгертеп сыҡты.

«Әһә, бюронан һуң туп-тура төрмәгә алып китә торған милиционер күренмәй, үтеп тә китер, бәлки».

Игебаев менән Өмөтҡужин стена ҡырындағы эскәмйәгә, үҙҙәре кеүек бюроға инергә сират көтөп ултырған кешеләр араһына,ҡунаҡланы.

Бер аҙҙан ишектән тирләп-бешеп, таушалған керле ҡулъяулығы менән маңлай тирен һөртә-һөртә промартель председателе Алтынғужин менән парторг Сырлыбаева сыҡты. Хәлимов кабинетының дермантин менән көпләнгән ике ҡатлы ишеген ябыр-япмаҫтан, икеһе лә берҙәй эҫе мунсала ҡаты сабынып, тышҡа хәл алырға сыҡҡан кешеләй, тәрән көрһөнөп ҡуйҙы. Сират көтөп ултырған кемдер быларҙан:

– Хужаның кәйефе нисек? Ҡара күҙлеген кейгәнме? – тип һораны.

– Үҙең ингәс күрерһең. Күҙлеген киймәһә лә, һыу эскеһеҙ яра. Күрмәйһеңме ни? Манма һыуға төшкән һымаҡ сыҡтыҡ бит! – Алтынғужин күлмәк иҙеүен ысҡындырып, күкрәген һөртөп алды.

Секретарҙың ярҙамсыһы – әллә ҡайһы яҡтарҙан был төпкөл районға, ауыл көтөүенә ҡушылған сит мал шикелле килеп юлыҡҡан һап-һары, быштыҡ, көйгәнәк йомортҡаһына оҡшаған сып-сыбар битле Ройтман фамилиялы кеше кабинеттан сығып, эскәмйәлә ултырған кешеләргә ҡарап алды.

– Игебаев һәм Өмөтҡужин! – тип ҡысҡырҙы. –Бюроға!

Абдрахман ҡулына тотоп ултырған кәпәсен стена буйындағы элгескә элде лә ишеккә табан атланы, артынан Өмөтҡужин эйәрҙе. Оҙон, өҫтө йәшел буҫтау менән ябылған өҫтәлдең башынан баяғы әҙәм урын күрһәтте лә үҙе диванға барып ултырҙы. Игебаев башын ҡалҡытып ултырған бюро ағзаларына, кабинетта ҡуйылған йыһаздарға күҙ йүгертеп сыҡты. Секретарҙың артында стенала, бюроның эшен туҡтауһыҙ күҙәтеп ултырған шикелле, ҡысығыраҡ күҙен кешеләргә төбәгән Сталин портреты. Уң яҡ стенала бәләкәй генә ҡыҙыл флагтар ҡаҙалған СССР картаһы. Хәлимов, ҡалын ялтыр күҙлеген кейеп, үҙ урынында ултыра. Тик ул нисектер һурығып, тартыла төшкән. Уның итһеҙ ҡырлы танауы ҡош суҡышына оҡшап, тағы ла ослайған.

Хәлимовтың уң ҡулы ҡырында – НКВД начальнигы Арыҫланов, уға ҡаршы – район прокуроры. Игебаев килеп ингәс тә, Арыҫланов, фуфайка, һырылған салбар кейеп килгән Абдрахманға ымлап, прокурорға күҙ ҡыҫты.

Алдында ятҡан ҡағыҙҙарҙы бер яҡҡа ҡулы менән этәрҙе лә, Игебаевҡа һүҙ бирерҙән алда, секретарь нишләптер уң ҡулы аҫтында ятҡан счет төймәләрен шаҡылдатып тартып ҡуйҙы. Шунан ингәндәрҙе һөҙөп ҡараны.

– Иптәш Игебаев, һеҙгә нисә минут ваҡыт кәрәк? – тип һораны.

– Биш минут, – тине Абдрахман.

Был яуапты ишеткән Арыҫланов хатта урынында ҡуҙғалып алды.

– Иптәш Игебаев бик ҡыҫҡа ғына һығырға уйлай түгелме? – тип ян-яғына ҡаранып, һүҙенә хуплау табырға теләгәндәй, аҫтан йылмайып ҡуйҙы. Ләкин өндәшеүсе булманы.

– Ярай, биш минут һеҙгә. Тик мәсьәләнең асылын ғына яҡтыртығыҙ, – тине секретарь.

Абдрахман, һоро дермантин тышлы таушалып бөткән блокнотын ҡулына алып, ашыҡмай ғына һүҙ башланы.

– Иптәш Сталиндың Бөйөк Октябрь революцияһының егерме дүртенсе йыллығына арналған телмәрендәге фронтты бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү тураһындағы күрһәтмәләрен үтәй барып, «Ҡыҙыл Ялан» колхозы быйылғы урып-йыйыу эштәрен уңышлы ғына тамамлап килә. Бөгөнгө көндә ҡыҙыу темп менән икмәк тапшырыу бара.

Шулай шыма ғына һөйләп барғанда НКВД начальнигы көтөлмәгән һорау килтереп ҡыҫтырҙы.

– Һин бында, нимә, күҙ буяп, бюро ағзаларын дөрөҫ информировать итмәйенсә, һүҙ бутҡаһы бешерәһең?

– Мин нимә эшләнелгән – шуны ғына һөйләргә йыйынғанмын.

– Күрҙегеҙме? Ул тик йыйына ғына әле. Һин конкрет һорауға яуап бир: ни өсөн һин ошо көндәрҙә игенде хөкүмәткә тапшырыуҙы туҡтатып, ҡыҙыл ылау ойошторҙоң? Кем һиңә быңдай хоҡуҡ биргән?

Игебаев ҡулындағы блокнотын өҫтәлгә һалды.

– Иптәш Хәлимов, миңә һүҙҙе дауам итергәме, әллә НКВД начальнигының һорауына яуап бирергәме? – Ул секретарға ҡараны.

– Һөйлә, һөйлә! Аҙаҡтан уның һорауына ла яуап бирерһең, – тине ҡыҙыл ҡәләме менән ниҙер яҙғылап ултырған Хәлимов.

Игебаев һүҙен дауам итте:

– «Ҡыҙыл Ялан» буйынса хөкүмәт планы йәмғеһе ун биш мең бот булһа, бөгөнгә шуның ун ике мең бото тапшырылды. Был пландың һикһән процентын тәшкил итә. Иптәш Сталиндың күрһәтмәһе нигеҙендә беҙ яҙғы сәсеү өсөн шул тәкәбеле орлоҡ һалырға тейеш булһаҡ, әлегә уның ярты өлөшөн генә һала алдыҡ. Ә партия ҡарарына бинаэн, хөкүмәткә иген тапшырыу орлоҡ запасын туплау менән бәрәбәр алып барылырға тейеш. Иптәш Арыҫлановҡа минең яуабым шул.

– Ә беҙ октябрҙең һуңғы ун көнлөгөндә тик хөкүмәткә генә тапшырыу өсөн махсус декадник иғлан иткәйнек бит! – Арыҫланов тағы һүҙгә ҡыҫылды.

Былай ҙа сикәһе ҡорошоп торған Игебаев тағы түҙмәне.

– Иптәш секретарь, мин кемгә отчет бирергә тейешмен? – Райком секретары ауыҙ эсенән ниҙер мығырҙаны ла яңынан ҡәләменә тотондо.

Игебаевтың ҡабырғаһы менән ҡуйылған һорауына Хәлимовтың яуап бирмәгәненән ҡанатлана төшкән Арыҫланов дәртләнеп китте.

– Күрҙегеҙме, иптәш секретарь? Игебаев бөтөнләй бәйҙән ысҡынып бара бит! Уның өсөн райком бюроһы ла, уның секретары ла барыбер! – Арыҫланов битенә аптырағанлыҡ сырайы йүгертеп, ике ҡулын йәйҙе лә Хәлимовҡа ҡараны.

Был һүҙҙәр менән ул Хәлимовтың мин-минлегенә тейеп, уны Игебаев менән сәкәләштерергә уйланы. Секретарь ҡулындағы ҡәләмен бер яҡҡа ырғытты.

– Иптәш Игебаев, һин төп мәсьәләнән ситкә китмәй генә һөйлә. – Абдрахманға ул тағы бер эйәк ҡаҡты.

«Күрҙеңме ағаңды? Әгәр быға тиклем минең кем икәнде белмәһәң, хәҙер белеп ҡуй!» – тигән шикелле, Арыҫланов, ултырғысына ҡырын ята биреберәк, тәүҙә Хәлимовҡа, шунан бөтә бюро ағзаларына күҙ йүгертеп сыҡты. Һүҙенән туҡтап өндәшмәй торған Игебаевҡа секретарь:

– Дауам ит, – тине.

– Минең һүҙем бөттө. Тик шуны ғына әйтергә тейешмен: хөкүмәткә икмәк тапшырыу планын беҙҙең колхоз һикһән процентҡа еткергән икән, шул кимәлгә еткәнсе яҡын көндәрҙә беҙ орлоҡ һалырға тейешбеҙ.

– Бына, күрҙегеҙме? Төкөрҙө ул бюроға! – Арыҫланов тағы ла ҡыҫылды.

– Так! Шулай итеп, хөкүмәткә икмәк тапшырыу планын үтәү урынына орлоҡ һалабыҙ, тиһең инде. Шәп, шәп! Бик яҡшы төшөнгәнһең икән һин беҙҙең бюроның һуңғы ҡарарына! – Секретарь өҫтәлгә йәйелә ятып Игебаевҡа ҡараны.

– Эйе, орлоҡ һалабыҙ, – тип ҡабатланы Абдрахман тигеҙ тауыш менән.

– Башта хөкүмәттең планын үтә, шунан игенең ҡалһа – орлоҡҡа тотонорһоң!

– Мин орлоҡ һалыу планын һикһән процентҡа еткерәм дә шунан ҡалғанын бөртөгөнә тиклем хөкүмәткә тапшырасаҡмын, – Игебаев, һыр бирмәй, һаман ныҡышты.

– Беҙ бында нишләп баҙарҙағы кеүек шаулашып ултырабыҙ? Бюро һайын Игебаевты өгөтләп ултырыу туйҙырҙы инде. Оргвывод эшләгеҙ ҙә ҡалғанын беҙгә тапшырығыҙ! – Секретарь прокурорға ҡарап алды. – Минең аппарат бәләкәй, миндә һәр кешегә өгөт-нәсихәт уҡып ултырырға кешеләрем юҡ.

– Ә һеҙ мине ҡапаҡламағыҙ! Һеҙҙең һымаҡ райкомдан ҡоро ҡағыҙ таратып ултырыусыларҙы мин күп күргән бар! – Игебаев та һүҙһеҙ ҡалманы.

Эштең ҡатмарланып барыуын һиҙгән секретарь Игебаевты урынына ултыртырға ла уйлағайны, ләкин ҡыҙып алған Игебаев, туҡал һыйыр һымаҡ, үҙе һөжүмгә күсте.

– Мин, иптәш Хәлимов, һеҙҙең фекерегеҙҙе аңламаным. Орлоҡ туплауҙы туҡтатып, бар булған игенде хөкүмәткә тапшырырғамы? Киләһе йыл да иген сәсергә кәрәк тәһә! Шул уҡ фронтҡа, үҙебеҙгә икмәк кәрәкмәҫ микән ни? Мин булмаһам, икенсе рәйесте тағы бюроғыҙға саҡырып, нишләп иген сәсеү планын үтәмәйһең, тип бәйләнәсәкһегеҙ бит! Игенде икмәһәң, уның икмәге лә булмай. Ә һеҙ бөгөнгө көн менән генә йәшәп ятаһығыҙ. Һеҙгә Өлкә комитетына рапорт ебәрергә, үҙегеҙгә дан ғына кәрәк! – Игебаев бар уйлағанын әйтә һалып, ни булырын ҡәҙимге һында көттө.

Игебаевтың әйткәнен тыңлап, эсендә ҡайнай башлаған асыуын тыя алмай, ҡаҡса битенә ҡыҙыл йүгергән Хәлимовтың да түҙемлеге шартланы һымаҡ. Ул ҡалын быялалы күҙлеге аша аяғын алмашлап өндәшмәй генә баҫып торған Игебаевҡа нәфрәт менән тулы ҡараш атты ла, йоҙроғон төйөп, өҫтәлен ҡаплап ятҡан быялаға һуҡты.

– Етте! Ишеттеңме, етте! Орлоғоң менән баш ҡатырма! – тип ҡысҡырҙы тамам ярһыған секретарь.

– Иптәш Хәлимов, һеҙ Игебаевтың партия линияһына ҡаршы икәнен бөгөн генә белдегеҙме ни? Ул бит бюро һайын беҙгә шулайтып аҡыл өйрәтергә өйрәнгән, – тине район прокуроры Борханшин.

Уның һүҙен НКВД начальнигы Арыҫланов шундуҡ күтәреп алды.

– Был башбаштыҡлыҡҡа беҙ ҡасан сик ҡуябыҙ һуң? – тигән булды ул, секретарға ҡарап.

Хәлимов, башын түбән баҫып бер аҙ ултырғандан һуң, бар ҡатылығын күрһәтергә булды.

– Бына нимә, иптәш Игебаев! Һинең беҙҙең сей елкәгә тейеүең тамам туйҙырҙы. Беҙ башҡаса һинең тәртипһеҙлегеңде түҙеп тора алмайбыҙ. Хәҙер үк ҡайтып китегеҙ! Ҡайҙа Өмөтҡужин? Ниңә унда йәшеренеп ултыраһың? Һеҙгә өс көн ваҡыт – бөтә булған игенде бөртөгөнә тиклем хөкүмәткә тапшыраһығыҙ! Әгәр ебәрелгән комиссия берәй тоҡ булһа ла иген тапһа, икегеҙ ҙә ошонда, – ул өҫтәл мөйөшөнә һуҡ бармағы менән күрһәтеп алды, – партбилетығыҙҙы һалаһығыҙ, ә быны ахыры һеҙгә икегеҙгә лә мәғлүм.

Игебаев менән Өмөтҡужин артынан ишек ябылыу менән, кабинетта ултырып ҡалған бюро ағзалары араһында ығы-зығы ҡупты. Башта Арыҫланов урынынан һикереп торҙо.

– Иптәш Хәлимов! Ни өсөн һеҙ уны буйлатаһығыҙ? Игебаев ошонда тороп беҙгә һабаҡ өйрәтте лә ел-ямғырһыҙ ҡайтып та китте. Быны нисек аңларға?

Уны прокурор ҙа яҡлап сыҡты.

– Беҙ райком бюроһымы, әллә вәғәз һөйләй торған мәсет мөнбәреме? Нишләп һуң Игебаев бөгөн дә бер ниндәй язаһыҙ, шыма ғына ысҡына? – Борханшин елкәләрен йыйырҙы. – Уны еңел генә сығарып ебәргәс, ниңә саҡырып торорға һуң?

Ҡыҫмаҡҡа эләккән секретарь район үҙәгендә урынлашҡан «Яңы юл» колхозы парторгына мөрәжәғәт итте.

– Ә һин, Хадыева, нисек уйлайһың? Хаҡлыҡ кем яғында?

– Хаҡлыҡ Игебаев ағай яғында. Ул дөрөҫтө һөйләй. Сәсеү өсөн орлоҡ туплау ауыл хужалығында мөһим эш булмаһа, уны Үҙәк Комитет икмәк тапшырыу менән бер рәттән ҡуймаҫ ине.

– Йә, йә! Ҡайһылай барығыҙ ҙа законды шәп беләһегеҙ икән!

– Бында беләһе юҡ! Игебаевтың отчетын тыңлағанда, мин үҙ колхозыбыҙ

тураһында уйлап ултырҙым. Ярай әле, ул, яртылаш булһа ла, орлоҡ туплай алған. Ә беҙ киләһе йыл ни сәсергә тейеш? Беҙ икмәктең барыһын тигәндәй хөкүмәткә тапшырҙыҡ, – ул колхоздарында уполномоченный булып һаналған Арыҫлановҡа баҡты.

НКВД начальнигы ултырғысҡа ҡырын ятып, башын артҡа ҡайҡайтты.

– Бөгөнгө ҡатмарлы осорҙа коммунист тигән юғары исемде йөрөтөү уның икмәк әҙерләй белеүе менән бәйле – һорап алаһыңмы, тартып алаһыңмы – уныһы мөһим түгел, иң мөһиме – икмәк әҙерләү, заданиены үтәү. Һуғыш шуны талап итә. Икмәк планын үтәмәгән коммунистарҙы еңеүгә аяҡ салыусы дошман итеп хисапларға кәрәк, – ул, һуңғы һүҙенә нығыраҡ баҫым яһап, турайып ултырҙы.

– Һин, иптәш Арыҫланов, бөтә кешегә контр мөһөрө йәбештерергә ашыҡма әле, – Хәлимов Хадыева ҡырында ултырған, бюроға яңы ғына ағза булып һайланған ВЛКСМ-дың район комитеты секретары Нурбаеваға һораулы ҡараны. – Һин дә Хадыева апайың ише уйлайһыңмы?

Комсомол башлығы алһыуланған битен Хәлимов яғына борҙо ла баҙнатһыҙ ғына:

– Мин дә Хадыева апай һымаҡ уйлайым, – тип яуапланы.

Үҙенең һул яғынан ултырған район башҡарма комитеты рәйесе Шәриповҡа Хәлимов бер ниндәй һорау ҙа бирмәне. «Һораһаң да, һорамаһаң да, ул, билдәле, һәр саҡ Игебаев яғын ҡайыра... Етмәһә, ул Игебаевтың ниндәйҙер тал сыбыҡтай ҡәрҙәше лә шикелле». Шәрипов, бер ни әйтмәһә лә, ысынлап та Игебаевтың фекере яҡлы ине.

Бер аҙ тынып ултырғандан һуң, ҡонон алмай ҡалған Арыҫланов тағы һүҙ башланы:

– Нишләп һуң беҙ Игебаевты бер ниндәй язаһыҙ ҡалдырҙыҡ әле? – Ул Хәлимовҡа ҡараны.

Секретарь ике ҡулы менән сикәһен ыуып алды.

– Нишләп, нишләп? Бөгөнгө көндә беҙҙең район хөкүмәткә икмәк тапшырыу планын нисә процентҡа үтәгәнен беләһегеҙме? – Хәлимов бюро ағзаларын ҡарашы менән урап сыҡты.

Өндәшеүсе булмағас, Шәрипов урынынан ҡуҙғала бирҙе.

– Район хөкүмәткә икмәк тапшырыу буйынса заданиены алтмыш бер ярым процентҡа үтәгән.

– Ишеттегеҙме? Ә «Ҡыҙыл Илан» һикһән процентан артыҡ тапшырған! Аңланығыҙмы хәҙер? – тип һораны Хәлимов.

«Шулай булғас, колхоз етәкселәрен ни өсөн бюроға саҡырып, ваҡыт уҙҙырырға кәрәк булды?» – Шәрипов тел осондағы һорауын ысҡындырырға ла уйлағайны, ләкин күп ел-ямғырҙарҙы башынан кисергән рәйес үҙен тыйып ҡалды. Ә Хәлимовтың үҙенең ҡыҙыулығы менән килеп сыҡҡан был хәлдә ғәйебен асыҡтан-асыҡ танырға батырсылығы етмәне.

Оҙаҡҡа һуҙылған тынлыҡты тағы НКВД начальнигы боҙҙо.

– Ул яҡтан булмаһа, Игебаевтың биографияһында уны ултыртырлыҡ ҡара таптар етерлек, – тине Арыҫланов. – Игебаев партияға ингәндә үҙенең Колчакта хеҙмәт итеүен йәшергән.

Был яңылыҡ бөтә ултырған кешеләрҙең баштарына һуҡҡан кеүек тәьҫир итте. Иң башта Хәлимов телгә килде.

– Колчак артынан Себер китмәгән дәһә! Унан ҡасып, ҡыҙылдарға ҡушылған. Граждандар һуғышын Врангель фронтында тамамлап ауылына әйләнеп ҡайтҡан кеше. Уның был яғы нык, заманында тикшерҙеләр бит инде. Беҙҙең тирәлә Колчак армияһына көсләп мобилизацияланып, һуңынан ҡыҙылдарға ҡушылғандар бер

Игебаев ҡына түгел. Улар байтаҡ. Шуға күрә Игебаевҡа был ғәйепте тағыу дөрөҫ түгел.

– Һеҙ, иптәш секретарь, үҙ өҫтөгөҙгә артығын алаһығыҙ түгелме? – Арыҫланов һөжүмгә күсте.

– Күпме йөкмәтелгән, шуны иңемдә күтәрәм. Миңә артығы хәжәт түгел. – Хәлимов та бирешмәне.

– Ярай, үҙегеҙ ҡарағыҙ! – Был иҫкәртеү менән Арыҫланов: «Ул яҡҡа китһә, һинең дә бер туған ағайың ҡулына ҡорал алып, ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышып йөрөгән» тигән ишара яһаны.

Һүҙҙе тәрәнгә ебәрмәҫкә тырышҡан Хәлимов ярҙамсыһына өндәште:

– Тағы унда кемдәр бар?

Тегенеһе, хәрби кешеләр һымаҡ урынынан һикереп тороп, галифеларын төҙәтеп, үксәләрен бер-береһенә шаҡып алды.

– Тағы биш кеше сират көтә!

– Бар, сығып шуларға әйт: көтмәһендәр, ҡайтып эш менән булһындар, – Хәлимов сәғәтенә ҡарап алды. – Иптәштәр, яңынан ун биш минуттан Өлкә комитетының беренсе секретары шылтыратырға тейеш. Бик етди һөйләшеү буласаҡ. Бюро ябыҡ.

НКВД начальнигы Арыҫланов, юҡ йомошто бар итеп, кабинетта тороп ҡалырға тырышып та ҡарағайны, ләкин секретарь, уға ҡарамайынса ғына:

– Иптәш Арыҫланов, миңә әҙерләнергә кәрәк. Башҡа ваҡытта һөйләшербеҙ, – тине.

Арыҫланов райком секретарының бөгөнгө ҡыйыулығына аптырап, ҡулбаштарын ҡалҡытып, теләр-теләмәҫ кенә кабинеттан сығып китергә мәжбүр булды. Яңғыҙ ҡалғас, Хәлимов бер аҙ уйланып ултырҙы ла кабинет иҙәненә түшәлгән йәшел балаҫ буйлап ҡулдарын артҡа ҡуйып, үрле-түбәнле йөрөй башланы. Әлбиттә, уға Өлкә комитетынан бер кем дә шылтыратманы.

«Нимәгә шул ҡәҙәре туҙынып киттем әле һуң? Быялаға һуғып кемде ҡурҡыта алдым? Төпкөл ауылдан килгән Игебаевҡа ла йүнле һабаҡ биреп булманы. Ниндәй кеше һуң был Игебаев, ниңә мин шунан һәр саҡ дерелдәй башлайым икән? Ғүмер буйы минең юлымда һәр саҡ арҡыры торған шул бәндәне лә алып ырғыта алманым. Ысынлап та, ҡасан, ҡайҙа ғына был Игебаевты осратмаһын, шул наҙан колхоз рәйесе һәр саҡ үҙенең тәрбиәһеҙлеге, тиҫкәрелеге менән мине сигенергә мәжбүр итә һуң? Быйыл яҙ ҡайһылай йәтеш килеп сыҡҡайны, Игебаев менән бөтөнләй хисаплашып ҡуйырға тулы нигеҙ бар ине, уның ниңәлер тағы йөрәге етмәне. Анау капитан менән дә алмаштырып булманы, йүнһеҙ кеше булып сыҡты, бар ауыл ҡарттары Игебаевты кире ҡуйыуын һорап йонсотоп бөттөләр. Нимәлә һуң Игебаевтың көсө, уның терәге? Ундайҙарҙан ҡотолоп, янымда үҙ кешеләремде генә йыйып, рәхәтләнеп, тыныс ҡына йәшәп булмай инеме ни? Һайт тигәнгә тайт тип торған кешеләр бөткәнме ни? Нишләп шул Игебаевты ла бишкә бөгөргә минең хәлемдән килмәй икән?...»

Бына ошондай һорауҙарға яуап эҙләне секретарь Хәлимов кабинетта бер үҙе ҡалып. Билдәле, Игебаевты эштән алып, фронтҡа оҙатырға секретарҙың хәленән килә. Быны өсөн сәбәптәре лә табылып тора. Уның үҙһүҙлелеге, тиҫкәрелеге күптән инде Хәлимовтың маҙаһына тейә, секретарҙың мин-минлеге, сиктән тыш үҙен яратыуы ла тап шуны теләй, ләкин булдыра алмай. Кем белә, Игебаевтар ише етәкселәр ошондай ауыр ваҡытта бигерәк тә кәрәктер, бәлки? Сиктән тыш ҡыйын заманда төпкә егелеп, арыу-талыуҙы белмәгән, һуғыш йөгөн тартҡан кешеләрһеҙ нисек еңеп сығаһың? Гел ялағайҙарға ғына таянып булмай шул. Шуға күрә күңеле Игебаевты юлдан алып ташларға ҡушһа ла, ниңәлер ҡулы бармай. Секретарь үҙенең хәтер йомғағын ашыҡмай ғына тағата.

Бына инде ике тиҫтә йыл бит инде ошо Игебаев уға тыныс йәшәргә бирмәй, теңкәгә тейә. Ысынлап та, уны бер мең туғыҙ йөҙ егерме икенсе йылдан бирле белә икән. Шулай хәтирәләргә бирелеп ултырған саҡта, ҡапыл телефон шылтыраны. Хәлимовтың төҫө үҙгәреп китте, һәм ул ҡурҡа-ҡурҡа трубкаға йәбеште. Унан ҡатынының тауышы ишетелгәс, секретарь бер аҙ тынысланды.

– Һөйлә хәбәреңде! Нимә булған?

– Бөгөн шаршамбы икәнен оноттоңмо? Марданов мунсаға көтә бит!

– Һеҙҙе ҡунаҡҡа ғына саҡыр, йәйәүләп Мәскәүгә сығырға ла әҙерһегеҙ! – Хәлимов кеткелдәп көлөп алды.

Бөгөнгө ауыр һөйләшеүҙән һуң уның үҙенең дә ҡайҙалыр китеп, дуҫ-иш араһында кәйеф-сафа ҡороп, башты ҡайнатҡан көндәлек хәсрәттәрҙән арынып алғыһы килде.

***

Игебаев менән Өмөтҡужин ашыҡмай ғына кире юлға сыҡты. Атты үҙ яйына һалып, күпселек юлды һәр береһе уйҙарына бирелеп барҙы. Өмөтҡужин бюрола Игебаевҡа артыҡ ярҙам-терәк күрһәтә алмағанына бер аҙ көйөнә лә кеүек, шуға күрә уның алдында уңайһыҙлыҡ кисерә ине. Игебаев иһә уйҙары менән тулыһынса колхоз эштәрендә ине, райком бюроһында булған хәлдәргә иҫе китмәне уның, сөнки бындайҙы ғына уның күп күргәне бар. Ҡыш яҡынлашып килә. Байтаҡ игенде һуғып алырға ҡалған бит әле. Хөкүмәткә икмәк тапшырыу планы ла, орлоҡ һалыу ҙа тулыһынса үтәлмәгән. Халыҡ йонсоп бөткән, ас, яланғас булһа ла, тырышып ята. Һуғыш тағы күпме барыр? Сталинградтың үҙендә һуғыштар ҡаты бит. Һуғыштың икенсе ҡышын түҙеп булырмы? Ҡарттар фараз итеүенсә, ҡыш бик һыуыҡ килергә тейеш. Ҡышҡылыҡҡа бесәнде артыҡ күп әҙерләп булманы, әгәр ҡар иртә төшһә, бесәндең етмәүе лә мөмкин.

Ауылға яҡынлашҡанды һиҙгән ат та йылдамыраҡ юртты. Көн кискә ауышҡайны инде. Салғыя тауы эргәһенән барғанда Игебаев атты туҡтатып, ергә ырғып төштө лә тиҙ аҙымдар менән үргә табан йүнәлде. Өмөтҡужин да, бер аҙ аптырап, уның артынан атланы. Салғыя башынан Ялан ауылы ус төбөндәгеләй күренә ине.

Ауылдың аръяҡ осонда, Ҡыҙыл йылғаһын үҫкән терәлеп тигәндәй, ваҡ ағастар араһында ауыл зыяраты күренә. Унда Абдрахмандың ата-олатайҙары ята. Әйткәндәй, һуңғы арала зыяратҡа инеп сығырға ла ваҡыт юҡ. Алыҫта, туҙан күтәреп, ауыл көтөүе ҡайтып килә. Ауылдың уртаһында урынлашҡан ырҙын табағында колхозсыларҙың молотилка эргәһендә йүгерешеп йөрөгәнен яҡшы күреп була.

– Бына, иптәш парторг, беҙҙең «алғы» һыҙыҡ, «икенсе» фронтыбыҙ тап ошо ауыл аша үтә. Нисек, Мәхмүт ҡусты, бирешмәҫбеҙме? – Игебаев Өмөтҡужинға ҡарап алды. – Беҙгә, һуғыштағы һалдаттар һымаҡ, бер аҙым да сигенергә ярамай! Сигенмәбеҙ ҙә!

Тап шул саҡ, уның һүҙҙәрен ҡеүәтләгәндәй, Ирәндек һыртына төшөп барған ҡояш, иртәгә яҡшы көн килерен белдереп, нурҙары менән бар тирә-яҡты алтынлатып алды.

**Баҫмаға Рауил ӨМӨТБАЕВ әҙерләне.**

## «Ағиҙел»гә – 90 йыл

# Нәфис әҙәбиәт:
## хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы

Илебеҙҙең бөгөнгө хәленә, иртәгәһенә битараф булмағандар күрә, ишетә, белә йөрөй: йәмғиәтебеҙ ауырый, йәмәғәтселек ҡайнай, температураһы белгестәр тарафынан үлсәнә, төрлөсә фараздар ителә, сәйәсмәндәргә кәңәштәр бирелә, теләктәр әйтелә... Әҙәм ғүмере сүпкә лә тормаған, рухи ҡиммәттәр баһаһын юғалтҡан, йәшәйештең матди яғы ғына бизмәнгә һалынған алғыр заманға, йолҡҡослоҡ дәүеренә инә барабыҙ. Бер ниндәй тикшеренеүҙәрһеҙ ҙә шуныһы асыҡ: күпселектең кисәгеләй ҙә, бөгөнгөләй ҙә йәшәгеһе килмәй.

Хәл-әхүәлебеҙ ысынбарлыҡтың художестволы сағылышы булған (булырға тейешле!) һүҙ сәнғәтендә ни дәрәжәлә күҙаллана һуң? «Ваҡиғалар ваҡыттарҙан киң...» Ошо юҫыҡта әҙәбиәт өлгөрлөк күрһәтә, йылдам хәрәкәттәге тормошҡа эйәрә аламы? Уйлай китһәң, эйәреү генә лә етмәй бит! Киреһенсә, әҙип, үҙ миссияһына ярашлы, йәмәғәтселекте изгелек донъяһына әйҙәп барырға бурыслы... Йәнә лә шуныһы: юлсыға ғына түгел, әйҙәүсегә лә ваҡыты-ваҡыты менән үтелгәнде барлап, алдағыһын самалап алыу ихтыяжы бар. Бынығын инде төп әҙәби-нәфис баҫма булған «Ағиҙел»һеҙ күҙаллау мөмкин түгел. Уңыш-ҡыуаныстарыбыҙ ҙа, юғалтыу-табыштарыбыҙ ҙа уның менән бәйле. Төрлө йүнәлештәге эҙләнеүҙәр ҙә бында моронлай.

Абруйлы баҫмабыҙ киләһе йылдың март айында үҙенең 90 йыллығын билдәләйәсәк. Редакция был ваҡиға айҡанлы «Нәфис әҙәбиәт: хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы» тигән баш аҫтында әңгәмәләр серияһы ойоштора.

*Әҙәбиәт торошо, әҙәбиәт кимәле нимә менән билдәләнә? Нимәгә туранан-тура бәйле? Әҙәбиәт тарихын яҙыу, әҙәбиәт ғилемен үҫтереү, көндәлек әҙәби тәнҡит ни дәрәжәлә актуаль? Алдаҡҡа ҡорола барған донъяла, ысын ҡиммәттәр менән ялғандары урын алышҡан бер заманда, саф тойғоларҙы яһалмалыҡ ҡыҫырыҡлап сығарғанда әҙәбиәт ни эшләй ала? Ыңғай һөҙөмтәләр бармы? Булһа, уларҙы нисегерәк билдәләргә? Үлсәмдәр нимәнән ғибәрәт?*

*Әҙәбиәт теге йәки был идеяға битараф була аламы? Ниндәйҙер идеяға хеҙмәт итеү бер яҡлылыҡҡа алып килмәйме?*

*Әҙәбиәт менән сәйәсәт, әҙәбиәт менән фәлсәфә, әҙәбиәт менән халыҡ ниндәй мөнәсәбәттә? Баҙар иҡтисады шарттарында әҙипкә хөкүмәт тарафынан ярҙамға өмөтләнергә кәрәкме? Бындай ярҙам ижад иреклеген сикләмәйме?*

*Бөгөнгө ыңғай герой... Кем ул? Нимәгә табына, нимәне инҡар итә? Үҙенә ылыҡтырырлыҡ сифаттарға эйәме?*

*Владимир Путин шундай тәҡдим индерҙе: «Рәсәй уҡыусыһы мотлаҡ белергә тейешле 100 китап исемлеген булдырыр кәрәк». Был дәүләт кимәлендәге иң мөһим мәсьәлә булараҡ ҡарала. Тәү ситатта, әлбиттә, һүҙ ваҡыт һынауын үткән әҙиптәр тураһында бара. Әммә, бөгөнгөләренә бәйле, һис шикһеҙ конъюнктура баш ҡалҡытасаҡ. Һайлап алыуҙа, тимәк, икеләнергә-шикләнергә*

*урынды мөмкин тиклем әҙ ҡалдырған үлсәмдәр кәрәктер. Был исемлеккә индереү өсөн башҡорт әҙиптәренә 10 квота бирелә, тиһәләр, кемдәрҙе атап булыр ине икән?*

*Тәрбиә... Шәхес тәрбиәләү... Милли тәрбиә... Дини тәрбиә... Ижад кешеһен маҡсатҡа ярашлы тәрбиәләү мөмкинме? Әҙәби тәрбиә тигән һүҙбәйләнеш сәйер яңғырамаймы?*

*Бар профессиональ әҙиптәр... Бар Яҙыусылар берлеге ағзаһы булараҡ ҡына, таныҡлыҡ йөрөткәнгә генә яҙыусы иҫәпләнеүселәр... Бар хаҡлы ялға сыҡҡас ҡына яҙышыу өсөн мөмкинлек тапҡан кешеләр. Уларҙың ижад емештәрен бер үк талаптарҙан сығып баһалау урынлымы? Ә айырым-айырым критерийҙар аймылыш-буталышҡа, йүнәлештәрҙе, ҡиблаларҙы юғалтыуға килтермәйме?*

*Тарих. Тарихилыҡ. Тарихи аң. Был төшөнсәләргә әҙип күҙлегенән билдәләмә биреп ҡарағанда... Үткәнебеҙ бөгөнгөгә нисегерәк хеҙмәт итә ала? Бөгөнгөгә хеҙмәт иттереү тарихты күсереп яҙыуға, уны боҙоп күрһәтеүгә алып килмәйме? Тарихи прозала телгә алырҙай, фекер алышырҙай әҫәрҙәр яҙылды. Уларға матбуғат биттәре, ғилми конференциялар, йыйынтыҡтар аша ла баһа бирелде. Ғәли Ибраһимовтың «Кинйә»һе был йүнәлештә кимәлде билдәләй алырҙай әҫәр тип ҡараһаҡ, яуланған бейеклекте нығытып, алдағы үрҙәргә ынтылғандарҙан кемде атап булыр ине икән?*

Хөрмәтле ҡәләмдәштәр!

Һәммәгеҙҙе лә алда ҡараласаҡ проблемаларға бәйле фекер алышырға, әңгәмәләрҙә туранан-тура ҡатнашырға саҡырабыҙ.

«Ағиҙел» – әҙәбиәтебеҙ көҙгөһө. Булғанын күрһәтәйек. Булмағаны, булырға тейешлеһе тураһында уйланайыҡ. Айыҡ һығымталар яһайыҡ. Әңгәмәләр зарланыу, илау-һыҡтау, йә булмаһа, кемебеҙҙелер кәмһетеү, юҡҡа сығарыу, йә, киреһенсә, күккә сөйөү өсөн түгел, ә, тәү сиратта, хәлебеҙҙе тәғәйен асыҡлау, зирәк аҡыл менән баһалау, эшләргә мөмкин булғанынан да бигерәк, мотлаҡ эшләнергә тейешлеһен билдәләү өсөн кәрәк. Милләтебеҙҙең киләсәге хаҡына дөйөм әҙәбиәтебеҙ мәнфәғәттәрен итәктән йөрәккә алайыҡ. Халҡыбыҙҙың рухи һауығыуы, артабан нығыныуы беҙҙән, әҙиптәрҙән, башлана, тип иманайыҡ, ҡәләмдәштәр!

**Редакция.**

## Юғары рухиәт яҡтылығында

Тәүге ҡунаҡтарыбыҙ – Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы **Ноғман МУСИН** менән билдәле драматург **Наил ҒӘЙЕТБАЙ.**

**Ноғман МУСИН:**

«Ағиҙел» журналы редакцияһынан «Нәфис әҙәбиәт: хыял, ысынбарлыҡ, тормош талабы» тигән темаға үҙ фекерҙәремде һорағастар, тәүҙә был «тапалған» өлкәгә бәйле яуап биреү бик еңел һымаҡ тойолғайны. Хатта журналдың 90 йыллыҡ тарихы, унда баҫылған төрлө жанрҙарҙағы әҫәрҙәр үҙҙәре үк был һорауға яуап бирә һымаҡ. Ә ныҡлабыраҡ уйлай башлағас...

Минең был әҙәби журналда хеҙмәттәшлек итә башлауыма 60 йыл үтеп киткән (һалдат хеҙмәтендә саҡта яҙып ебәргән «Май» исемле шиғырым «Әҙәби Башҡортостан»дың 1952 йылғы 5-се һанында баҫылғайны). Кемдәрҙең һәм ниндәй генә әҫәрҙәре донъя күрмәгән ул осорҙа! Хәҙер тик ҡәһәрләп кенә телгә алынған Сталин замандары, унан – кукурузсы Хрущев, һунарсы һәм афған һуғышын башлаусы Брежнев, эскелеккә ҡаршы көрәшеүсе Горбачев һәм, киреһенсә,

эскелеккә киң юл асыусы, илдең Совет осоронда ямандан башҡаны күрмәгән Ельцин... Хәйер, коммунистар партияһы сафында абруй яулап, юғары вазифаларға күтәрелеүе, аҙаҡ килеп, үҙе ашаған табаҡҡа төкөргән шикелле, шул осорҙағы тормошто бөтөнләйгә инҡар итеүе менән ул 90-сы йылдарҙағы хәлваҡиғаларҙы сағылдырыусы әҙәби әҫәр өсөн иң типик образ була алыр ине. Хәҙер уның кеүек үткәнен ҡәһәрләп абруй ҡаҙанырға тырышыусы әүәлге коммунист, комсомолецтар ишәйеп китте, хатта ҡайһы берәүҙәре мәсет манараһына менеп аҙан әйтергә, сиркәүҙәргә инеп суҡынырға тотондо. Ил тормошондағы ошо ҡатмарлы күренештәрҙе сағыу образдарҙа дөйөмләштергән, киләсәк быуындар ҙа фәһем алырлыҡ әҫәрҙәр беҙҙә әлегә юҡ дәрәжәһендә. Үткәндәргә тәнҡит күҙлегенән ҡарарға тырышыу, хәҙерге тормошҡа ризаһыҙлыҡ белдереү кеүек ҡаға-һуға яҙылған әҫәрҙәр әҙәбиәтебеҙ алдына заман ҡуйған талаптарға тулы яуап бирә алмай.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Тап ана шул «тапалған» тема, тапалған темаларҙы яңыса аса алыусы әҙәбиәт, талантлы әҙәбиәт хаҡында «тапалып ҡалмаҫлыҡ», фекер фекерҙе үҫтерә тигән ҡараштан сығып эш иткәндә, әҙәбиәт майҙанына (ә бөгөн, бәлки, «әҙәбиәт баҙары»на тип әйтеү ҙә урынлылыр) сығарылған «тауар»ҙы уңын уңға, һулын һулға һала алыр инек. Әҫәрҙәр яҙыла, китаптар, йыш булмаһа ла, баҫыла, ә бына уларға тәғәйен генә баһа (хөкүмәт яғынан – тейешле гонорар, әҙәби тәнҡитселәр тарафынан – объектив фекер) ҡуйыла, тип әйтеүе ҡыйын.

Тәү ҡарамаҡҡа ысынлап та «ай аҫтында бер ни ҙә яңы түгел»: ниндәйҙер кимәлдә барыһы ла ҡабатлана һымаҡ. Әммә был ҡабатланыш миллиондарса яҙмыштарҙа һынылып, мәңгелек үҫеш-үҙгәрештәге донъяла үҙгәлекле сағылыш таба. Бер генә яҙмыш та икенсе берәүҙекен тулыһынса ҡабатлай алмай. Бына шунан һуң әйт инде: тапалған тема! Мөхәббәтте, һөйөүҙе «һәр бер йөрәк яңырта» (Һаҙый Таҡташ) алған кеүек, теләһә ниндәй теманы ла әҙип йә иһә әҙәби тәнҡитсе үҙенсә «яңыртасаҡ». Һәләте булһа!

**Ноғман МУСИН:**

Әлбиттә, шулай. Әммә мин, әҙәбиәт йәмғиәт тормошонда була торған һәр бер үҙгәрешкә яраҡлашырға тейеш, тигән фекер әйтергә йыйынмайым. Художестволы ижадтың бер ваҡытта ла үҙгәрмәй торған ҡаҡшамаҫ инанысы – идеологик таянысы бар: ул – халыҡ тормошон бөтә тулылығында дөрөҫ сағылдырыу һәм ниндәй генә сетерекле шарттарҙа ла үҙ халҡына рух бөтөнлөгөн һаҡлап ҡалырға ярҙам итеү. Әҫәрҙең бөгөнгө ыңғай геройы ла, бынан бер нисә быуат элек, хатта пәйғәмбәребеҙ заманында тыуҙырылған образдар шикелле үк, халҡыбыҙҙың яҡты киләсәккә ынтылыуын иң яҡты ҡиммәттәргә нигеҙләнеп һынландырылһын ине.

«Заманға яраҡлашыу» тигәндән, әгәр әйтергә мөмкин булһа, бындай «гонаһ» үҙемдә лә бар кеүек. Мәҫәлән, тәбиғәткә вәхшиҙәрсә ҡараш «Мәңгелек урман» романын, ҡайһы бер повесть һәм хикәйәләрҙе яҙырға этәрҙе. Бер уйлаһаң, үҙебеҙгә ғүмер биргән, йәшәткән тәбиғәтте яҡлау, шул фонда әҙәм балаларының да тормош проблемаларын күтәреү мәңгелек тема һымаҡ, икенсе яҡтан...

Ә бына «Һуңғы солоҡ», «Шунда ята батыр һөйәге» тигән романдар заман тыуҙырған проблемаларҙан сығып, билдәле маҡсат менән яҙылды. Туҡһанынсы йылдарҙағы ваҡиғалар ил яҙмышы, халыҡ яҙмышы тураһында тағы ла ныҡлабыраҡ уйланырға мәжбүр итте, вайымһыҙлыҡҡа бирелә, һәлкәүләнә

башлаған милләттәштәрем күңелендә ирек, азатлыҡ өсөн көрәш дәрте ҡабыҙыу теләген уятты. Мәҫәлән, солоҡ – башҡорт өсөн ябай бер ҡарағай түгел, урман күрке, ер ҡото, рух ныҡлығын һаҡлай торған изге йән. Тормошта тик үҙ мәнфәғәттәрен генә күҙәтеп, хайуани маҡсаттар менән йәшәүселәр, халыҡтың рухи ярлылыҡҡа төшөүенән, намыҫ тигән бөйөк төшөнсәнең юғала башлауынан файҙаланып, башҡорттоң ошо мәңгелек символына балта саба. Бындай яуыҙлыҡты туҡтатыу өсөн ҡоро теләк кенә етмәй. Бындай хәлдә атай-бабайҙарыбыҙ ил өҫтөнә килгән афәткә ҡаршы яуға күтәрелгән. Һәм мин быға миҫал итеп башҡорт халҡының ун һигеҙенсе быуат башында Алдар батыр етәкселегендә үлемесле көрәшкә күтәрелеүен һүрәтләүҙе маҡсат итеп ҡуйҙым. Өлгө алһындар ата-бабаларынан! Ижад кешеһенә билдәле тарихи шарттарҙа үҙ алдына аныҡ маҡсат ҡуйып эш итеү ҙә фарыздыр. Йәғни яҙыусы ниндәйҙер идеяға хеҙмәт итеүҙе түгел, ниндәй генә ижтимағи ҡоролош осоронда йәшәмәһен, халыҡ, ил яҙмышын күҙ уңында тотоп яҙырға тейеш.

**Наил ҒӘЙЕТБАЙ:**

Беҙҙә хәҙер «Рәсәйҙең идеологияһы юҡ» тип әйтергә яраталар. Был – дошмандар һүҙе. Уның маҡсаты – халыҡты аптыратыу, идеологияһыҙ ҡалдырырға маташыу. Ә идеология бар. Һәр илдең, һәр замандың идеологияһы бер: ул – кешеләрҙе изгелеккә өндәү һәм үҙ иленде, республиканды, ҡаланды, ауылынды, атай йортон яратыу, йәғни патриотизм тәрбиәләү. Шуға күрә яҙыусы һәр ваҡыт үҙ әҫәрҙәрендә ошо ике изге тойғоно данларға, пропагандаларға тейеш.

Төптән уйлаһаң, идеяһыҙ әҫәр булмай. Мин үҙем, һәр хәлдә, иң алда идея табам. Нимәнән барлыҡҡа килә идея? Тормошта күргән ваҡиға, типик хәлдәр ҡайһылыр бер осраҡта: «Былай булырға тейеш түгел бит! Был ни хәл ул?!» – тип ҡысҡырырға мәжбүр итә. Ана шул ҡысҡырыу идеяға әйләнә лә инде. Яҙыусының маҡсаты – уҡыусыны, тамашасыны әҫәр аҙағында ана шулай тип ҡысҡыртыу йә иһә үртәндереү. Мин комедия яҙһам да, тамашасы ике сәғәт буйы көлһөн дә, театрҙан ҡайтып барғанда, «Бәй, беҙ көлөүен көлдөк тә ул, ә пьеса бик ҙур проблеманы күтәрә, уны нисек тә хәл итергә кәрәк бит!» – тип уйланһын өсөн яҙам. Мәҫәлән, Өфө «Нур» дәүләт татар театрында, Стәрлетамаҡта һәм башҡа ҡалаларҙа барған «Иренде миңә һат» тигән комедиям бик көлкө, әммә ул бөгөнгө йәштәрҙең эшһеҙ, аҡсаһыҙ, фатирһыҙ ҡалып, аянысلы хәлгә эләгеүе хаҡында уйландырыу өсөн яҙылған.

Идея һис тә бер яҡлылыҡҡа килтермәй. Сөнки шул уҡ «изгелек һәм патриотизм» темаһына меңләгән әҫәр яҙылған һәм тағы уның меңләгән варианты яҙыласаҡ.

**Ноғман МУСИН:**

Үрҙә килтерелгән һүҙҙәремде мин ҡәләмдәштәргә, бигерәк тә йәш әҙиптәргә һабаҡ биреү, уларҙы нисегерәк эшләргә өйрәтеү маҡсаты менән яҙмайым. Былай ҙа бит һуңғы осорҙа башлап яҙыусыларҙы, йәш әҙиптәрҙе тәрбиәләүгә, уларға әҙәбиәткә килеү юлдарын өйрәтеүгә уғата күп көс түгергә тотондоҡ. Хатта был эш мәктәптән – кескәй балаларҙан уҡ башлана. Ниндәй ҙә булһа яҙыусы ҡасандыр үҙе уҡыған ауылға, районға бара ла әҙәби ижадтың «а» хәрефен дә аңламаған балаларҙы шиғыр йә хикәйә яҙырға өйрәтә, яҡшыраҡ «әҫәрҙәргә» ярыш ойоштора, хатта үҙ кеҫәһенән премиялар тапшыра. Бындай үҙешмәкәрлек балаларҙы әҙәби ижадты, сүрәкәй һуҡҡандағы кеүек, еңел эш тип ҡарауға килтерә. Хәҙерге йәш яҙыусыларҙың йылдар үткәс тә еңел-елпе юлдар теҙеүҙән ҡотола алмауының сәбәбе шунда түгелме икән?

Тәүге уңышлы шиғыр йәки хикәйә ижад итеүселәргә ярҙам ойоштороуға ла минең үҙ ҡарашым бар. Йәш кеше әҙәбиәт майҙанына үҙ ҡарашы, уны үҙенсәрәк тасуирлай алыу һәләте менән (бындай орлоҡтар уға тыумыштан бирелә) килеп инергә тейеш. Ә тәжрибәле әҙиптәр уға ошо һәләтен үҫтерергә берәмләп шәхсән ярҙам итһен. Таланты булған кешегә оҙон-оҙаҡ лекциялар уҡыу кәрәкмәй, тәжрибәле әҙиптең уның менән ихлас күңелдән бер тапҡыр һөйләшеүе лә етә. Юғиһә бит хәҙер башлап яҙыусыларҙы тәрбиәләү өсөн Стәрлетамаҡта, Бәләбәйҙә, Нефтекамала йылы оялар булдырылған. Ана шуларҙа йыл да тиерлек бер өйөр башлап яҙыусыларҙы йыйып алалар ҙа Өфөнән барған Яҙыусылар союзы ағзалары тотоналар уларҙы өйрәтергә, шиғри бәйгеләр ойоштороръға. Һәм бына ошо «әҙәби инкубатор»ҙа һабаҡ алған йәштәрҙән, заман инкубаторынан сыҡҡан себештәр кеүек, бер-береһенә бик тә оҡшаған «әҙип-бәпкәләр» пәйҙә була. Ә бит ысын талант орлоғо булған кеше һәпестүкләп тәрбиәләүгә мохтаж түгел. Яҙыусыларҙы һан яғынан арттырыу үҙмаҡсат итеп ҡуйылмаһын, алмашҡа талантлы йәштәр килһен.

Әлбиттә, бының өсөн Яҙыусылар союзы етәкселегенә лә, авторға ла, уның әҫәренең художестволы кимәленә лә бәйләнешһеҙ ҡайһы бер шарттар булыуы мөһим. Иң беренсе – яҙған әҫәрең донъя күрергә тейеш. Бының өсөн, Аллаға шөкөр, тип әйтәйек, бөгөнгө көндә һәр төрлө әҙәби журналдарыбыҙ етәрлек. Әммә әҫәреңде китап итеп сығарыу мәсьәләһенә барып төртөлһәң, йырып сыҡҡыһыҙ ҡаршылыҡтарға осрайһың. «Китап» нәшриәтенең мөмкинлектәре йылдан-йылға ҡыҫыла. Аҙым һайын, республикабыҙ бай, тип маҡтанабыҙ. Ниңә әле халҡыбыҙҙы рухи яҡтан байыҡтырыусы, йәшәү дәрте өҫтәүсе әҙәбиәт өсөн тейешле күләмдә аҡса бүленмәй? Хатта бит китап булып сыҡҡан әҫәрең өсөн дә Совет осорондағына ҡарағанда өс-дүрт тапҡырға кәмерәк гонорар түләнә. Бына нисәмә йылдар инде яҙыусының эш хаҡы (гонорары), әгәр китабың өс-дүрт йылға бер сығыуын күҙ уңында тотһаң, иң түбән булып ҡала килә. Бүтән һөнәр кешеләренең эш хаҡы йыл да тиерлек арта, ә ижад кешеләренеке – юҡ. Был күренеш, һис шикһеҙ, дөйөм әҙәбиәт үҫешенә лә, уның художество кимәленә лә кире йоғонто яһай.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Эҫе мәлендә яҙғандарыңды донъяға сығара алыу – әҙип өсөн проблемаларҙың да проблемаһы инде ул бөгөн. Рәми ағайҙың: «Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән, дөрөҫ һүҙең әгәр һуңлаһа», – тиеүе менән нисек килешмәйһең?! «Китап» нәшриәтендә хәҙер иһә «Биш йылға бер китап» тигән яҙылмаған ҡанун индерелде. Дөрөҫ, бында ла фәҡирлек үҙен һиҙҙерә: нәшриәт тә бүленгән финанс менән генә мөрхәтһенергә мәжбүр. Әммә... «5-кә 1» схемаһын бит йылғырҙар бик оҫта урап үтә. Юлын табалар: исем-шәрифтәребеҙ бар тип, үҙҙәренең 70—80-се йылдарҙағы әҫәрҙәрен «Һайланма» (!) итеп тә, күп томлыҡтарҙа ла сығаралар. Һөҙөмтәлә – башлыса намыҫ һаҡлағандар ситтә тороп ҡала. Унан килеп, был күренеш әҙәбиәт үҫешенә лә етди тотҡарлыҡ яһай, сөнки, күбеһенсә, китапханаларға, мәктәптәргә хөкүмәт иҫәбенән таратыласаҡ, ә магазин кәштәләрендә, келәттәрҙә саң йыйып ятасаҡ иҫке әҫәрҙәр баҫылған яңы китаптар сыға, бөгөн яҙылғандарҙың иң кәрәклеһе иһә үҙ уҡыусыһына биш йылдан һуң ғына барып етәсәк. Был әле – яҡшы тигән осраҡта. Ә бит беҙҙә, художестволы ижадтан тыш, мәктәп өсөн әсбаптар яҙған, әҙәби тәнҡит менән шөғөлләнгән әҙиптәребеҙ ҙә бар. Теге схема менән эш итеүсе нәшриәткә, тимәк, күп тармаҡлы әҙиптең китабын, ун – ун биш йылға бер сығарһа ла, һүҙ әйтеп

булмай. Ике йүнәлеште берҙәй алып барған Ғайса Хөсәйеновты йәш сағында бындай «прокруст һикеһе»нә һалһаҡ, бөгөн халыҡ яҙыусыһы, академик исемен йөрөткән Ғайса Хөсәйенов тигән атаҡлы әҙәбиәт белгесе лә, танылған прозаик та булмаç ине бит. Хәйер, бөгөнгө әҙәби тәнҡиткә әҙиптәрҙең үҙҙәренең үк мөнәсәбәте лә уның, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бигүк кәрәкле түгеллеген дәлилләй. Шундай парадокс: әҙәбиәт үсеше, әҙәби процесс әҙәби тәнҡитһеҙ мөмкин түгел, ә әҙиптәрҙең үҙҙәренә тәғәйен анализ урынына хуплау-йөпләү, маҡтау-данлау ғына кәрәк. Тап ошондай хәлдә әҙәбиәт генералдарының «ни ҡылһа ла ирке бар». Сөнки әйтеүсе лә, һораусы ла, талап итеүсе лә юҡ. Бит, кем-кем, ә әҙипмен тигән әҙип яҙғандары өсөн генә түгел, ә ҡылған ҡылыҡтары өсөн дә ҡасан да булһа бер яуап бирергә тура киләсәге тураһында уйларға тейеш ине. Әҙип тә был хаҡта уйланмаҕас, рухы имгәнгән йәмғиәтте кем тәрбиәләр?!.

**Наил ҒӘЙЕТБАЙ:**

Китаптар һирәк баçыла, тиражы бәләкәй, тип зарланабыҙ. Журнал-гәзиттәребеҙҙең тиражы ла аҙая бара. Әммә был өҫтән ҡушып эшләнмәй бит – уҡыусылар кәметә тиражды, улар уҡымай беҙҙең яҙғандарҙы. Аҙая уҡыусыларыбыҙ... Күҙгә бәрелеп торған сәбәптәре лә бар, әлбиттә: замана йәшен тиҙлеге менән үҙгәрә, телевизор, компьютер, интернет...

Минең алты балам бар. Уҡымайҙар тип әйтә алмайым. Тик нимә уҡыйҙар? Эзотерика, психология, кешеләр араһындағы мөнәсәбәт, дингә яңыса ҡараш... Дейл Карнеги, Нарбеков, Свияш, Лазарев, Зеланд, Нил Доналд Уолш. Был китаптар нисек йәшәргә, нисегерәк уңышҡа өлгәшергә, кешеләр менән дөрөç аралашырға, күңел тыныслығы табырға өйрәтә. Башҡорт әҙәбиәтен мин талап иткәнгә генә уҡыйҙар. Әммә: «Уйлап сығарылған тарих беҙгә ҡыҙыҡ түгел,» – тиҙәр.

Шуныһы ғәжәп: һуңғы осор минең үҙемә лә ниңәлер ҡалын роман-повестар оҡшамай башланы. Мин, әлбиттә, яҙыусы буларaҡ, әҙәбиәттән ситтә ҡалмаç өсөн уларҙы уҡыйым, әммә күрәм: прозабыҙҙа оҙон, буш һөйләү күп, кәрәкмәгән киçәктәрҙең, образдарҙың саманан артыҡ булыуы аптырата, яҙыусының әйтер фекере юҡлығы йәки фекер ярлылығы йәнгә тейә. Образдарға килгәндә, насар кешенең насарлығы уның тәүге һүҙенән үк күренеп тора, телмәре примитив, урыç һүҙҙәре менән сыбарланған... Күп кенә проза әçәрҙәре оҙон-оҙон ваҡиғаларҙы теҙеп сығыуҙан ғына ғибәрәт. Уларҙы өлөш-өлөш алып ташла – бер ни үҙгәрмәйәсәк. Икенсенән, бөгөнгө уҡыусының оҙон романдар уҡып ултырырға ваҡыты ла юҡ. Элек, мәçәлән пьесалар ҙа дүртәр, бишәр шаршаулы ине. Спектаклдәр алтышар, етешәр сәғәт барған замандар булған. Хәҙер пьесалар ике генә шаршаулы итеп яҙыла, спектаклдәр сәғәт ярымда уйнала. Быны заман үҙе талап итә. Драматургия, ваҡытҡа яраҡлашып, ҡыçҡарҙы. Ә роман-повестар үҙгәрмәне. Прозаиктарға бөгөн яҙыу стиле хаҡында уйланмай булмай. Динамик рәүештә, экспрессив, тығыҙ яҙылған ҡыçҡа әçәрҙәр заманаһы тыуҙы түгелме? Бәлки, мин яңылышамдыр? Әммә, үҙемдең прозанан драматургияға күсеүемдең төп сәбәбе ошондалыр, тип уйлайым.

Бөгөн миңә роман-повестарға ҡарағанда мемуарҙар, көндәлектәр, шәхестәр тураһында биографик яҙмалар ҡыҙығыраҡ. Быйыл ғына «Казан утлары» журналында Мирсәй Әмир менән Фәнис Яруллиндың көндәлектәрен, Туфан Миңнуллиндың мемуарын, Тәлғәт Ғәлиуллиндың танылған прозаик Мөхәммәт Мәһәҙиев хаҡындағы биографик-документаль романын яратып уҡыным. Беҙҙең әҙәбиәттә лә Яныбай Хамматовтың, Ғайса Хөсәйеновтың һ.б. мемуарҙары менән

таныштым. Тик уларҙың ҡайһы берҙәренең уғата шыма булыуы, ҡытыршы ситуацияларҙы урап үтеүе, ҡәләмдәштәренә, осорға, кешеләргә объектив баһаның самалы булыуы әҫәрҙең бәсен төшөрә, күп ҡырлы тормошто бер яҡлы күрһәтеүгә килтерә. Был йәһәттән Ноғман ағайҙың мемуарының һуңғы өлөшө ҡыҙыҡлы ине. Әммә объектив баһаға күп кеше үпкәләй. Шуныһы үкенесле.

Беләм: яҙыусыларҙың күбеһе көндәлек алып бара. Журнал редакцияһы шуларҙы баҫтырыу хәстәрлеген күрһә ине.

**Ноғман МУСИН:**

Әле мин, матбуғатта уҡыған, ишеткәндәрҙе хәтерләп, үҙебеҙҙең үтә меҫкен хәлдә йәшәгәнебеҙҙе уйлап, болоҡһоп ултырам. Бына «АиФ» гәзитендә баҫылған бер мәғлүмәт: Мәскәүҙә миллиардерҙар өсөн махсус йәрминкә ойошторғандар. Заман байҙары өс көндә 1,5 миллиард долларлыҡ әйбер һатып ала. Тауарҙары ниндәй бит әле: балалар өсөн алтын имеҙлек, эттәренә 2 миллион долларға алтын муйынса, 15 миллион долларға ике кеше йоҡламалы алтын койка, 1 миллион долларға алтын телефон... Икенсе миҫал: Себер байы Зырянов поляк инженерына 80 миллион доллар түләп, 200 метр оҙонлоғондағы яхта проектлаштырырға заказ бирә. Абрамович иһә, 86, 103,3, 114,5 метр оҙонлоғондағы өс яхтаһы була тороп (уларҙа бер нисә бассейн, сауна, ҡышҡы баҡса, ресторан, вертолет майҙансығы һ.б. бар), сәмләнеп китә лә 200 метрҙан да оҙон яхта төҙөргә заказ бирә. Былар бөтәһе лә беҙҙең илдә, беҙҙең күҙ алдында булған күренештәр. Ә беҙ, меҫкендәр, китап сығарыу проблемалары тураһында һүҙ алып барған булабыҙ. Харап бит!

Ошо урында бөйөк француз яҙыусыһы Ромен Ролландың «Очарованная душа» әҫәрендәге: «Такова оборотная сторона богатства: это загон для привелегированных, но все-таки загон, окруженное забором пастбище», – тигән юлдарын иҫкә төшөрәм дә, беҙ заман байҙарынан рухи яҡтан барыбер өҫтөнөрәк, тип үҙ-үҙемде йыуатам һәм, яҙыусы матди күҙлектән сығып түгел, намыҫы ҡушканса халҡы өсөн ижад итергә тейеш, тигән һығымтаға киләм.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Әйткәндәрегеҙ менән килешмәй мөмкин түгел. Тик намыҫы ҡушканса йәшәгән-эшләгәндәргә, исмаһам, ҡәләмдәштәре тарафынан кешеләрсә (адекват) мөнәсәбәт булһа икән дә бит. Юҡ шул. Үҙгенәһен ҡайғыртҡандарға «Әҙип – юғары рух илсеһе!» тип әйтеүең генә түгел, саң һуғыуың да бушҡа ғына. Шулай ҙа мин нотоҡ өсөн түгел, фәһем өсөн уйлыларҙың иғтибарын йәнә бер нәмәгә йүнәлтер инем. Күпмелер ҡәләм тибрәткән ҡайһы берәүҙәр «талант булһа, белемдең кәрәге лә юҡ» тигәнерәк ҡараш үткәрә башланы. Бөгөнгө тиҙлеккә яраҡлаша алмағандарҙың үҙҙәрен аҡлауымы был, әллә яҡтылыҡты аңлай алмаған һуҡырҙың бәләһеме?..

Йыш ҡына шулай килеп сыға: ярайһы билдәле шәхес ниндәйҙер ҡанатлы һүҙ ысҡындыра. Мәлендә ул дөрөҫ тә, урынлы ла булғандыр, бәлки. Әммә ваҡыт үтә, тормош үҙгәрә килә был ҡанатлы һүҙҙең ҡаурыйҙары ҡойолоп бөтһә лә, ижади уйлай алмағандар уны һәр даим ҡабатлай бирә. Назар ағай Нәжми «бер ниндәй институт та кешене талантлы итә алмай» тигән фекерҙе йыш әйтер ине. Эйе, ысынлап та талантлы итә алмай! Ләкин ысын мәғәнәһендәге талантлы әҙипте бөгөн юғары белемһеҙ итеп күҙ алдына килтереп буламы? Бәхәсләшмәйек: ижад донъяһында уникаль күренештәр ҙә бихисап. Махсус филологик белеме булмағандарҙың да һәйбәт кенә әҫәр яҙыуы бик ихтимал. Икенсе яҡтан, башҡалар

ыңғайына кеçәһендә университет тамамлағанын раçлаусы ҡатырға йөрөтөп тә, белем генәһе уҙа китһә урта мәктәп кимәлендә ҡалғандар ҙа быуа быуырлыҡ. Ундайҙарға, бигерәк тә күпмелер һәләте булып, бер-ике китап сығарып өлгөргәндәренә, әлбиттә, талантҡа ла белем кәрәклеген тәкрарлауҙың мәғәнәһе юҡ. Шиғриәттең билдәле дәрәжәлә тылсымға эйә булыуын, мистикаға яҡынлығын таныған хәлдә лә, прозаның барыбер ҙә башлыса реаль ысынбарлыҡҡа таяныуын, уны өйрәнеп эш итергә тейешлеген күрмәү мөмкин түгел. Шулай итеп, бөгөнгөләр генә түгел, килер быуындар ҙа ыңғай ҡабул итерлек һөҙөмтәле әҙәби ижадтың тәүшарты, әлбиттә, һис шикһеҙ – талант, талант өçтөнә белем, шуларға нигеҙләнеп, ысынбарлыҡты өйрәнеү. Заманында Максим Горький тормошто минең университеттарым тип атағайны. Бөгөн дә былдай ҡараш актуаль яңғырай. Тимәк, әҙип ана шул өс тағанға ныҡлы таянғанда ғына үҙ миссияһын тейешенсә атҡара аласаҡ.

Һүҙ ҙә юҡ: ижади эш – уғата шәхсән шөғөл. Ижади осош – яңғыҙлыҡты ярата. Аҡ ҡағыҙ алдындағы әҙипте намаҙлығы өçтөндә доға ҡылыусы диндар менән сағыштырып булалыр. Артабан инде оçталығыңды үçтереү, профессионал булараҡ камиллыҡҡа ынтылыу бары үҙеңдең егәрлелегеңә, әлеге шул һәләтеңә туранан-тура бәйле түгелме ни?! Әммә әҙәм балаһы, гений сифаттарын йөрөтһә лә, шәхес булараҡ та, һөнәрмәнлек йәһәтенән дә, барыбер, башҡаларҙан күреп, оçталарҙан өйрәнеп, үҙ өçтөндә ныҡышмалы эшләгәндә генә формалаша. Ижади семинарҙар, лабораториялар ҙа кемделер ҡабатлауҙы маҡсат итмәйҙер, ә оçтаның тәжрибәһен өйрәнеү өсөн ойоштоҙола, тип ҡарар кәрәктер ул. Әлбиттә, донъяла мәңге асып бөтөрә алмаçлыҡ серҙәр тулып ята. Шул иçәптән ижад итеү мөғжизәһен дә һис ҡасан тулыһынса аңлап та, аңлатып та бөтөп булмаясаҡ. Бер үк мәлдә, ижад – сер, мөғжизә булып ҡалған хәлдә лә, ҡарар күҙгә бигүк аңлашылып бөтмәгән был эшмәкәрлектең һөҙөмтәһе тураһында фекер йөрөтә, ижадсының «оçтаханаһы»нда нимәгәлер өйрәнә алабыҙҙыр, моғайын.

**Наил ҒӘЙЕТБАЙ:**

Әҙәбиәттең кимәле белем кимәле менән билдәләнә. Һәләт тураһында әйтеп тормайым. Ул мотлаҡ булырға тейеш. Ә белемдә, күп уҡып, популяр әçәрҙәрҙең ҡоролошон, технологияһын өйрәнеп үçтерергә, арттырырға була. Беҙҙә, яҙырға өйрәнеп булмай, өйрәтергә кәрәкмәй, тигән фекер йәшәй. Быны әле Ноғман ағай ҙа әйтте. Улайһа Яҙыусылар союзындағы жанрҙар буйынса секциялар ни менән шөғөлләнә, ниңә яҙыусыларҙың ҡулъяҙмаһын тикшерә? Шул үҙе өйрәтеү түгелме ни? Мин пьесалар яҙа башлағас, театр әһелдәренән «Сәхнә ҡанундарын белмәйһең» тигән һүҙҙәрҙе күп ишетергә тура килде. Улар дөрөç әйтелде. Мин, дүрт проза китабы авторы, СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы булыуыма ҡарамай, ысынлап та, сәхнә ҡанундарын белмәй инем. Драматургияның нимә икәнлеген аңлатҡан тәнҡит йыйынтыҡтары, китаптар бар, ә нисек пьеса яҙырға өйрәткән әсбаптар юҡ. Хәтеремдә, Туфан Миңнуллиндан пьесаларының ҡараламаларын һорағайным, ул: «Мин уларҙы яғам», – тине. Бик ныҡ этләндем, күп уҡыным. Әммә сәхнә ҡанундарын аҙ-маҙ өйрәндем, шунан ғына пьесаларым ҡуйыла башланы. Йәштәргә ярҙам итеү йәһәтенән, үҙ тәжрибәмә таянып, «Пьеса нисек яҙыла!» тигән китап сығарҙым. Әммә бик күптәр уның өсөн мине әрләп бөттө, тыйнаҡһыҙлыҡта, әҙәпһеҙлектә, маһайыуҙа ғәйепләне. Ул китаптың баçылғанына 18 йыл үтте, әммә һаман да әр һүҙҙәре ишетәм. Ә былтыр Ҡазанға барғайным, киреһенсә, ул китап өсөн рәхмәт әйттеләр. Танылған шағир Рҡаил

Зәйдулла менән билдәле прозаик Вәҡиф Нуриев (икеһе лә Татарстан Яҙыусылар союзында эшләй): «Наил ағай, ошоғаса пьеса яҙғаныбыҙ юҡ ине. Һеҙ өйрәткәнсә яҙғайныҡ, пьесаларыбыҙ конкурста беренсе, икенсе урын алды, сәхнәлә ҡуйылды. Һеҙҙең китапты бына хәҙер эш өҫтәлебеҙҙә тотабыҙ», – тип минең китапты өҫтәлдәренән сығарып күрһәттеләр.

Туҡһанынсы йылдар башынан Талҡаҫ күле янында ике аҙналыҡ семинар үткәрә башлауым да талантлы прозаик һәм шағирҙарҙы драматургияға йәлеп итеү, сәхнә ҡанундарына өйрәтеү ине. Мәғлүм булыуынса, ул сараларҙан һуң байтаҡ драматургтар үҫеп сыҡты. Әммә семинарҙар кемгәлер оҡшаманы. Инде бишенсе йыл уны ойоштора алған юҡ.

Ошо йәһәттән «Ағиҙел» журналы «Ижади лаборатория» тигән рубрика асып, яҙыусыларҙың эшләү ысулдарын күрһәтеп, ижад серҙәре тураһында һөйләтһәләр, йәш яҙыусыларға ҙур ярҙам күрһәтер, әҙәбиәтебеҙҙең кимәлен дә үҫтерешер ине.

Әҙәбиәт тарихын яҙыу, әҙәби тәнҡитте үҫтереү кәрәк. Уларҙың бурысы – әҫәрҙәргә баһа биреү. Тик шуны белеү мотлаҡ: әҙәби тәнҡитте уҡып әҙәби ғилемеңде, яҙыу оҫталығыңды арттыра, үҫтерә алмайһың. Сөнки тәнҡит «Нимә ул һәйбәт йәки насар әҫәр?» тигән һорауға ғына яуап бирә. Ә яҙыусы иң алда «Нисек һәйбәт әҫәр яҙырға?» тигән һорауға яуапты эҙләргә тейеш.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Бер уйлаһаң, яҡшы менән насарҙы айырып күрһәтеү өсөн дә белем өҫтөнә гражданлыҡ ҡыйыулығы мотлаҡ. Үкенескә, бөгөнгө әҙәби тәнҡит күбеһенсә һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырырға ғына оҫтарып алды. Улай ғына ла түгел, йыш ҡына уғата йомшаҡ әҫәрҙе лә яҡшыға сығарып ҡуя. Ғәмәлдә, ысын мәғәнәһендәге әҙәби тәнҡит, юғары кимәлдәге художестволы әҫәр кеүек үк, «аҡыл өйрәтмәй», әҙәбиәт тормошто, кешеләрҙе, әҙәби тәнҡит иһә ысынбарлыҡтың художестволы сағылыш кимәлен асыҡларға, аңларға ярҙам итә. Әлбиттә, әҙипте, тәнҡитсене аңлау өсөн дә күпмелер әҙерлек кәрәк. Ҡәҙимгә әҙәм балаһына ғына түгел, хатта әҙиптең үҙенә лә уҡыусы һәләтенә эйә булыу – матурлыҡҡа, сәнғәткә ылығыуҙың тәүшартылыр ҙа, бәлки. Толстой тиклем Толстой Пушкинды уҡытыусы итеп күргән. Гений генийҙан өйрәнгән! Уҡыусы һәләте лә, тимәк, тәбиғәт тарафынан биреләләр. Әммә остоҡ ҡына осҡондо ла дөрләтеүең, йылытыр, тәғәм әҙерләшер усағыңды ла һүндереп ҡуйыуың бар. Уҡыусы һәләте... Ни өсөн кемдер билдәле бер әҫәрҙе тулыһынса ҡабул итә, уның тәьҫире аҫтында йә ҡанатланып, йә болоҡһоп, уйланып йөрөй? Ә икенсе берәү хатта башлағанын аҙағынаса уҡырға ла йыбана. Ни өсөн? Сөнки радиотапшырғыстан эфирға ағылыусы сигналдарҙы шул йышлыҡҡа көйләнгән радиоалғыс ҡына тейешенсә ҡабул итә алған кеүек, әҙипте лә теләһә кем аңлай ҙа, ҡабул да итә алмай. Шағирҙы аңлау, ул кисергәнде кисерә алыу өсөн дә, тимәк, күпмелер дәрәжәлә шиғри һәләтле булыу мотлаҡ. Артабан инде, шағирға ла, уға мөкиббән китеүсегә лә сәнғәти камиллашыуҙың кәрәге юҡ, тип кем әйтә алыр?! Үҙенең гражданлыҡ бурысын еренә еткереп башҡарырға тырышҡан һәләтле тәнҡитсе иһә – әҙәби тулҡындарҙы көйләүсе, уларҙың тәбиғиҙәрен яһалмаларынан айырып күрһәтә, аңлата алыусы ул. «Аҡыл һатмай», үҙе лә һатылмай! Кемдәлер, нимәгәлер «өйрәтергә» тырышмай, ә ысынбарлыҡты, художестволы әҙәбиәттә сағылыш тапҡан тормошто үҙенең нисегерәк күҙаллауы менән уртаҡлаша, аңлыға ишара яһай, болғансыҡ һыуҙа балыҡ тоторға самалағандарҙы фашлай. Әсенең әсе, сөсөнөң сөсө икәнен яҡшы белгән тәнҡитсе уҡыусы, тамашасы

талантына эйә булғандарҙың да әле юғары зауыҡтарын тормош менән бәйләй алмауҙарын тойоп эш итә. Әйтәйек, театрҙағы тамашала йә китап уҡығанда кемдер күҙ йәштәренә быуылып ултыра, сәнғәтте нескә һиҙемләй, әммә ғүмер буйына бергә йәшәгән тормош иптәшенең шул уҡ яҙмыш кисереүен башына ла индерә алмауы бик ихтимал.

Һеҙҙең, Ноғман ағай: туҡһанынсы йылдарҙағы, унан һуңғы осорҙағы «ҡатмарлы күренештәрҙе сағыу образдарҙа дөйөмләштергән, киләсәк быуындар ҙа фәһем алырлыҡ әҫәрҙәр беҙҙә әлегә юҡ дәрәжәһендә. Үткәндәргә тәнҡит күҙлегенән ҡарарға тырышыу, хәҙерге тормошҡа ризаһыҙлыҡ белдереү кеүек ҡаға-һуға яҙылған әҫәрҙәр әҙәбиәтебеҙ алдына заман ҡуйған талаптарға тулы яуап бирә алмай» тиеүегеҙ бик урынлы. Әлбиттә, заманға, күпселектең зауығына ярашлы әҫәрҙәребеҙ юҡ түгел. «Күпселектең зауығы» тинем дә уйлана ҡуйҙым: теге йәки был журналда йыш баҫылыу ғына әҫәрҙәрең зауыҡлы тигәнде аңлатмай әле. Әйтәйек, хикәйә генә түгел, романды ҡоймаҡ урынына «ҡойоп» тороусылар бар. Тәме ниндәйерәк һуң был «ҡоймаҡтар»ҙың, төйөрлө түгелме, тоҙо бармы?.. Бит уйландырырлыҡ әҫәр яҙыу өсөн әҙипкә геройҙары менән бергә үлеп-терелергә, мәңгелек һорауҙарға бөгөнгөнөң яуабын эҙләргә тура килә... «Ҡоймаҡ ҡойоусы» бындай һорауҙар менән үҙен ниңә мәшәҡәтләп торһон. Хуш... Ә миҫалдар? Әүҙемлеге менән һәлкәүерәк ҡәләмдәштәренә өлгө булырлыҡ Ринат Камалды алайыҡ. Туҡһанынсы йылдарҙа фекер алышырҙай, иҫтә ҡалырҙай әҫәрҙәр баҫтырҙы: «Таня-Таңһылыу», «Бәлә»... Аҙағыраҡ: «Оҙонтал», «Сабыр йән»... Һәләтле, тинек. Өмөттәр бағланыҡ. Исеме хәҙер обоймаларҙан төшмәй. Ә бына һуңғы осорҙағы ижады ныҡ һағайта. Көтмәгәндә тиерлек ул төпкөлдәге тарихҡа тотондо. Кемдер әйтер: «Ниңә, тыйылған темалар бармы ни бөгөн? Һинең өсөн көтөлмәгән булһа, автор өсөн, бәлки, бөтөнләй икенсе төрлөләр...» Әлбиттә, төрлөсә фараз итергә, туранан-тура авторҙың үҙенән дә һорарға була. Тик әҫәр баҫылып сыҡҡандан һуң үҙ аллы тормош башлай, үҙе өсөн үҙе «яуап тота». Бына «Ватандаш» биттәрендә бер-бер артлы донъя күргән, 1735 – 1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәкселәре яҙмышын һүрәтләүгә ҡоролған әҫәрҙәренә туҡталайыҡ. Айырыуса тарихи ваҡиғаларға яуаплы килер кәрәк ине бит. «Юлдаш мулла» (2012, № 2). Жанры билдәләнмәгән. Быға аптырайһы ла түгел: ни мәҡәлә, ни повесть, ни очерк! Ярты күләмде урыҫ телендәге документтар биләй. Артабан документҡа бәйле теге йәки был персонаждың уйланыуҙары китә. Был уйланыуҙар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уйҙырманан ғына ғибәрәт, сөнки психологик яҡтан да, тарихи ваҡиғаға таянып та, герой-персонаждар бәрелешенән сығып та нигеҙләү юҡ. Бары документҡа һөйкәлеү генә бар. Дәүер һулышы, характер үҫеше кеүек төшөнсәләргә бәйле һүҙ ҙә йөрөтөрмөн тимә! Ни өсөн шулай килеп сыға һуң? Яуапһыҙлыҡ. Халтура... Баҙар шарттарына яраҡлашырға тырышыу... Ә баҙар шарттарына яраҡлашыуҙы, аҡса һуғыуҙы төп маҡсат иткән әҙип ысын мәғәнәһендәге сәнғәт әҫәре тыуҙыра аламы?!. «Илһам һатылмай! Әммә ҡулъяҙманы һатырға мөмкин» (А.С. Пушкин). Гений әйткән фекерҙең икенсе яртыһын ғына алға сығарып нимәгә ирешәсәкбеҙ? Илһамһыҙ ғына «әҫәрҙәр» (баҙарға – тауар!) әүәләү конвейеры әҙәбиәтҡә ни өҫтәр?.. Артабан ҡарайыҡ. «Көҫәпҡол батыр» (2012, № 1). Жанры «Тарихи эссе» тип ҡуйылған. Бынһы алдағы әҫәрҙән урыҫса документтарҙың аҙыраҡ булыуы менән генә айырыла. Утыҙ биш битлек яҙма ике киҫәккә бүленеп, икенсе киҫәк төп геройҙың хәтирәләренән ғибәрәт. Ошо хәтирәләргә нигеҙләнеп кенә автор был әҫәрен «эссе» тип атанымы икән? Ярай, жанрға бәйле һүҙ шулай ҙа формаль күренеш

тип килешәйек әлегә. Иң мөһиме – әҙиптең ни әйтергә теләүе, әҫәренең әҙәбиәт донъяһына яңылыҡ алып килеүе, художестволылыҡ йәһәтенән тейешле кимәлдә булыуы. Авторҙың теләге изге, әлбиттә: азатлыҡ тип яу сапҡан башҡорт батырҙарының береһе генә лә онотолорға тейеш түгел. Был изге маҡсатҡа художестволы әҙәбиәт талап иткәнсә ирешә алмау ғына үкенесле. Текстҡа мөрәжәғәт итәйек. Йәлләд алдында ғүмеренә бына нисегерәк йомғаҡ яһай төп герой: «...Миңә үлергә генә кәрәк, бер эшемдең дә осона сыға алманым, халҡым да мине тыңламаны...

Шулай китте башҡорт батыры был ерҙән, дошмандарына ҡаты нәфрәт менән, нәҫелдәштәренә үпкә менән. Улар уны аңламаны, ирҙәр уны тыңламанылар...»

Тотош халыҡҡа ғәйеп ташлау нигеҙлеме, геройҙы аҡларлыҡмы? Әҫәр логикаһына ярашлы «Юҡ!» тип кенә яуапларға мөмкин. Халыҡ менән етәксе мөнәсәбәттәре кәрәгенән тыш ябайлаштырылған, ил тотҡалары уғата бер ҡатлы итеп күрһәтелгән. Яуға үҙен генә түгел, ә ырыуҙаштарын рухландырған ир-уҙаман уйланмай, икеләнмәй булмаҫ. Айырыуса – тотҡонлоҡҡа эләккәс. Ә әҫәр геройының кисерештәре нисек һуң? Ул «инде нисәнсе ҡат үкенестән ҡул һелтәй, бөтәһенә, бөтәһенә төкөргөһө килә. Бөттө, бөттө уның яҡты көнө... Көҫәпҡол батыр ыуалана, ыңғыраша, үҙенең аҡылһыҙлығына үкенә...» Ошондай уҡ хәлде һүрәтләгән Мостай Кәримдең «Салауат»ына мөрәжәғәт итеп ҡарайыҡ:

«... **С а л а у а т.**

*... Бығау түгел, уйҙар яфалайҙар,*
*Сынйыр түгел, уйҙар зыңлай башта,*
*Зиндан түгел, шиктәр тотҡон итте.*
*Ни ҡылдым мин?.. Кем мин?*
*Был иңемә яҙмыш бигерәк иртә*
*Ауыр йөктәр һалды. Күтәрә алмай*
*Әллә минең билем һығылдымы?..*
*Беҙ түккән ҡан*
*Изге нурҙар булып*
*Ҡибла күктәрендә балҡырмы?*
*Йә*
*Ил тәненә шаҡшы ҡутыр булып*
*Таралырмы?*
*Юҡ, өркөтмәй мине*
*Әбей батша сығарасаҡ хөкөм.*
*Тарих хөкөмө мине ҡурҡыта —*
*Ярлыҡармы, әллә ләғнәтләрме?*
*Ҡот осорлоҡ? Әгәр хата булһа,*
*Әгәр хилаф булһа ҡылған эштәр?*
*Улай тиһәң, илдең иң уҙаман*
*Ирҙәре бит минең яҡлы булды...*
*Бөтәһе лә хаталаныр микән?!*
*Хаталаныр микән?..*

**Ю л а й.**

*Выждан ғазабыңды беләм, улым...*

**С а л а у а т.**

*Шиктәремде тарат, атай!*

**Ю л а й.**

Ҡөҙрәтемдән килмәй, улым... Яуҙа, дауҙа, сыуаҡ аҡ көндәрҙә һин бөтәбеҙҙән дә өҫтөн, өлкән инең. Ҡара көндәрҙә лә шулай булып ҡал. Рух ныҡлығын беҙ әле лә һинән көтәбеҙ, һиңә таянабыҙ...

**С а л а у а т.**

Тайға эйәргән аҙғын ат булдым, тип үкенмәйһеңме, атай?

**Ю л а й.**

Үкенмәйем...

**С а л а у а т.**

Беҙ бит еңә алманыҡ.

**Ю л а й.**

Тәнебеҙ еңелһә лә, йәнебеҙ еңде. Сөнки хәтәр ниәтебеҙ хаҡ ине.

**С а л а у а т.**

Ә түгелгән ҡандар, сыҡҡан йәндәр нимә менән аҡланыр? Нимә менән?..»

Ни тиклем драматизм! Йән ғазабы, күңел үрһәләнеүе, йөрәк өҙгөләнеүе! Шәхес трагедияһын халыҡ трагедияһынан айырып алырмын тимә. Халыҡ юлбашсы итеп таныған шәхес тап шулай булырға тейештер ҙә. Был йәһәттән Алдар Иҫәкәев та ентекле иғтибарға лайыҡ ине. Тормоштоң үҙе кеүек үк ғәйәт ҡатмарлы, башҡорттоң трагик яҙмышын йөрәге аша үткәргән шәхес ул Алдар. Ринат Камал иһә юлайҡан бер хат килтерә лә башҡорттоң аҫыл улдарының береһенә ихтилалсыларҙың мөнәсәбәтен бына нисегерәк тасуирлай: «Табын крепосынан һуң улар (ихтилалсылар. – **Ф. К.**) Алдар тархан биләмәһен туҙҙырҙы,.. оло яу булып батшабикә хөкүмәтенә тоғролоҡ һаҡлаған Алдарбай тархан утарына баҫып инде... Шул һыҡмыш байға халыҡтың күптән асыуы ҡайнай ине... Ҡарт башына, батшабикә ғәскәрҙәренә тоғролоҡ һаҡлап ята...»

Башҡорт ихтилалдарына бәйле ваҡиғалар ифрат ҡатмарлы, тип кенә әйтеү аҙ. Улар иҫ киткес ҡапма-ҡаршылыҡлы. Рәми ағай әйткәнсә:

*... Заманаһы – заманъа,*
*Яҡшылығы – яманъа,*
*Дөрөҫлөгө – ялъанъа.*
*Барыһы бергә ялъанъан!..*

Урыҫ илселеге составында ҡаҙаҡтар менән һөйләшеүҙә мөһим ролдәрҙең береһен уйнаған арҙаҡлы Алдар батыр Иҫәкәев, дипломат булараҡ, һис шикһеҙ ҙур тәжрибә туплаған, тип әйтә алабыҙ. Тарих раҫлауынса, был йәһәттән дә — һөйләшеү-килешеүҙәр, хаттар (Батыршаның императрица Елизавета Петровнаға яҙған хаты ғына ла ни тора!), мөрәжәғәтнамәләр, һ.б. дипломатик саралар аша ла башҡорттоң ил ағалары мөмкин булғанды эшләргә тырышҡан, аҡыллы сәйәсмәндәрсә эш иткән. Алдарҙың Тәфтиләү менән хатлашыуын да ошо рәттә генә аңларға мөмкин. Үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртҡан «һыҡмыш бай» ихтилал етәксеһе була алмай. Заманында иң ҡан ҡойғос ихтилалдың уртаһында ҡайнашыуына ҡарамаҫтан, аҙаҡ урыҫтарҙы үҙе менән иҫәпләшергә мәжбүр итеп, оло абруйлы илсе булараҡ Рәсәй хөкүмәте исеменән башҡа халыҡтар менән һөйләшеүҙәр алып бара алырлыҡ дәрәжәлә булған икән, тимәк, шәхес – рухи яҡтан иҫ китмәле көслө, аҡыллы сәйәсмән, халҡының мәнфәғәттәрен үҙенекенән өҫтөн ҡуйыусы ил ағаһы. Уның һуңғы аҙымы ла – күренекле батырҙарҙы йолоп ҡалыу өсөн 1740 йылда Минзәләгә барып, язалап үлтерелеүе

лә быға асыҡ дәлил. Бына ҡайҙа халыҡ яҙмышын үҙенеке иткән шәхес трагедияһы! Беҙ иһә бөгөнгө менән генә йәшәргә әтәргән, баҙар шарттары бөтөнөһөн дә үҙ урынына ҡуйыр әле, тигән күрәгараш сәйәсәткә эйәреп, тамаҡ һәм ялған дан хаҡына изгеләрҙән-изге батырҙарыбыҙға ла тап төшөрөргә әҙербеҙ. Аҡты ҡаранан айыра алмаҫ хәлгә етмәҫ борон ниндәй осраҡта ла аҡтың аҡ булып ҡалырға тейешлегенә инанысты юғалтыу дәрәжәһенән һаҡланайыҡсы, йәмәғәт! Ғөмүмән, әүлиәгә тиң шәхестәребеҙгә тәҡүәһеҙ мөнәсәбәт – иң ауыр гонаһтыр ул!

Художестволылыҡ, яңылыҡ талаптарына авторҙың ошо «серия»ға ингән «Килмәк абыҙ» (2011, № 2), «Аҡай батыр» (2011, № 6) әҫәрҙәре лә яуап биреп бөтмәй.

Әйтелгәндәрҙән сығып, «Бары менән байрам» фәлсәфәһе кимәленә төшмәйенсә йәнә шуны билдәләмәй булмай. Беҙҙең бөгөнгө әҙиптән «Фауст»ҡа йә иһә «Һуғыш һәм солох»ҡа тиңләшерҙәй әҫәр көтөп булмаһа ла, шундай кимәлдәрҙән сығып фекер йөрөтмәһәк, әҙәбиәттә мәңгегә кәрлә булып ҡаласаҡбыҙ.

**Ноғман МУСИН:**

Юғарыла әҙәбиәтебеҙҙең бөгөнгө торошона, ундағы айырым күренештәргә ҡарата тәнҡит фекерҙәре әйтһәм дә, һәйбәт әҫәрҙәрҙең дә тыуа тороуына, әҙәбиәтебеҙ майҙанында яңы исемдәр күренеүенә ҡыуанам һәм башҡорт әҙәбиәтенең киләсәге яҡты буласағына ышанысым ҙур.

Журнал редакцияһы В. В. Путиндың иң яҡшы 100 китап һайлап алырға тәҡдим итеүен иҫкә төшөрә лә башҡорт әҙәбиәтендәге иң уҡымлы 10 китапты атауҙы һорай. Китапты һәр кем үҙ зауығынан сығып һайлай. Шуға күрә, үҙ фекеремде бүтәндәргә көсләп тағыу булыр тип, ундай китаптар исемлеген әйтергә теләмәйем. Иң өҫтә лә шул хаҡта уйлап ҡараһындар ине.

**Наил ҒӘЙЕТБАЙ:**

Иң уҡымлы ун китап тигәндә, бала саҡтан яратып уҡыған өс повесть хәтергә килә: «Беҙҙең өйҙөң йәме», «Дуҫ булайыҡ» һәм «Ҙур оркестр». Былар – классик әҫәрҙәр, уларҙы һәр кем уҡырға тейеш.

Был яҙыусыларҙың тағы ошо әҫәрҙәрен тәҡдим итер инем: Мостай Кәримдең шиғырҙарын, «Ай тотолған төндә» пьесаһын һәм «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесын, Зәйнәб Биишеваның «Кәмһетелгәндәр», Әнүәр Бикчәнтәевтың «Ожмах вәғәҙә итмәйем», Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романдарын. Исемлеккә йәнә лә Сәғит Агиш хикәйәләрен, Динис Исламов повестарын (яҙышырға теләгәндәр өсөн – айырыуса), Яныбай Хамматовтың «Төньяҡ амурҙары» диологияһын (унда башҡорт халҡының XX быуатҡа тиклемге аянныслы хәле бик асыҡ күрһәтелгән), Ноғман Мусин, Суфиян Поварисов, Нәжиб Асанбаев китаптарын, Рәшит Солтангәрәевтың «Йылы ямғыр» повесын һәм бер нисә хикәйәһен, Рәшит Назаровтың шиғырҙарын (бөтәһен дә түгел) индерер инем. Әлбиттә, «Нимә ул шиғыр?» тигән һорауға яуап бирерҙәй, миҫал булырҙай, һоҡланырҙай, тос, пародоксаль фекергә, асышҡа, хәтерҙә ҡалырҙай сағыштырмаларға, метафораға бай шиғри йыйынтыҡтарҙы индерергә кәрәк. Юғиһә күптәр, шиғыр – ул билдәле фекер, бисәнде, ауылынды һағыныу, атай-әсәйгә рәхмәт уҡыу, ғүмерҙең кире ҡайтмауы хаҡында рифмалаштырылған өгөт-нәсихәт, тип уйлай. Үҙем белгән нәмә тураһында шиғыр уҡығым килмәй минең.

**Фәнил КҮЗБӘКОВ:**

Ысынлап та, был тәҡдим дәүләт кимәлендәге бик мөһим мәсьәлә булараҡ ҡарала. Тәү сиратта ваҡыт һынауын уңышлы үткән әҫәрҙәр тураһында бара һүҙ. Бөгөнгөләренә бәйле иһә, һис шикһеҙ конъюнктура баш ҡалҡытасаҡ. Һайлап алыуҙың, тимәк, төплө уйланылған методологик нигеҙҙәре, икеләнмәҫтәй, шикләнмәҫтәй үлсәмдәр кәрәктер. Әлбиттә, уҡыусы үҙ зауығына ярашлы һайлап аласаҡ. Ә зауыҡ иһә тәрбиәләнә, тимәк, маҡсатлы эш итергә мөмкин. Был – бер булһа, икенсенән, тәжрибәле өлкән быуын ниңә йәштәргә кәңәш итмәҫкә, тәҡдим яһамаҫҡа тейеш һуң әле? Беҙгә, Башҡортостанда йәшәүселәргә, моғайын, шундай иҫкәрмәләр ҙә ҡамасау түгелдер: әйтәйек, башҡорт яҙыусыларының Рәсәй уҡыусыһына тәҡдим итерлек әҫәрҙәре һәм башҡорт уҡыусыһы мотлаҡ белергә тейешлеләре. Тәүгеһенә, мәҫәлән, «Урал батыр»ҙы, сәсәндәребеҙҙең ҡайһы бер ҡобайырҙарын, Салауаттың, Аҡмулланың, Бабичтың, Рәми Ғариповтың, Рәшит Назаровтың, Мостай Кәримдең, Назар Нәжмиҙең айырым шиғри өлгөләрен, прозала Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева, Мостай Кәрим...

Сер түгел: күпселек барыбер ҙә тәү сиратта үҙенең матди хәлен ҡайғыртырға мәжбүр. Тамағын туйҙырып, өҫтөн бөтәйтеп, йәшәр урынын булдырғас ҡына ул тирә-йүнгә күҙ һала башлай. Эйе, үҙен, яҡындарын ҡайғыртмайынса, халҡын, хатта дөйөм кешелекте уйлағандар ҙа етерлек. Сократ, мәҫәлән, донъяуи мәшәҡәттәрен бар тип тә белмәй, бер ҡат кейемдә иртәнән кискә тиклем йә майҙанда, йә күләгәлә, йә фекерҙәштәре йортонда йәмғиәткә, йәшәйешкә, кешеләргә ҡарашын белдерә йөрөгән. Йәшәү мәғәнәһен хәҡиҡәтте эҙләүҙә, тапҡанын башҡаларға еткереүҙә күргәнгә, был инанысы хаҡына үлемгә барыуҙан да ҡурҡмаған. Илгиҙәр сәсән Аҡмулланың да донъя малы тип суҡынмауы билдәле. Илем, телем тип янған Рәми, эшһеҙ ҡалып, ауылға ҡайтып китергә мәжбүр булғанда ла, үҙ инаныстарынан баш тартмай – халҡына тоғро ҡала. Рухиәт өлкәһендә ҡайнаған әҙиптең иленә, халҡына хеҙмәт итергә тейешлеге тәбиғи. Уның төп миссияһы ла илендә намыҫлы йәмғиәт төҙөшөүҙә, кешелә кешелеклелек тәрбиәләүҙә бит. Тап ошо йүнәлештә фиҙакәр ижад итеүсе генә бөйөк әҫәр тыуҙыра алыуы мөмкин.

Шулай итеп, бөгөн бары үҙен генә ҡайғыртырға мәжбүр ойоған намыҫлы күпселекте иртәгә булһа ла уятыу өсөн кемдер янырға тейеш. Тап ошондай шәхестәр: «Мин янмаһам, һин янмаһаң, ул янмаһа – был ҡараңғылыҡты кем сигендерер?!» тип алға сыға.

Йәмғиәттә йәшәүсе әҙәм балаһының тулыһынса ирекле була алмауы – аксиомаға әйләнгән хәҡиҡәт. Берәү үҙе аҡса ҡоло. Икенсеһе – ғаиләм тип өҙөшә. Кемделер белем кимәленең сикле булыуы аяҡ-ҡулынан тота... Азатлыҡты ла бары ыңғай яҡтан ғына баһалап булмай бит әле. Һүҙ азатлығы, мәҫәлән, кемгәлер – власҡа ярамаған, ә халыҡҡа етергә тейешле фекерҙе әйтеү, ә бәғзегә ғәйбәт таратыу өсөн бик ҡулай. Әҙипмен тигән әҙип иһә һүҙ азатлығын юғары художестволылыҡ талаптарына тороштло әҫәрҙәре менән генә ғәмәлгә ашырасаҡ.

**Әңгәмәне Фәнил КҮЗБӘКОВ ойоштorҙо.**

## МАҺИР ХИКӘЙӘСЕ



Федоровка районы Юлдаш ауылында тыуһам да, Көйөргәҙе районы Таймаҫ урта мәктәбендә алты йыл уҡыным. Сөнки беҙҙең ауылда урта мәктәп булманы. Шунлыҡтан, мәктәп йәшенән үк, таймаҫтарҙың Рәшит Солтангәрәев тигән данлыҡлы яҙыусылары барлығын йыш ишеткеләнем. Әммә, ни эшләптер, уның ауылына ҡайтып, мәктәпкә килеп, осрашыуҙар ойоштороп йөрөгәнен күрергә насип итмәне. Уны Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында өсөнсө курста уҡып йөрөгәндә осраҡлы рәүештә Карл Маркс урамында тап иттем.

Элек үҙәк урамдарҙың халыҡ күп йөрөгәнерәк ерендә, үҙәк һәм республика гәзиттәре биттәрен асып, быялалы таҡтаға эләләр ине. “Дуҫлыҡ” кафеһы эргәһендәрәк шул матбуғат биттәрен ентекле уҡып торам. Эргәмә берәү килеп баҫҡанын шәйләнем-шәйләүгә, әммә әйләнеп ҡараманым. Гәзит уҡыусылар күп ине ул осор, ә Өфө халҡы араһында таныштар – бармаҡ менән һанарлыҡ.

Рәшит ағай «мөхәббәтле» һүҙҙәр менән өндәште (теүәл генә һүҙен хәтерләмәйем). Үҙен гәзит-журнал биттәренән күреп танығас:

– Һеҙ миңә атайым яғынан туған кеше әле, – тип ҡырыҫ ҡына яуапланым.

– Тукта-тукта, һин кем булаһың? Ниңә улай асыуланаһың, һин мине белмәйһең бит әле, – тине.

– Рәшит Солтангәрәевты танымаҫҡа!.. – Эре генә телләшәм, үҙем гәзиттең һуңғы битенән күҙемде алмайым. Уҡып бөтөргә ирек бирмәгәненә йәнем көйһәлә, тиҙерәк китергә уйланым.

– Мин – Федоровка районы Юлдаш ауылынан. Хәмиҙулла Юлдашбаевтың ҡыҙы Миңниса. Атайым һеҙҙе һәр ваҡыт, беҙҙең туған, ти торғайны. Атайымдың әсәһе һеҙҙең ауылдан бит, – тинем.

Рәшит ағай шунда уҡ ағайлыҡ дилбегәһен ҡулына алды, хәл-әхүәлемде һорашты. Аҫылғужа тигән егеткә кейәүгә сығып өлгөргәнемде, бергә уҡып йөрөгәнебеҙҙе белде.

– Аҫылғужа ниңә “Совет Башҡортостаны” гәзите редакцияһына инеп сыҡмай? (Рәшит ағай ул ваҡытта гәзиттең әҙәби хеҙмәткәре ине.)

– Ул барып йөрөйсө...

– Мотлаҡ миңә инеп сыҡһын. Яҙышҡан кеше. Эшкә урынлашыр.

– Уҡыуын Аҫылғужа ташламай, уҡып йөрөгәндә кем эшкә алһын инде...

– Ярты көн уҡыр, ярты көн эшләр. Килһен миңә!

Беҙҙең арала ошондайыраҡ әңгәмә булды.

Яҡшы уҡыған һәм йәмәғәтселек эшендә ҡатнашҡан студенттарҙы йәйге ялда Башҡорт дәүләт университеты Германияның Галле университетына бер айға эшкә – ил менән танышырға ебәрҙе, ә немец студенттары беҙгә килде. Ошо төркөмгә Аҫылғужа ла эләкте. Сит илдән йөрөп ҡайтҡас, уның “Совет Башҡортостаны” гәзитенең ике-өс һанында юлъяҙмалары баҫылып сыҡты һәм, күп тә үтмәй, гәзиттең баш мөхәррире Абдулла Ғиниәт улы Исмәғилевтың: “Ҡайҙа йөрөй шул егетегеҙ, ни эшләп килмәй?” – тигән сәләмен алдыҡ. Шулай итеп, Аҫылғужаның яҙмышында боролош яһарлыҡ тәүге һүҙҙе Рәшит ағай әйткәндер, тип уйлайым.

...Аҫылғужа Динис һәм Рәшит ағайҙар менән сәнстереп һөйләшергә ярата торғайны. Аҫылғужаның Рәшит ағайҙың ҡайһы бер яҡтарын тәнҡитләп, бәреп әйткән саҡтары булды, шуға яуап итеп, ағайыбыҙ уға анекдот уйлап тапты. Ул анекдотты башҡалар үҙҙәренсә һаплап, хатта матбуғат биттәрендә баҫтырып сығарҙы. Башта минең бик ныҡ йәнем көйгәйне, хатта Рәшит ағайҙың тетмәһен тетергә лә йыйынғайным. Аҫылғужа: “Ҡуй, юҡ менән булашма, ул бит – реклама. Даным арта, шуға сыҙашмайҙар“, – тигәс, туҡталдым. Ғәжәп хәл: бер-береһенә әсе-әсе тондорһалар ҙа, дуҫ булып ҡалдылар. Һуңғы тапҡыр Баймаҡ ял йортонда ял итеп, бер-береһенә бәхилләшеү һүҙҙәрен әйттеләр, буғай. Гәрсә Аҫылғужаның һөйләгәндәренән миндә шундай фекер ҡалды. Эре сирттереп, дәрәжәһен белеп кенә йөрөгән Рәшит ағайҙың да бик ныҡ нескә күңелле икәнлеген белдек.

***

Мин “Ватандаш” журналында эшләгән саҡта Мөхтәр Сәғитовтың ҡатыны Тәлиғә апай Рәшит ағайҙың 1967 йылда матбуғатта баҫылып сыҡҡан “Тыуған йорт” исемле китабын индереп сыҡҡайны. Был китап икеләтә ҡиммәт: берҙән, Солтангәрәевтың тәүге хикәйәләр йыйынтығы, икенсенән, уның һәр хикәйәһенә Мөхтәр Сәғитов йыйнаҡ ҡына фекерҙәрен ҡәләм менән бите битенә теркәп ҡуйған. Мәҫәлән: “Аҡбәкәл” хикәйәһенә: “Рәшит Солтангәрәев үҙенә генә хас оҫталыҡ менән, ҙур лирик йылылыҡ менән ат ҡараусы Ҡорманғазыны һүрәтләй, уның фажиғәһен күрһәтә. Йылҡысылыҡ, яҡшы ат тоҡомо һаҡлауға барлыҡ ғүмерен биргән Ҡорманғазы, ашығыслыҡ менән сығарылған законға ярашлы аттар бөтөрөлгәс, хатта иң һуңғы өмөтө – тоҡомло Аҡбәкәлде лә һуйғас, үҙен маҡсаты бөтөп, өмөтө һүнгән кеше итеп күрә, аңҡы-тиңке килеп йөрөй ҙә үлеп китә. Йылҡысылыҡты бөтөрөүсе, һуҡыр рәүештә күрһәтмә буйынса ғына йәшәүсе директорҙы Р. Солтангәрәев тәнҡитләй.

С. Айытматовтың “Хуш бул, Гөлһары!”һына яҡын, ауаздаш. Һуңғы йылдарҙа йылҡыны бөтөрөү бик ҡыҙыуланды. Борондан ат һөйәр халыҡта был бик ауыр кисерештәр тыуҙырҙы. Ҡырғыҙ, башҡорт халыҡтары күсмә тормошта йәшәгән, йылҡысылыҡ буйынса бай тәжрибә туплаған. Атты яҡлау темаһын һәр халыҡ яҙыусылары үҙенсә күтәрә һәм хәл итә. Шуныһы: хәҙер йылҡысылыҡҡа бер аҙ ҡараш үҙгәрә башланы”, – тип яҙып ҡуйған. Хикәйәнең һуңғы битендә: “Мәсәғүтов үҙен ғәйепле һанамай, еңел йәшәүҙе ярата”, – тигән өҫтәлмә индергән.

“Аҡбәкәл” хикәйәһе менән йыйынтыҡтың асылыуында ла бер ғиллә бар, минеңсә, ул – яҙыусының был китапҡа индерелгән хикәйәләренең иң кәттәһе. Бында ябай ғына тормош-көнкүреш ваҡиғалары аша башҡорт рухы, башҡорттарҙың тоҡомло аттарҙы тәрбиәләү йолаһы, атҡа ҡараш, балаларға әлмисаҡтан атҡа һөйөү уятыу, уларҙы кесе йәштән һыбай сабырлыҡ итеп үҫтереү кеүек сифаттар һүрәтләнә. Шул уҡ ваҡытта һәр нәмәгә уйһыҙ, вайымһыҙ ҡараған,

хужалар ни ҡушһа, шуны ҡол кеүек өнһөҙ үтәгән ауыл халҡының психологияһы оҫта тотоп алынған. Был маңҡорттар араһында ябай ат ҡараусы Ҡорманғазы яҙыусы тарафынан белемлерәк, аҡыллыраҡ, киләсәк тураһында алдан хәстәрләй белеүсе аҡыл эйәһе итеп күрһәтелә. Хикәйә элекке совхоз директоры Мәсәғүтовтың, ҡалаға күсеп китһә лә, оялмайынса, мәрхүм Ҡорманғазының ҡатыны Сәмсиә апай әҙерләгән ҡымыҙҙы, ара алыҫлығына ҡарамай, көн аша килеп алырға батырсылыҡ итеүе, Сәмсиәнең өнһөҙ аласығына инеп юғалыуы менән тамамлана. Яҙыусы шулай  еңел-елпе хужалыҡ итеп, аҙаҡ ҡалала оя ҡороп, һаман да әре ҡорттай үҙ файҙаһына йәшәүсе, ситтән килтерелгән ваҡытлы директорҙарҙы тәнҡитләй.

Мөхтәр Сәғитов был хикәйәлә яҙыусының: “Беҙҙең тирәләге бер нисә колхозды ҡушып, совхоз ойошторғандар. Яңы килгән директор: “Аттарҙың файҙаһы юҡ”, – тип, уларҙың ҡайһыһын кешегә һуғымға һаттырған. Элек өс упшыға һыймай йөрөгән йылҡы хәҙер береһенең яртыһында ғына тора”, – тигән юлдары яҙылған урынға билдә ҡуйып киткән.

Хикәйәне уҡып сыҡҡас та, Таймаҫ урта мәктәбе эргәһендәге йылғаға һыулауға төшөп йөрөгән тиҫтәнән артыҡ ат туплауы күҙ алдыма баҫты. Анау хәтле ҙур ауылға, эргәһендәге совхоз үҙәгенә ике-өс тиҫтә ат аҙ икәнлеген ҡайҙа инде ул саҡта беҙгә, уҡыусы балаларға, аңларға!

Мөхтәр Сәғитов аттарҙы бөтөрөү законы сығарылған осорҙо яҙыусы әҫәрендә тағы бер тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алыуҙы кәрәк тапҡан, күрәһең. Совхозды хөкүмәт иҫәбенә машина-трактор станциялары менән тәьмин иткәс, аттар кәрәкмәй, тип иҫәпләгән халыҡтың хатаһын йәш быуын күңеленә һеңдереп ҡалдырған. Шул замандың хатаһын һаман да төҙәтә алмай интегәбеҙ бит. Уйлап ҡараһаң, Рәшит ағайҙың быны яҙғанына ла утыҙ йылдан ашыу ваҡыт үткән.

Рәшит ағайҙың “Көҙгө юлда” хикәйәһе һуңына Мөхтәр Сәғитов: “Студентканың шофер егеткә мөхәббәте. Егет үҙен бик ғорур тота. Ул ҡыҙҙың ғорурлығын һындыра, еңеүсе булып ҡала”, тип яҙып, шофер егеттең, ямғырлы, һалҡын көнгә ҡарамай, өҫтөндәге фуфайкаһын батҡан машинаһы тәгәрмәсе аҫтына ырғытыуы һүрәтләнгән урынға: “Быныһы арттырылған түгелме?” – тигән һорау ҡуйған. Тимәк, Мөхтәр Сәғитов ошо һүрәтләмә менән килешеп бөтмәһә лә, бәлки, автор дөрөҫтөр, тигән фекергә лә урын ҡалдыра.

Был хикәйәһендә лә яҙыусы кеше психологияһына баҫым яһай. Шофер егеткә ул исем дә бирмәй, сөнки кеше булып ҡалыу мөһим, эш исемдә түгел бит. Студентка Диана ауыл егетен һөйһөнмәй, хатта кәмһетеберәк ҡарай. “Бейей беләһегеҙме һуң?”, “Һеҙҙән ҡурҡмаһаҡ”, “Һеҙҙекеләр ана теге яҡҡа китте, шикелле” тигән ябай аралашыу һүҙҙәре аша яҙыусы уның эрелеген билдәләй. Йәнәһе, ауыл егете бейей ҙә белмәй, өрәк кеүек йәмһеҙ, бары тик үҙе кеүек ауыл ҡыҙҙары менән генә аралашырға хаҡлы. Аҙаҡ машинаһы батҡаҡлы, ямғырлы юлда батып сумһа ла, студентканы Стәрлетамаҡҡа, хатта китеп өлгөргән поезды ҡыуып барып, “Ҡарағай” разъезына тиклем илтеп ҡуйған шофер егет белемле ҡыҙҙан күпкә юғары булып ҡала. Бындай егеттәрҙе яратмаҫлыҡ та түгел. Хикәйә һуңында ҡыҙ егеткә ғашиҡ, әммә ул юҡ, билдәһеҙлек эсендә ситтә ҡала. Бында яҙыусы оҫталығы тағы бер тапҡыр күҙгә ташлана. Халҡыбыҙ араһында күпме билдәһеҙ шәхестәр бар, улар ябайҙар, күҙгә-башҡа бәрелеп бармайҙар. Яҙыусы “Герои с нами рядом” тигән тәғлиматкә үҙенең нәфис дәлилен өҫтәй кеүек.

Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил яҡшы, ти башҡорт мәҡәле. Рәшит Солтангәрәевтың “Тыуған йорт” хикәйәһен уҡыусы ошо ябай ғына, сит ерҙәргә, Ташкентҡа оҙон аҡса артынан тыуған йортон ташлап киткән кеше образын асыуға,

уның олоғайғас нисек тыуған йортона аяҡ баҫыуын һүрәтләүгә ҡоролған сюжет аша тотош Тыуған илгә һөйөү уятҡанын, таныш хистәребеҙҙе тибрәткәнен тойор.

"Ғөбәйҙулла – төп образ. Еңел кәсеп артынан сығып киткән кеше. Һәйбәт лирик тойғо менән яҙылған хикәйә. Тыуған төйәккә ихтирам, еңел кәсеп эҙләп ситкә китеүселәрҙе тәнҡитләй",– тип тә үҙ фекерен теркәп ҡуйған Мөхтәр ағай. Рәшит ағай китабына ла ошо хикәйә исемен ҡалдырыуы бер ҙә юҡҡа түгел. Яҙыусы өсөн тыуған йорт тотош иле менән бәйле, шуға ла ил проблемаларының ябай халыҡ тормош-көнкүрешендә нисек сағылышын асыҡлай. Уға милләттәштәре, ауылдаштары Тыуған ил һәм тыуған йорт кеүек берҙәй ҡәҙерле, шуғалыр ҙа ситтә ярты ғүмерен уҙғарып, өр-яңынан үҙенең емерек йортонда тормош башларға йыйынған Ғөбәйҙулланы ауылдаштары яҡын күреп ҡаршылай, ярыша-ярыша өйҙәренә сәй эсергә, йоҡлап сығырға саҡыралар. Яҙыусы фекеренсә, тыуған ергә аяҡ баҫыу шатлығы алдында тормош ҡыйынлыҡтары бер ни түгел: йортон да яңыртыр Ғөбәйҙулла, эшен дә табыр.

"Һиҙиәт ағай" исемле хикәйәһендә үҙ-үҙен кәмһетеп, башҡаларҙан үҙен тағы ла нығыраҡ йәберләттерергә ирек биргән, меҫкен булып йөрөгән Һиҙиәттең, Мөхтәр Сәғитов билдәләүенсә, бер ҡатлылығында яҙыусы ҡатмарлы характерҙы тотоп алған. Йомоҡ Һиҙиәт торғаны бер моң тоҡсайы икән дә! Уның бөтә ауылдаштарын таң ҡалдырып, асылып китеп, "Сибай"ҙы башҡарыуы үҙе үк был кешенең күңелендә һәр кемгә лә билдәле булмаған моң-һағыш, ҡайғы-хәсрәт ятыуын дәлилләй. Яҙыусы ул хәсрәтте асыуҙы кәрәк тапмай, әммә Һиҙиәттең бай хисле күңеленең буш түгеллеген бер генә миҫал менән оло фекер тыуҙырған да ҡуйған.

Мөхтәр Сәғитов Рәшит ағайҙың һуңғы өс хикәйәһенә тәнҡит күҙлегенән сығып ҡарай: "Үҙ һүҙле ҡыҙ" хикәйәһендә "Ике йәш кешенең осрашыуы. Яңы йылды ҡаршылауы" һүрәтләнә. "Сюжет ҡыҫҡа". "Иҫке дуҫтар" әҫәрендә "логика бик үк етешмәй". "Юл кешеләре" – юлъяҙмаға оҡшап ҡала. Сюжет бик һай". Мин дә уның был фекерҙәре менән килешәм. Улар, хикәйәнән бигерәк, нәҫергә тартым, тим.

Рәшит ағай шулай итеп тәүге китабынан уҡ үҙен маһир хикәйәсе, персонаждарының ябай тормош ағышы аша кинәйәле мәсьәләләрҙе күтәрерлек, типик образдарҙың психологияһын тәрән белеүсе һәм уны уҡыусыға нәфис тос һүҙ, йыйнаҡ сюжет аша бирә белеүсе оҫта яҙыусы итеп танытты. Ул шулай беҙҙең күңелдәрҙә, һәр уҡыусы йөрәгендә йәшәйәсәк.

## УТ АЛЫРҒА ИНӘМ КҮРШЕМӘ



Салт аяҙ көҙ ине. Тирә-яҡ алтынға мансылған кеүек. Аяҡ аҫты тулы алтын-һары япраҡтар. Кешеләр ҙә урамда нисектер шат йылмайып йөрөгән кеүек, сөнки беҙ Башҡорт дәүләт университетына уҡырға килдек, шуға күрә донъя һоҡланып туймаҫлыҡ матур. Йәшлек шулай беҙҙең күбәләктәй күңелдәрҙе өҫтән осорғандыр ул саҡта. Университеттың 1-се ятағына урынлашып, ары-бире иткәс, редакцияға барып, танышып, әҫәрҙәребеҙҙе тапшырырға йөрьәт иттек. Һабаҡташым Факиһа Нафиҡова (хәҙер Туғыҙбаева) менән Пушкин урамына барыуын барып еттек тә (элек "Совет Башҡортостаны" гәзите редакцияһы шунда урынлашҡайны), инергә ҡыймай, икенсе ҡаттың тәҙрәләренә юҡ-юҡта

күҙ һалыбыраҡ, мәктәп ҡоймаһы янында туҡтап ҡалдыҡ. Унда бер ҙур мыҡты кәүҙәле, беҙҙең атай-ағайҙарҙыҡы һымаҡ ҡуйы ҡара ҡашлы, имәндәй бер күркәм ағай кемделер көтөп тора. Беҙгә әйләнде лә:

– Һеҙ кемгә килдегеҙ, һылыуҙар? – тип һораны. Уның көр тауышынан беҙ шиңеп ҡалғандай булдыҡ. Факиһа үҙен тиҙ ҡулға алды:

– ”Совет Башҡортостаны” редакцияһына.

Ул беҙгә икенсе ҡатҡа күтәрелеп, ”Әҙәбиәт бүлеге” тип яҙылған бүлмәгә инергә ҡушты.

– Ҡайһы районданкилдегеҙ? – тип төпсөндө ул.

Беҙ инде уның асыҡ йөҙөнән, алсаҡ һөйләшеүенән көс-кеүәт алып, кемуҙарҙан беребеҙҙең Бүздәктән, икенсебеҙҙең Федоровка районынан икәнлегебеҙҙе белдерҙек. Ағай кеше Бүздәкте яҡшы белә икән, Факиһанан әллә күпме таныштары хаҡында белеште лә, миңә ҡарап:

– Ә һин Фиҙаровканың ҡайһы ауылынан? – тип һораны.

Үҙе минең район исемен боҙоп әйткәнгәме, мине ҡыйыуландырырға теләпме, шат йылмая.

– Юлдаштан.

– Батыр ауылын беләһеңме?

– Беләм. Беҙҙең ауылға 18 саҡрым ғына ул...

– Минең служак йәшәй унда.

Бына шулай осраҡлы таныштым мин Динис ағай менән. Уның Динис Бүләков икәнен Аҫылғужаның тыуған көнө килеп еткәс кенә белдем. Ишетеүгә йыш ишеттем. Күргәнем юҡ ине. Үҙенән теге саҡ: ”Ә һеҙ кем булаһығыҙ?” – тип һорарға ҡыйыулығыбыҙ етмәне.

Икенсе курста уҡ Аҫылғужа менән өйләнештек. Ирем Бабич ижады менән ныҡ ҡыҙыҡһына ине, курс һәм диплом эштәрен дә Бабич ижадына арнаны. Динис ағай ҡайҙандыр шул хаҡта ишетеп белгән дә, Бабичтың ”Һайланма әҫәрҙәр”ен тотоп, беҙгә килеп инде. Аҫылғужа менән күптән таныш икән, ә ҡатыны Рәйлә апай менән мин әле йәшәгән йортта ғына яҡындан аралашып, һөйләшеп киттем.

Тормош ҡаҙанында ҡайнайбыҙ. Бер юлдан да йөрөйбөҙ. Башҡа яҙыусыларҙың юбилей тантаналарында табындаш та булдыҡ. Ут күрше булып китеүгә тәүге аҙым бишенсе курста уҡып йөрөгәндә яһалды: Аҫылғужаны уҡып бөтмәҫ элек ”Совет Башҡортостаны” редакцияһына эшкә алдылар, һәм беҙгә Динис ағай фатир табып бирҙе. Черниковка ҡасабаһынан фатир алған да үҙе йәшәп киткән бер опекундың фатирында үҙебеҙҙең «ҡыуышыбыҙ булғансы» йәшәп торорға күндергән. Шулай итеп, Динис ағай беҙҙең Өфөлә йәшәп китеүебеҙ хаҡында аталарса хәстәрлек күрҙе. Ошо опекундың фатирында Сафуан Әлибаевтар ҙа уларҙан алда йәшәп киткән икән. Шулай итеп, өс таған беректе лә ҡуйҙы.

Әле йәшәгән йортобоҙға ордер алғанбыҙ, тик күсергә рөхсәт юҡ. Аҫылғужа, сыҙамайынса, мине килтереп күрһәтергә булды. Яңы ғына һалынып бөткән йорт янына беҙҙең кеүек түҙемһеҙҙәр ҙә килеп еткән, һәр береһе үҙенең фатирының ҡайһы тирәләрҙә икәнен самалай. Беҙ ҙә ишектән артҡараҡ сигеп, бишенсе ҡаттағы ихатаға ҡараған тәҙрәһенә текәлдек, әйтерһең, шунан фатир эсе күренә инде.

– Сәләм, һәүрек!

Аҫылғужаның йыш ҡулланған һүҙе менән бары тик дуҫтары ғына шулай үҙенә өндәшә ине. Динис ағай, ҡулдарын осар ҡоштай йәйеп, урам яҡтан боролоп йортҡа табан килә. Ахылдашып ҡосаҡлашып, шаярышып алдылар.

– Слушай, Аҫылғужа, һинән ҡотолоп булманы инде! Бында ла килеп еткәнһең! – тип Динис ағай шат йылмая.

Уларҙың шау-шыуынан ихата тулып китте. Икеһенең дә тауыштары көр. Икеһенең шаярып һөйләшеүенән күңел шул тиклем үҫешә, ирекһеҙҙән һин дә шул шатлыҡ ташҡынына эләгәһең.

– Минең фатир – бынауһы! Теге яҡта лоджия, был яҡта балкон, – тине ағай. – Сафуандар ҙа был йорттан алған фатирҙы.

– Мирастар беҙҙең подъездан алған, – тип бүлдерҙе уны Аҫылғужа.

Таныштар менән бер йортта йәшәребеҙҙе белгәс, былай ҙа ҙур шатлығыбыҙ сиктәренән ашты. Шау-гөр киләбеҙ. Беҙҙең өсөн миллионлы ҡала шауы ла ишетелмәй, донъяла беҙҙән ары бер кем дә юҡ һымаҡ. Мин айырылған ҡаҙ бәпкәһенең, үҙ төркөмөн тапҡас, шатлыҡтан тотош ҡаҙҙарҙың бер-берейһенә яҡын барып, ирен терәрҙәй булып ҡаңғылдашҡан мәлен гел генә ошондай саҡтарҙа күҙ алдына килтерә торғайным.

Динис ағай беҙҙе йорттоң алғы яғына әйҙәне.

– Бына бында минең таҡтаташ торасаҡ!

– Бәлки, минеке тороп, – ти Аҫылғужа.

– Мин хужа кеше, бында мотлаҡ минеке торорға тейеш! Һиңә бына эргәмдән йәнәш урын бирәм.

– Ә Сафуанға ҡайҙа?

– Ул үҙен генә ҡарап йөрөгән кеше, беҙҙән артта ҡала ул.

Ул һөйләшеүгә 27 йыл тирәһе ваҡыт үткән, ә ваҡиға бөгөнгөләй күҙ алдымда тора. Миңә бик нык оҡшамағайны ошо һүҙҙәре. "Алйоттар!" тип әрләп, үсегеп тә ҡуйғайным... Алланың "Амин!" тигән сағына тап килгәндер, Хоҙайым! Тап шулай булды. Бер-бер артлы китеп тә барҙылар, әүлиә шикелле, икеһе лә, үлерҙәрен алдан белгән кеүек, һабаҡташтары, дуҫтары һәм туғандары менән алдан бәхилләшеп йөрөнөләр.

Өйҙә лә, баҡсала ла ут-күрше булғас, машинабыҙ юҡ саҡта, йә Динис, йә Сафуан ағайҙар беҙҙе баҡсанан нисәмә-нисә йыл өйгә алып ҡайтып йөрөнө.

Фатирҙарыбыҙ стена аша йәнәш булғас, Аҫылғужа менән Динис ағай лоджиянан лоджияға аша атлап йөрөй ҙә башлағайнылар. Ишектәре эстән бикләнеп, үҙҙәре тышта ҡалдылар бер. Рәйлә апай китте лоджиянан лоджияға! Шунан һуң, бишенсе ҡаттан тәгәрәп төшөп имгәнеп ҡуймаһындар тип, иң беренсе лоджияға тәҙрә ҡуйыу сараһын ашыҡтырҙым. Тәҙрә генә кәртә буламы һуң инде күңеле киң кешегә! Шул тиклем йомарт, ҡунаҡсыл булды Динис ағай. Рәйлә апай ҙа, быуынынңа төшөп булһа ла, сәй эсермәй сығармай.

Динис ағай мәрхүм булғас, мин шул тиклем ҡаты иланым, хатта Аҫылғужа аптыраны.

– Яман ҡарама, ул бит беҙҙең быуынға юл башланы. Хәҙер быуабыҙ йырылды инде!.. – тинем, сөнки ҡапыл теге ваҡиға иҫемә төштө һәм йөрәгемде тәүге тапҡыр ғазраил быуып алғандай булды. Минең дә күңелемә күрәһеләрем алдан тойолдомо әллә, тип уйлап ҡуям хәҙер. Динис ағай менән Аҫылғужа Яҙыусылар союзында эшләгән саҡта, идара ла, үҙҙәре кеүек, ҡайнап йәшәне: күпме осрашыуҙар, күпме кисәләр... Иң ауыр мәлдә, башҡортобоҙ, Башҡортостаныбыҙ, илебеҙ-телебеҙ тип көрәшкән осорҙа эшләне улар. Беҙҙең баҡсала ғына (аэропорт яҡын) күпме яҙыусы, күпме кеше булып киткәне – һанһыҙ! Ярһып эшләнеләр ҙә, ярыш аты кеүек, сабып барған ерҙәренән гөрһөлдәп ауып та киттеләр. Йәш, ғәйрәтле көйө ...Үкенес! Бик нык үкенес!

Баҡсала ла, тормошта ла һиллек, хатта ҡайһы бер ваҡыт саң ҡаҡҡы килә. Элек тә шулай кешеләр тыныс, шым йөрөнө микән? Әллә минең эргәлә тормош урғылып, дәртле шаулағанға, башҡаларҙы күрмәнем дә, ишетмәнем дә микән?! Улай тиһәң, мин бит һәр ваҡыт кешеләр менән ихлас аралашып йәшәнем,

әҙәбиәт ҡаҙанында бергә ҡайнаным, әле лә әҙәбиәттән айырылғаным юҡ. Был эс бошоу баҡсала бигерәк тә көсәйә, күршеләремдең килеп ингәнен түҙемһеҙлек менән көтәм. Ни тиһәң дә, беҙ бер ғаилә кеүек, дуҫтарыбыҙ менән ғүмер буйы матур йәшәнек, ярышып донъя көттөк, бер-беребеҙҙең уңыштары өсөн ысын күңелдән шатлана белдек, күпме кәңәштәр ҡорҙоҡ...

Эштә минән берәү:

– Өйҙә лә, баҡсала ла шул кешеләр... Ялҡытмаймы? – тип һораны.

Мин әйтәм:

– Юҡ! Мин уларҙы хатта һағынам әле. Ҡыш йыш осрашып булмай, йәйен баҡсала рәхәтләнеп күрешәбеҙ. Мин уларҙан күңелемә ”ут” алам. Күршеләрем кеүек кешеләр араһында үҙемдең башҡорт интеллигенцияһы вәкиле икәнлегемде тойоп йәшәйем.

– Ниндәй ут?

– Элек шырпы булмағанда, күрше усағынан һоҫҡо менән ут алғандар, ә мин уларҙан күңел йылыһы, йәшәргә дәрт алам. Әҙерәк ҡанаттарым төшөп барғанда, һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырып, маҡтап ебәрһәләр, әллә күпме эште ”ҡыйратып” ташлайым. Рәйлә апайҙың йәшәүгә дәрте миңә генә түгел, минең кеүек күңеле һынған бихисапты ҡаяға мендерерлек. Ауырыумын тимәй, мунсаһын йүнәттерҙе, нисә барһаң, әле бәйләй, әле сигә... Өйөн ҡул эштәре музейы һымаҡ тота. Баҡсала сәскәләр үҫтерә. Ә ниндәй аш оҫтаһы! Иң ауыр саҡтарымда мин күршеләремә сығам, уларға ҡарап йәшәргә дәрт алам. Ә Фәрҙиә апайҙың тел байлығы – үҙе бер яҙылмаған китап! Сафуан ағай менән икеһенең концертын бер тамаша менән дә алмаштырып булмай. Улар бит минең Динис ағайҙы, Аҫылғужаны, бергә үткән йәшлегебеҙҙе һағыныуымды баҫа...

Хәтеремдә, бер баҡсанан Динис ағайҙың ”Нива”һында ҡайтып киләбеҙ. Әй урамында беҙҙе ”Форд” үтеп китте. Сит ил машиналарының һирәкләп кенә күренә башлаған мәле ине.

Динис ағай күҙлеген рәтләп кейеп алды ла:

– Бынауы мине уҙырға уйлаймы?! Уҙҙырмын хәҙер!

Шул тиклем машинаһын ҡыуып алып китте – тегене генә түгел, әллә нисә машинаны артта ҡалдырып, ҡоштай осоп, өй янына ҡайтып еттек. Динис ағай баҡсаға килһә, иң беренсе машинаһын бипелдәтә. Аҫылғужа: ”Динис килде!” – ти ҙә уның янына тәмәкеһен тотоп сығып китә. Мин: ”Юғалма!” – тип бурылдап ҡалам. Беләм: улар барыбер әҙәбиәт, донъя хәлдәрен һөйләшеп, фекер алышып бөтмәйенсә айырылышмаясаҡ. Аҙна һайын ҡабатланған ошо күренеш шул тиклем күңелемә һеңгән – ҡапҡа төбөндә машина бипелдәһә, хәтерем яңыра ла ҡуя. Динис ағай шаулап килеп инер ҙә: ”Һәүректәр, ни эшләп ултыраһығыҙ, хәл дә белмәй!” – тип битәрләп ташлар кеүек.

Баҡсабыҙҙа һиллек. Ҡош тауыштары ла үтә нык ишетелә миңә, ҡолаҡты ярып инә. Динис ағай менән Аҫылғужаның ғына тауышы ишетелмәй. Башҡа ир-ат тауышы ла ҡолаҡҡа салынмай. Баҡсабыҙҙа ир тауышы етешмәй. Мин ирем һәм Динис ағай үлсәмендә йәшәйем. Тормоштоң ваҡ ҡына ваҡиғаһын да уларҙың һүҙҙәре һәм эштәре менән сағыштырам, улар һаман да минең менән йәнәш йөрөй, сөнки яҙған китаптары һәр ваҡыт күңелем түрендә генә ята...

**Миңниса БАҺУМАНОВА.**

## ТЕЛ ҒИЛЕМЕН НИГЕҘЛӘҮСЕЛӘРҘЕҢ БЕРЕҺЕ

*(Ғәббәс Дәүләтшиндың тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы)*

Ғәббәс Йәғәфәр улы Дәүләтшин 1892 йылдың сентябрендә элекке Һамар губернаһы Пугачев өйәҙенең Ташбулат-Көстән ауылында тыуған. Башланғыс белемде ауыл мәҙрәсәһендә ала. Беренсе Бөтә донъя һуғышында ҡатнаша. 1919 йылдан мәғариф өлкәһендә (1929 йылда Ленинградҡа Көнсығыш телдәре институтында аспирантураға киткәнгә ҡәҙәр) төрлө вазифала эшләй. Аспирантуранан һуң, 1932 йылда, К. А.Тимирязев исемендәге Башҡортостан педагогия институтының башҡорт теле кафедраһы мөдире итеп тәғәйенләнә. 1937 йылдың августына тиклем ошо вазифаны башҡара.

Ғәббәс Дәүләтшин — хәҙерге башҡорт тел ғилеменә нигеҙ һалыусыларҙың береһе. Был уның фажиғәле яҙмышҡа дусар ителеүенә бер сәбәп тә булды. Яманатлы 37-се йылдың ут-ялҡынын беренселәрҙән булып татыны ул.

Белеүебеҙсә, «Башҡорт теленең орфография һүҙлеге» 1930 йылда донъя күрә. Архив материалында уның авторы телгә алынмаһа ла, ғәйепләүсе өсөн был йомаҡ булмағандыр. Сөнки тәфтишсе ғәйепләү актының иң тәүге пункты итеп Ғ. Й. Дәүләтшиндың һүҙлек өсөн архаик башҡорт, шулай уҡ ғәрәп һүҙҙәрен йыйыу менән шөғөлләнеүен килтерә. Был, йәнәһе, уның тарафынан башҡорт телен аңлауҙы ауырлаштырыу һәм шуның менән башҡорт халҡының советлашыуына аяҡ салыу маҡсатында эшләнә.

Ғ. Й. Дәүләтшиндан һорау алыу протоколынан күренеүенсә, ғалим күплек ялғауҙарының дүрт формала йөрөүе норма булған ҡыуаҡан һөйләшен әҙәби телгә нигеҙ итеп алыуҙа ғәйепләнә. Был һөйләште индереүҙең маҡсаты — башҡорт халҡының иң ҙур өлөшө һөйләшкән телдең таралыуын тотҡарлау, шуның менән башҡорт массаларының советлашыуында ауырлыҡтар тыуҙырыу.

Ғ.Й. Дәүләтшинды ҡыуаҡан һөйләшенә бәйле ғәйепләүҙә йәнә бер документтың тауышы ишетелеп ҡалғандай була. Был — протоколда «кантон» һүҙенең килеп инеүе. Беҙгә республиканың административ бүленешенең 1930 йылда уҡ үҙгәреүе, уны дөйөмләштереү

һөҙөмтәһендә «кантон» төшөнсәһенең шул йылда ҡулланыуҙан төшөп ҡалыуы билдәле. Әммә тәфтишсенең был төшөнсәне ҡулланыуы уның әҙәби тел тирәһендә барған бәхәстә күпмелер дәрәжәлә хәбәрҙар булыуын дәлилләй. Сөнки алда Арғаяш, Белорет һәм Йылайыр кантондарына бәйле фразаның туранан-тура БАССР Мәғариф халыҡ комиссариаты коллегияһының «Башҡорттарҙың әҙәби теле тураһында» 1924 йылдың 20 февралендә ҡабул иткән ҡарарына бәйле булыуына һәм унан һүҙмә-һүҙ алыныуына шик юҡ. Шулай итеп, әҙәби тел тирәһендә барған бәхәскә республиканың НКВД органдары асыҡтан-асыҡ ҡушылып киткән булып сыға.

Белеүебеҙсә, әҙәби тел тирәһендәге бәхәс үҙенең башын Шәһит Хоҙайбирҙиндың 1924 йылдың 6 февралендә «Башҡортостан хәбәрҙәре» гәзитендә баҫылып сыҡҡан «Нисек яҙырға?» исемле мәҡәләһенән ала. Унда автор әҙәби телгә нигеҙ итеп тамъян-ҡатай һөйләшенең алыныуын дөрөҫ түгел тип таба һәм әҙәби телгә ҡарата үҙ ҡарашын белдерә. Уның, милләттең күпселегә өсөн уртаҡ һөйләш булыуы менән бергә, ҡулланыу өсөн еңел һәм уңайлы булыуы мөһим. Бер үк ваҡытта Ш. Хоҙайбирҙин был мәсьәләгә уның дәүләт теле вазифаһын үтәүгә һәләтле булыуы күҙлегенән яҡын килә. Ул, Юрматы, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән һымаҡ ырыу башҡорттары һөйләшкән тел был йәһәттән уңайлы буласаҡ, тип һанай. Уларҙы күплек ялғауҙарының «лар» формаһында йөрөүе берләштерә. Әммә тамъян-ҡатай һөйләшендә милләттең бик аҙ өлөшө генә һөйләшә. Автор уның әҙәби телгә нигеҙ итеп алыныуын ғилми ойошма — Академүҙәктең хатаһы итеп һанай һәм был мәсьәләгә дөйөм дәүләтселек мәнфәғәтенән сығып яҡын килеү кәрәклеген ҡуя. Әммә был үҙ ваҡытында яҡлау таба алмай. Ғилми үҙәк әҙәби тел тирәһендә барған бәхәсте тағы ла киңәйтә төшөп, тотош ҡыуаҡан һөйләше исеменән эш итеүгә күсә.

Күренеүенсә, Ғ. Й. Дәүләтшин ошо ҡыуаҡан һөйләше яҡлы булыуҙа ғына түгел, хатта әҙәби телгә шул һөйләште нигеҙ итеп алыусы сифатында ғәйепләнә.

Тарихи ғәҙеллек хаҡына шуны әйтергә кәрәк: ҡыуаҡан һөйләше артында икенсе берәүҙәр, юғары вазифалағы, хәҙерге тел менән әйткәндә, административ ресурстарға эйә булған кешеләр тора. Улар Ғәббәс Дәүләтшин Һамар һәм Ырымбур губернаһында халыҡ мәғарифы системаһында эшләп йөрөгән саҡта уҡ әҙәби тел мәсьәләһендә ныҡлы фекергә килгән. Беҙҙеңсә, был фекерҙең ныҡлап тормошҡа ашырыла башлауы 1928 йылға ҡарай. Ул БАССР-ҙың шул осорҙа Үҙәк Башҡарма Комитеты (БЦИК) президиумы рәйесе Х. К. Ҡушаев исеменә бәйле. Ул шул йылдың 12 декабрендә партия Өлкә комитетында башҡорт теленең дәүләт

теле булараҡ ҡайһы һөйләш нигеҙендә тормошҡа ашырыу мәсьәләһен күтәреп сыға һәм, Академүҙәк тотҡан юлдың дөрөҫлөгөн раҫлап, ҡыуаҡан һөйләшенең башҡорт теленең төп һөйләше итеп танылырға тейешлеген нигеҙләй. Кәңәшмә артынса уҡ Академүҙәк 17 декабрҙә уҙғарылған ултырышында ҡыуаҡан һөйләшенең «төп башҡорт теле» булыуы хаҡында махсус ҡарар ҡабул итә. Унда артабан «ҡыуаҡан» һүҙе «төп башҡорт теле» термины менән алмаштырылып, шул төшөнсәлә ҡулланып йөрөтөлөргә тейеш, тип күрһәтелә.

Әммә 1924 йылдың башында, алда әйтелгәнсә, «Башҡортостан хәбәрҙәре» гәзитендә Ш. Хоҙайбирҙиндың «Нисек яҙырға?» исемле мәҡәләһе баҫылып сығыуы, шуның артынса 20 февралдә БАССР Халыҡ Мәғариф Комиссариаты коллегияһының «Башҡорттарҙың әҙәби теле тураһында» ҡарарының донъя күреүе әҙәби тел тирәһендә барған бәхәстә яңы ситуация килтереп тыуҙыра. Сөнки мәҡәләлә лә, ҡарарҙа ла юрматы һөйләшенең башҡорт теленең дәүләт теле вазифаһын тормошҡа ашырыу йәһәтенән ҡыуаҡан һөйләшенән өҫтөнлөгө раҫлана.

Башҡорт телен тормошҡа ашырыуҙа Үҙәк комиссия рәйесе Ш.Хоҙайбирҙиндың мәҡәләһе лә, хөкүмәт кимәлендә ҡабул ителгән ҡарар ҙа Академүҙәкте ауыр хәлгә ҡуймай ҡалмағандыр. Бының ни өсөн шулай икәнлеге аңлашыла, әлбиттә. Ул партия Өлкә комитетында уҙған кәңәшмәнән һуң үҙ исеменән генә эш итә алмай ине. Ике уртала ҡалған Академүҙәк иң элек үҙенең кем алдында яуаплы икәнлеген иҫтә тотҡан булырға тейештер. Шул сәбәпле «юрматыға ҡыуаҡан ҡойроғо ҡушып яһалған» хәҙерге башҡорт әҙәби теле донъяға килә. Был Академүҙәк өсөн кемдер алдында күпмелер дәрәжәлә үҙенә аҡланыу табыуға ярҙам иткәндер.

Әммә күпмелер ваҡыттан һуң, атап әйткәндә, 1927 йылдың декабрь башында уҙғарылған I Бөтә Башҡортостан тел конференцияһында ҡыуаҡан шиүәһе яҡлылар уның өҫтөнлөгөн иҫбат итә. Был хаҡта «Белем» журналында донъя күргән бер мәҡәләлә (1927, № 12): «Беҙҙең ҡыуаҡансы иптәштәр, бөтәһе лә яңы әлифба комитеты эргәһендә уҡмашып, 1 декабрҙә булған тел-имлә конференцияһында дөйөм башҡорттоң әҙәби теле итеп фәҡәт ҡыуаҡан шиүәһен генә әсәс итеп алыу тураһында доклад яһанылар. Шуның арҡаһында ҡыуаҡан шиүәһе дөйөм башҡорттарҙың әҙәби теле булып ҡабул ителде»,— тип раҫланы автор.

Ошо урында йәнә әҙәби тел тарихына Х.К.Ҡушаев исеме килеп инә. Ул ҡыуаҡансылар уҡмашҡан «Яңалиф» комитеты рәйесе була. 1925 йылда ойошторолған был органда етәкселек итеү БЦИК президиумы рәйесенә йөкмәтелә. Бәлки, бында эш уның

ҡыуаҡан һөйләше вәкиле булыуында ла тормағандыр. Әммә шуныһы факт: Академүҙәктең хатта хөкүмәт кимәлендә ҡабул ителгән «Башҡорттарҙың әҙәби теле тураһында»ғы документҡа өҫтән генә ҡарауы, уны үҙенсә хәл итеүе, аҙаҡ килеп, тел конференцияһында ҡыуаҡан һөйләше яҡлыларҙың тамам өҫтөнлөк алыуы был хаҡта уйланырға урын ҡалдыра. Бары партия Өлкә комитетының ошо конференция айҡанлы ҡабул иткән ҡарарындағы бер пункт ҡына уларҙы туҡтатып ҡалыуы бар. Унда: «Вопросы наречий башкирского языка (куакан или юрматы) продолжать научно изучать и считать возможным открыть дискуссию по этому вопросу в печати» тип күрһәтелгән.

Алда Ғ. Й. Дәүләтшиндың тел тирәһендә барған бәхәстә ҡайһы берәүҙәр кеүек асыҡтан-асыҡ ҡатнашыуына дәлил булырлыҡ материалдарҙың матбуғатта ла, архив материалдарында ла осрамауы хаҡында әйтелгәйне инде. Бары һүҙ барған конференциянан алда ғына «Белем» журналының ике һанында (1927, №№ 7-8, 9-10) баҫылған «Әҙәби тел һәм уның ғәмәлдә барышы» исемле мәҡәләһе генә беҙгә уның әҙәби тел мәсьәләһенә ҡарашын асыҡларға күпмелер дәрәжәлә мөмкинлек биргәндәй була. Ул мәсьәләгә тарихи күҙлектән ҡарай һәм әле ҡабул ителгән әҙәби телде дәлилләү маҡсатынан сығып фекер йөрөтә.

Ғалимдың башҡорттарҙы борондан килгән уҡыу-яҙыу теленә ҡарашының хәҙерге концептуаль ҡарашҡа ауаздаш булыуы уның был йәһәттән үҙ заманы өсөн етерлек кимәлдә әҙерлекле булыуын күрһәтә. Ул башҡорт әҙәбиәтенең революцияға ҡәҙәр үҙ аллы әҙәбиәт булыуын таныуға нигеҙләнеп фекер итә һәм, айырым алғанда, Тажетдин Ялсығол, Ғәли Соҡорой, Аҡмулла, Салауат Юлаев, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың исемдәрен телгә алып үтә, уларҙың тел үҙенсәлеген асыҡлай. Бында әле шуныһы фәһемле: ул әҙәбиәтте ике телле итеп күҙаллай — яҙма башҡорт теле һәм баҫма тел. Уның баҫма теле (йәғни китап теле — **З.Н.**) башҡалар менән уртаҡ ярым сығатай һәм ғосманлы теле булһа, яҙма теле, йәғни ҡулъяҙма әҫәрҙәр теле — үҙ осорона хас башҡорт теле. Ошо урында М. Өмөтбаевтың да, Ғ. Дәүләтшин уй йөрөткәнсә, бүтәнсәрәк итеп, башҡорттарҙың уҡыу-яҙыу теленә ике күҙлектән ҡарауы хәтергә килә. Ул «аҫаба башҡорттар ҡайһы берәүҙәр уйлағанса ҡазанса (йәғни баҫма телдә — **З.Н.**) түгел, ә Ырымбур крайының (йәғни үҙ тыуған еренең — **З.Н.**) дөйөм ҡулланыла торған һөйләшендә яҙалар» тип раҫлай бер хеҙмәтендә.

Минеңсә, Ғ. Дәүләтшин «төп башҡорт теле» менән «бер аҙ татарлашҡан башҡорт теле», «төп башҡорт теле» менән һөйләшә торған башҡорттар» һәм «татарлашҡан башҡорттар» хаҡында һүҙ алып барғанда оҙон дәүерҙәр башҡорттарға хеҙмәт итеп килгән, үҙе әйткәнсә, улар ҡулланған баҫма (китап) телдең, йәғни

иң элек сығатай төркиенең, уларҙың һөйләшенә йоғонтоло булыуын күҙ уңынан ысҡындырып ебәрә, уны татар теле йоғонтоһона ғына ҡайтарып ҡалдыра. Ул үҙ ваҡытында Ш. Хоҙайбирҙин яҡлаған юрматы, ҡыпсаҡ, үҫәргән кеүек һөйләштәрҙең күплектәге «лар» аффиксының ике халыҡ өсөн уртаҡ сығатай әҙәби теленең йоғонтоһо булыу мөмкинлеген иҫкә алмай. Ул унда бары «төп башҡорт теле» менән «татарлашҡан башҡорт теле» араһындағы айырманы ғына күрә.

Әлбиттә, телгә арналған конференция алдынан матбуғатта былдай һүҙҙең әйтелеүе эҙһеҙ үтмәгән булыуы бар. Әйтелгәнсә, ошо конференцияла фәҡәт ҡыуаҡан һөйләшенең генә әҙәби телгә нигеҙ итеп алынырға тейешлеге хаҡында ҡарар ҡабул ителә лә. Беҙгә әле был ҡарарҙы бөтә нескәлеге менән күҙаллау ауыр. Шулай ҙа уның юрматы һөйләшенә ҡаршы йүнәлдерелгән булыуы асыҡ. Ғ. Й. Дәүләтшин мәҡәләһендә был бары күплек аффикстарына ғына ҡайтарып ҡуйыла. Был инде — ҡыуаҡансылар тарафынан 1924 йылда уҡ үҙ файҙаһына хәл ителгән мәсьәлә. Ул саҡта юрматы һөйләшенә лә әҙәби телдә урын бирелгәйне. Әле килеп конференцияның фәҡәт ҡыуаҡан һөйләше генә әҙәби телгә нигеҙ итеп алынырға тейешлеге мәсьәләһен ҡуйыуы ошо йәһәттән әҙәби телдәге юрматы һөйләшенең өлөшөн шик аҫтына ҡуйғандай була. Әҙәби телебеҙҙең бәхетенә күрә, ҡыуаҡан һөйләше яҡлыларҙың был ниәте ҡағыҙҙа ғына ҡала. Юрматы һөйләше лә унда үҙ өлөшөнөң һаҡланып ҡалыуына өлгәшә.

Бәлки, НКВД органдары ғалимды ҡулға алыу юлын эҙләгәндә уның ошо мәҡәләһенә лә күҙ һалғандыр. Ләкин ул уларға уны ҡыуаҡан һөйләшен әҙәби телгә нигеҙ итеп алыуҙа ғәйепләргә сәбәп була алмай. Сөнки, әйтелгәнсә, был мәсьәлә Ғ. Й. Дәүләтшин Башҡортостанға эшкә ҡайтҡанға ҡәҙәр үк икенсе берәүҙәр тарафынан хәл ителгән була. Шулай уҡ 20-се йылдарҙағы терминология өлкәһендәге буталсыҡтар өсөн дә уны ғәйепләргә урын юҡ. Был эштең дә үҙ авторҙары бар. Ҡыҫҡаһы, НКВД органдары өсөн ғалимдың ниндәйҙер бер конкрет эштә ғәйепле булыуы түгел, уны ғәйепләүҙе нигеҙләү өсөн ниндәйҙер бер factты дәлил итеп таба алыу мөһим. Һорау алыу ваҡытында Ғ. Й. Дәүләтшинға тағылған ғәйептәрҙең алда һүҙ булған архив материалы менән ауаздаш булыуы илдә репрессия башланып китеүенең көтөлмәгән хәл булмауы, уның ижтимағи-сәйәси үҫешенең күптән инде шуны көткәнен раҫланы. Ғәббәс Дәүләтшин дә уның миллион ҡорбандарының береһе булды. Ул 1937 йылдың 22 ноябрендә «тройка» тарафынан атырға хөкөм ителә. Ҡарар 27 декабрҙә ғәмәлгә ашырыла.

**Зиннур НУРҒӘЛИН.**

# ҠУРАЙҒА АРНАЛҒАН ҒҮМЕР

*(Ғата Сөләймәновтың тыуыуына 100 йыл)*



Атаҡлы ҡурайсы, йырсы һәм актер, Башҡортостандың халыҡ артисы, РСФСР-зың атҡазанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғата Зөлҡәфил улы Сөләймәнов 1912 йылдың 15 июнендә донъяға килә. 1988 йылда яҡты донъянан китеп бара. Уға ул ваҡытта 76 йәш тулған була. Ана шул ғүмерҙең алты тиҫтәгә яҡын дәүерен Ғата Сөләймәнов мөкиббән китеп яратҡан тылсым сығанағы ҡурайға бағышлай ҙа инде.

Башҡорт мәҙәниәтендә ҡурай үҙенә тейешле лайыҡлы урынды яулаһын өсөн бөтә булған тырышлығын һалған һәм уға тотош ғүмерен арнаған билдәле шәхес Баймаҡ районының Беренсе Төркмән ауылында тыуып үҫә. Буласаҡ сәнғәт эшмәкәренең яҙмышында үҫмер мәлендәге бер осрашыу хәл иткес роль уйнай. 1926 йылда Темәс волосына театр труппаһы килеп төшә. Тәүге башҡорт театрының тәүге артистары була улар. Башҡорт театр сәнғәтенә нигеҙ һалыусылар Вәлиулла Мортазин, Ғималетдин Минһажевтар йәш егеттә артислыҡ һәләтен күреп өлгөрә: «Ҡустым, һиңә артист булырға кәрәк!»

Өфө театр техникумына ҡурайын алып, ҡанатланып килә ул. Ошонда тәү тапҡыр сәхнәгә сыға, танылған ҡурайсылар Йомабай Иҫәнбаев, Ғиниәт Ушанов, Хәмит Әхмәтовтар менән бергә халыҡ алдында ҡурай уйнау бәхетенә ирешә.

1928 йылда Өфө дәүләт театр техникумы укыусылары «Тутыйҡош ҡабағында» исемле пьеса ҡуя. Унда Ғата Сөләймәнов Этвен ролен, Дауыт Юлтыйҙың «Аҡшан батыр» драмаһында ҡурайсы малай Ҡотош ролен башҡара. Был спектаклдәрҙе шул замандың күренекле режиссерҙары, педагогтар, башҡорт театрының ҙур эшмәкәрҙәре В. Мортазин, М. Мәһәҙиевтар ҡуя.

Техникумдың икенсе курсын тамамлағас, 1929 йылдың май айында, Беренсе дәүләт күсмә театр менән бергә Ғата Сөләймәнов практикант-музыкант сифатында (сәхнә оҫталары менән бер рәттән!) гастролгә сығып китә. Күп тә үтмәй, Ғата, тыуған ауылы Төркмәнгә ҡайтып, шунда эш башлай. Колхоз идараһы секретары, хисапсы булып хеҙмәт итә, ләкин сәнғәттән һис кенә айырылмай. Бер аҙҙан хатта район күләмендә художестволы үҙешмәкәрлектең етәксеһенә әүерелә. Колхоздарҙа йөрөп ҡайтҡан араларҙа Баймаҡ ҡалаһының йәш һәүәҫкәрҙәре менән яңы спектаклдәр әҙерләшә.

Тап ошо йылдарҙа Баймаҡта колхоз-совхоз театры ойоштторола. Яңы ғына техникум тамамлаған йәштәрҙән төҙөлгән театр була был. Бында Арыҫлан Мөбәрәков, Сәхи Сәйетов, Мәхмүт Хәбибуллиндар ижад юлдарын башлай. Ошо коллектив бер аҙҙан Ғата Сөләймәновты ла яңынан сәхнәгә тартып ала. Бында ул артист, ҡурайсы, бухгалтер булып эшләй башлай. С. Мифтаховтың «Һаҡмар»ында Юлай образын сәхнәгә сығара.

1936 йыл Мәскәүҙән комиссия килеп төшә. Асыласаҡ Башҡорт опера театрына

кадрҙар әҙерләү маҡсатында, колхоз-совхоз театрҙары артистарының уйыны менән ҡыҙыҡһына улар. Баймаҡта «Һаҡмар» спектаклен күргәндән һуң, Ғата Сөләймәнов уларҙың иғтибар үҙәгенә эләгә. Шулай итеп, ул, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Мәрхиә Сенәкәева, Ғәйшә Фәррәховалар менән бергә, Мәскәү дәүләт консерваторияһының башҡорт бүлегенә уҡырға китә. Һуғыш башланыу сәбәпле, уларҙың уҡыуы өҙөлә. Шулай ҙа 1942 йылда улар юғары музыкаль белем алыуҙы Өфөлә эвакуацияланған шарттарҙа тамамлап ҡуя.

Был яңы ғына ойошторолған башҡорт опера сәнғәтенең формалашып килгән дәүере була. Юғары белемле йәш солисты Башҡорт опера һәм балет театрына саҡыралар. Ғата Сөләймәнов «Аҡбуҙат», «Ҡарлуғас», «Ашҡаҙар» кеүек тәүге башҡорт опендарында баритон партияларын башҡара. Бигерәк тә А. Спадавеккиа менән Х. Заимовтың «Аҡбуҙат» исемле тарихи-героик әҫәрҙәрендә Һәүбән батыр һәм Мәсем хан образдары йәш солисҡа уңыш килтерә.

1943 йылда Ғата Сөләймәнов Башҡорт художество бригадаһы составында фронтка йүнәлә, һуғыш яландарында үткәрелгән өс ай самаһы ваҡыт эсендә артистар туҡһанға яҡын концерт ҡуйырға өлгөрә.

Йәштәрҙең һәм студенттарҙың Бухареста 1953 йылда үткәрелгән Дүртенсе Бөтөн донъя фестивалендә лә ҡатнаша ул. Бында ул Тамара Хоҙайбирҙина, Мөхәммәт Шәмсетдинов, Мөхәммәт Иҙрисов, Әнүәр Фәхретдинов кеүек бейеүселәрҙең ҡурайсы-аккомпаниаторы була. Ул 1954 йылда СССР-ҙың мәҙәни делегацияһы составында Һиндостан сәхнәләрен ҡурай менән шаулата.

Ғата Сөләймәнов, ҡурайға мөкиббән бирелгән кеше булараҡ, ғүмер буйы уны пропагандалай. Оҙаҡ йылдар дауамында Башҡортостандың төрлө төбәктәрен гиҙеп, 250 тирәһе йыр һәм легендалар туплаған шәхес буларак та уның эшмәкәрлеге иғтибарға лайыҡ. Уларҙың 150-һе уның эшкәртеүендә матбуғат баҫмаларында донъя күргән, 50-ләбе ғилми баҫмаларға инеп киткән. Композитор Камил Рәхимов менән берлектә башҡорт мәктәптәренең 1-2-се кластары өсөн «Йыр һәм музыка дәрестәре» тигән методик ҡулланма әҙерләйҙәр. Ошо ҡулланма һуңынан өс тапҡыр ҡабаттан нәшер ителә. Ғата Сөләймәновтың «Ҡурай» тигән китабы ла бик билдәле. Был китап 1970 һәм 1984 йылдарҙа ҡайтанан баҫтырып сығарыла. Ғата Сөләймәновтың уҡыу йорттарында, эшселәр араһында ҡурайсылар түңәрәктәре ойоштороп, йәштәрҙе ҡурай серҙәренә өйрәтеүе лә уның ижади эшмәкәрлегендә ҙур урын тота. Сөнки билдәле оҫта сәхнәлә үткәрелгән тиҫтәләрсә йылдар дәүерендә һәр саҡ үҙенә алмаш әҙерләү маҡсаты менән янып йәшәй. Ҡурай сәнғәтен өр-яңы бейеклеккә күтәреүе, башҡорт халҡының рухи байлығын үҫтереүҙәге хеҙмәттәре өсөн 1971 йылда ул Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ була.

Ғата Сөләймәновтың актер буларак эшмәкәрлеге – үҙе үк ҙур бер тема. Ул 1947 йылдан алып 1972 йылғаса сирек быуат дауамында Башҡорт академия драма театрында хеҙмәт итә. Ошо йылдар эсендә ул йөҙләп спектаклдә ҡатнашып, шул самаһы уҡ образдар тыуҙыра. Ҡарағол, Иван Иванович, Һөйөндөк, Кондрат Петрович (Дауыт Юлтый, «Ҡарағол»), Ғайса (Сәғит Мифтахов, «Зимагорҙар»), Шатморат (Баязит Бикбай, «Ҡарлуғас»), Аҡназар (Баязит Бикбай, «Ҡаһым түрә»), Әжмәғол ҡарт (Мостай Кәрим, «Ҡыҙ урлау»), Монтано (В. Шекспир, «Отелло»), Петрушин (Л. Толстой, «Тере мәйет») һәм башҡа ролдәрҙе башҡарып, үҙен башҡорт драма сәнғәтенең күренекле оҫтаһы итеп таныта.

Танылған ҡурайсы һәм актер, бөтә булған ижади дәүерендә арымай-талмай сәхнәгә хеҙмәт иткән арҙаҡлы эшмәкәр Ғата Зөлҡәфил улы Сөләймәнов күптән инде арабыҙҙа юҡ, ләкин уның фиҙакәр тырышлығы ярҙамында өр-яңы һулыш алған ҡурай сәнғәте яңынан-яңы үрҙәр яулауын дауам итә.

**Фәниҙә ИСХАҠОВА.**

## ЮРМАТЫНЫҢ ПАЙТӘХЕТЕ

*Иртән генә тороп, ай, ҡараһам,*
*Яңъыҙ саъыл күренә шеш кеүек.*
*Үткән ъүмерҙәрҙе хисаплаһаң,*
*Йоҡоларҙа күргән төш кеүек.*

Ҡасандыр мул һыулы булған Ҡоро Күндрәк йылғаһының ике ярын төйәк иткән Табылды ауылы тамам яҡынламай тороп күренеп тә бармай, сөнки уны тирә-яҡтан бейек кенә ҡалҡыулыҡтар уратып алған. Өй тауы, Ҡыҙҙар тауы, Һырт, Яңғыҙ сағыл мөхитендә борондан көн иткән аҫаба башҡорттар был ерҙең төрлө урындарына атамалар тағып бөткән: Ерекле йылға, Сусаҡ түбәһе, Уба, Ҡайын соҡоро, Тажит, Ҡара тал соҡоро, Ялбыр өйәңке, Сатра, Мөхәррәм күле, Ҡайын үҙәк, Моронаҡ, Йылан тауы һ.б. Бик күп йылдар элек был тирәлә ҡуйы урман үҫкән, мул һыулы йылғалар аҡҡан, күлдәр тулып торған, тигән риүәйәттәр ҙә бар. Уларҙы беҙ, мәҫәлән, 50-се йылдарҙа тыуғандар, бик аҙ ғына күреп тә беләбеҙ. Ә XXI быуатта, унан һуң килгәндәргә был риүәйәт-легендалар, бәлки, ошо юлдар аша ғына барып етә алыр. Халыҡ бөтәһен дә хәтерендә тота алмай, тарих киләһе быуындарға ла етһен өсөн  уны ҡағыҙ битенә төшөрөү фарыз.

Табылдыға ҡасан, кем тарафынан нигеҙ һалына? Һорауға аныҡ яуап юҡ, һәм ул – башҡорт ауылдарына хас күренеш. Табылдының барлыҡҡа килеүе тураһында төрлө риүәйәттәр бар. Ысынбарлыҡты раҫлағаны, моғайын, Юрматы шәжәрәһендәлер, әммә был ҡиммәтле ҡомартҡы 40-сы йылдарға саҡлы һаҡланып, ғәмһеҙлек арҡаһында юҡҡа сыға. 1908 йылғы Сабит Тәтегәсев ауылдың барлыҡҡа килеүен былай аңлата:

– Ауыл Стәрлетамаҡтан бер-ике йыл элегерәк нигеҙләнә. Әүәле бында һаҙлыҡ, урман, ялан булған. Урманда бер бала сәңгелдәге менән элеүле тора ла, шуны табып алалар. Шунан Табылды исеме бирелә.

Был аңлатманың ерлеге шикле: беренсенән, кем инде урманға сәңгелдәк менән сабый алып килһен дә ағас ботағына элеп китһен? Икенсенән, ул сабыйҙың йырткыс, ҡош-ҡорттан имен ҡалыуы ла бәхәсле. Бала ташлап китеүҙе, бәлки, бөгөн күҙәтеп тә булалыр, әммә элекке башҡорттар үҙ тоҡомона етди ҡараған.

Әхтәм Ҡараголовтың (XX быуаттың 20-се йылдарында Табылдыла йәшәгән – **М.Х.**) яҙмалары буйынса, Тәтегәс бей тәүҙә Ашҡаҙар йылғаһының түбәнге ағымында көн иткән. Мәскәүҙән ҡайтып килгәндә Ҡазан яғында Баҡый мулланы оҫрата һәм, иген игергә өйрәтерһең тип, үҙенә саҡыра ла ер бүлеп бирә, мулланың ҡыҙын дүртенсе ҡатын итеп ала. Йәш ҡатынды бейҙең өлкән бисәләре тындырмағанлыҡтан, ул ауырлы килеш атаһы ауылына (әлеге Баҡый – **М. Х.**) табан ҡасып китә.  Хәҙерге Табылды тапҡырында ҡатындың бала табыр мәле етеп, ул малай тыуҙыра. Сабыйға Табылды тип исем ҡушалар. Артабан Тәтегәс ошонда йорт һала, оло ҡатындарын Ҡабыҡҡыуыш ауылы урынына күсерә.

Рәсми сығанаҡтарға ҡарағанда, ауылға XVIII быуаттың икенсе яртыһында

нигеҙ һалына. Тарих фәндәре кандидаты Әнүәр Әсфәндиәровтың «История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий» (Өфө ҡалаһы, 2009) тигән китабында Табылды Стәрлебаш районы ауылдары араһында беренсе булып телгә алына. Тәтегәс түбәһе Юрматы олоҫона ҡараған ауыл Табылды Юлбирҙин тарафынан нигеҙләнгән, тиелә унда.

1816 йылғы рәүиз Юлбирҙиндың 1749 йылда тыуған өлкән улы хорунжий Зәйнәғәбдинде, яһауыл Әбделвәли, Әбделхәлил һәм Әбдрәхим Табылдиндарҙы ла теркәгән. Ауыл халҡы 370 кешегә 200 бот ужым, 1808 бот һабан ашлығы сәскән.

Табылды – төбәк башлығы Тәтегәстең бүләһе, тип яҙа Ә.Әсфәндиәров. 1786 йылғы картала ике Табылды ауылы күренә. 1815 йылда унан Ҡотлоюл бүленеп сыға, унда өс йортта 55 кеше йәшәй. Ауылды һуңыраҡ Яныбай Әлемғолов хөрмәтенә Яныбай тип атағандар. (Әйткәндәй, элек ауылдар исеме йыш үҙгәреп торған, мәҫәлән, Түбәнге Шәкәр – Әлимғужа, Төхвәтулла – Яңы Ҡалҡаш, Ҡайраҡлыбаш Тормай булып китә – **М.Х.**) Яныбайҙың Абдрахман, Әлибай исемле туғандарының Ҡырғыҙбай, Һибәтулла, Ғөбәйҙулла, Мөхәмәтҡужа исемле улдары билдәле. Яныбай ҙа – Тәтегәс бүләһе, ул Табылды менән өс туған. 1834 йылда Яныбайҙа 83 кеше көн иткәне күренә, ти Әсфәндиәров.

## Тәтегәс бей

Табылдыла йәшәгән Рәшит Ишбулат улы Мөхәммәтовтың (1929 йылғы) яҙмаларына ҡарағанда, атаһы яҡлап өләсәһе Ғәмбәрьямал (1844 – 1948) әсәһе яғынан Тәтегәс бей нәҫеленән булып, унда Тәтегәс бейҙең үҙенән ҡалған 500 – 600 битлек яҙмаһы һаҡлана. Вафаты еткәнен һиҙеп, ҡарсыҡ тарихи ҡомартҡыны (ул иҫке төрки телендә ғәрәп алфавиты менән яҙылған – **М.Х.**) ейәне Рәшиткә тапшыра. Берәйһенән уҡытырмын, тип уларҙы Янғол Вахитов (60-сы йылдарҙа иҫән ине – **М.Х.**) һорап ала. Ләкин алты биттән арыһын таный алмайҙар.

1943 йылда Ырымбур өлкәһенең Кәлсер (Габзалово) ауылында йәшәгән сағында Рәшит Мөхәммәтов шул ауылдағы иҫке төркиҙе таныған Ғәзизулла исемле ҡарттан яҙманы уҡытып ала. Уларҙың алты биттән башҡаһы Тәтегәсте бей итеп һайлау өсөн йыйылған тамғалар булыуы асыҡлана. 1948 йылда Рәшит ағай был ҡомартҡыны Кинйәбай Йәғәфәровтан (ул мулла булып та торҙо) уҡытып, йөкмәткеһен яҙып ала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уны «Көрьән менән бергә күрше ауылдан Сахаров (элекке поп) урланы» тип үкенес белдерә Р. Мөхәммәтов. (Һүҙ, моғайын, 60-сы йылдарҙа әллә Күндрәк, әллә Раевка ауылынан велосипедта Табылдыға килеп йөрөгән бабай тураһында бара. Һоро плащлы, 70 йәштәрҙәге ябыҡ кәүҙәле был кеше Табылдыға килеп йөрөй, татарса һөйләшә һәм район гәзитенең штаттан тыш хәбәрсеһе булып тора ине – **М.Х.**).

Табылды ауылы тарихын Тәтегәс бейҙән (1490 – 1568) башҡа күҙ алдына килтереп булмай. Уның 1554 йылда Ҡазанға барып, Аҡ батшаға (Иван IV Грозный) баш һалыуы, башҡорттар тарихында тәрән эҙ ҡалдырған «Юрматы шәжәрәһе»н әйтеп яҙҙырыуы яҡшы билдәле. «1516 – 1517 йылдарҙа Тәтегәс бей Ҡайраҡлы ауылынан (хәҙерге Стәрлетамаҡ ҡалаһы урыны) күсеп килгән, – тип яҙа Р.Мөхәммәтов. – Тәтегәс бей Борнаҡов (Мөхәммәтов шулай яҙа, ләкин Тәтегәс Борнаҡ улы түгел – **М.Х.**) Табылды ауылында көн иткән. 1522 йылда Гөрзәй батшаға (Иван Грозный) барып, урыҫтар менән дуҫлашҡан. Нуғайҙарҙың ике яуын ҡайтарып, уларҙың ерҙәрен урыҫтарға биргән».

Автор фекеренсә, Табылды ауылы 1514 йылда барлыҡҡа килгән булырға тейеш, тип ул белгәне бирле һөйләп килгәндәр. Ә уға саҡлы бында Әлемғол

байҙың йәйләүе була. Уның атаһы Иманғол иһә Стәрле йылғаһы тамағына яҡыныраҡ Ҡайраҡлы ауылында донъя көткән. Иманғолдоң өс ҡатынынан ике генә улы билдәле: Әлемғол һәм Тәтегәс. Үлер алдынан Юрматы бейе Борнаҡ муллаларҙы йыя ла үҙенән һуң бейлекте Тәтегәскә тапшырырға васыят әйтеп ҡалдыра. Борнаҡты Табылдынан йыраҡ түгел Йөрәктауға ерләгәндәр, хәҙер ул урынды халыҡ Моронаҡ тип йөрөтә.

Мосолман традицияһы буйынса, Борнаҡтың өсөн уҡытҡанда сапҡындар бөтә Юрматы илен йөрөп сығып, Тәтегәсте бей итеп раҫлау өсөн 1000-дән ашыу ҡултамға йыя. 1508 йылда Тәтегәс бейлекте ҡабул итеп ала һәм 1517 йылда уҡ Мәскәүгә барып, 52 тәүлек йөрөп ҡайта. «Ул урыҫтарға ерҙе бушлай бирергә вәғәҙә итә», – ти Рәшит Мөхәммәтов.

Тәтегәс бей башҡорт булғанмы, әллә нуғаймы? Был ябай һорау түгел, сөнки бейлек затлы нәҫелдәрҙән килгән, мәҫәлән, Борнаҡтың атаһы нуғай, ә әсәһе башҡорт булған. Тарих фәндәре докторы Раил Кузеевтың «Юрматы шәжәрәһе» буйынса аңлатмаһында, Борнаҡ бей менән Йәдкәр мырҙа (ул Ҡубанға күсеп китә – **М.Х.**)бер туған түгел, тигән фекер үткәрелә. **Ҡара**: «Башкирские шежэре» (Өфө, 1960) Сөнки береһе – башҡорт бейе (ләкин нуғай сығышлы – **М.Х.**), икенсеһе – нуғай мырҙаһы, ти Кузеев.

Артабан Р. Мөхәммәтов Тәтегәстең өс түбәнән дә ярҙамсылар алып, Мәскәүгә Аҡ батшаға (Иван Грозныйға) барыуы хаҡында хәбәр итә. «Аҡ батша башҡорттарҙы киң күңел менән ҡабул итә һәм яһаҡ иҫәбенә нуғайҙар ташлап киткән ерҙәрҙе юрматыларға биреүҙе лә хәл ҡыла. Урыҫтарға ер бирергә вәғәҙә итеү иҫәбенә Юрматы ырыуы үҙ иркендә һәм үҙ динендә ҡалырға хоҡуҡ алған, – ти автор. – 1552 йылда (тимәк, Ҡазан ханлығы ҡолағанға тиклем – **М.Х.**) Мухмич фамилиялы урыҫ Стәрле тамағынан йыраҡ түгел урында ер ала. Был урын артабан Стәрлетамаҡ тип атала башлай. Кузнецов тигән урыҫ та килә, шулай итеп, 20 көн эсендә 16 урыҫ Стәрле тирәһенән ер ала.

Тәтегәстең яҡыны Табылды хәҙрәт ер өләшеүгә бик асыулана һәм, диндә бөтөрәһең тип, Әлемғол йәйләүенә (хәҙерге Табылды урыны – **М.Х.**) күсеп китә. Әйткәндәй, урыҫтарға аҫаба ерҙәрҙе йомарт өләшеү күренеше Тәтегәстең вариҫтары фамилия һайлағанда ҡалҡып сыға. Ә.Ҡарағолов шәжәрәһендә Әбделғәзиз менән Шәкүр араһында ошондайыраҡ һөйләшеү осрай: «Мин Тәтегәсев фамилияһын алам. Ул батша менән килешеп, күп ер алған», – ти Әбделғәзиз. «Эйе, алған да таратып бөтөргән, – ти икән Шәкүр. – Мин олатайым исемен фамилия итеп алам». Шулай итеп, Шәкүр балалары Ҡарағолов булып китә».

«Күп тә үтмәй, Гөрзөй батша Ҡазанды ала ла мосолмандарҙы язалап суҡындыра башлай, – тип дауам итә Р. Мөхәммәтов. – Тәтегәс Аҡ батшаға барған иптәштәрен алып, Ҡазан шәһәренә юллана һәм батша менән осрашып, унан алған шаһәҙәтнамәләрен күрһәтә, урыҫҡа ер биреүен әйтеп, динен һаҡларға рөхсәт һорай. Батша ризалаша, вәкилдәрҙе дәрәжәле чиндар биреп оҙата».

Табылды мәктәбе уҡытыусыһы Ратмир Вахитовтың яҙмаларына ҡарағанда, Аҡ батша янынан йөрөп ҡайтҡас, Тәтегәстең йәш ҡатыны ул таба, малайға Мәскәү тип исем ҡушалар. Бер аҙҙан ил ағаһы вафат була – 972 (миләди – 1564). Уны (Оло) Күндрәк яры буйындағы күкһел сағылдың битләүенә ерләйҙәр. Тәтегәстең улы Мәскәү ҙә оҙаҡ ғүмер кисереп, ил ағаһы дәрәжәһенә лайыҡ була. Мәскәүҙең мәҡаме лә атаһы эргәһендә. Бар ырыу халҡы ике ҡәбер өҫтөнә һыбайлы кеше бейеклегендә ике иҫтәлек ташы ҡуя.

Бында һүҙ 60-сы йылдарҙа Күндрәк ауылының төньяғындағы тәпәш кенә ҡалҡыулыҡта торған ике ҙур таш тураһында бара. Әммә уларҙың ҡуйылыу тарихын Рәшит Мөхәммәтов икенсе төрлө аңлата. «Улар «Кейәү менән ҡыҙ ташы» тип

атала, – тип яҙа ул. – 1546 йылда Тәтегәс бей ҡыҙын Баҡый мулланың улына бирә. (Оло) Күндрәк буйында көрәшеп, йүгерешеп, һикерешеп, бик шәп итеп туй үткәрәләр. Кис булғас, кейәү менән ҡыҙ зәңгәр сатырҙа төн ҡунырға ҡала. Иртән еңгәләр кейәү менән ҡыҙҙы уятырға килһә, тегеләр бер-береһенә ҡарашып, өнһөҙ-тынһыҙ ята икән. Ҡыҙҙың исеме Айбикә була, егеттеке – билдәһеҙ. Халыҡ ошонда уҡ ҡәбер ҡаҙа, ә таштарҙы Күк тирәк буйынан ҡаҙып сығаралар. Береһенең оҙонлоғо – 5, икенсеһенеке 4,5 аршын була. Уларҙы ҡайын сауҡаға һалып, ун ике үгеҙ егеп, тарттырып килтерәләр.

Ҡазан ханлығы ҡолағандан һуң, суҡыныуҙан ҡасып, Ҡайраҡлыға Ҡазан яғы татарҙары күсеп ултыра башлай: Бибак мулла, Фәхретдин, Шахмай һ.б. Ҡазан татары Фәтих Хәтмуллин Табылдыға ике ҡатыны менән килеп төйәкләнә. Уның Гөльямал исемле бисәһе ул тапҡас, Тәтегәс бейҙең рөхсәтен алып, малайға Тәтегәс тип исем ҡушалар. Р. Мөхәммәтовтың яҙмаларына ҡарағанда, Табылдыла ике нәҫел Тәтегәсевтар бар. Мәҫәлән, «Юрис Тәтегәсев (ул 60-сы йылдарҙа мәрхүм булды – **М.Х.**) менән Сабит Тәтегәсевтарҙың нәҫелдәре бер-береһенә бәйле түгел. Сабит Зиннур улы – мулла, йәғни татар нәҫеленән, – ти Рәшит ағай. – Мин уларҙы яҡшы беләм, сөнки әсәйем яғынан беҙҙең нәҫеллек яҡын. Сабит, Зөфәр, Хәйҙәр бабайымдар бер туған, төҫ-ҡиәфәттәрендә башҡорттарға бер ниндәй ҙә оҡшашлыҡ юҡ ине. Әсәйем яҡлап олатайым да, әсәйем үҙе лә аҡ (һары) йөҙлө булды. Сабит абзый ҙа ике һүҙҙең береһен тип әйтерлек татарсалап һөйләй торғайны. Күрше Баҡый (татар) ауылында ағай-энеләре Яуышевтар байтаҡ ине». Әйткәндәй, 1926 йылғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алыуҙа Баҡый ауылында Яуышевтар дүрт ғаилә булып, барыһы ла «башҡорт» тип теркәлгән. Бынан тыш, ошо уҡ ауылдың Ғәфиевтары (4 ғаилә) һәм Зәбировтары ла (4 ғаилә) – башҡорт сығышлы.

XIX быуатта алынған ике иҫәптә Тәтегәсевтар күренмәй. Башҡорттарҙа фамилияларҙың атаһы исеменән алынғанлығынан сығып, шуны әйтергә кәрәк: тимәк, был осорҙа малайҙарға Тәтегәс исемен ҡушыу ғәҙәте булмаған. Ә бына 1926 йылғы иҫәптә Табылдыла Зөфәр һәм Хәйҙәр Тәтегәсевтар, Йыһанша Тәтегәсев, Гөльямал Тәтегәсевалар күренә. Был фамилиялар ҡайҙан килә? 1897, 1920 йылдарҙа йән иҫәбенең алынмауы яуап табырға мөмкинлек бирмәй. Шулай ҙа, Р.Мөхәммәтовтың фекеренә таянып, һуңғы ике ғаиләнең тәүгеләренә мөнәсәбәте булмағандыр, тип әйтергә була. Ҡабыҡҡыуыш ауылында иһә Тәтегәсевтар күберәк: Сабир, Зариф, Йомағужа, айырым исемлектәге Ҡорбан һәм Хәбибрахман Тәтегәсевтар. Аталарының исемдәре күрһәтелмәгәнлектән, был фамилияларҙың туғанлыҡ мөнәсәбәтен асыҡлап булманы.

## Кемдәр бында көн иткән?

Әнүәр Әсфәндиәровтың мәғлүмәттәре буйынса, V рәүиз (улар «ревизские сказки» тип аталған – **М.Х.**) Табылдыла 36 йортта 233 аҫаба йәшәгәне раҫлана. VII рәүиздә (1816 йыл) иһә ауылда 14 йортта ни бары 227 кеше донъя көткән. Исемлекте 1749 йылда тыуған хорунжий (башҡорттар казак ҡатламына инеп, хәрби хеҙмәт үтәгән осор – **М.Х.**) Зәйнәғәбдин Табылдин башлап ебәрә. Артабан улы Ҡолбай, уның улдары Әбделмән, Исмәғил, Ишем, Сөләймән аталған. Зәйнәғәбдиндең икенсе улы йорт яһауылы Әбделвәли, уның улы Байғазы күренә. Әбделхәлил – Зәйнәғәбдиндең дүртенсе улы. Кесе улы указлы мулла Әбдрәхим Табылдин, улдары Ибраһим, Рафиҡ, Рахманғол бар.

Мәсәғүт Ғүмәровтың улы (?) Йомаш Мәсәғүтов, икенсе улы Йәноҙаҡ. Өсөнсө һәм дүртенсе исемдәр танылмай, бишенсеһе Мораҙым. Мислах менән указлы мулла Бесәнсе – Мәсәғүттең ҡустылары. Һуңғыһының өс улы теркәлгән. Хәмит

Ҡарабаев – йорт йөҙ башы. Йорт яһауылы Хисаметдин Ҡарабаев – уның ҡәрҙәше, уның улы 1 йәшлек Шәрәфетдин күренә.

Ишбулды Буранғолов менән бер төркөмдә улы Бикбулат, ике туған ҡустыһы Юлдаш, уның улы Ғәли, ике туған ҡустыһы Балтабай Аҡбатыров теркәлгән. Балтабайҙың Мөхәммәт, Кәрим һәм Мөхәмәтғәли исемле өс улы күренә. 66 йәшлек Мәхмүт Бирҙеғоловтың нәҫеленән Теләүбирҙе, ике туған ҡустыһы Мөхәмәтйән, Баймөхәмәт, Дәүләтбай һәм Дәүләтбирҙе уҡыла.

Ишбулат Солтанғоловтың Ғәлийән исемле улы күренә. 69 йәшлек Собханғол Үтәғолов (Үтәғол – Хужиндарҙың нәҫел башы-дауамы булһа кәрәк – **М.Х.**) – ике ул атаһы. Уның улы Ниғмәтулла, уның улы Рәхмәтулла теркәлгән. Ҡорбанғәлиҙең Собханғоловтарға мөнәсәбәтен асыҡлап булманы. Танып булған фамилияларҙан артабан Килдеғол Ҡарабаев, Килдеғужа Бикбаев һәм уның улы Буранбайҙы атарға мөмкин.

1816 йылда Табылдыла 68 ир-егет һәм 45 ҡатын-ҡыҙ көн иткән. Урыҫ писарҙың нисек ишетһә, шулай теркәүенә ҡарағанда, исем-фамилияларҙың дөрөҫ яҙылмауы ла ихтимал.

1834 йылғы VIII рәүиз материалдары буйынса Мәсәғүт Ғүмәров 1827 йылда вафат була. Үрҙә телгә алынғандарҙан тыш, Бәғдәт, Йосоптың улы Баһауетдин, Шәрәфетдин, Мораҙымдың улы Мөхәмәтхәсән, Бесәнсенең улы Рыҫҡол, уның улы Мырҙағәли, Йәноҙаҡтың ҡыҙҙары Хәмиҙә, Хәбибә, Сәғиҙә аталған. Йосоптың Хазина, Мораҙымдың Фариза исемле ҡыҙҙары күренә.

1834 йылда Ҡолой Мәхмүтов 64 йәштә. Уның нәҫеленән Ишкилде Сәйетов, уның улы старшина ярҙамсыһы йорт яһауылы Яугилде, улы Яхъя, уның улы Мөхәммәт теркәлгән.

Был иҫәптә Табылдыла бөтәһе 141 ир заты, 146 ҡатын-ҡыҙ көн иткән. Исемлеккә фани донъянан киткәндәр ҙә индерелгән.

1850 йылғы IX рәүиз мәғлүмәттәре ауылда 197 ир-егет, 191 ҡатын-ҡыҙ йәшәгәнен раҫлай. Аҙаҡта ғәрәп хәрефтәре менән ҡултамғалар ҙа ҡуйылған. Исемлек зауряд-хорунжий Йомаш Мәсәғүтовтан башлана, уның улы – Багаудит(?) теркәлгән. Ике ҡатынлы Мораҙым Мәсәғүтов – указлы мулла. Рыҫҡол Бесәншин да ике ҡатын алған. Мәсғүтовтар нәҫеле ишле.

Хәмит Ҡарабаев өс ҡатын менән донъя көтөп, 1848 йылда донъя ҡуя. Үрҙә аталған улдарына Әбүбәкер, Ситдиҡ өҫтәлгән. Хисаметдин Ҡарабаев 1837 йылда гүр эйәһе булған. Уның улы Ҡаһармандың да ике ҡатыны бар, уның улы Сәйфетдин, уның улдары Ғиззәтулла, Әбелфасыл күренә. Ҡаһармандың тағы Хөснөтдин, Хөббөтдин һәм Ғималетдин исемле улдары бар. Хисаметдиндең икенсе улы Низаметдин, уның улдары Камалетдин менән Сәғәҙи.

Ҡолбай Зәйнәғәбдиновтың улы Әбделмәндән Мөхәмәтсәлих, Әбделвәли исемле улдары теркәлгән. Сөләймән – Ҡолбайҙың улы, уның улы – Хөсәйен. Йорт яһауылы Әбделвәхит Зәйнәғәбдинов –Ҡолбайҙың ҡустыһы. Был нәҫелгә ҡараған ҡатын-ҡыҙҙарҙың оҙон ғына исемлеге лә күренә.

1842 йылда гүр эйәһе булған Ишбулды Байрамғоловтың улы Бикбулат та ике ҡатын ала. Ике улы булып, Арыҫланғәле 1836 йылда вафат була, Ғүмәрғәлеһенә 5 йәш. Шәрифмөхәмәт – Ишбулдының икенсе улы, уның улы Йәнтүрә. Байрамғоловтарға туған Ғәли Юлдашев, Балтабай Әбүбәкеров (1849 йылда үлә), уның улы Мөхәмәткәрим, уның улдары Сәфәрғәли, Ҡорманғәли, Нурғәли аталған. Балтабайҙың икенсе улы Мөхәмәтғәлиҙең улы Йәнғәли – 1 йәштә.

Ҡолой Мәхмүтовҡа 80 йәш тулған. Уның Теләүбирҙе исемле улының тәүге ҡатынынан Мөхәмәтлатип, Мөхәмәтшәфи исемле улдары тыуа. Икенсе ҡатынынан – Әбделхәким. Мөхәмәтрәхим – Ҡолойҙоң өсөнсө улы, улы Әхмәтйән,

ҡустыһы Ҡолгилде, уның улдары Мөхәмәтшәриф, уның улы Йәнтүрә күренә.

77 йәшлек Аҙнағол Аллабирҙиндың улы Шәмсыуар (Табылдыла элек ошондай фамилия бар ине – **М.Х.**), улдары Алтынбулат, Алтынғужа, Торомғужа аталған. Аҙнағолдоң ҡустыһы Дәүләтгәрәй Әлмөхәмәтовтан Ҡотлоғәлләм, Ҡотлосура исемле улдары бар. Ишҡыуат_Ташбулатовтың ике ҡатынынан Ишмөхәмәт, Ҡолмөхәмәт, Салауат исемле улдары күренә. Тәүгеһенең улдары Нурдәүләт һәм Ишдәүләт. Ишҡыуаттың ике туған ҡустыһы Зәйнетдиндең ике ҡатынынан Зәйнәғәбдин, Хосаметдин, Ямалетдин исемле улдары теркәлгән.

Артабан 1849 йылда донъя ҡуйған Ишҡол Рәхмәтовтың улы зауряд-яһауыл Бикмөхәмәт, улы Усман, уның улы Әхмәтйән килә. Бикмөхәмәттең икенсе улы Ғәлиҙең Ғимал исемле 1 йәшлек улы бар. Өсөнсө улы Лоҡман. Ишҡолдоң икенсе улы старшина писары Абыҙгилдененең Әхмәҙи һәм Әхтәм исемле улдары теркәлгән. Кинйәбыҙ – Ишҡолдоң өсөнсө улы. Бикҡол Рәхмәтовтың улы Мәхмүт, уның улдары Хөснөтдин, Фәхретдин һәм Фәйзихан. Абыҙгилдененең Ғәбиҙә, Йәмилә һәм Сәғиҙә исемле ҡыҙҙары булған.

Ниғмәтулла Собханғолов – Собханғол Үтәғоловтың улы булһа кәрәк, 1848 йылда 69 йәшендә донъя ҡуя. Ике ҡатынының береһенән Рәхмәтулла, икенсеһенән Ҡотломөхәмәт күренә. Рәхмәтулла ла ике тапҡыр өйләнә, тәүге ҡатынынан Шәрәфетдин исемле улы тыуа. Ҡотломөхәмәттең улы Мөхәмәтсафа – 4 йәштә. Рәхмәтулланың икенсе ҡатынынан Төхвәтулла, Мөхәмәтйән, Сәхиулла күренә. Ғәйниямал, Хөсниямал һәм Шәмсиямал исемле ҡыҙҙары ла бар.

Йорт яһауылы Абдулнасир Таждин да ике ҡатын менән донъя көтөп, Ғәбиҙулла, Сәйетбаттал исемле улдары тыуа. Ғәбиҙулланың улдары – Мөхәмәтша менән Шоғайып. Абдулнасирҙың ҡустыһы Балтабай Таждиндың өс ҡатынынан Ғибаҙулла, Маллығол, Мырҙағол, Зөлхөкәр исемле улдары аталған. Ғибаҙулланың улдары – Заһиҙулла, Ғәлиулла һәм Бүләкбай.

Абдулнасирҙың туғаны Намаҙғол Килдеғоловтың улы Баяҙғол, уның улы Иҫәнбай менән Зекериә. Баяҙғолдоң Гөлйәүһәр исемле ҡатыны Миңлебикә һәм Алмабикә исемле ҡыҙҙар таба. Хәсән Йомағужиндың икенсе ҡатынынан Миңлеғужа исемле улы, ике туған ҡустыһы Мырҙағол Буранбаев, уның улдары Мөхәмәтҡужа һәм Мөхәмәтғәли теркәлгән.

Яугилде Ишкилдиндың улы Ғайсар (Ғайсаровтарҙың башы түгелме икән? – **М.Х.**) ике ҡатын алып, беренсеһенән Камалетдин, икенсеһенән Ишмөхәмәт, Ғәбделҡәүи һәм Әбделғәни исемле улдары бар. Отставкалағы яһауыл Ҡотлогилде Ишкилдиндың улы Мырҙагилде, уның улдары Әбделкәрим, Әбделғәни; Ҡотлогилдененең икенсе улы – Усман, уның улы Сәхиврәли күренә. Яугилденең туғаны Кинйәғолдоң ике ҡатынынан (Әсҡәпъямал һәм Шәрифә) Мәхүпъямал, Хөсниямал, Ғәйниямал, Бәҙеғолъямал, Миңлеямал исемле биш ҡыҙы тыуа. Килмөхәмәт Килдебаев – Яугилденең ҡәрҙәше. Уның Тимерғәли, Сәйетғәли исемле улдары, Фазила һәм Фәғилә исемле ҡыҙҙары бар.

Ильяс Баҡыев та ике ҡатын менән йәшәй. Тәүгеһенән Иҙрис, икенсеһенән Төхвәтулла, Рәхмәтулла һәм Хәбибулла исемле улдар тыуа. Ильястың ике туған ҡәрҙәше Әбдрәшит Байгилдиндың да ике ҡатыны булып, тәүгеһенән Абдулхан күренә. Аббас һәм Әбләс, Әбделхәсән Байгилдиндар ҙа – Баҡыевҡа туған.

Ҡотлоғужа Көбәковтың улы Ҡотломөхәмәттең беренсе ҡатынынан Алтынғужа, икенсеһенән Мөхәмәтҡужа исемле улдары менән Фәғилә һәм Ғәзимә исемле ҡыҙҙары бар. Ҡотлоғужаның икенсе улы Муса, уның Мөфтәхетдин, Фәхретдин, Мөхәмәтсафа исемле улдары атала. Ҡотлоғужаның өсөнсө улы Баймөхәмәттең Байегет исемле улы бар. Көбәковтың яҡын ҡәрҙәше Ҡасҡындың Аҡъюл, Аҡмырҙа, Ишмырҙа исемле улдары ла күренә.

1870 йылғы иҫәптә Табылдыла халыҡ шаҡтай кәмегән – 111 йән. 1917 йылғы ауыл хужалығы иҫәбен алыуҙан күренеүенсә, 156 башҡорт, ике урыҫ һәм бер муҡшы ғаиләһе йәшәй. (Бынан тыш, татарҙар ҙа юҡ түгел. Мәҫәлән, Миңлегәрәй Мырҙагилдин Ҡазан татары булып, уның нәҫеленән Тимерғәли, Нурғәли Мырҙагилдиндар нәҫелендә татар ҡаны бар.) Башҡорттар – 722, урыҫтар – 13, муҡшылар 4 кеше. Тәүгеләре – 769, икенселәре – 14, һуңғылары 13,3 дисәтинә иген сәсә.

1920 йылда бер сығанаҡтар буйынса Табылдыла йәшәүселәр 245 кеше генә күренһә, Үҙәк тарихи архив мәғлүмәттәренә 603 йән индерелгән. Шуларҙың 283-ө – ирҙәр, 320-һе – ҡатын-ҡыҙ затынан.

1926 йылғы Бөтә Союз халыҡ иҫәбе ауылда 108 ғаиләлә 469 йәнде теркәй. Уларҙың 232-һе ир енесенән булһа, 237-һе – ҡатын-ҡыҙ. Күпселек ғаиләләр икеөс кешелек булыуға ҡарамаҫтан, Алтынғужа Дауытовтың ғаиләһендә – 8, Шаһи Ҡарабаевтың – 7, Мөхәмәтша Хужин, Зекериә Байғужин, Әлемғол Вахитов, Сәләхи Хөсәйенов, Ғарифулла Сөләймәнов, Әхмәҙи Баһауетдиновтарҙың – 6-шар, Хәйҙәр Тәтегәсев, Әхмәт Байғужин, Абдулла Байғазин, Алтынғужа Рәхмәтуллин, Хөббихужа Изекәев, Баймөхәмәт Яхин, Зияз Изекәевтарҙың 5-әр бала күренә. Закир Хәкимов – әлеге Хәкимовтарҙың олатаһы – иһә яңғыҙы теркәлгән. Бибикә Сафина, Ишбикә Байғужина, Гөльямал Тәтегәсеваларҙың ирҙәре күренмәй. Ғәбиҙулла Мәжитов, Кәли Мусин, Дәүләтҡол Сараев, Хужа Дауытов, Әхмәтйән Йосопов, Хәләф Ҡарабаев, Ишбулат Рысҡолов, Ғилаж Изекәев, Ишбулат Рысҡолов, Заһретдин Мырҙагилдиндарҙың ғаиләләрендә балалар теркәлмәгән. Баймөхәмәт Яхин менән Алтынғужа Дауытовтарҙың ғаиләһендә – 5-әр, Хәйҙәр Тәтегәсев, Әлемғол Вахитов, Зәйнетдин Хөсәйеновтарҙың – 4-әр, Мөхәмәтша Хужин, Вәкил Ҡарағолов, Янғол Вахитов, Лотфулла Вахитов, Мөхәммәт Байғазин, Кирәй Усманов, Сәғиҙулла Шәмсыуаров, Насрый Изекәев, Шаһи Ҡарабаев, Ҡадир Ғайсаровтарҙың 3-әр улы булған. Иң күп ҡыҙлы ғаилә Әхмәҙи Баһауетдиновта – 5, Зекериә Байғужин, Хөббөтдин Изекәев, Шаһи Ҡарабаев, Сәләхи Хөсәйенов, Ғарифулла Сөләймәнов һәм Зияз Изекәевтарҙың – 4-әр, Алтынғужа Дауытов менән Ғәлләм Изекәевтың 3-әр ҡыҙы күренә. Ни өсөндөр был исемлеккә Йәғәфәр Килмәтов (әсәйем яҡлап олатайым – **М.Х.**) индерелмәгән.

Зәйнулла Байғужин – халыҡ уҡытыусыһы, Ғөбәй Байғужин – тегенсе, Абдулхан Мәжитов менән Ғүмәр Ғәлиев – итексе, Алтынғужа Рәхмәтуллин – балыҡсы, Ғибаҙулла Изекәев – ауыл Советы секретары, Баймөхәмәт Яхин – мулла, Янбай Дауытов – мөәзин, Иван Ермолов (Табылдыла берҙән-бер урыҫ) көтөүсе булып теркәлгән. Мәхмүтов, Ҡарағолов, Байғазин, Тәтегәсев, Килмөхәмәтов, Бикбулатов, Усманов, Әһлиуллин, Иҙрисов, Сөләймәнов, Ишбулдин, Сәйетбатталов, Рысҡолов, Хәсәнов, Баяҙғолов, Ғарифуллин кеүек фамилиялар тора-бара юҡҡа сыға.

1959 йылғы иҫәптә Табылдыла 275 кеше теркәлә. 1979 йылғы иҫәптә иһә ауыл халҡы «башҡорт» тип яҙыла, йән иҫәбе күрһәтелмәй. Демографик хәл Табылдыны ла урап уҙмаған. 1989 йылда унда 167 кеше теркәлһә, 2002 йылда ни бары 20 йән өҫтәлгән.

## Ил именлеге һағында

Башҡорттарҙың XVII быуатта уҡ Рәсәй батшалығы алып барған сит ил походтарында күпләп ҡатнашыуы киң билдәле. Мәҫәлән, XXI быуаттағы 100 йылыҡ һуғышта, Урта Азияны яулап алыуҙа, Урыҫ-төрөк һуғыштарында һ.б. 1812 йылғы Ватан һуғышында Табылды ир-егеттәре 12-се һәм 13-сө башҡорт

полктары составына инә. Архив мәғлүмәттәре буйынса, уларҙың Дрезден ҡалаһын ҡамауҙа ҡатнашыуы билдәле. Табылды яугирҙары Парижды алыуҙа ла ҡатнаша. 1836 – 1839 йылдарҙа ошо һуғышта йөрөгәндәрҙең исемлеге төҙөлөп, Табылдыла ул саҡта ете ветеран: Байгилде Мәхмүтов, Теләүғол Ҡулаев, Аманбай Талымбәтов, Ҡаһарман Этҡустин, Ҡасҡын Көбәков, Абдулла Әбделхәлилов һәм Ҡолбулды Биккинин иҫән-һау йәшәп ятҡан була.

1904-1905 йылғы Урыҫ-япон һуғышында Табылдынан Ғөбәйҙулла Баһаутдиновтың һәләк булыуы билдәле. Ә 1914 – 1918 йылдарҙағы Беренсе донъя һуғышынан Мөхәмәтҡол Вахитов, Йәғәфәр Килмәтов, Ишбулат Мөхәммәтов, Алтынғужа Рәхмәтуллиндар иҫән-һау йөрөп ҡайта. Әлбиттә, ике һуғышта ҡатнашҡан ауылдаштарыбыҙ былар менән генә сикләнмәйҙер.

Граждандар һуғышы йылдары тураһында бер ни ҙә табып булманы. Ошо мәғлүмәттәрҙе туплағанда ул йылдарҙы иҫләгән кеше ҡалмағайны. Башҡорт автономияһы өсөн көрәштең бик ҡырҡыу барыуын, Көньяҡ Башҡортостанда ҡыҙыл гвардиясыларҙың ҡотороноуын иҫәпкә алғанда, ул осорҙоң ҡанлы әҙемтәләре Табылдыны ла урап үтмәгәндер. «Заки Валиди – организатор автономии Башкортостана 1917 – 1920» тигән 2011 йылда нәшер ителгән китапта ғына ошондай юлдар бар: «Башҡорт ҡыҙыл армияһы исеменән башҡорттарға ҡарата дошмансыл сәйәсәтте ҡырҡа үҙгәртергә тәҡдим итәм – тиелә «Башҡорт хәрби комиссары Вәлидовтың Ҡыҙыл Армияға мөрәжәғәте»ndә. – Башҡорт ауылдарын яндырып, мөлкәтен талаған, халҡын үлтергән бәндәләр Колчакка хеҙмәт итә. Миәкә, Сытырман, Табылды, Ахун ауылдарында ҡыҙыл армеецтарҙың, беҙ башҡорттарҙы ҡырып бөтөрәбеҙ, тип янауы башҡорттарҙы ауылдарын ташлап урмандарға ҡасырға, йәшеренергә мәжбүр итә».

1939-940 йылдарҙағы Совет-фин һуғышында, йәғни «Ҡышҡы кампания»ла, ауылдашарыбыҙ Солтангәрәй Абдрахманов, Динислам Әһлиуллин, Вәлиәхмәт Байгилдин, Ибраһим Вахитов, Ишбулат Рәхмәтуллин, Фәйруша Хужиндар (атайым – **М.Х.**) ҡатнаша. Ф. Хужиндың иҫтәлектәрендә ошондай юлдар бар: «Кисен эштән ҡайтыуыма повестка көтә ине. «Эшеңде тапшырып, расчет ал да иртә менән комиссариатҡа килеп ет!» Стәрлебашта беҙҙе ВКП(б) һәм ВЛКСМ район комитеттары, хәрби комиссариат хеҙмәткәрҙәре бер бүлмәгә алып инде лә, ҡыҫҡа ғына әңгәмәнән һуң, үҙебеҙ теләп хеҙмәткә барыу тураһында ғариза яҙырға ҡуштылар. Беҙ 21 комсомолец был талапты үтәнек.

Тауар вагондарына ултырып бер нисә тәүлектә Череповец ҡалаһына (хәҙерге Вологда өлкәһе) еттек. Унда бер айға яҡын хәрби әҙерлек үтергә тура килде. Һәр көн саңғыла 30 – 50 километр юл үтәбеҙ. Бер ни тиклем өйрәткәс, беҙҙе Петрозаводск ҡалаһына алып килделәр. Артабан – Мурманскиға. Шунда беҙ кузовтары кеше ҡанына буялған машиналар, яраланған һалдаттарҙы күрҙек. Ҡоралланып, аҙыҡ-түлек алып, саңғыларҙа кеше аяғы баҫмаған ҡарағай урманына инеп киттек. 136-сы еңел саңғылы эскадрондың бурысы дошман тылына үтеп инеп, сыуалыш тыуҙырыу ине. Ләкин һуғышырға тура килмәне, рация аша һуғыштың бөтөүе хаҡында хәбәр иттеләр».

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, хәрәкәт итеүсе һәм хеҙмәт армияһына Табылдынан 108 кеше алына, 56-һы яу ҡырында һәләк була. Һуғыштың тәүге йылында уҡ Вәлиәхмәт Байгилдин, Насибулла менән Солтан Изекәевтар, Ислиәмин Килмәтов, Миңлеғәли Тәтегәсев, Закир Яхиндарҙың үле хәбәре килә. 1942 йылда «ҡара ҡағыҙ» күберәк алына: Насрулла Байғужин, Тимербай Байғужин, Йомағужа Балтабаев, Зекериә Вахитов, Вәлиша Вахитов, Яхъя Вахитов, Ибраһим Вахитов, Фәррәхетдин Изекәев, Йомағужа Иҙрисов (ул һуғышҡа саҡлы

Көйөргәҙе районында райком секретары була – **М.Х.**), Шаһивәли Ҡарабаев, Биктимер Латипов, Батырша Сәйетбатталов, Исмәғил Тәтегәсев, Мөхәмәтҡол Тәтегәсев, Хәбибулла Хөсәйеновтар Совет иле азатлығы өсөн ҡорбан була.

1943 йылда Ватан өсөн ҡорбан булыусылар тағы ла күберәк: Солтангәрәй Абдрахманов, Динислам Әһлиуллин, Әҙһәм Баһауетдинов, Әхмәҙи Баһауетдинов, Йәрмөхәмәт Байғужин, Зиннәтулла Байғужин, Барый Балтабаев, Яҡуп Вахитов, Сынтимер һәм Биктимер Вахитовтар, Ғәҙелша һәм Заһиҙулла Дауытовтар, Шаһибәк Дауытов, Мостафа Изекәев, Ғиләжетдин Изекәев, Рәшит Латипов, Хәйбрахман Мөхәмматов, Зөфәр Тәтегәсев, Шакир Усманов, Әхмәтша Хужин, Хәмиҙулла Хөсәйенов, Йәҙигер Йосопов, Хөсәйен Ҡунаҡбаев.

Мортаза Вахитов, Йыһандар Вахитов, Ғәлләметдин Изекәев, Нәбиулла Изекәев, Мөхәмәҙғәли Исмәғилев 1944 йылда һәләк була. Вәғиз Хөсәйенов, Нурғәли Исмәғилев, Бүләкбай Изекәев, Миңлеғаяз Килмәтовтарҙың «ҡара ҡағыҙ»ы 1945 йылда килә. Вахитовтарҙан һуғышта – 11, Изекәевтарҙан – 8, Тәтегәсевтар һәм Байғужиндарҙан – 4-әр, Балтабаевтарҙан өс кеше һәләк була. Насретдин һәм Бәҙретдин Изекәевтарҙың өс улы яуҙан әйләнеп ҡайтмай. Шаһибәк Дауытов ни бары 17 йәшендә үлеп ҡала, Насибулла Изекәев менән Барый Балтабаевҡа – 18, ә Яҡуп Вахитов, Ғаяз Килмәтов, Хәбибулла Хөсәйеновҡа 20 йәш кенә була.

Яу ҡырынан 47 кеше әйләнеп ҡайта. Бына улар: Ғәзизә Баһауетдинова, Фәйзрахман һәм Абдрахман Байғужиндар, Тәлғәт Байғужин, Динислам Бүләков, Бәхтигер Вахитов, Әхтәм һәм Ғайса Вахитовтар, Зәбир Вахитов, Мансур Вахитов, Сәйәфәр Вахитов, Миңләхмәт һәм Миңлеғужа Ғайсаровтар, Зиннәт Ғәлиев (татар, Табылдыныҡы түгел – **М.Х.**), Дәүләтша һәм Йыһанша Дауытовтар, Низаметдин Дауытов, Ғибаҙулла һәм Хөснулла Изекәевтар, Нурмөхәмәт Ҡарабаев, Ярулла Ҡарабаев, Сәһәрйәр Ҡарағолов, Ғәйнулла Мәжитов, Тимерғәли Мырҙагилдин, Мөхәмәтшакир һәм Ғәттәр Мөхәммәтовтар, Кәлимулла Мусин, Ишбулат Рәхмәтуллин, Гәрәй Сафин, Тәлғәт Тәтегәсев, Сабит Тәтегәсев, Ғилемйән Усманов, Сафа һәм Фәйруша Хужиндар, Хәмзә Дауытов, Таһир Шәмсыуаров, Ғәйфулла Йосопов, Моталлап Йосопов, Тимерғәли Йосопов, Кинйәбай Йәғәфәров, Алтынтимер Яхин, Зөфәр Яхин, Әнүәр Яхин, Фәрит Рысҡолов һәм Әғзәм Баһауетдинов.

Пенсияға сыҡҡансы Табылды һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә башланғыс кластарҙа белем биргән Ғәзизә Баһауетдинова 17-се Һауа армияһының 647-се часында хеҙмәт итеп, Воронеж ҡалаһынан Венгрияның баш ҡалаһы Будапештҡа саҡлы юл үтә. (Әйткәндәй, лейтенант Миңлеғаяз Килмәтов та Венгрия өсөн һуғыштарҙа һәләк була.) Табылды ҡыҙы 3-сө Украин фронты составында Донбасты, Ҡара диңгеҙ буйын дошмандан азат итеүҙә ҡатнаша. Тәлғәт Тәтегәсев Бөйөк Ватан һуғышын лейтенант погондары тағып Польша сигендә ҡаршылай. Ике тапҡыр дошман ҡамауында ҡалып, ҡулсаны йырып сыға. Белоруссияны, Украинаны азат итеүҙә, Варшаваны алыуҙа, Берлинды штурмлауҙа ҡатнаша, 19 хәрби наградаға лайыҡ була. Төрлө урындарҙа хеҙмәт итеп, 1956 йылда Свердловск ҡалаһына килеп төпләнә.

Фәйруша Хужин һуғышҡа 1941 йылдың сентябрь башында ғына алына, ә уға тиклем район ауылдарында һауа һөжүменән һаҡланыу ысулдарын өйрәтеп йөрөй. Уның яу юлы Үҙәк фронттан башланып, 1945 йылдың ғинуарында Латвия өсөн һуғыштарҙа ҡаты яраланыу менән тамамлана. Старшина Хужин хәрби подразделениеларҙа партия эше менән дә шөғөлләнә, рота парторгы була. Ул Табылдыға дүрт ай төрлө госпиталдәрҙә дауаланып, икенсе төркөм һуғыш инвалиды булып ҡайта.

# Ғүмер итеү – донъя көтөү

XVIII быуат урталарында башҡорт ерҙәренә сит халыҡтар күпләп күсеп ултыра башлай. 1754 йылдың 3 майында төҙөлгән килешеү буйынса – Хәлекәй, 1756 йылда Әмир һәм Ҡарағош ауылдарына нигеҙ һалына. 1796 йылдың 27 июлендә башҡорт ерҙәрен межалау тураһында Сенат указы сығып, аҫаба ерҙәрҙең «артыҡ»лығы асыҡлана. Указ нигеҙендә Мырҙалар аймағы башҡорттары Сәйет биҫтәһе татарҙарына ер һатырға мәжбүр ителә. Аҙнай түбәһенең Һәләүек буйындағы Сәлих, Ҡанаҡай (Шипай), Тәйрүк буйындағы Көҫәпҡол ауылдары башҡорттары Оло Күндрәк йылғаһы буйында Шәкәр, Һарайҫа, Йәлембәт (Ялан Шипайы) ауылдарын нигеҙләй.

1798 йылдың 10 апрель указы менән батша хөкүмәте башҡорттар менән мишәрҙәрҙе казак ҡатламына күсерә. Табылды 8-се башҡорт кантонының 21-се йортона ҡарай. Был йортҡа Ҡабыҡҡыуыш, Иҫке һәм Бала Сытырман, Ҡотлоюл, Яуыш, Батыр, Айтуған, Балыҡлыбаш, Әтәс ауылдары буйһона. Гражданлыҡ йәһәтенән ауыл Юрматы олоҫоноң Мырҙалар аймағына инеп, уның үҙәге: кантон, йорт идараһы етәкселеге Табылдыла урынлаша. 1830 – 1850 йылдарҙа башҡорт ерҙәрен тартып алыу, губерна хакимиәтенең башҡорттарҙы игенселеккә күсергә мәжбүр итеүе арҡаһында малсылыҡ бөлгөнлөккә төшә. Йәйләүгә сығыу тыйыла. Шулай ҙа Табылдыла һәр йортта уртаса 12 – 13 баш йылҡы малы аҫрала.

1861 – 1895 йылдарҙа Стәрлетамаҡ өйәҙенә Вятка, Һарытау, Сембер, Ҡазан, Түбәнге Новгород, Һамар, Ырымбур, Пенза, Тамбов, Тула, Рязань, Смоленск, Воронеж, Курск, Полтава, Чернигов, Харьков губерналарынан, Остзей крайынан 11,5 мең кеше күсеп ултыра. Тамбовтан ғына 796 ғаилә килеп, Ҡараяр, Протасовка (70-се йылдарҙа юҡҡа сыҡты) ауылдарына нигеҙ һала. Өйәҙҙә күскенселәр бөтәһе 191 ауыл булып ултыра, бөгөн уларҙың күпселеге юҡҡа сыҡҡан. 1899 йылда Борисовка, Сайрановка һәм Күндрәк ауылдары Табылды башҡорттарынан ерҙе ҡортомға ала, тиелгән.

Архив мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 1899 йылда Табылды аҫабалар ауылы булып теркәлә. Унда 266 рәүиз йәне (ревизские души) йәшәй, тиелгән. 720 дисәтинә сейәлек бар, йылы яҡшы килгәндә һәр кешегә 18 һумлыҡ сейә һаталар. Иген үҫтерәләр, башҡа кәсептәре юҡ. Тарихҡа «Табылды сейәлеге» булараҡ инеп ҡалған был һирәк осрай торған күренештең яҙмышы күңелһеҙ тамамлана. Әнүәр Яхиндың хәтерләүенә ҡарағанда, һуғышҡа саҡлы уҡ ауыл Советы рәйесе Әҙһәм Баһауетдинов сейәлекте Ҡарағош ауылына бирә. Табылдыларға бында сейә йыйыу тыйылғанлыҡтан, «төндә муйынға ҡапсыҡ аҫып килә торғайныҡ, – тип иҫләй Әнүәр ағай. – Сейә шул тиклем күп, төндә йылтырап ултыра. Сейәлектең тирә-яғын һөрә торғас, уның биләмәләре ҡыҫылды. Һуғыштан һуң ул көтмәгәндә янып китте һәм шунан һуң мандый алманы».

1906 йылда Стәрлетамаҡ өйәҙе Ҡарағош олоҫоноң идараһы Табылды ауылында урынлашҡан була. Был административ берәмеккә 12455 кеше йәшәгән 33 ауыл буйһона. Табылдыла мәсет, өс бакалея лавкаһы, Туҡаевтың һыу тирмәне күренә. Әйткәндәй, Туҡаевтың һыу тирмәне Раевка ауылында ла була. Быуат башында Табылдыла 121 өйҙә 318 ир заты, 320 ҡатын-ҡыҙ теркәлгән. Олоҫтоң Ҡарағош исеме менән йөрөтөлөүе, моғайын, был ауылдың тирә-йүндә иң ҙуры булыуы менән аңлатылалыр, сөнки унда 384 йортта 2 меңдән ашыу кеше йәшәгән. Өс мәсет, ике бакалея лавкаһы, ике хужалыҡ магазины, ике тимерлек булған, баҙар эшләгән.

Табылдыла 40 усадьба иҫәпләнеп, һөрөнтө ерҙәр – 3412, көтөүлектәр – 402,

сабынлыҡ 244 дисәтинә тәшкил итә. 769 дисәтинә урман да бар. 674 дисәтинә ер эшкәртергә яраҡһыҙ иҫәпләнгән. Ауылда 149 айғыр, 115 бейә, 6 үгеҙ, 160 һыйыр, 139 быҙау, 293 һарыҡ һәм 180 кәзә аҫрайҙар. 38 кешенең малы бөтөнләй күренмәй, ә бына иген сәсмәгән ғаилә булмаған: 239 дисәтинә бойҙай, 6,5 дисәтинә арыш, 61 дисәтинә һоло игелгән. Ҡарабойҙай сәсеүлеге – 17, тарыныҡы 18,5 дисәтинәгә еткән. Бынан тыш, өс ғаиләлә 55 баш умарта тотҡандар.

Фәйруша Мөхәмәтша улы Хужиндың (1913 йылғы) яҙмаларына ҡарағанда, элек тормош бик ауыр булған, өҫ-башҡа кейергә лә, ашау-эсеүгә лә бик ҡыҫынҡы булған. «1914 йылғы Герман һуғышы, 1917 йылғы революция, сит ил интервенттарының баҫып инеүе һәм 1921 йылғы аслыҡ беҙҙең гөл кеүек үҫеп килгән сабый саҡтарға тура килде. Беҙ иҫке-моҫҡо киндер күлдәк-ыштан кейеп, әсе алабута, ҡамғаҡ икмәктәрен ашап үҫтек. 1921 йылғы аслыҡ хәтеремдә ныҡ һаҡлана. Ҡыш көнө астан хәйер һорап йөрөүселәр иртәнән кискә саҡлы өҙөлмәне. Бигерәк тә башҡорттар һәм татарҙар аслыҡтан күп әрәм булды. Беҙҙең Дәүләтҡол исемле еҙнәй бар ине, һәм ул көн дә тиерлек беҙгә килеп йөрөй (моғайын, берәй башлыҡ булғандыр) һәм, бөгөн ике йәки биш кеше үлде, йә булмаһа, юлдан фәләнсә мәйет алып ҡайттыҡ, таш келәткә йыябыҙ, тип йәки, бөгөн биш кешене бер ҡәбергә һалдыҡ, тип хәбәр һөйләр булды. Әфтәх зыяраты янында 5 – 9 үлекте бергә һалған, оло зыярат артында 20 кешене бергә күмгән ҡәберлек бар. Ул йылдарҙа әҙәми заттың ашамаған емтеге, үләне ҡалмағандыр. Ауылдарҙа эт-бесәйҙең нәҫеле ҡалманы, тиер инем, байҙарҙа ғына һаҡланғандыр».

Рәшит Мөхәммәтов мәғлүмәттәре буйынса, 1921 йылғы аслыҡтан һуң 1922 йылда хөкүмәт тарафынан «Гигант» исеме аҫтында бик ҙур артель ойошторолоп, идараһы Табылдыла урынлаша. Уға хөкүмәт техниканы: һабан, сәскес һ.б. күпләп бирә. «Гигант» артеленә 22 ауыл ҡарай: Табылды, Ҡабыҡҡыуыш, Үрге Шәкәр, Йәлембәт, Өмөтбай, Һарайҫа, Үрге һәм Түбәнге Ҡарамалы, Баҡый, Гәрәй утары, Борисовка, Сыуаҡай, Ҡарағош, Һөләклә күл, Раевка (Бөгөлсән менән Куликовка утарҙарын да индереп), Мостафа, Үрге һәм Түбәнге Аллағыуат. Артелгә Түбәнге Ҡарамалылағы монастырь башлығы Урманов (?) етәкселек итә. Писары Василий Зернышов, ярҙамсыһы Григорий Павлович була. «Гигант» биш йыл эшләй һәм 1929 йылда тарҡалып, «Башҡорт артеле» төҙөлә. 1930 йылда Табылды ауылы унан айырылып сыға ла, «Яңы юл» колхозы барлыҡҡа килә. Уға Ғилметдин Әбдиев етәкселек итә. «Был яҙма кемдекелер, аҙағы йыртылған – ти Р. Мөхәмматов – ә уны миңә 1948 йылдың ҡышында Кинйәбай ағай Йәғәфәров уҡыны».

Ләкин Ф. Хужиндың яҙмаларында был мәғлүмәт осрамай. «1922 йылда, – тип яҙа ул, – иген арыу ғына үҫеп, үҙебеҙ сәсмәһәк тә, атайым Раевканан Иванға, Ҡараярҙан Мәтрәйгә (Дмитрий), Ҡарамалынан Егорға йә сабынлыҡ, йә һөрөнтө ер һатып, беҙгә ашарлыҡ аҙыҡ, иҫке-моҫҡо кейем алып ҡайтыр ҙа «Аллаһы Тәғәлә урыҫҡа бирһен, урыҫта булһа, беҙҙә лә була ул» тип, иң яҡшы ерҙәрен арзан ғына хаҡҡа һатҡанын белмәй, ғорурланған булыр ине. Ауылда астан бар ғаиләләре менән һәләк булғандарҙың отрубтарын (бер отруб – 4 гектар самаһы) иҫән ҡалған ир йәндәргә бүлеп биргәндәр. Беҙҙең ғаиләлә дүрт ир йән инек, шуның менән беҙгә лә бер нисә отруб өҫтәмә ер бүленеп, атайымдың 9 отруб ере бар ине, йәни 40 гектар самаһы. (Һәр яғы 200 метрҙан торған квадрат бер отруб иҫәпләнә, һәм уның дүрт мөйөшөнә лә бағаналар ҡуйылып, ул ер мәңгелеккә бирелә. Бына шуға ла башҡорт үҙ ерен байға йә мәңгегә, йә бер нисә йылға һатҡан. Беҙ ағайымдар менән 9 отрубтың 6-һын яҡшылап белмәнек тә»).

## Синфи көрәш

Табылдының бай һәм хәлле кешеләре хаҡында бер аҙ мәғлүмәт бар. Баймөхәмәт Яхин – ауыл муллаһы, ғаиләһе менән Оло урамда 2000-се йылдарҙа Ғәлим Яхин йәшәгән өй урынында донъя көткән. Яңы власть уның бар мөлкәтен тартып алып, өйөндә ауыл Советы урынлаштырған. Мулла Ғоссам, Ғаффан, Зиннур, Зөфәр, Әнүәр, Мәрғизә исемле балалары менән бәләкәй өйөндә йәшәргә мәжбүр ителә. Зөфәр Яхин Бөйөк Ватан һуғышында өлкән сержант дәрәжәһендә ҡатнашып, Ҡыҙыл Байраҡ ордены тағып ҡайта. Миңә Әнүәр ағай Яхин менән 70-се йылдарҙа ауыл фермаһында бер йыл башмаҡ ҡарарға тура килгәйне.

Ғарифулла Хөсәйенов ғаиләһе лә хәлле көн күргән. Ҡатыны Зөһрә – сығышы менән (Иҫке) Сытырман ауылынан була. Балалары Миңниса, Зөләйха, Сабира, Гөлфариза, Хәбибулла һәм Хәмиҙулла. Зөһрәһе вафат булғас, Ғарифулла килене Алмабикәне алып ҡайта. Уңған һәм сибәр була йәш ҡатын. Гөлниса һәм Гөлмиҙан исемле ҡыҙҙар таба. Ире донъя ҡуйғас, Алмабикә тыуған ауылына ҡайтып китә. Хөсәйеновтарҙың өйө ауыл клубына әүерелә, малдарын колхозға тартып алалар. Балалары башҡаларҙа өйҙәшлектә көн итергә мәжбүр була. (Әйткәндәй, Ғарифулла байҙан ҡалған йорт 80-се йылдарҙа ла ауыл халҡына клуб булып хеҙмәт итә ине. Уның урынына 90-сы йылдарҙа иҫке мәктәп эргәһенә яңыһын һалдылар.) Байҙың өс ҡыҙы Ҡабыҡҡыуыш ауылына кейәүгә сығып, Ибраһимовтар, Собханғоловтар һәм Әхмәтовтар нәҫеленә ҡушыла. Ә Миңнисаһы Ибраҡай ауылына Абдулла Аллағоловҡа тормошҡа сыға. 1907 йылғы Хәмиҙулла менән 1922 йылғы Хәбибулла Бөйөк Ватан һуғышында Совет илен яҡлап ҡорбан була.

Изекәевтар ҙа хәлле йәшәгән. Хөббөтдин Изекәевтың ҡатыны – Ғәзизә, балалары – Мостафа, Мөстәҡим, Зәйтүнә, Зөләйха, Ғәрифә. Шуға ҡарамаҫтан, Мостафа Изекәев, мәҫәлән, Табылды ауылында комсомол ойошмаһы төҙөлгәс, уның тәүге башлығы була, 1943 йылда 35 йәшендә Бөйөк Ватан һуғышында үлеп ҡала. Ә Ғәрифә, Зәйтүнә һәм Зөләйхалар Табылдыла ғүмер итте.

1925 йылғы Ғәфүрә апай Исмәғилева хәтерләй: «Байҙарҙы өйҙән ҡыуып сығарғас, йорт-йыһаздарын һатырға ҡуялар. Атайым Мөхәмәҙғәли ул саҡта бригадир булып эшләгән, урамдан ҡайтҡан да әсәйемә:

– Нафиға! Әллә берәй балаҫ алаһыңмы? – тип һорай икән. – Бик арзан һаталар.

Әсәйем иһә:

– Уларҙың әйберҙәрен яҡын килтерәһе булма! – тип уны бороп сығарған».

Хисаметдин Хөсәйеновтар (улдары Шәһиҙулла, Хәйрулла) ҙа ярлы булмаған.. Шәһиҙулла ағай күп бала атаһы булып, ғүмер буйы тракторҙа эшләне. Тыныс холҡло, кешеләргә ярҙамсыл ине. Хәйруллаһы Күндрәк ауылында йәшәне. Нәжметдин Байғужин да – байҙарҙан. Балалары Әүхәҙи, Әнүр, Миңлекамал, Нурфәйез. Әнүр абый Байғужин – юғары белемле уҡытыусы, Миңлекамал апай ауыл Советында эшләне, Әүхәҙи ағай тәүҙә – бухгалтер, артабан тимерсе булды.

Мөхәммәт Вахитовты, урта хәлле крәҫтиән булыуына ҡарамаҫтан, властар менән ниндәйҙер бәхәс сығып, Себергә һөрәләр. Ул шунда үлеп ҡала. Ҡатыны Разифа бәләкәй улы Сәйәфәрҙе эйәртеп әйләнеп ҡайта һәм Зекериә Вахитовҡа тормошҡа сыға. Әлемғол Вахитов ғаиләһе ете – ун баш һыйыр аҫрай, хеҙмәтсе тота, мал ҡарата, шуға күрә кулакҡа сығарыла. Улы Мөхәмәтсафа Вахитов колхозда эшләһә, ейәне Рәсүл Табылды, Сергеевка, Борисовка ауылдары клубтарында кино күрһәтте.

30-сы йылдарҙағы сәйәси золом ҡорбандары хаҡында хәтирәләр бик аҙ һаҡланған. Ғәфүрә апай Исмәғилева түбәндәгеләрҙе хәтерләй: «Әлеге магазин

урынында Ибрай ҡарт ҡатыны Ғәйзә менән торҙо. Исмәғил исемле берҙән-бер улдары бар ине. Ауыл советы рәйесе Әҙһәм Баһауетдинов (ул ошо вазифала оҙаҡ йылдар эшләй, ауылдаштарына шәфҡәтһеҙлеге менән таныла – **М. Х.**) шул Исмәғилде төрмәгә ебәрҙе. Кисенә ул нисектер әйләнеп ҡайтҡайны, иртәгәһенә тағы килеп алып киттеләр. Өҫтөнә кейергә кұлдәге лә юҡ ине, атайым үҙенекен һалып бирҙе. Тоҡсайына ярты икмәк тә һалды. Исмәғил башҡаса ауылға ҡайтып күренмәне.

20-се йылдарҙа Йомағол Хөсәйеновты ла төрмәгә ебәрҙеләр. Уны ауыл Советына саҡыралар ҙа, Әҙһәм Баһауетдинов:

– Нишләп һалымдыңды түләмәйһең? – тип екерә.

Ул саҡта аҡса тигән нәмә булмай әле. Йомағол асыуланып өҫтәлгә һуға ла:

– Ҡайҙан табайым мин ул аҡсаны, – ти икән.

Ауыл Советы рәйесе:

– Аҡсаң булмаһа, беҙ һиңә урын табырбыҙ, – ти ҙә Йомағолдо атҡа ултыртып судһыҙ-ниһеҙ Стәрлетамаҡҡа оҙата. Шул китеүҙән Йомағол Хөсәйенов әйләнеп ҡайтмай. 1926 йылғы иҫәптә ул теркәлмәгән. Был ғаилә күп йылдар Табылдыла иң фәҡирҙәрҙән иҫәпләнә.

Муса Вахитов Стәрлетамаҡтан толоп тышларға тип 13 метр тауар алып ҡайтҡас, уны Әҙһәм Баһауетдинов саҡырып ала ла:

– Уны һин һатыр өсөн алып ҡайтҡанһың, спекулянт! – тип милицияға еткерә. Мусаны Стәрлетамаҡ төрмәһенә алып барып ябалар, һәм ул шунда үлеп ҡала.

1914 йылдың 10 майында Мөхәмәтдәмин ауылында донъяға килгән Әхтәм Ҡарағолов та, ата-әсәләре ауырып үлгәс, Табылдылағы Мәғәфүр бабаһында тәрбиәләнә. Уның яҙмаларына ҡарағанда, 1926 йылда булһа кәрәк, Табылдынан бер нисә кеше Сейәлек һәм Туғай ауылдарына күсеп ултыра. «Сейәлеккә – 31 хужалыҡ, Туғайға 28 ғаилә күсте, – тип яҙа Ҡарағолов. – Беренсе булып Сейәлеккә Вәкил ағай күсенде. Бер рәт булып, матур итеп ултырҙылар. Бер йылда йортҡура ҡороп бөтөрҙөләр».

1930 йылда Сейәлек ауылының 11 кешеһе колхозға инә. «Туғай менән Табылдыла колхозға инеүсе булманы, – ти автор. – Яҙын Сергеевка утарына барып, бойҙай сәстек. Сергеевка утарынан 9 кешене кулакка сығарғас, малдарын, ҡорамалдарын, өйҙәрен һәм һөрөнтө ерҙәрен беҙгә бирҙеләр. Колхозда Йәрмөхәмәт (Байғужин) – рәйес, Йыһанша (Дауытов) хисапсы булды. Усман мал көттө, Йәрмөхәмәт ҡатыны һыйыр һауҙы». Ләкин эргәлә оло һыу юҡлыҡтан, Сейәлек халҡы Табылдыға күсеп ҡайтырға мәжбүр була. Туғай ауылы иһә 60-сы йылдарҙа ла бар ине.

## Аң-белемгә ынтылыш

«1923 йылдың һалҡын көҙөндә мин дә ауылдың Бәхтигер исемле муллаһына башлап уҡырға барҙым, – тип хәтерләй Фәйруша Хужин. – Ул үҙенең өйөндә дин һабағы бирә ине. Һикелә аяҡтарҙы бөкләп ултырып, ижекләп хәреф өйрәнә башланыҡ. Ул хәрефтәр дин китабы Ҡөрьәндә яҙылған ғәрәп алфавиты буйынса ине. Ҡағиҙә булараҡ, һәр кесаҙна муллаға хәлең ҡәҙәрле аҡсалата хәйер бирергә кәрәк. Беҙҙең аҡса булмағас, әсәйем миңә муллаға хәйер итеп бер баҫма (бер нисә бөртөк) киндерҙән иләнгән еп биреп ебәрер ине. Мин уларҙы муллаға бирергә оялып, юлда берәй урынға йәшереп, ташлап китә торғайным. Сөнки башҡа уҡыусылар аҡса килтерә ине».

Бәләкәй Фәйруша муллала оҙаҡ уҡый алмай. Тәртипһеҙлеге өсөндөр инде, бер көн мулла уның ҡаҡ маңлайына йыуан бармаҡтары менән бик ҡаты сиртә, ул урын ҡабарып сыға. Ошо хәлдән һуң малай уҡырға йөрөүҙән туктай.

Ағаларына эйәреп, Оло урамда урыҫса уҡытҡан мәктәпкә йөрөп ҡарай, ләкин бында ла уҡырға насип булмай, сөнки уҡыусылар өйгә яғыу өсөн көн һайын бер тиҙәк алып килергә тейеш була. Ә Мөхәмәтша ҡарттың өйөндә яғырға былай ҙа самалы. Көн һайын өс тиҙәк алып китеү мөмкинлеге юҡ.

«Бәхеткә күрә, шул ҡышты уҡ беҙҙән йыраҡ түгел бер өйҙә яңыса уҡыта башланылар, – тип дауам итә автор. – Парталар ҙа ҡуйылғайны. Беҙҙе Ямал исемле татар ҡатыны уҡытты. Дин дәрестәре инмәй ине. 1924-1925 йылдарҙа Зәйнулла Байғужин балаларҙы үҙенең түпкө өйөндә уҡыта башланы. 1926 йылда мәктәп Хәбир (Вахитов) өйөнә күсте. Бында уҡыусылар күбәйеп, 1-се һәм 4-се кластар асылды. Шулай ҙа ҡыҙ балалар уҡырға йөрөмәне. Китаптар булманы тиерлек, бөтә класҡа – бер дәреслек, уны ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыныҡ. Дәфтәр булмау арҡаһында, иҫке китаптарҙың юл араларына ҡара менән яҙа торғайныҡ. Ҡара имән сәтләүегә һыуына ҡаҙау һалып, тутыҡтырып яһалды».

Табылдының ике ҡатлы мәсете ул саҡта әлеге Тимерғәли Йосоповтар өйө урынында була. 1935-1936 йылдарҙа балаларҙы ошо мәсет бинаһында уҡыталар. Дәрестәрҙе Сабит Тәтегәсев, Ғәзизә Яхиналар алып бара. Ҙур ағас мәктәп 1937 йылда һалына, унда Стәрлетамаҡ, Федоровка райондарынан бөтә башҡорт ауылдары балалары 5 – 7-се кластарҙа белем ала. Табылды ете йыллыҡ мәктәбе Стәрлебаш районында иң ҙур башҡорт мәктәбе иҫәпләнгән. Һәр класта 25 – 30-ар бала тупланып, ҡайһы бер кластар икешәр була. Һуғышҡа саҡлы мәктәптә уҡыусылар бик күбәйһә лә, һуғыш осоронда аҙая. Мәктәп ике ат тота, береһен район үҙәгенә йөрөү өсөн файҙаланалар. Юл юҡлыҡтан ҡышҡы көндәрҙә махсус кешеләр сығып, көрт һалған урындарға маяҡтар ҡаҙар булған.

Мәктәпте йыйыштырыусы, мейесенә яғыусы булып Разия Дауытова (улдары Ғәҙелбай һәм Алсынбай, ҡыҙы Гөлйыһан) эшләй. Иртән ҡулына шәм тотоп, мейестәргә тоҡандырып йөрөгәндә, ул ҡараңғыла абынып йығыла ла, шәме ҡулынан төшөп китә һәм кәрәсине иҙәнгә түгелеп, яна башлай. Ҙур янғын сыға, мәктәп нигеҙенә саҡлы янып бөтә. Разия Дауытованы өс йылға иркенән мәхрүм итеп, Өфөгә оҙаталар.

Мәктәп директоры булып һуғышҡа тиклем Әбйәлил районының Таһир ауылы кешеһе Хөсәйен Ҡунаҡбаев, ә һуғыш йылдарында Рысаев (фамилияһына ҡарағанда, ул Тәтер-Арыҫлан ауылынан булғандыр – **М.Х.**) эшләй. Унан һуң Әҙһәм Баһауетдиновтың һеңлеһе Мәғүзә Баһауетдинова директор итеп тәғәйенләнә.

1926 йылғы Мәрхиә Байгилдина хәтирәләренән:

– 1941 йылда мәктәп әлеге Фәтҡулла Вахитовтың олатаһы (Хәбир Вахитов та хәлле хужаларҙан иҫәпләнгәндер – **М.Х.**) өйө урынында ине. Уҡытыусыларҙы ситтән килтерҙеләр. Балаларға белем латин алфавиты буйынса бирелде.

Табылды һигеҙ йыллыҡ мәктәбе Оло урамдың уң яғында ауыл осонда урынлашҡайны. Иҫке генә бина тәпәш коридорҙан, бер ҙур һәм ике сағыштырмаса иркен һәм бер бәләкәй кластарҙан, уҡытыусылар бүлмәһенән торҙо. 60-сы йылдар урталарында балалар күбәйеп, өс класты һыйҙырған яңы ағас бина сафҡа инде. 60 – 80-се йылдарҙа мәктәп директоры булып Иҫке Ҡалҡаш ауылы кешеһе Тимерхан Арыҫланғолов (уны директор абый тип йөрөттөләр) эшләне. Ҡатыны Тәнзилә апа Сиражетдинова тарих, география фәндәренән дәрес бирә торғайны. Алгебра, геометрия дәрестәрен Сәрхәпьямал апа Ғөбәйҙуллина (Ишембай районы Көҫәпҡол ауылы ҡыҙы) алып барҙы. Урыҫ теле һәм әҙәбиәтенән Әнисә апа Хәйретдинова уҡытты. Биология, ботаника, физкультура һәм хеҙмәт дәрестәрен Зиннәт абый Ғәлиев уҡыта торғайны.

Уҡытыусылар етмәгәнлектән, ул йылдарҙа унынсы класты тамамлағандар ҙа уҡытырға алына ине. Мәҫәлән, Түбәнге Шәкәр ауылынан Юрис Алтынбаев – физика, Рәшит Исмәғилев (Йәлембәт) физультуранан дәрес бирҙе.

## Колхозда

«1929 йылда колхоз ойошто, – тип яҙа Фәйруша Хужин (был мәғлүмәт Әхтәм Ҡарағоловтыҡы менән тап килмәй – **М.Х.**) – Уға бер нисә хужалыҡ инде. Шул йылдың яҙында йәштәр йыйылыш үткәреп, комсомол ойошмаһы барлыҡҡа килде. Уны ойоштороуға район комсомол комитетынан Давыдов тигән кешене ебәрҙеләр. Муҡшы егете башҡортса оҫта һөйләшә торған булды. Беренсе комсомолецтар – Мостафа Изекәев, Усман Байғужин, Ибраһим Вахитов, Әхтәм Ҡарағолов, Лотфрахман Ҡарабаев, Хәләф Ҡарабаев, Сафа һәм Фәйруша Хужиндар. Ячейка секретары итеп Мостафа Изекәевты һайланыҡ. Мәсеттең манараһын ауҙарып, ҡыҙыл флаг элдек, ул клуб булып китте. Кис һайын клубта ниндәйҙер саралар уҙғарыу, спетаклдәр ҡуйыу яйға һалынды. Һәр кис бина шығырым тулы булып, унда колхоз ойоштороу, синфи көрәш тураһында аңлатыу эштәре алып барылды».

1930 йылға сыҡҡас, комсомол ячейкаһы (унда 20-ләп ағза иҫәптә тора) секретары итеп Фәйруша Хужин һайлана. Шул уҡ йылдың башында бөтә ауыл халҡы тиерлек, байҙар, муллалар һәм уларҙың эйәрсендәренән башҡа, колхозға инеп, аттар, сбруй-арбалар, иген игеү ҡормалдары берләштерелә. Сәсеү өсөн бер аҙ орлоҡ та туплана. Колхоз ойоштороу, синфи көрәш еңелдән булмай. Лотфрахман Ҡарабаев, Мөхәмәткол (Тәтегәсев ?) һәм Мөстәҡим (Изекәев ?) дүртәүләп кулактарҙың йәшерен эштәрен күҙәтеп, тейешле ойошмаларға хәбәр итеп торалар. Ул саҡта ауылда телефон юҡ, почта йүнләп йөрөмәй, гәзит-журналдар юҡ. «Комсомолдар йәш, етмәһә наҙан, – тип яҙа Хужин. – Колхозда партия ойошмаһы ла юҡ, бөтә эш комсомолдарға төшә. Ҡайһы бер кәңәшмәләрҙе йәшерен үткәрә, кулактарҙан шикләнер булһаҡ, өсәр көн йәшеренеп йөрөй торғайныҡ».

Колхозда бөтә эштәр ат һәм ҡул көсө менән алып барылғанлыҡтан, һәр бригадала 50 – 60 ат иҫәпләнеп, һабан менән сәсеүгә – өсәр, тырмаға ике ат егелә. 1-се бригада аттары – Байбулат Байғужин йәшәгән йорт янындағы һарайға, 2-сенекеләр – әлеге Рәфҡәт Вахитов ихатаһының артында, 3-сөһө Төбәк урамында урынлаша.

Колхозда бөтәһе 1700 гектар һөрөнтө ер эшкәртелә. Бригадалар араһында социалистик ярыштар ойоштороп, артта ҡалыусыларға ярҙамға йөрөү традицияһы индерелә. 1941 йылда Ҡабыҡҡыуыш ауылы ирҙәре (ике ауыл да бер ауыл Советына ҡараған) ҡул салғыһы менән иген сабышырға килә.

Ғәфүрә Исмәғилева апай хәтирәләренән: «Колхозға беренсе тракторҙы 1933-1934 йылдарҙа Ғәйфулла Йосопов алып ҡайтты. Баҡый ауылы яғынан килгән ике тракторҙы күрергә күптәр ауылдың көнбайыш осона сыға. Икенсе тракторҙы Үрге Шәкәр ауылынан Гөлзаһира (фамилияһы хәтерҙә ҡалмаған – **Ғ.И.**) алып килә. Колхоздың күп эшен шул тәгәрмәсле трактор атҡара. Ауылдың беренсе шоферы Ибраһим Вахитов була, шул машинаһы менән ул Бөйөк Ватан һуғышына китә».

1938 – 1940 йылдарҙа Табылды ауылы үҙе бер колхоз булып, уға Фәйруша Хужин етәкселек итә. Бригадир вазифаларын Мөхәмәҙғәли Исмәғилев, Таһир Шәмсыуаров, Вәлиша Рәхимовтар алып бара. Һәр бригадала берәр урғыс булып, уларға Мөхәмәтсафа Вахитов (1-се бригада), Зиязетдин Изекәев (2-се) һәм Нурмөхәмәт Ҡарабаев (3-сө) ултыра. Тамаҡ аҫрар өсөн колхоз он бирә. Быны Ф. Хужин ошолай тасуирлай: «Һәр көн бригадир он йөкмәп өйөнә алып ҡайта ла,

шуны 200-әр грамдан үлсәп, эшкә сыҡҡан кешеләргә бирә. Ун көн һайын шул исемлеккә теркәлгән һандарҙы ҡушып, һәр фамилия тапҡырына «ултыртып» сыға. Ул саҡтарҙа йыл аҙағына бер кемгә лә иген теймәй торғайны».

Колхоз рәйесе (Заһретдин?) Мырҙагилдин наҙан булһа ла, эшкә көслө була. «Мин уның менән иҫәпсе булып арыу ғына эшләп йөрөгәндә, рәйеслектән сығарҙылар ҙа 1500-се (күрәһең, шундай кампания булған – **М.Х.**) Ғилметдин Әбдиев килде, – тип дауам итә Фәйруша Хужин. – Ләкин эшкә бирелгән был талапсан ағайҙың ғүмере ҡыҫҡа (1932-1933) булып сыҡты, үпкә ауырыуынан вафат булды. Колхозға бер йыл самаһы Миңләхмәт Ғайсаров етәкселек иткәндән һуң, район Советы мине колхоз рәйесе итеп раҫлау тураһында ҡарар ебәргән. 1934 йылдың октябрендә колхоз активы йыйылып, «Яңы юл» колхозы рәйесе итеп мине һайлап та ҡуйҙы».

Колхозды техника менән Күндрәк МТС-ы тәьмин итеп, уларҙың идараһы Ҡараяр ауылында урынлашҡан була. Директор вазифаһында – Матекайнен, баш агроном – Шатов, баш механик булып Ишутиндар эшләй. Урыҫ телен белмәгән Фәйруша Хужинға улар менән эшләү бик ауыр була. Шулай ҙа 1935 йылда яҙғы сәсеүгә яҡшы әҙерләнәләр, ҡуна-төнә ятып, сәсеүҙе уңышлы үткәрәләр. Иген дә бик яҡшы үҫә. Бер генә комбайн булғанлыҡтан, ҡалғанын жнейка, лобогрейка менән уралар.

Шул уҡ йылдың ҡышында Фәйруша Хужин рәйеслекте урынбаҫары Шакир Усмановҡа тапшырып, 16 ноябрҙә Ҡыҙыл Армияға алына һәм 1937 йылда хеҙмәтен тамамлап ҡайта. «Колхозда иген бик үҫкән, – тип яҙа ул. – Рәйес булып Ҡарағоштан (исеме күрһәтелмәгән) Хөснөтдинов эшләй. Халыҡтың күңеле көр, икмәк етерлек, дәүләткә лә тапшыралар. Ноябрҙә колхозсыларҙың һорауы буйынса район Советы мине «Яңы юл» колхозына рәйес итеп тәҡдим итте». Был йылдарҙа колхоз дәүләткә 1100 – 1200 центнер иген тапшырырға тейеш була. Бынан тыш МТС-тың комбайн һәм тракторҙарын файҙаланған өсөн, килешеүгә ярашлы, 700 – 900 центнер түләнә. Дәүләткә үҙ теләгең менән иген һатыу (ә был – закон) 600 – 900 центнер самаһы булып, йыл һайын 2400 – 3000 центнер иген тапшырырға тура килә. Ашлыҡты арбаларға тейәп Ҡараярға йәки Стәрлетамаҡҡа оҙаталар. Йәй көндәре ике ат егелгән бричкаға 8-9 центнер, бер атлы арбаға 3,5 – 4 центнер иген һалынған. Ҡышын ике санаға бер кеше ултырып, ҡайтҡанда МТС-тан яғыулыҡ тейәү өсөн артҡа буш мискә лә бәйләп йөрөгәндәр.

1939 йылдың апрелендә колхозға рәйес итеп Мөхәмәтҡол Тәтегәсев (ул 1926 йылғы иҫәпкә ингән Йыһанша йәки Биктимерҙең улы түгелме икән? – **М.Х.**) һайлана. Ул йылдарҙа МТС директоры булып Ханнанов эшләй. 1941 йылда «Яңы юл»да тағы рәйес алмашына – Ғибаҙулла Изекәев ҡуйыла. Хисапсы булып Ишбулат Рәхмәтуллин һәм Гәрәй Сафиндар эшләй, берҙән-бер иген комбайнын Басир Латипов йөрөтә.

Ғәфүрә апай Исмәғилева хәтирәләренән: «Һуғыш ваҡытында колхоз малдары Әминә Вахитова йәшәгән өй урынындағы ситән аҙбарҙа аҫралды. Унда 10-ар баш һыйыр, тана һәм башмаҡ бар ине. Тиреҫте тал сыбығынан үрелгән сыттарға һалып түгә торғайныҡ. Малдарҙы мин, Ғәйникамал Хөсәйенова ҡараныҡ, һыйырҙарҙы Заһира Вахитова, Мөхәрифә Тәтегәсева һауҙы. Ферма мөдире – Янғол Вахитов, ветфельдшер Алтынтимер Яхин. Колхозға күпмелер ваҡыт Ҡабыҡҡыуыш ауылынан Йыһанур Ибраһимов етәкселек итте.

Һуғыш йылдарында тракторсы булып эшләгән ҡатын-ҡыҙҙар аҙ булманы.

1942 йылда бер төркөм ҡыҙҙарҙы Покровка ауылына тракторсылар әҙерләү буйынса ай ярымлыҡ курсҡа ебәрҙеләр. Гөлйыһан Вахитова «Дизель» тракторында комбайнды һөйрәтте, яҡшы хеҙмәте өсөн БАССР Юғары Советы депутаты итеп һайланды. Миңлебикә һәм Мөслимә Ғайсаровалар, Мәхмүзә Балтабаевалар ҙа тракторға ултырҙы. Миңә «Коммунар» комбайнында штурвалсы булып эшләргә тура килде. Һырт аҫтындағы ырҙын табағында мөдир булып та эшләнем. Игенде яландан бестаркаларға (таҡта арба) тейәп ташыуҙа Фәйзрахман Мораҙымов тырышып йөрөнө. Игенде машинаға биҙрәләп тейәй торғайныҡ. Һуңынан «Сталинец» комбайны ҡайтарҙылар».

1951 йылда Табылды, ике Шәкәр һәм Ҡараяр ауылдарынан бер хужалыҡ ойошторолоп, уға Жданов исеме бирелә. Колхоз рәйесен Ҡарағош ауылынан килтерәләр, ә уға тиклем Табылдыла «Яңы юл» колхозына Баҡый ауылынан Рәхим Ғәфиев етәкселек итә. Жданов исемендәге колхоздың һуңыраҡ ҡуйылған рәйесе Хафизов колхоз идараһын Үрге Шәкәр ауылына күсерә һәм үҙе лә шунда йәшәргә китә. Ауылда ҙур клуб һалдыра. Ләкин 1959 йылда был колхоз таратылып, Табылды бригадаһын «Правда» колхозына ҡушалар. Үҙәге Баҡый ауылында урынлашҡан был хужалыҡҡа Ново-Николеавка, Үрге һәм Түбәнге Борисовка, Үрге һәм Түбәнге Ҡарамалы, Протасовка ауылдары ла индерелә. Шулай итеп, ҡасандыр үҙҙәре Табылды башҡорттарынан ҡортомға ер алып көн иткән Баҡый ауылы колхоз үҙәгенә әйләнеп, ҙурая, матурлана. Бында төҙөлөш эштәре киң йәйелдерелә. Табылдынан быға тиклем оҙаҡ йылдар эшләгән ауыл Советын да алып китәләр.

Яҡын-тирәлә берҙән-бер административ үҙәк һаналған Табылдыла сельпо ла булып, ул Оло урамда Мырҙағол Хөсәйеновтар өйө урынында 60-сы йылдарҙа ла бар ине. Сельпо рәйесе булып Баҡый ауылынан Тәлғәт Дәминев, Сәйфетдин Байтимеров, Әхмәт Фәтҡуллин, Шәкәрҙән Таһир Байназаровтар эшләгән. Сельпоның үҙ аттары була. Ул Баҡый Борисовка, Ҡабыҡҡыуыш, Үрге һәм Түбәнге Аллағыуат, Мостафа, Үрге һәм Түбәнге Шәкәр, Үрге һәм Түбәнге Ҡарамалы һәм Протасовка ауылдары халҡын тауар менән тәьмин итә. Сельпо аттар менән Стәрлетамаҡтан кәрәсин дә ташый, сөнки ул саҡта ауылдарҙа керогаз, керосинка менән файҙаланғандар. Һатыусы булып Ғәҙелша Дауытов, Хөббихужа Дауытов, Рауил Тәтегәсев, Сәйәфәр Вахитов, Ғәшүрә Хәкимова, Хажиғәли Исмәғилевтар эшләй.

Әнүәр Яхин хәтерләүенсә, колхоздың Туғай ауылында йәшелсә баҡсаһы була, һәм унда агроном булып Фәйруша Хужин эшләй. Ул йылдарҙа был ауылда Таһир Шәмсыуаров, Миңләхмәт Ғайсаров, Ғәлләметдин Изекәев, Шәрифулла Вахитов, Ғиләжетдин Изекәев, Ярулла Ҡарабаев, Зиязетдин (?), Исмәғил һәм Насретдин Изекәевтар йәшәгән. Баҡсала кәбеҫтә, кишер, һуған, ҡарбуз, ҡыяр, помидор үҫтергәндәр. 15 гектар самаһы ер биләгән баҡсаны Таһир Шәмсыуаров менән Сәхибгәрәй Батталов ҡарауыллай. Йәшелсә өлгөргәс, халыҡҡа таратып бирәләр.

Ауылдың Ҡоро Күндрәк үҙәнендә 200 гектарлап матур туғайы булып, ундағы бесәнде халыҡҡа йәрәбә менән бүлеп бирә торғайнылар. Талын киҫеп, усаҡҡа яғып булды, сөнки ул йылдарҙа мейескә тиҙәк һуғып яғыла ине. Ләкин 70-се йылдарҙа «Правда» колхозы идараһы, туғайҙа культуралы көтөүлек булдырыу һылтауы менән, ундағы тал-өйәңкеләрҙе төпләргә тотондо. Культуралы көтөүлек эшләй алманылар, әммә, мал инеп йөрөй башлағас, туғай эштән сыҡты.

## Социализм ҡаҙаныштары

1960 йылда Табылдыға тәү тапҡыр электр энергияһы бирелә. Бағана урындарын ҡул менән ҡаҙығанлыҡтан, ул эш ике-өс йылға һуҙыла. Электр ауыл тормошон еңелләштереү, йөкмәткелерәк итеү йәһәтенән алға табан ҙур аҙым була. Беренсе телевизорҙы ауыл мәктәбенә директор Тимерхан Арыҫланғолов алып ҡайта. Уны мәктәптең иң ҙур класына ҡуйғас, телевизор ҡарарға бөтә ауыл халҡы йөрөй. Һуңынан «зәңгәр экран» хужалары күбәйә: Тимерхан Дауытов, Тимерхан Арыҫланғолов, Рәшит Мөхәммәтов, Латип Вахитовтарҙа тәүге ғаилә телевизорҙары барлыҡҡа килде. 1961 йылда колхоз тәү тапҡыр эш хаҡын аҡсалата түләүгә күсә. Ул саҡта колхоз рәйесе булып Баҡый ауылынан Нәби Дәминев эшләй.

Әнүәр ағай Яхин хәтерләй: «60-сы йылдарҙа Стәрлебаш районында ла шоссе юлдар төҙөү башланды. Ураҡҡа төшкәнгә тиклем көрәк тоторға һәләтле ирҙәр һәм ҡатындар, егеттәр һәм ҡыҙҙар юл эштәренә йәлеп ителде. Рәшит Мөхәммәтов менән Латип Вахитов йөрөткән ике ГАЗ-51 йөк автомобиле лә юлдар һалыуҙы ҡатнашты. Аҙна, ай, йыл һайын социалистик ярышта еңеүселәргә премиялар тапшыра торғайнылар. Иртә менән эшкә сыҡҡан халыҡ төнгә тиклем эштән бушамай. Бер кем дә зарланмай, сөнки юлдар халыҡтың үҙенә кәрәк. Киске аштан һуң йәштәр күңелле уйындар ойоштора. Эште ҡарарға ҡайһы саҡ иҫке «Москвич»ка йәки кырандасҡа егелгән атта район Советы башҡарма комитеты рәйесе Нур Фәтҡиев та килеп сыҡҡыланы.

Юлдар төҙөүҙә Мырҙағол Хөсәйенов, бер туған Рәйес һәм Рифат Хәкимовтар, Фәрзәнә Хәкимова, Салауат Мәхмүтов, Заһира Хөсәйеновалар тырышып эшләй. Ирҙәр йөктө ҡул менән тейәй, ҡатын-ҡыҙ бушата. Шул йылдарҙа табылдылар Иҫке Ҡалҡаш – Ҡыуғанаҡбаш юлын һалыуҙа ҡатнаша. Ҡыуышта йәшәп, ит, икмәк, йомортҡа, һөт кеүек аҙыҡты һәр кем өйөнән үҙе менән йөрөтә.

Икенсе йылына Ҡарағош – Стәрлебаш юлы һалына, артабан Стәрлебаш – Тәтер-Арыҫлан, Стәрлебаш – Федоровка, Ҡараяр – Нордовка ауылдары араһында шоссе бәйләнеш барлыҡҡа килә. Тракторҙа Шәһиҙулла Хөсәйенов менән Абдрахман Байғужиндар эшләй. Табылдынан Баҡый ауылына табан юл һалыуҙа Ҡыуғанаҡбаш ауылы кешеләре ҡатнаша, улар Табылдыла ҡуна ятып эшләй. Ауылда медицина пункты асылғас, эшкә Ҡарағош ауылы ҡыҙы Дилара Аҡсурина ебәрелә. Әйткәндәй, был вазифала башлыса ситтән килгән белгестәр эшләне, мәҫәлән, Салауаттан мәрйә Евгения, татар ҡыҙҙары Земфира, Миәкәнән Зөлфиә һ.б.

Шәкәр сөгөлдөрө үҫтереү менән табылдылар 1959 йылда шөғөлләнә башлай. Яңы культура Күндрәк ауылына илткән юлда бойҙай сәскесе менән сәселеп, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарға 30-ар сутый бүлеп бирелә. Бригадир булып Фәйзрахман Байғужин, агроном булып Фәйруша Хужин эшләй. Бер йылда 8 – 10 ҡатын бер звено булып эшләп ҡарайҙар, ләкин, берәү тырышып эшләгәндә, икенсеһе ялҡаулана тип, был алымдан баш тарталар.

Сөгөлдөрҙө йыйғанда алдан трактор һөрөп бара. Уларҙа Фәтҡулла Вахитов менән Бәҙғәт Байғужин эшләй. Ҡул менән йыйып алған сөгөлдөрҙө бысаҡ менән таҙартып, өйөмдәргә өйөләр. Машинаға тейәү ҙә – ҡул менән. Өлөшөн яҡшы тәрбиәләгән кешеләрҙең уңышы бер машина тирәһе йыйыла. Алдынғы сөгөлдөр үҫтереүсе тип түбәндәге ҡатын-ҡыҙҙар табыла: Ғәфүрә Исмәғилева, Хөршиҙә Исмәғилева, Мәрйәм Байғужина, Фатима Яхина, Гөлйыһан Дауытова. Йылдар үтеү менән йән башына беркетелгән майҙандар 1 – 3 гектарға тиклем арта, плантацияларҙы тәрбиәләүгә техника йәлеп ителә. Мырҙағол Хөсәйенов шәкәр сөгөлдөрө үҫтереү оҫтаһына әүерелеп, «БАССР-ҙың атҡаҙанған механизаторы» исеменә лайыҡ була.

70-се йылдарҙа колхозсылар хәлләнеп, ауылда ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған өйҙәр күренә башлай. Беренселәрҙән булып уларҙы Ғәфүрә Исмәғилева, Рифат Хәкимов, Үзбәк Баһауетдинов, Әнүәр Изекәев, Тимерхан Арҫыланғолов, Тимерхан Дауытов, Ғәли Ҡарабаев һ.б. күтәрә.

1978 йылда КПСС-тың Стәрлебаш район комитетының беренсе секретары Барый Арыҫланғоловтың башланғысы менән Табылды ауылы базаһында мал аҙығы етештереү буйынса хужалыҡ-ара предприятие ойошторолоп, ул «Правда» колхозынан бүленеп сыға. Предприятиеның директоры итеп тәжрибәле етәксе, 60-сы йылдарҙа «Маяҡ» колхозына бик уңышлы идара иткән Вәғиз Мөхәмәтшин тәғәйенләнә. Уның тырышлығы менән ауылда ҙур машина-трактор мастерскойы, ашхана, иген келәттәре төҙөлә, мәҙәниәт йорто барлыҡҡа килә, йәштәр ҙә тыуған төйәгендә донъя көтөргә ҡала башлай. Был йылдарҙы боронғо Табылды ауылының икенсе һулышы тип атарға ла мөмкиндер. Ләкин был изге башланғыстың ғүмере ҡыҫҡа булып сыҡты. 1985 йылда башланған үҙгәртеп ҡороуҙар ҡойононда Барый Кинйәбулат улы вазифаһынан алынып, ул урынға Ғәлинур Мөләков (тыумышы менән Ауырғазы районынан, шунда икенсе секретарь булып эшләне – **М.Х.**) килеү менән, Табылды ауылы «Стәрлебаш» совхозының (үҙәге – Күндрәк ауылы) бер бүлексәһенә әүерелеп, унда тормош тағы ла һүнә башлай.

90-сы йылдарҙа башланған сәйәси-иҡтисади процестар арҡаһында илдә ҡырағай капитализм урынлашып, коллектив хужалыҡ системаһы юҡҡа сыҡҡас, Табылдыла эш урындары ҡалманы. Ауылда эшһеҙлек проблемаһы балаларҙың бик аҙ тыуыуына килтереп, мөһабәт мәғариф бинаһы – мәктәп хәҙер йылдан-йыл бушай. Дәүләт башлыҡтарының аныҡ ауыл хужалығы сәйәсәте алып бармауы арҡаһында киләсәктә ауылдарҙы ни көтөүен күҙаллау ҙа ауыр.

Әлбиттә, үрҙә теркәлгәндәр Юрматы ҡәбиләһенең пайтәхете Табылды тарихының меңдән бер өлөшө генәлер. Ауыл йылъяҙмаһын тулыраҡ күҙ алдына баҫтыра алмау иң элек тәү сығанаҡтарға көслө ҡытлыҡҡа бәйле. Сөнки беҙ Ватан тарихын башлыса ғәрәп, фарсы, Ҡытай һәм Византия яҙмаларына таянып тергеҙергә күнеккәнбеҙ. Ә бит күрше күҙе менән күҙәтелеп, уның бер яҡлы фекер йөрөтөүенә нигеҙләнгән тарих объектив була алмай. Тимәк, башҡорт тарихын башҡорттар үҙҙәре яҙырға бурыслы. Был – бер.

Икенсенән, киң масштаблы колонизация шарттарында бер ҡәүем дә иреклеүҫә, мәҙәниәтен үҫтерә, тулы йөкмәткеле милләт булып өлгөрә алмай. Тарихтан мәғлүм булыуынса, Сыңғыҙ хан яуы, Алтын Урҙа емереклектәрендә яңы империя ҡора алған урыҫ дәүләтселеге башҡорттарҙы ошондай мөмкинлектән файҙалана алыуҙан мәхрүм иткән. Был – инҡар итеп булмаған әсе хәҡиҡәт.

Әгәр ҙә XVI быуатта Тәтегәс бей Мәскәү менән Ҡазанға йөрөп, ерҙәрен урыҫтарға таратмаһа, 1917 йылда бер юлы ике инҡилаб булмаһа, Табылды ауылы халҡы үҙенең милли ихтыяждарына яуап биргән тормошта йәшәп ятыр ине. Ләкин тарих теләк һөйкәлешендә үҫешмәй, беҙ барыбыҙ ҙа Хоҙай Тәғәлә хөкөмөндә йөрөйбөҙ. Кем белә, бәлки, уның ҡөҙрәте менән башҡорттарҙа бер мәл пассионарлыҡ тойғоһо көсәйеп китеп, ул да күтәрелер.

**Авторҙан:** *Мәғлүмәттәр туплауҙа оло ярҙам күрһәткән ауылдаштарым Тәлғәт Исмәғилевҡа, Ғәфүрә апай Исмәғилеваға, Рәшит ағай Мөхәммәтовҡа, Әнүәр ағай Яхинға рәхмәт белдерәм.*

**Мәхмүт ХУЖИН.**

## Үкенерлек түгел

*Ниңә бергә булмағанбыҙ, тиһең,*
*Күп йылдарға һуңлағанбыҙ, тиһең...*
*Берһен-берһе тапҡан икән беҙҙең күңел,*
*Тимәк, ғүмер үкенерлек түгел,*
*Беҙҙең ғүмер үкенерлек түгел.*

*Нисә йылдар ағып киткән, тиһең,*
*Һинһеҙ үтә сихри төндәр, тиһең...*
*Йылдар аша табышҡан бит беҙҙең күңел,*
*Тимәк, ғүмер үкенерлек түгел,*
*Беҙҙең ғүмер үкенерлек түгел.*

*Сыуалғандар тормошептәребеҙ,*
*Яҙмыш ҡушҡас, төрлө яҡтабыҙ беҙ...*
*Һуң булһа ла табышҡан бит беҙҙең күңел,*
*Тимәк, ғүмер үкенерлек түгел,*
*Беҙҙең ғүмер үкенерлек түгел.*

*Бары һинең хаҡта минең уйҙар,*
*Саҡрым аша һулышыңды тоям.*
*Һуңғы һөйөү хисе менән тулған күңел,*
*Тимәк, ғүмер үкенерлек түгел,*
*Беҙҙең ғүмер үкенерлек түгел.*

## Этюд

*Киске ҡояш алһыу төҫтәр менән*
*Офоҡ һыҙып ҡуйған тау өҫтөнә.*
*Йылға буйын барлап йөрөй томан,*
*Элә һалып шәлен тал өҫтөнә.*

*Ел дә тымған. Йоҡлап ята ерҙә,*
*Ул арыған уйнап гөлдәр менән.*
*Шишмә уға бишек йыры йырлай*
*Үҙе генә белгән көйҙәр менән.*

*Аяҡ остарына баҫып, ҡайын*
*Һөйләй низер, һуҙып күккә ҡулын.*
*Йырын буйлап ҡараңғылыҡ аға,*
*Эҙләй-эҙләй кисә үткән юлын.*

## *Яңғыҙлыҡтан ҡасып*

*Сарт-сорт килә, илай, үрһәләнә,*
*Түҙмәй болот ауыр йөгөнә.*
*Сап-соп килеп, шаян малай кеүек,*
*Ялан аяҡ ямғыр йүгерә.*

*Китәйемме уның артынан мин?*
*Ҡасып булыр, бәлки, яҙмыштан...*
*Яңғыҙлыҡҡа тағы бер моң өҫтәп,*
*Көнө лә бит кискә ауышҡан...*

*Донъя мәшәкәтен иңгә һалып,*
*Ҡайғыларҙы ҡыуып ел менән,*
*Яңғыҙлыҡтан ҡасып, арып-талып,*
*Күләүеккә баҫып мин киләм.*

## *Тамсы*

*Тамсы, тамып, ташты тишә, тиҙәр,*
*Теләй икән, күккә ул оса.*
*Ямғыр булып үкһеп илай ҙа бер,*
*Томан булып яланды ҡоса.*

*Болот булып күкте гиҙеп сыға,*
*Ҡайта ергә кире һыу булып.*
*Йылға булып ерҙән ағыла ла*
*Оса күккә тағы быу булып.*

*Яҙмыш нисек ергә ташламаһын –*
*Күккә үрләй, ятмай ул түҙеп.*
*Ябай тамсы, ләкин, баҡһаң әгәр,*
*Ғәжәп көскә эйә бит үҙе!*

## *Уйланыу*

*Йылға буйында йөрөнөм,*
*Уҫҡа йыйҙым һыуҙарын.*
*Ағып бөттө устағы һыу,*
*Табып бармаҡ буйҙарын.*

*Бер уйлаһаң, беҙ ҙә бер саҡ*
*Үлгәс ергә ятырбыҙ.*
*Ерҙе, Әсә, ти бит халыҡ–,*
*Ҡуйынына ҡайтырбыҙ.*

*Йылға буйҙарында уйнап,*
*Усыма алдым ҡомдо.*
*Һибелде лә төштө ул ҡом,*
*Ҡоро ҡалдырып ҡулды.*

*Беҙ ҙә йәшәйбеҙ хисләнеп,*
*Борсолабыҙ, янабыҙ,*
*Бер уйлаһаң, беҙ ҙә шулай*
*Үлгәс ҡомға ҡалабыҙ.*

**Флера ШӘРИПОВА.**

## Йөрәгемдә

*Ниңәлер минең күңелем –*
*Яраланған ҡош кеүек.*
*Тышта әҫе йәй булһа ла,*
*Туңа, ғүйә, ҡыш кеүек.*

*Ғүмер үтә... Теләгәнсә*
*Булманы кеүек йәшәп:*
*Күктәге йәйғорҙай балҡып,*
*Йәшендәр кеүек йәшнәп.*

*Ғүмерҙәр үтә икән шул,*
*Аҡмай йылғалар кире.*
*Аҡмаһа ла һыуҙар кире,*
*Хәтирәләрем тере.*

*Булғанына шөкөр итәм,*
*Артығын һорамайым.*
*Кисергән шатлыҡтарымды*
*Йөрәгемдә һаҡлайым.*

## Бәхет ул үҙебеҙҙә

*Кешеләргә ҡарайым мин*
*Һәр саҡ ышаныс менән.*
*Килер көнөм тыныс булһын,*
*Үтһен ҡыуаныс менән.*

*Бәхет бит ул күп осраҡта*
*Тора тик үҙебеҙҙән.*
*Китмәһен ине йылмайыу*
*Шатлыҡлы йөҙөбөҙҙән.*

*Күңеле саф булған кеше*
*Ауырлыҡҡа бирешмәй.*
*Зарланмайыҡ был донъяға –*
*Моң-зар түгеү килешмәй.*

## Ләйсән ямғыр

*Ҡарҙар ирей, ҡояш көлә,*
*Яҙҙар килә еремә.*
*Шаулап-гөрләп боҙҙар китә,*
*Ҡоштар ҡайта илемә.*

*Зәңгәр күктең шатлығынан*
*Күҙ йәштәре тамалыр.*
*Юҡ, күҙ йәше түгел, ергә*
*Ләйсән ямғыр яуалыр.*

**Мөнирә МӘҮЛЕТБАЕВА.**



**Мар. СӘЛИМ**

# ЗАМАНА МӘСӘЛДӘРЕ

## *Шыма шамбы*

*Нисәмә йылдар буйына*
*талғын ғына*
*ағып ята*
*Оло Йылға.*
*Тулҡындарын ҡағып ярға,*
*бөтә уйы —*
*барыу алға.*
*Һыу өҫтөндә*
*донъя тыныс,*
*аҫылынып тормай ҡылыс.*
*Әммә ләкин һыу аҫтында*
*бүтән тормош:*
*алыш, тартыш,*
*ыҙғыш, һуғыш...*
*Һыу аҫтындағы донъяға,*
*билдәле, Суртан хужа.*
*Суртан хужа булған һыуҙа*
*йәшәүҙәре мөмкинме*
*һуң күрмәй нужа?!*
*Ваҡ балыҡтар,*

---

*Мар. Сәлим (1949) «Тәгәрмәсле сана», «Эшем эйәһе», «Шәп кеше», «Бергәләп көләйек», «Мәңгелек мөхәббәт» һ.б. егермеләп китап, ике томлыҡ сатирик һәм юмористик әҫәрҙәр авторы. Сергей Михалков исемендәге халыҡ-ара премия лауреаты.*

*нужа һурпаһын һемереп*
*туйҙы тамам.*
*Тик улар өндәшмәйенсә,*
*хужаға һүҙ әйтмәйенсә,*
*түҙҙе һаман,*
*Һәр кемгә лә мәғлүм:*
*балыҡ —*
*сыҙам халыҡ.*
*Ләкин түҙемлектең дә бит*
*сиге була.*
*Йылға төбөндә*
*ахырҙа ҡупты бола.*
*Шул саҡ аҫтан күтәрелеп*
*өҫкә сыҡты*
*Шыма Шамбы.*
*Үҙ иштәрен йыйып алды*
*һәм эшлекле ҡиәфәттә*
*хәбәр һалды:*
*– Эй, иптәштәр,*
*дуҫ-иштәр!*
*Күрәһегеҙ, хәрт эштәр.*
*Һыуыбыҙҙың тәме китте,*
*тормоштоң йәме бөттө.*
*Күпме түҙергә мөмкин?*
*Етте!*
*Ҡарт Суртандың теше юҡ,*
*йүнле-башлы эше юҡ.*
*Ни һүҙе лә ни үҙе!*
*Һепертһен йәһәт эҙен!*
*Ә беҙ, өмөтлө йәштәр,*
*фекерҙәш-көрәштәштәр,*
*фирҡә ойошторайыҡ.*
*Ҡарт Сурғанды*
*ҡайҙа булһа*
*шунда олаҡтырайыҡ.*
*– Үткер фекер! –*
*тип Шамбыны ҡеүәтләне*
*әшнәләре.*
*– Яуыз Суртан*
*юлыбыҙҙы кәртәләне.*
*Уны алып ташлайыҡ.*
*Демократик дәрт менән*
*ҡыйыу көрәш башлайыҡ!*

Яңырыш лозунгыларын
һыу аҫты граждандары
бер күңелдән хупланы.
Яңы фирҡә етәксеһе
Шыма Шамбы әфәндене
күпереп үҫте даны.
Ул үҙенең фирҡәһенә
эре балыҡтарҙы ғына
һайлап алды.
Ваҡ балыҡтар
элеккесә
фирҡәһеҙ булып ҡалды.
Һыу аҫты батшалығында
хужа урынын биләргә
самалаған фирҡәләләр
бөтә мәкерле эштәрен
үҙҙәренсә көйләнеләр.
Сәйәси ҡотҡо таратып,
улар нотоҡ һөйләнеләр:
— Суртандың йомшаҡлығынан
файҙаланып,
кескәй башлы ташбаштар
аҫтыртын эш
ойоштороп яталар,
ҡомға моронадарын төртөп,
йылғаны болғаталар.
Тора-бара был шамбылар
тамам аҙа башланылар
һәм фирҡәһеҙ ташбаштарға
шундай ғәйеп ташланылар:
— Ҡарт Суртандың
тешһеҙлеге арҡаһында,
самаһыҙ күп үрсене
ваҡ балыҡ бында.
Йылғабыҙҙың бөтөнләй ҙә бөтә йәме,
һыуы кәмегәндән-кәмей.
Шамбылар, бик теләһә лә,
эштәре һис китмәне
алға табан ҡуҙғалып.
Сөнки бөтә ҡылғандары
тел сарлауҙан уҙманы.
Ә бер мәлде...
Үәт әкәмәт!..

*Был ни гәжәп?!.*
*Нисәмә йыл гөрләп аҡҡан*
*Оло Йылға,*
*иҫке юлын үҙгәртеп,*
*китеп барҙы*
*бүтән юлға.*
*Барса балыҡ —*
*ташбаштары менән бергә*
*Ҡарт Суртан да —*
*тороп ҡалды ҡамауҙа,*
*һәләкәтле ауҙа.*
*Тик бер Шыма Шамбы ғына*
*(күрегеҙ инде бына!)*
*тура килтереп яйын,*
*сит күлгә сығып тайҙы.*

## Кемде башлыҡ итергә?

*Көндәрҙән бер көндө шулай*
*көтөүҙә малдар тулай...*
*Көтөү йыйылышын асып,*
*мөнбәргә Ҡарт һарыҡ менгән.*
*– Ағай-эне!*
*Хәлдәребеҙ бик хөрт, — тигән. —*
*Күреп тораһығыҙ,*
*беҙҙә тәртип бөттө.*
*Ҡайҙа барып бәрелергә белмәйбеҙ,*
*көнө-төнө эшләйбеҙ,*
*аслы-туҡлы йәшәйбеҙ.*
*Ситтән ебәрелгән башлыҡ —*
*булманы беҙгә шатлыҡ.*
*Башлыҡ түгел —*
*быҙау ул.*
*Бөтә эште боҙа ул!*
*Һүҙҙе һуҙмай оҙонға,*
*отставка — Быҙауға!*
*Һарыҡтар дыу килгәндәр:*
*– Дөрөҫ! Дөрөҫ!!! – тигәндәр*
*– Бөтәһенә лә ғәйепле*
*башлыҡ ҡына!*
*– Уны ҡыуыу*
*беҙҙең өсөн шатлыҡ ҡына!*
*Йәш бәрәстәр,*
*хайран ҡалып,*
*баш ҡағып ултырғандар.*

*Ә тәкәләр,*
*ғәйрәтләнеп,*
*теге мөгөҙһөҙ Быҙауҙы*
*һөҙөргә тотонғандар.*
*Быҙау ни ул быҙау инде –*
*йыуаш булған,*
*Һөҙһәләр ҙә,*
*типһәләр ҙә,*
*һуҡһалар ҙа,*
*һүкһәләр ҙә –*
*сыҙап торған.*
*«Ә» лә, «мә» лә тимәгән.*
*Тиер ине,*
*эш рәте белмәгән.*
*Йығылғанды туҡмағандар,*
*төйгәндәр –*
*бөтә сүпте*
*уға ғына өйгәндәр.*
*– М... М... М... –*
*тип тотлоға торғас,*
*Быҙау*
*бөтөнләй телдән яҙған.*
*Йыйылыш һаман ҡыҙған.*
*Һарыҡтар аҡырышҡан,*
*бәрәстәр баҡырышҡан.*
*Ә тәкәләр һөҙөшкән —*
*бер-береһен өҙөшкән...*
*Был мәхшәрҙе ситтән ҡарап торған*
*Төлкө,*
*ниһайәт, баш ҡалҡытҡан —*
*ялҡынлы телмәр тотҡан:*
*– Мине яҡшы беләһегеҙ, дуҫтарым.*
*Әйтәм һеҙгә бары намыҫ ҡушҡанын.*
*Бер ҡасан да ҡыйшайтманым*
*мин ғәҙеллек бизмәнен.*
*Заман талап итһә генә,*
*кәрәк яҡҡа үҙгәрҙем,*
*Һәр саҡ һеҙҙең мәнфәғәтте яҡланым.*
*Шулай изге бурысымды аҡланым! –*
*Хәйләкәр йән,*
*ҡойроҡҡайын болғай-болғай,*
*оҫта алдай.*
*– Йәгеҙ, хәҙер әйтегеҙ:*
*кемде башлыҡ итергә*
*мөмкин беҙҙең көтөүгә?*

*Һарыҡтар уйға ҡалған.*
*Береһе һөрән һалған:*
*– Кәрәк беҙгә*
*үҙебеҙҙе аңлаған,*
*һүҙебеҙҙе тыңлаған,*
*бер ҡайҙа ла булмаған*
*бик шәп башлыҡ –*
*йөҙөк ҡашлыҡ!*
*Шул саҡ Төлкө –*
*бына көлкө! –*
*һарыҡтарға оҡшатып,*
*бәәлдәп үк ебәргән:*
*– Бә-эргә, бә-эргә, иптәштәр,*
*алға, алға, дуҫ-иштәр,*
*барайыҡ, көрәштәштәр!..*

***

*Ошо урында*
*бәғзе берәү,*
*бәлки, бирер шундай баһа:*
*«Был әкиәт*
*хәкиҡәткә тартым даһа!»*
*Эйе, тартым,*
*була инде шулай булғас.*
*Унда минең ни ғәйебем?*
*Ысынбарлыҡ*
*әкиәткә оҡшап торғас...*

## Үрләтелгән серәкәй

*Бейек тауҙар араһында*
*тормош иркен.*
*Бөтә ҡоштарға ла ирек.*
*Сикһеҙ ирек!*
*Йәшәмәйҙәр бер кемдән дә*
*ҡурҡып, өркөп.*
*Сөнки һаҡлай*
*ҡоштар иркен*
*ҡаяла торған Бөркөт.*
*Хөрриәт бында.*
*Азатлыҡ!*
*Оса белгән һәр кемгә лә*
*оло шатлыҡ.*
*Бәғзеләре сырҡылдаша*
*менеп бейек,*

*ҡая-таштарҙың өҫтөнә*
*баҫып, бейеп.*
*Осоноп-осоноп ҡоштар оса,*
*ҡанат ҡағып,*
*күкте ҡоса.*
*Һәммәһе лә фәҡәт өҫкә,*
*бейеклеккә елкенә.*
*Ҡайһыларының артынан*
*һыҙғырып ҡала ел генә.*
*Һәр кем менергә тырыша*
*бейеккә, юғарыға...*
*Хәйер, һис тә аптырайһы*
*түгел быға –*
*ҡош тауышы*
*көслө сыға,*
*яңғыраһа әгәр күктә.*
*Был хәҡиҡәт*
*билдәле бит инде күптән.*
*Ләкин ҡоштарҙың осҡаны,*
*уларҙың күкте ҡосҡаны*
*тау аҫтында көн күреүсе*
*Серәкәйгә оҡшаманы.*
*Ҡыҙарынды-бүртенде ул,*
*нимә эшләргә белмәне;*
*баш осонда ҡанат ҡаҡҡан*
*ҡоштарға көнләшеп ҡарап,*
*безелдәне:*
*– Без-з... без-з...*
*Беҙ ҙә ҡоштар затынан!*
*Минең дә ҡанатым бар!*
*Ләкин мине күрмәйҙәр –*
*үрләтмәйҙәр.*
*Сөнки минең телем насар,*
*йомшаҡ тәнле бисаралар*
*ҡурҡып ҡасар.*
*Бигерәк гәҙелмен үҙем –*
*тешем үткән теләһә кемгә*
*сәпәйем тәнҡит һүҙен.*
*Минең морон шундай үткер,*
*хатта бик ҡалын тиреле*
*кешеләргә лә үтер!*
*Хужаларға баш эймәйем,*
*түрәләрҙе һис һөймәйем,*

*маҡтап, күккә сөймәйем.*
*Шуға күрә улар мине күрә алмайҙар,*
*үҙҙәренең араһына үткәрмәйҙәр –*
*күтәрмәйҙәр.*
*Ә бит миндәй ҡыйыуҙар*
*үтә лә кәрәк хәҙер.*
*Бейеклектә бөйөк эштәр*
*башҡарырға мин әҙер!*
*Заманса безелдәй белгән Серәкәйҙең*
*шалтырауыҡ һүҙҙәренә*
*ҡоштар ҡолаҡ һалдылар*
*һәм уны үҙҙәренең*
*ҡанат аҫтына алдылар.*
*Йылы ергә оялаған Серәкәй –*
*яман ҡомһоҙ нәмәкәй –*
*юҡ, ҡәнәғәт булманы,*
*һис бер данға туйманы.*
*Оҙон танауы менән*
*бейек ҡаяға күрһәтеп,*
*өҙмәне лә ҡуйманы:*
*– Ана, минең урын ҡайҙа!*
*Мине шунда үрләтһәгеҙ,*
*барсағыҙға булыр файҙа.*
*Серәкәйҙең ҡан эсеп безелдәүенән*
*ҡоштар тамам туйҙылар,*
*Һәм ахырҙа,*
*ҡая башына мендереп,*
*Бөркөт менән уны*
*йәнәш ҡуйҙылар.*
*Әммә безелдәүҙән башҡа*
*эш белмәгән Серәкәй*
*унда оҙаҡ торманы.*
*Ел иҫкәнгә*
*тайып китте лә аяғы,*
*ярылды ҡан тулы ҡорһағы...*

***

*Нимә әйтәйем һуң тағы?!*
*Һорау ғына ҡуям бары:*
*Аңлайҙармы икән ҡалған серәкәйҙәр –*
*күҙгә кереп барған һөмһөҙ нәмәкәйҙәр –*
*уларҙы бына нилектән*
*үрләтмәйҙәр?*



Леонид
СОКОЛОВ

## ЮМОРЕСКАЛАР

### Балыҡсылар

Тәбиғәттең иҫ киткес матур мәле, йәмле май иртәһе. Икенсе синыф уҡыусыһы Вовка Перепелкин күл буйында балыҡ тотоп ултыра. Бында ул яңғыҙы түгел, был урынды, йәшенә, вазифаһына, һөнәренә, эш хаҡының күләменә ҡарамай, бик күптәр үҙ иткәйне.

Әммә тап икенсе синыф уҡыусыһы эләккән балығының күләме һәм сифаты буйынса бөгөн барыһының да танауына сиртә. Хатта оҫта балыҡсы тигән даны сыҡҡан Матвей бабай ҙа артта тороп ҡалды. Әлбиттә, Вовка был ваҡытта мәктәптә, шул уҡ тәбиғәт күренештәрен һүрәтләгән  картиналар менән биҙәлгән синыф бүлмәһендә, парта артында ултырып, көндәлеген лайыҡлы билдәләр менән тулыландырһа, яҡшыраҡ булыр ине. Әммә факттар тап киреһен һөйләй шул. Уның ныҡ ҡына туҙған көндәлегендә «икеле», хатта «берле» билдәләре осраштырғылай. Нишләптер, балыҡҡа күберәк йөрөгән һайын, «икеле»ләр һаны ла арта бит әле.

Ҡалҡыуысынан күҙ алмай ултырған Вовка эргәһенә ниндәйҙер машина килеп туҡтағанын күрмәй ҙә ҡалды. Ҡеүәтле сит ил машинаһынан өрөп тултырылғандай түңәрәк йөҙлө, һимеҙ ҡорһаҡлы ағай төштө лә: «Эләгәме?» –  тип ҡыҙыҡһынды.

– Әҙерәк бар, – тине  Вовка, ҡояш нурҙарында көмөштәй балҡыған, күлдән алтындай ялтырап киткән ҙур ғына ҡорбан балығын тартып сығарған ыңғайға.

*Леонид Соколов (1953) Өфө ҡалаһында тыуған. БДУ-ның филология факультетын тамамлай, республика матбуғат сараларында эшләй. БР һәм РФ Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

Ошо һүҙҙәрҙе көтөп кенә торған тиерһең – һимеҙ абзыҡай ҡармағын алып, Перепелкин эргәһенә туҡталырға булды. Айырма шунда ғына: Вовка серек түмгәк өҫтөндә ултырһа, «текә ағай» өрөп тултырмалы креслоһына менеп ҡунаҡланы. Тик нишләптер япон ҡармағы, немец ебе, ҡыйбатлы Калифорния селәүҙәре лә Вовканың эргәләге ҡыуаҡлыҡтан ҡырҡып алынған ҡармағы менән ярыша алманы. Һимеҙ әҙәм Вовканың эргәһендә генә ултыра, ҡармағына селәү ҙә, ҡуңыҙ ҙа, бәләкәй балыҡтар ҙа элэктереп ҡарай – барыһы ла бушҡа ғына. Ҡорбан патриот булып сыҡты: сит ил алдаҡыстарына иҫе лә китмәне. Шуға күрә эләккән балыҡтар һаны буйынса Вовка дәғүәсеһен шаҡ ҡатырғыс иҫәпкә ҡыйрата. Бер ни ҡыла алмаған абзыҡайҙың былай ҙа туптай йөҙө тағы ла шешмәкләнә төштө, ул күҙ алдында шартлар йәки һауа шары кеүек осоп китер кеүек. Тик бер ҙә шартламаны ла, осоп та китмәне, креслоһын Воваға яҡыныраҡ шылдырыуын ғына белде. Аптырағас, малай ситкәрәк барып ултырҙы.

Тик яңы урында ла бер нәмә лә үҙгәрмәне. Ҡорбандар һаман Вовканың ҡармағына ғына эләгә торҙо, хатта йүнле селәүҙәре ҡалмауына ла иғтибар итеп торманылар.

«Текә» сығырынан сыҡты, кеҫә телефонын ҡолағына терәп ҡысҡырына башланы: «Бер нәмә лә ҡапмай, йүнле селәү табып килтерегеҙ. Ҡайҙанмы? Айҙан!»

Ярты сәғәт тә үтмәне, ап-аҡ лимузин ҡиммәтле селәүҙәрҙе күл буйына килтереп еткерҙе. Әммә булмағас булмай икән – балыҡ һаман сиртмәне. Бер аҙҙан телефондан сираттағы әмер яңғыраны:

– Ҡармаҡ ебе өҙөлдө. Нәҙегерәген килтерегеҙ, бәләкәйерәк ҡармаҡты ла онотмағыҙ. Йәһәтерәк ҡыбырлағыҙ!

Аҡ лимузин был юлы ла оҙаҡ көттөрмәне, һуңынан да унын водителенә йә ҡамыр, йә сиңерткә, тағы бихисап әйберҙәр килтерер өсөн ҡала менән ошо күл араһын күп тапҡырҙар таҡырайтырға тура килде.

Бәхет булмаһа булмай икән. Өрөп тултырылған абзый, Вовканың ҡармағы туҡтауһыҙ сиртеүенә йәне көйөп, малайға яҡыныраҡ шыуа бирҙе. Береһе ҡыҫырыҡлай, икенсеһе ситкәрәк шыла торғас, улар әкренләп күлде урап сығып, иң тәүҙә ҡунаҡлаған урынға килеп терәлделәр.

Ниһайәт, дәғүәсенең түҙемлеге бөттө. Ул яғымлы ғына итеп бер нисә селәү һатыуын һораны.

– Аҡсағыҙ кәрәкмәй, – тине Вовка һәм селәүле банкаһын күршеһенә һуҙҙы. – Беҙҙең баҡсала уны биҙрәләп йыйырға була, ҡармаҡты ла алығыҙ, минең өйҙә тағы берәү бар.

– Алмашайыҡ. Мә һиңә ысын япон ҡармағы! – тип йомартланып китте абзый.

– Ю-юҡ, минеке, исмаһам, ысын ҡармаҡ. Ҡайһылай еңел, тотоп ҡарағыҙ әле. Беҙҙәге балыҡ японса аңламай ул…

Малай, һимеҙ дәғүәсеһенә еңеүле ҡараш ташлап, һуҡмаҡ буйлап атланы.

## Инша

Минең мөғжизәле һәм онотолмаçлыҡ мәктәп йылдары торғонлоҡ тип аталған онотолмаçлыҡ осорға тура килде. Мөғжизәле булдымы икән ул? Булғандыр, тим, сөнки мөғжизәләр аҙым һайын ине: колбаса һатып алырға теләүселәрҙең оҙон сираттары, иçерек халыҡтың һыу ҡушып шыйыҡлатылған һыра менән һатыу иткән киоскыны штурмлауы, ғәзиз партияның оҙайлы ҡул сабыуҙары менән иçтә ҡалған пленумдары.

Мөғжизәле һәм онотолмаçлыҡ был йылдарҙы нимәгә хәтерләйем һуң? Сөнки тап шул ваҡытта мин сығарылыш синыфының тынсыу бүлмәһендә инша темаһын һайлай алмай баш вата инем. Ниһайәт, түбәндәге темаға туҡталдым: «Кемдән өлгө алырға һәм кемгә тиңләшергә теләйһең?»

Ысынлап та, кемгә, тиһегеҙме? Бәлки, тереләрҙән-тере Ленин олатайғалыр? Юҡ, дөрөç уйламайһығыҙ. Ә, бәлки, үҙ атаһын да йәлләмәгән үтә намыçлы Павлик Морозовҡалыр? Юҡ, юҡ. Хатта Иван Сусанинға ла түгел. Ҡәҙерле Леонид Ильич тап уның юлын лайыҡлы дауам итә ине бит. Клара Цеткин менән Роза Люксембургҡа ла оҡшағы килмәне.

Ошондай бай тарихлы мираçтан мин әҙәби геройҙы һайланым. Ул имән бүкән кеүек ябай, ҡарағай кеүек таҙа, йүкәләй йомшаҡ һәм бамбуктай һомғол ине. Шулай итеп иншаға герой табылды. Ул – Буратино!

Яҙмам ошолайыраҡ башланып китте.

«Бала саҡта яратҡан уйынсығым бар ине. Мин көндөҙ ҙә, төндә лә унан айырылмай торғайным. Ағастан эшләнгән ябай ғына был уйынсыҡ – «Буратино мажаралары» тип аталған китап һәм фильм аша таныш геройым. Был бәләкәй кешекәй менән шул тиклем ныҡ дуçлаштым – унан бер минутҡа ла айырылғы килмәне. Буратино һымаҡ, Карабас Барабасты күрә алманым, Мальвинаны яраттым, ябай түмәрҙе сәнғәт әçәренә әүерелдергән Папа Карлоны хөрмәт иттем…

Ысынлап та, кем һуң ул Буратино? Һөйләшә белгән бер түмәр киçәге инде шунда. Ундайҙар беҙҙең арала аҙмы ни? Тик түмәрҙең ниндәйлеген урмансылар ғына түгел, барыһы ла белә, ә Буратиноның һәр һүҙе – аҡыллы фекер. Әлбиттә, Папа Карло уны яһаған мәлдә малайын ниндәй ҡатмарлы яҙмышҡа дусар итеүе хаҡында уйламағандыр ҙа. Әкиәттә барыһын да асыҡ итеп һөйләп булмай. Мин, юлдар араһынан уҡырға өйрәнеп, төп геройға нисек ауырға тура

килеүен күҙ алдыма килтерәм. Эттәр менән бесәйҙәр йыш ҡына унын янында артҡы аяҡтарын күтәргеләгәндер, шуға ла Буратиноға әсе аммиак еҫе һеңгәндер. Тумыртҡалар үтәнән-үтә тишкеләп бөткәндер. Янғын хәүефһеҙлеге хеҙмәткәрҙәре, Буратиноны янғындан һаҡлағыс иҙелмә менән буяһын йәки унын өсөн махсус янғын һүндергес һатып алһын өсөн, Папа Карлоның ҡолаҡ итен туҡтауһыҙ сәйнәгәндәрҙер. Меҫкен ҡарт көн дә тигәндәй янғын һүндереүселәрҙән штраф, төрлө күрһәтмәләр алғандыр. Бер мәл тегеләр ишегенә пломба ҡуйып, бикләп тә киткәндәрҙер. Был бюрократтарҙан тамам арыған Папа Карло эсеүҙән күҙе тонған бер мәлдә Буратиноны мейескә лә быраҡтырған. Унын, ут тоҡанған килеш мейестән килеп сыҡҡан ыңғайға, өйҙәрен яндыра яҙған. Шул мәлдә ҡапыл айныған Папа Карло көс-хәл менән өйөн дә, Буратиноны ла һүндереп өлгөргән. Күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн уны хатта "Янғында күрһәткән батырлығы өсөн" миҙалы менән бүләкләргә лә ҡарар иткәндәр, имеш.

Әлбиттә, былар бит – әкиәт, ысын әкиәттә был турала бер нәмә лә юҡ, тиерһегеҙ. Улайһа, үрҙә яҙылғандарҙы янғын һүндереүселәргә уҡытып ҡарағыҙ: Буратино менән Папа Карлоның әллә ниндәй проблемалары булыр әле.

Беҙҙең геройҙың минустары булһа ла, ыңғай яҡтары күберәк. Хыялымда, мәҫәлән, шундай картина тыуа ине. Бер мәл Буратино бик һуңға ҡалып ҡайтып килә. Иҫерек Карлоның хырылдауы ишетелгән бүлмәгә һанаулы ғына аҙымдар ҡалған мәлдә, уға хулигандар ташлана. Тик улар кемгә осрарын алдан белмәгән шул. Аяҡ-ҡулдары имгәнгән, байтаҡ тештәре ҡойолған, биттәре күгәргән. Ә Буратиноның бер ере лә сыйылмаған!

Унын үҙ дуҫтарын яҡлап нисек алышҡанын хәтерләгеҙ. Сыбар тауыҡ өсөн һуғышҡан әтәс, бер биҙрә бәрәңге өсөн бур менән сәкәләшкән пенсионер, һөйгәне өсөн дошманын дөмбәҫләгән гусар кеүек. Ә мөхәббәте өсөн нисек көрәшкән! Әтәскә ултырып ярышыу, Мальвинаның һоҡланыу тулы ҡарашы, тәүге хәрефтәрҙе өйрәнеү, театрҙағы карьераһы… Ә Буратино тәңкәләр менән нишләгән? Уларҙы банкыға илткән йәки матрас аҫтына һалғанмы? Юҡ! Ағас һумдарҙы түгел, алтын тәңкәләрҙе ергә күмеп ҡуйған.

Оҙон танауын бөтә ергә тыға ла йөрөй, тигән дәғүә белдереүҙәре мөмкин. Ә ул танауы менән төртмәһә, ул йәшәгән бүлмәнең сере асылмаҫ, иҫерек Карло иһә эргәһендә шундай тос мәҙәни мираҫ булғанын белмәй үлеп китер ине.

Шулай яраткан геройымдың аҡылы, батырлығы, сослоғо тураһында бик күп миҫалдар килтерә алыр инем. Ағас тип әйтеп ҡара һин уны! Ағас түгел ул, ә алтын, Рәсәйҙә йәшәп тә иҫән-һау ҡалыу буйынса күргәҙмә әсбап. Буратино – интернациональ образ. Уға тере сағында уҡ ағастан түгел, бронзанан ҙур һәйкәл ҡуйырға, ә статуэткаһын һәр йортҡа таратырға ине!»

Бына ошондай инша яҙылды. Әммә ижади эҙләнеүҙәремә ҡуйылған баһа – һимеҙ «икеле» булды. Миңә аттестат бирмәнеләр. Уның урынына «Фәлән Фәләнов иптәш төгән мәктәптең ун синыфын уҡыны» тигән белешмә тоттороп сығарҙылар.

Был ҡағыҙҙың ҡиммәте һуҡыр тиндән дә осһоҙораҡ ине. Гүйә, ГАИ күргән водитель йәки ҡәйнәһен күреп ҡалған кейәү тиерһең: ҡайҙа ғына барһам да, минән ҡасып, йәшенеп ҡалырға тырышалар. Нисек кенә булмаһын, үҙ идеалыма тоғро ҡалдым, ҡасандыр бер мәл сәғәтем һуҡмаһа, минутым булһа ла һуғыр, тип ышандым.

Тик бик күп ваҡыт үтте шул. Тормош юлында уҫал Карабас Барабастар ҙа, мәкерле Төлкө Алиса ла, һөмһөҙ Бесәй Базилио ла осрап торҙо. Мөғжизәләр яланы ла тап булды. Ә күңелем изгелекле Папа Карло һәм кумирым Буратино менән осрашыуға өмөтләнде. Ҡулға эләккән һәр бер эшкә тотоноп, тәүлегенә егерме бишәр сәғәт тир түктем, үҙемдең алтын аҫкысымды эҙләнем! Буратино һымаҡ, мине батырҙылар, әммә йөҙөп сыҡтым, яндырҙылар, тик ут алманы, тоторға маташтылар, ә мин ҡасып ҡотолдом. Талисманым – кескәй кешекәйем Буратино һәр саҡ янымда булды.

Ауырлыҡтар артта ҡалды. Хыялдарымдың барыһы ла тормошҡа ашты инде. Үҙ мәктәбем, хатта үҙемдең ҡурсаҡ театрым бар. Мин бәхетле, хатта Буратино кеүек иҫәрҙәр иләндә йәшәүем менән дә бәхетлемен. Тимәк, әкиәт ысынбарлыҡҡа әүерелде!

## Гараждан сәләм

Ирегеҙ гаражға барырға йыйындымы – бөттө! Хәләл ефетегеҙ унда машинаның бер гайкаһын бормаһа ла, дуҫтары, әшнәләре, гараж тирәһендә уралған әҙәмдәр менән һөйләшер һүҙҙәре табыла шул. Был әңгәмәләр ҡайһы саҡта күк йөҙөнә йондоҙҙар теҙелеп баҫҡансы йәки үрҙә аталғандарҙан берәүһе хәҡиҡәт хаҡына ирегеҙҙең йөҙөн биҙәгәнсе дауам итә. Әлбиттә, «йөҙ биҙәү» – һуңғы сара, әммә булғылай торған күренеш. Ҡайһы берҙә гаражда башланған әңгәмә иртәнгә тиклем дауам итеүе мөмкин.

– Гаражда нишләнең?– тигән һорау тыуа ул саҡта.

– Машина аҫтында яттым, – тип ихлас яуап бирә ир.

Был һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк бар, ул, ысынлап та, машина аҫтында ятты, сөнки аяғында баҫып торор хәлдә түгел ине.

Машина һатып алыу менән ир хәләл ҡатындыҡы ғына булыуҙан туҡтай. Ул ҡәҙерле, күреп туйғыһыҙ, көйһөҙ, ялтырап торған машинаһы менән йышыраҡ осрашыр өсөн һылтау эҙләй. Тап гаражда ир үҙен ирекле, үҙ аллы, кәрәкле, бәхетле итеп тоя. Гаражда ғына теләһә ҡайһы темаға һөйләшеп була. Бензинға хаҡтарҙың артыуы, ниндәйҙер ҙур түрәнең эштән алыныуы, Америкалағы негрҙарҙың хәле йәки Африкалағы американдарҙың тормошо – береһе лә ҡалмай.

Нисек итеп «Москвич»тан «Жигули», «Жигули»ҙан «Мерседес», ә «Мерседес»тан «Москвич» яһау хаҡында кәңәштәрҙе лә тап гаражда ишетергә мөмкин. Ошо гаражда ғына һеҙ ҡатындан хәүефһеҙ йыраҡлыҡта була алаһығыҙ. Үҙ ҡабырсағы эсендә рәхәтләнеп ятҡан гөбөргәйелме ни! Уны ла ояһынан сығарыу күп көс һәм хәйлә талап итәлә бит.

Гараж – ул ирҙәр йәмғиәте, һәм унда ҡатын-ҡыҙҙың пәйҙә булыуы һәр саҡ талаш-тартыш менән бәйле. Бында һәр көтөлмәгән ҡунаҡҡа ҡыуаналар, ул араҡы тотоп килһә – айырыуса. Гаражда һәр ваҡыт һуңғы гайка, һуңғы асҡыс, һуңғы тамсы бензин йәки зәм-зәм һыуы менән бүлешәсәктәр. Һеҙ ҙә мотлаҡ рәүештә шулай итәсәкһегеҙ.

Әгәр ирегеҙ өйгә ҡайтырға ҡабаланмай икән, сәбәптәрен төптән эҙләп ҡарағыҙ! Әрләшергә ашыҡмағыҙ, машинаны яратыуына ла көнләшмәгеҙ. Ирегеҙ гараждан ҡасан да булһа барыбер һеҙҙең янға ҡайта бит!

## Тутыйғош

Йәшелсә-емеш базаһы директоры В. Н. Колымагинға 60 йәш тулды. Тормош артыҡ ойпаламаған юбилярҙы базаның үҙендә лә, унан ситтә лә шартына килтереп ҡотланылар. Дворник Птенцовтан алып билдәле сауҙа эшмәкәрҙәренә тиклем аҙна буйы геүләнеләр. Һуңынан базаны ватылған һауыт-һабанан, сүп-сарҙан таҙартыу буйынса экологик өмә лә ойоштоიролдо. Юбилейҙа бушатылған шешәләр генә «КамАЗ» кузовына тулырлыҡ йыйылды.

Хужаны үҙ йортона барып ҡотлау юбилей тантаналарының аҙаҡҡы аккорды тип планлаштырылғайны, ә унда саҡырылыу хоҡуғына иң-иң яҡындар һәм лайыҡлылар ғына эйә булды.

Билдәләнгән сәғәттә ҡунаҡтар Колымагиндың ҡиммәтле мебель, гәлсәр һауыттар, сағыу балаҫтар, – ҡыҫҡаһы, директор өсөн иң кәрәкле нәмәләр менән шыпа тулы фатирына керә башланы. Ҡыҙыл бауҙар менән арҡырыға ла, буйға ла бәйләнгән ҙур һәм бәләкәй ҡумталар башта бер бүлмәне тултырҙы, унан һуң, һыймайынса, икенсеһенә өйөлдө. Фатирҙа сәскә гөлләмәләренән тәмле еҫтәр аңҡый. Юбилярҙың үҙенән дә ҡиммәтле импорт хушбуй еҫе килә, ҡайһы бер ҡунаҡтарҙың был ауыр еҫкә аллергиялары башланып, туҡтауһыҙ сөскөрөргә керештеләр.

Урынбаҫар Клячкинды ла берҙәм сөскөрөү менән ҡаршыланылар. Ул ҡулына ҡыҙыл сепрәк менән ҡапланған ҙур ғына әйбер тотҡайны. Бына ул цирк артисына хас хәрәкәт менән сепрәкте күтәрҙе, һәм өйҙәгеләр алтын ялатылған ситлекте, уның эсендә ҡуҡырайып ултырған тутыйғошто күрҙе. Тутыйғош ҙур кәүҙәле, һуғышсан ҡиәфәтле, имеш.

Шеф урынбаҫарынан барыһын да көтә ала ине, әммә был бүләк уның һушын алды. Тутыйғош бит – уның әкиәттәгеләй тойолған бала

сағынан һуҙылып килгән хыялы. Ә Клячкин, аҡыллы урынбаҫар булараҡ, ошо хыялды ысынбарлыҡ итте.

Юбиляр яңы уйынсыҡ күргән балалай балҡып китте, ауыҙ эсенән ниндәйҙер көй мөңрәп алды, Клячкиндың арҡаһынан ҡаҡты ла ситлекте сервант өҫтөнә, сәскәләр араһына, ултыртты. Колымагин тутыйғошҡа үҙ тештәре менән сәтләүек ярып бирҙе һәм гәлсәр вазаға ананас һуты ҡойҙо. Тутыйғош яйлап ҡыҙа барған табынды күҙәтеп шым ғына ултырыуын белде. Коньяк, шампан менән туҡтауһыҙ градус өҫтәгән ҡунаҡтар ихлас тостар әйтте, күңелле музыкаға албырғап, бейергә төшөргә ашҡынды.

Табын тамам ҡыҙғас, быға саҡлы шым ултырған тутыйғош һүҙ алды:

– Васька дүр-рәк!

Әйтте лә тынды. Башҡа ваҡытта был һүҙҙәргә бер кем дә иғтибар итмәҫ ине. Әммә бөгөн түгел. Сөнки юбилярҙың да исеме Васька, дөрөҫөрәге, Василий Николаевич. Ишеттеләр, тик барыһы ла бер ни булмағандай ҡыланды. Музыка тағы ла көсәйҙе, аяҡ аҫтындағы паркет ныҕыраҡ шығырҙаны.

Тик тәрбиәһеҙ ҡош бер аҙҙан тағы телгә килде:

– Васька дүр-рәк!

Был юлы ҡолаҡ тондорғос музыка ла ярҙам итмәне. Юбилярҙың йөҙө ҡыҙыл кирбес төҫөнә инде, урынбаҫарҙыҡы иһә силикат кирбестәй ағарынды.

– Дүрәк, тиһең инде? –тип ҡабынып китте Колымагин, уҫал ҡараштары менән урынбаҫарҙы сит ил стенкаһына ҡуша ҡағырҙай булып.

– Мин улай тип әйтмәнем, – тип меҫкен хәлдә генә бытылданы уныһы.

– Һин, бәлки, әйтмәгәнһеңдер, әммә һинең өсөн бынау нәмә бик асыҡ әйтте! – Колымагин баш бармағы менән ситлеккә төрттө. – Беләһең килһә, ул ишеткәнен ҡабатлай! – Хужа тамам сығырынан сыҡты: – Клячкин, һинең менән иртәгә иҫәпләшербеҙ. Ә был пингвинды…

Юбиляр алпан-толпан баҫып ситлек янына килде лә осондағы ҡулсаһынан тотоп һелкетә башланы. Үҙен штормға эләккән караптағылай тойған тутыйғош та бирешмәне:

– Васька дүр-рәк! – тип ныҡышыуын белде.

– Дүрәкте күрһәтәм мин һиңә хәҙер! Дүрәктән ишетәм! Хәҙер бына икенсе төрлөрәк һайрарһың!

Колымагин барып тәҙрәне асты ла ситлекте тәҙрә төбөнә ҡуйҙы.

– Давай, тай бынан!

Ҡуҙғалмай ғына ултырған тутыйғош был мәлдә йомортҡа баҫҡан тауыҡты хәтерләтә ине. Абау, бәләкәй генә йәшел күҙҙәре уҫал ҡарай. Зиннәтле ситлектән һалҡын ҡыш хөкөм һөргән урамға бер ҙә осоп сыҡҡыһы килмәй, буғай.

Хужа тутыйғошто линейка менән төрткөләй башланы.

– Кемгә әйтәм, тай бынан!

Тутыйғош һуңғы тапҡыр үҙ башына еткән ике һүҙҙе тырышлыҡ менән әйтте лә ҡанаттарын елпене. Йыраҡ китмәне шулай ҙа, иң яҡындағы ағасҡа барып ултырҙы ла дөрөҫлөктө һөйләүен дауам итте.

Урамдан үтеп барыусылар иһә әллә ҡайҙан пәйҙә булған ҡоштоң күҙ алдында шыҡырайып туңып, боҙ киҫәгенә әүерелеүен тамаша ҡылып торҙо.

## Робот Петя

Коридорҙа мисҡә тәгәрәтәләрме ни! Шунан бүлмәгә түрәбеҙ инде: барыбыҙға ла урындарҙа булырға ҡушты, яңы хеҙмәткәр менән таныштырасағын әйтте. Бер аҙҙан геүелдәгән тауыш көсәйә барып, бүлмәгә робот килеп керҙе. Башында төрлө төҫтәге лампочкалар яна. Буйға оҙон түгел, бөхтә генә галстук таҡҡан, килешле һоро костюм кейеп алған.

Беҙ таҫырайып уға текәлдек. Кеше булһа, былдай ҡараштарҙан ҡыҙарып бүртенер ине, ә быньң лампочкалары нығыраҡ яна ла көслөрәк геүелдәй бирә.

Хужабыҙ уны арттан этәрә, буш мисҡә тауышын сығартып арҡаһына һуға, «Үтегеҙ, ишек төбөндә тормағыҙ» тип беҙгә һамаҡлай.

– Таныш булығыҙ, Робот Петя – яңы хеҙмәткәребеҙ!

Беҙ ҙә алмашлап үҙебеҙ менән таныштырабыҙ. Сират технолог Надежда Федоровнаға еткәс, Робот уға кеселекле итеп ҡулын һуҙҙы:

– Танышыуыма бик шатмын!

«Ысын джентльмен бит был», – тип ҡыуанып уйлап ҡуйҙы ҡатын.

Былдай осраҡтарҙа әйтелә торған «Тартынмағыҙ, үҙегеҙҙе өйөгөҙҙәге кеүек хис итегеҙ» тигән теләктәрҙән һуң, Робот конструктор булараҡ эш башланы.

Ихлас ҡабул итһәк тә, яңы хеҙмәткәргә урын ишек төбөнән тура килде. Бында ултырған кеше, ғәҙәттә, үтәнән-үтәгә ел өрөп тороу арҡаһында, бер аҙна тигәндә сәсрәп ауырып китә торғайны. Әммә Роботтың быға бер ҙә иҫе китмәне, буғай.

Петр эшкә ғәжәп тиҙ өйрәнде. Беҙҙең ғилми-тикшеренеү институты барлыҡҡа килгәндән алып коллектив күпме рациональ тәҡдим индерһә, Робот шул тиклемде бер айҙа индерҙе. Етәкселеккә уны етди һөйләшеүгә саҡыртып алырға тура килде, сөнки беҙҙең учреждениеға өс айға бер тәҡдим баштан ашҡайны.

Робот әкренләп бүлектең бөтә эшен үҙенең тимер елкәһенә һалды, быға үпкәләп йөрөүсе лә булманы шикелле. Петр менән ярышырлыҡ түгел ине шул. Ул бер ниндәй ялһыҙ, сәйһеҙ, мәйһеҙ, тәмәкеһеҙ тәүлектәр буйы эшләй ала. Ә бер көндө ауырып киткән Надежда Федоровна янына сәскә һәм тәмле емештәр тотоп барып, күңеле таш булмауын иҫбатланы.

Петр йәмәғәт эштәрендә лә ихлас ҡатнашты. Бер саҡ уны тимер юлды ҡарҙан таҙартырға ебәргәйнеләр. Шунда бер аҙнаға юғалып

торҙо. Башҡаларҙан байтаҡҡа алға киткән дә юғалған. Аҙна үткәс саҡ таптылар. Баҡһаң, тимер юлы буйлап ҡар таҙартып тик йөрөгән. Йәшелсә-емеш базаһында ла уға етеүсе булманы. Снаряд кеүек нәмәләр һыҙғырып оса тиһегеҙме? Беҙҙең Робот Петя кәбеҫтә бушатты бит.

Артыҡ көсәнеүҙән булһа кәрәк, ҡайһы берҙә Робот ныҡ ҡына геүләй башлай. Бындай саҡтарҙа хәстәрлекле Надежда Федоровна уның эргәһенә ултыра: «Бер аҙ ял итер инегеҙ, бәлки, сәй эсерһегеҙ». Петр һыйҙан әҙәпле генә баш тарта, әммә бынан һуң шымыраҡ геүелдәй. Улар ныҡлап дуҫлашып китте. Надежда Федоровна Петрҙы тәмле бәлештәр менән һыйлай, салбары менән костюмын үтекләп, күлдәген йыуып бирә. Быға са ир-атты өнәп етмәгән ҡатынға Роботтың эшсәнлеге, сәғәттәр буйы тәмәке көйрәтеп йөрөмәүе, спиртлы эсемлектәргә битараф булыуы оҡшай.

Бер саҡ уларҙы ҡала паркында күреп ҡалдылар. Робот – яңы костюм-тройка, ҡатын киске матур күлдәк кейгәйне. Роботтың музыка һәм һынлы сәнғәт, әҙәбиәт һәм техника буйынса белмәгән нәмәһе юҡ икән. Надежда Федоровна һымаҡ, ул да шиғриәт менән ҡыҙыҡһына һәм хатта үҙе лә шиғырҙар яҙа, имеш! Ҡатын Петрға һоҡланыуын бер ҙә йәшермәй ине.

Әлбиттә, был хәл көнсөл күҙҙәргә лә салынды. Аноним хаттар, ғәйбәт һүҙҙәр үҙенекен эшләне – уларҙы коллективтағы йыйылышта тикшереүгә ҡуйҙылар.

Ошо ауыр минутта ла улар бергә ине.

– Бәлки, мөхәббәт утында яналарҙыр? – тип мыҫҡыллы ыржайҙы берәү.

Надежда Федоровна һуңғы көсөн йыйып, талпынған яралы ҡош ише урынынан торҙо. Уның әҫәрләнеп киткән етди йөҙөнә ҡарап, барыһы ла тынды. Ул, коллегаларының күҙҙәренә тура текләп, телгә килде:

– Эйе, мин уны ныҡ хөрмәт итәм, хатта яратам да. Сикһеҙ аҡыллы, намыҫлы, тәрбиәле, кешелекле, эйе, тап кешелекле булғаны өсөн яратам. Һеҙ быны аңлай алмайһығыҙ, һеҙгә бары тик ғәйбәт һөйләргә лә тел сарларға булһын… Һөйләгеҙ әйҙә. Ә беҙ бер-беребеҙҙе яратабыҙ. Мөхәббәтебеҙҙе барыһы ла күрһен!

Надежда Федоровна барыһының күҙ алдында Роботты ҡосаҡланы ла маңлайынан үпте. Ә уныһының лампочкалары тоҡанды, нимәлер әйтергә теләне, буғай. Әммә әйтә алманы, геүелдәй башланы, ҡапыл осҡондар сәсрәне, төтәп китте…

Уны ҡотҡара алманылар…

**Руссанан Марат ӘМИНЕВ тәржемәләре.**

### Журналистар семинары үтте

Өфөлә журналистар өсөн “Һөнәри союзды нығытыу: Рәсәй һәм Европа тәжрибәһе” тигән ике көнлөк семинар үтте. Унда ҡатнашыу өсөн Рәсәй Журналистар союзы секретарҙары Надежда Ажгихина, Лариса Шамикова, Леонид Речицкий һәм Хорватия Журналистар профсоюзының генераль секретары Маринка Болковач-Беркович килде.

“Ирәмәл” ҡунаҡханаһының матбуғат конференциялары залында Башҡортостан Журналистар союзы рәйесе Артур Дәүләтбәков етәкселегендә Союз вәкилдәре, республикалағы киң мәғлүмәт саралары етәкселәре һәм хеҙмәткәрҙәре йыйылды.

Башҡортостан Республикаһының Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығында журналдарҙың баш мөхәррирҙәре саҡырылып, бөгөнгө матбуғат, журналистар алдында торған проблемалар буйынса шулай уҡ семинар үткәрелде.

### Иң яҡшы китапханасы

Төбәктәрҙә VII «Башҡортостандың иң яҡшы китапханасыһы» республика конкурсының зона туры бара. Унда 54 китапхана ҡатнаша. Еңеүселәр республика конкурсында көс һынау хоҡуғын аласаҡ. Бәйге шарттары буйынса китапхана хеҙмәткәрҙәре китапты киң йәмәғәтселеккә тәҡдим итеү буйынса инновацион проект әҙерләргә тейеш, унда партнерҙар – йәмәғәт ойошмалары, мәктәптәр һәм бала баҡсалары ҡатнашһа, тағы ла яҡшыраҡ була.

Конкурста өс номинация билдәләнгән. Улар — «Мәңгелек китаптар» (яҙыусылар һәм шағирҙар ижады буйынса мәҡәләләр, әсбаптар, китаптар тәҡдим итеү); «Уҡыған ил уңыр» (халыҡ менән эшләү формаларына бәйле проекттар тәҡдим итеү); «Барыһы ла уҡый» (китапханаларҙың популярлығын арттырыуға булышлыҡ иткән идеялар менән бүлешеү).

Башҡортостандың иң яҡшы китапханасылары исемдәре ноябрь аҙағында билдәләнә.

### Халыҡ-ара фестиваль

Өфөлә М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында, Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты булышлығында, II Халыҡ-ара телдәр фестивале үтәсәк.

Беренсе тапҡыр уҙғарылған бындай сара былтыр Башҡорт дәүләт университеты нигеҙендә күренекле башҡорт телсеһе, билдәле яҙыусы Жәлил Кейекбаевтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналғайны.

### Күргәҙмә асылды

Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының орган залы фойеһында рәссамдар Йәлил Сөләймәнов менән Әмир Мәжитовтың «Атайсал – ата-бабаларыбыҙ төйәге» тип исемләнгән берлектәге күргәҙмәһе асылды. Экспозицияла 41 картина урын алған. Күргәҙмә быға тиклем илдең тиҫтәләрсә төбәгендә, шул иҫәптән Мәскәү һәм Санкт-Петербургта ла күрһәтелгән.

**Кино төнө**

«Башҡортостан» киностудияһы, «Родина» кинотеатры, Башҡортостан Кинематографистар союзы барыһын да Рәсәй киноһы көнө айҡанлы 27 август сәғәт киске ундан таңғы алтыға тиклем башҡорт киноһы төнөнә саҡырҙы. «Ун өсөнсө раунд», «Ел аулаусы», «Минең йондоҙом» тулы метражлы фильмдары, «Карауат», «Еңмеш» фильмдары, анимация һәм музыкаль клиптар менән бер рәттән, «Кәләш алам!» исемле өр-яңы ҡыҫка метражлы фильмының, тәүләп тамашасылар хөкөмөнә сығарылып, исем туйы үтте. Башҡорт киноһы һөйөүселәрен «Бүреләр» рок-төркөмө, Сәғиҙулла Байегет, МС Баш, Анжелика, Айҙар Хәмзин, Гөлнур Ҡарабулатова һәм дә Шәһит Хамматов тәбрикләне.

**Хәтер кисәһе**

23 августа күренекле башҡорт яҙыусыһы Әхиәр Хәкимгә 83 йәш тулыр ине. Оло әҙипте хәтерләү кисәһе уның тыуған төйәгендә, Дәүләкән ҡалаһындағы күркәм йорт-музейында, уҙғарылды. Яҡташтары тарафынан ихлас ихтирам, ижадына тәрән һөйөү менән әҙерләнгән был сарала Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе Риф Тойғонов етәкселегендә бер төркөм әҙиптәр ҡатнашты. Әхиәр Хәкимдең замандаштары Йыһат Солтанов, Фәниә Чанышевалар иҫтәлектәре менән уртаҡлашты, ғалимдар Тимерғәле Килмөхәмәтов, Рәиф Әмиров яҙыусының ижадына ҡыҫҡаса байҡау яһаны. Осрашыуҙа шулай уҡ яҙыусылар Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Ринат Камал, Әхмәҙин Әфтәх, Фәрзәнә Аҡбулатова, Марис Нәзиров, Салауат Әбүзәр һәм башҡалар ҡатнашты. Өфөнән килгән ҡунаҡтарҙың һәм район хакимиәте вәкилдәренең, музей хеҙмәткәрҙәренең сығыштары урындағы әҙәбиәт һөйөүселәр менән фекер алышыуға үрелеп барҙы, шиғырҙар уҡылды, хәтирәләр тағатылды.

Рәсәй кимәлендә билдәле прозаигыбыҙ Әхиәр Хәкимде иҫкә алған һәр кем уның бер ғүмер эсендә атҡарып өлгөргән хеҙмәттәренә һоҡланыуын йәшермәне: фронтта ла ҡатнашҡан, педагогия училищеһын тамамлағандан һуң уҡытыусы булып та эшләгән, артабан – Мәскәү дәүләт университетының филология факультеты, аспирантура. Ижади мираҫынан «Ҡуштирәк», «Һауыр ҡумта» романдарын атап китеү ҙә етә – тап ошо әҫәрҙәре өсөн ул Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды. Ҡәләмдәштәре һәм яҡташтары Әхиәр Хәкимдең «Ағиҙел» журналы, шулай уҡ байтаҡ йылдар «Литературная газета» редакцияларында бүлек мөдире вазифаһында эшләүен ғорурланып телгә алды.

**Ҡотлайбыҙ!**

Әҙәбиәт, тарих, сәнғәт буйынса популяр китаптар авторы, Калугала йәшәүсе яҡташыбыҙ Салауат Әсфәтуллинға 60 йәше уңайынан «Калуга өлкәһенең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» тигән маҡтаулы исем бирелде. «Ағиҙел» уҡыусылары исеменән ҡәләмдәште ихлас күңелдән тәбрикләйбеҙ!